*Әкрәм Бейеш*

**Башҡорт халҡының тарихы**

**һәм азатлыҡ көрәше**

Өфө

“Китап”

1993

ББК 84 Баш

Б 31

Баҫманың спонсоры – “Башҡортостан киностудияһы”

Автор редакцияһында нәшер ителде

**Бейеш Әкрәм**

Б 31 Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше. Очерк. Өфө: Башҡортостан "Китап" нәшриәте, 1993. – 352 бит.

Был китап халҡыбыҙҙың тарихын, унығ бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәшен тулы һәм дөрөҫ сағылдырырға ынтылған әһәмиәтле тәүге хеҙмәттәрҙең береһе. Очерктан әҙиптәр, журналистар, ғилми хеҙмәткәрҙәр, студенттар, милли аңыбыҙ үҫеше менән ҡыҙыҡһынған киң ҡатлам уҡыусылар халыҡ тарихы хаҡында бай мәғлүмәт аласаҡ.

ББК 84 Баш

Әкрәм Бейеш, 1993

## ИНЕШ ҺҮҘ

Был эш Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына тапшырып, уны башҡорт халҡының әсе яҙмышы менән таныштырыу ниәтенән 1987 йылда яҙылды. Шунан һуң яңы ваҡиғалар буйынса 1988 йылда бер әҙ өҫтәп эшләнде. Хеҙмәтте яҙған саҡта уны баҫтырып сығарыу уйы һис тә булманы, шуға күрә байтаҡ материал килтерәлһә лә, башҡорт тарихын яңы мәғлүмәттәр менән байытып, төпсөп яҙыу маҡсаты ҡуйылманы. Ләкин хеҙмәттең ҡулъяҙмаһын уҡыған ҡайһы бер кешеләр, хәҙерге заман өсөн бик кәрәкле эш тип, уны баҫтырырға ныҡ кәңәш итте. Уларҙың фекере 1991 йылда “Йәшлек” газетаһы эште баҫҡандан һуң килгән хуплау хаттары тотош дөрөҫләне.

Башҡорт халҡының күп йылдар буйы ҡыҫылып, томаланып килгән аңы уяна башланы. Шул милли аңды туҡландырыр өсөн нисәмә быуатлыҡ тарих юлындағы һәр ваҡиғаны ентекләп яҙған ҡалын-ҡалын хеҙмәттәрҙән бигерәк, быуын-быуын башҡорт яҙмышын бер ыңғайға теҙеп, асып күрһәткән ыҡсым ғына китап ҡиммәт. Күрәһең, ошо йәһәттән был эш кешенең талабына яуап бирә һәм шуға күрә улар уның китап булып сыҡҡанын күрергә теләй.

Әммә ваҡиғалар теҙемен белеү менән генә тарихты белеп булмай. Уны белер өсөн бөтә булған хәл-ваҡиғаға дөрөҫ күҙлектән ҡарап ғәҙел баһа биреү кәрәк. Быныһы уның – иң мөһиме. Ошоғоса беҙ үҙ тарихыбыҙға үҙебеҙсә баһа биреү хоҡуғынан мәхрүм булдыҡ. Элек-электән беҙҙең тарихҡа урыҫ хакимдәре хөкөм сығарған, уларҙың һүҙе өҫтөн булған. Илде ҡан илатҡан залимдар халыҡтың изге азатлыҡ көрәшен “бунт”, “воровство” тип, көрәш башындағы батырҙарҙы “вор” тигән. Шул атама менән улар рәсми тарих фәнендә йөрөгән. Революциянан һуң, бигерәк тә 1945 йылдың 25 ғинуарында “ВКП(б) Үҙәк Комитетының башҡорт партия ойошмаһындағы агитацион-пропагандистик эштең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары хаҡында ҡарары” сыҡҡас, тарих фәненә тотош партия етәкселеге йүнәлеш бирә башланы. Башҡорт тарихын дөрөҫ яҡтыртыу, дөрөҫ баһалау бөттө, тик урыҫ колонизаторҙарын күккә сөйөп маҡтау,

башҡортто көсләү һәм ғәйепләү генә ҡалды. Беҙҙең үҙ тарихсалырыбыҙ, үҙ яҙыусыларыбыҙ ҙа башҡорт тарихын партия башындағы урыҫ шовинистарының талабына яраҡлаштырып яҙырға мәжбүр булды. Инде фекер ҡоллоғонан, аҡыл ҡоллоғонан ҡотолорға ваҡыт. Күренекле башҡорт ғалимы Риза Фәхретдиновтың: “Һәр халыҡ үҙенең тарихын үҙе яҙырға тейеш”, - тигән һүҙе бар. Беҙгә лә үҙ тарихыбыҙҙы үҙебеҙ белгәнсә, үҙебеҙ аңлағанса яҙырға кәрәк. Тәҡдим ителгән был эштә башҡорт тарихына башҡорт күҙлегенән ҡарап дөрөҫ баһа биреү икенсе һәм төп маҡсат итеп ҡуйылды.

Башҡорт халҡының тарихында оялырлыҡ, хурланырлыҡ бер генә нәмә лә юҡ. Беҙҙең аһ-зар, ҡан-йәш менән һуғарылған тарих юлы көмөш кеүек саф. Беҙҙең халыҡ бер ваҡытта ла башҡа халыҡтарҙың ер-һыуына баҫып инеп ҡан ҡоймаған, бала-сағаһын, ҡатын-ҡыҙын ҡан илатмаған. Ул, киреһенсә, үҙе ете быуат ярым ҡанһыҙ баҫҡынсыларҙың йыртҡыслығынан ҡаты ғазап сиккән, йән аямай ғәҙеллек өсөн, азатлыҡ өсөн көрәшкән. Башҡорт халҡының тарихы, нигеҙҙә, ошо ғазап һәм көрәш тарихынан ғибәрәт. Был ғазап һаман бөтмәгән һәм, хәҙер инде нисә тапҡыр, башҡорт һәләкәт алдына килеп баҫҡан. Һәләкәткә төшмәҫ, тамам бөтмәҫ өсөн тағы көрәшергә, тағы ҙур көс һалырға кәрәк. Өмөт йондоҙо әле һүнмәгән. Шул йондоҙҙо ысын ирек ҡояшы итеп ҡабыҙып ебәреү – хәҙерге быуындың мөҡәддәс бурысы.

# I БАШҠОРТТОҢ 1917 ЙЫЛҒА ТИКЛЕМГЕ ТАРИХЫ ҺӘМ КӨРӘШЕ

## 1. БОРОНҒО БАШҠОРТ ИЛЕ. ТАТАР-МОНГОЛ ЯУЫ

Башҡорттоң Көньяҡ Уралға һәм Урал тауҙарының көнбайышы менән көнсығышындағы киң далаларға килеп ултырған ваҡыты тарихсыларға асыҡ ҡына билдәле түгел. Таныҡлы этнограф С.И.Руденконың антропология, археология, тарих, этнография, тел мәғлүмәттәрен дөйөмләштереп фараз рәүешендә әйткән фекеренсә, "иң һуң тигәндә беҙҙең эраға тиклемге VIII быуатта был яҡҡа монгол төҫлө ҡәбиләләр килә башлаған, улар беҙҙең эраға тиклемге VII быуатта уҡ Башҡортостан менән Сулман (Кама) буйы халҡының физик төрөндә иң төп компоненттарҙың береһен тәшкил иткән... Әммә беҙҙең эраға тиклемге I мең йыллыҡтың беренсе быуаттарынан башлап ҡына башҡорттарҙы берҙәм ҡәбиләләр төркөмөнә әйләнгән тип һанарға мөмкин".[1] Һис шикһеҙ, ул дәүерҙә башҡорттар "башҡорт" тигән уртаҡ исемле, уртаҡ телле бер халыҡ булып ойошҡан булған.

Башҡорттар тураһындағы иң ышаныслы тәүге яҙма ҡомартҡылар IX быуатҡа ҡарай. Уларҙы ғәрәп кешеләре ҡалдырған. Мәҫәлән, 842-844 йылдарҙа башҡорт ерҙәрендә йөрөгән Сәләм Тәржемәндең мәғлүмәттәре буйынса, Волганың һул яҡ ярынан башлап 27 көнлөк юл үткәнсе бөтә ерҙә башҡорт ҡәбиләләре йәшәгән, башҡорт далаларын сыҡҡас, уның карауаны һаҫыҡ ҡара ергә аяҡ баҫҡан (күрәһең, был Көнбайыш Себерҙең һаҙмат ере булғандыр, сөнки Сәләм Бөйөк Ҡытай ҡоймаһына табан юл тотҡан). Башҡорт ырыуҙарының береһе бөрйән тураһында ғәрәп сығанаҡтары, "бөрйәндәр иле төнъяҡҡа шул тиклем һуҙыла ки, унда төн оҙонлоғо 4 сәғәткә тиклем ҡыҫҡара; улар һәр ваҡыт румдар,

[1] Руденко С.И. Башкиры. М.-Л., 1955, 351-се бит.

славяндар, хазарҙар, төрөктәр менән һуғыш алып бара", тип хәбәр итә.[2] Башҡорттар тураһында 922 йылда Бағдан хәлифенең Болғар ханлығына ебәргән илселеге менән башҡорт ерендә булып киткән Ибн-Фаҙлан ентеклерәк итеп яҙған.[3] Ибн-Фаҙлан башҡорттарҙан ҡурҡыу сәбәпле яман күреп, бер аҙ насарлап һүрәтләргә тырышһа ла, уларҙың Эмбанан бик күпкә көньяҡтағы Сağан йылғаһына тиклем таралған ҙур көсө хаҡында әйтмәй булдыра алмаған.

Ул дәүерҙә башҡорттарҙың үҙ дәүләте булған. Тарихсылар был дәүләт хаҡында әйтмәҫкә тырыша. Улар башҡорттоң киң даирәләге хәрби һәм политик бәйләнешен күрһәткән мәғлүмәттәрҙе аңлатыр өсөн тотош халыҡты ваҡиғалар ыңғайына күсереп йөрөтә, ләкин уның шул замандағы йәшәгән урынын туранан-тура атап биргән мәғлүмәттәрҙе лә кире ҡаға алмай. Шулай итеп фекер ҡаршылығы килеп сыға. Ҡаршылыҡ булмаһын өсөн мәғлүмәттәргә генә таянырға, ул мәғлүмәттәрҙе үҙең теләгән яҡҡа тартҡыламаҫҡа кәрәк. Мәғлүмәттәр нигеҙендә тик бер генә фекер әйтеп була: шул осорҙа уҡ башҡорттоң үҙ иле булған, шул илендә торған ерҙән ул бөтә-тирә яҡтағы халыҡтарҙың эшенә актив ҡатнашлыҡ иткән. Ә бөтә ҡатнашҡан халыҡтарының дәүләте булғанда ныҡ таралған башҡорт үҙе дәүләтһеҙ булырға мөмкин түгел.

Башҡорт дәүләте Оло Иҙелдән (Волганан) Тубыл йылғаһына, Каспий буйынан Пермь янына тиклем бик ҙур ерҙе биләгән. Уны Болғар ханлығынан айырған төньяҡ-көнбайыш сик Ибн-Фаҙлан яҙмаларында асыҡ күрһәтелгән: Сиремшән йылғаһын аша сыҡҡас, башҡорт ере бөткән.[4] Иңе-буйы менән саҡрымдан артҡан ошо иркен ерҙе башҡорттар, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев әйтмешләй, "Азиянан Европаға туҡтауһыҙ ташҡын кеүек ағылған һәм үткән

---

[2] Булатов А.Б. Восточные средневековые авторы о башкирах. – "Археология и этнография Башкирии", IV. Уфа, 1971, 323-сө бит; Гаркави А.Я. Сказания мусульманских писателей о славянах и русах. СПб., 1870, II, 126-сы бит.

[3] Ковалевский А.П. Книга Ахмеда Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921-922 гг. Харьков, 1956, 130-131-се биттәр.

[4] Ковалевский А.П. Аталған китап, 131-се бит.

ерҙәрендәге бөтә нәмәне емереп юҡҡа сығарған халыҡтарҙан ҡурсалап, һаҡлап торған”.[5]

Башҡорт дәүләтенең башында хан торған.[*] Иҫке сығанаҡтарҙа, риүәйәт һәм боронғолар һүҙенә таянып, М.Өмөтбаев, “башҡорттар хандарҙы һәр саҡ үҙҙәре араһынан һайлағандар, хан тораҡтары нығытылған ҡала йәки торналарҙа (ҡәлғәләрҙә) урынлашҡан, ҡасандыр башҡорттоң етмешләп ҡала һәм тораһы булған, ҡалаларҙа ултыраҡлы халыҡ йәшәгән”, тип яҙа.[6] Шул ҡалаларҙың Ҡараҡыя, Минжан, Мазира, Ҡазира, Башҡорт, Бөрйән тигәндәре XI-XII быуат ғәрәп мәғлүмәттәренән билдәле.[7] Ҡалалар хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе уларҙың ошо көнгә тиклем һаҡланып ҡалған эҙҙәре, “ҡала”, “тора” һүҙҙәре менән яһалған урын-ер атамалары дөрөҫләй. Ҡала һәм торалар ҡурғаныу, йәғни яуҙан һаҡланыу өсөн генә түгел, ә сауҙа һәм мәҙәниәт үҙәге булып хеҙмәт иткән.

Ул заманда күпселек халыҡты тәшкил иткән ауыл кешеләренең төп шөғөлө күсмә малсылыҡ булған булырға тейеш. Әммә малсылыҡ менән бер ҡатарҙан башҡорттар һис шикһеҙ игенселек менән шөғөлләнгән, сөнки төрки ҡәбиләләрҙә малсылар борондан уҡ иген сәскән. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының хужалығында тәбиғи шарттар тәьҫире arҡаһында игенселек өҫтөнлөк иткән. Шунан тыш, башҡорттар тормошонда һунарсылыҡ һәм мәғдәнселек (йәғни төрлө руда һәм аҫыл таш ҡаҙыу) ҙур урын тотҡан, металл эшкәртеү ныҡ үҫкән булған. Башҡорттар араһында баҡыр, көмөш, алтын, тимер, ҡорос, ҡула (бронза) иретеү оҫталары күп булған. Быны Башҡортостан ерендә табылған археологик ҡомартҡылар бик яҡшы күрһәтә. Шул уҡ ҡомартҡылар башҡорттарҙың

---

[5] Өмөтбаев М. Йәдкәр. Өфө, 1984, 196-сы бит.

[*] Ҡайһы бер хандарҙың исеме әле лә билдәле. Мәҫәлән, “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосында Сәмәр хан, “Бабсаҡ менән Күсәк”тә Мәсем хан, шәжәрәләрҙә Тора хан, Күсем хан тураһында әйтелә. М.Өмөтбаев, “бойондороҡһоҙ” һуңғы башҡорт хандарының береһе Аҡташ тауында йәшәгән Ялман бей булған", ти.

[6] Өмөтбаев М. Аталған китап, 195-196, 199-200, 235, 239-240- сы биттәр.

[7] Булатов А.Б. Аталған мәҡәлә, 324-се бит.

Ҡытайҙан Румға (Византияға), Һиндостан* һәм Ғәрәбстандан Төнъяҡ Урал сиктәренә тиклем алыҫ-алыҫ илдәр менән сауҙа иткәне тураһында асыҡ һөйләй.

Мәхмүд Ҡашғариҙың 1073-1074 йылдарҙа тамамланған “Төрки телдәр һүҙлеге” тигән китабында башҡорт теле иң ныҡ билдәле төрки телдәр иҫәбенә индерелгән.

Һуң тигәндә VII быуаттың уртаһында башҡорттар ислам динен ҡабул иткән, ләкин ҡайһы бер башҡорт кешеләре XX быуата уҡ мосолман булған. Ибн-Фаҙлан шул кешеләрҙең береһе тураһында әйтеп киткән.[8] Ислам динен башҡорт араһында Төркөстандағы дини йәмғиәт башлығы Әхмәт Яссауи (1105-1166 йй.) мөридтәре таратҡан. Әхмәт Яссауи башлаған дини ағартыу эше ул үлгәс тә дауам иткән. Дини ағартыусыларҙың байтағы үҙ бурысын башҡарып йөрөгәндә Башҡортостан ерендә үлеп ҡалған. Элек бында уларҙың кәшәнәләре күп булған. Һаҡланғандарының береһе – Хөсәйенбәк кәшәнәһе (XIV б.).

Ислам динен ҡабул иткәндән һуң башҡорттар мосолман илдәренә сауҙа йомошо менән генә түгел, дин йомошо менән дә йөрөй башлаған. Ул мосолман илдәре менән төрлө мәҙәни бәйләнеш булдырған, дини ағартыусылар тарафынан асылған үҙ мәҙрәсәләрен тамамлағас, шул илдәргә уҡыу, белем арттырыу өсөн барған. Шул уҡ осорҙа башҡорттар Урта Азияның мәҙәни тормошона ҡатнашып киткән, унда йөрөгән “төрки” телде әҙәби яҙма тел рәүешендә ҡабул иткән* һәм ошо региондың әҙәби процессында ҡайнай башлаған. Был эшкә дини ағартыусылар ҙа булышлыҡ иткән, сөнки улар үҙҙәре Урта Азия төрөктәренән сыҡҡан һәм әҙәбиәт менән яҡын мөнәсәбәттә торған. Әхмәт Яссауи ҙа саф төрки телдә яҙған билдәле шағир булған.

---

* Ҡыҙыҡ өсөн башҡорттоң иң боронғо эпосы “Урал батыр”ҙағы “Томбойоҡтар япрайып тик ағастай сәскә атҡан” тигән һүҙҙәрҙе алайыҡ. “Тик” ағасы – Һиндостанда үҫә торған эре аҡ сәскәле ағас. Тимәк, башҡорттар шул боронғо заманда уҡ Һиндостанға барып йөрөгән, “тик” ағасын күреп белгән.

[8] Ковалевский А.П. Аталған китап, 130-сы бит.

* Башҡорт теле, төрки телдәргә ҡараһа ла, халыҡтың төрки донъянан бик иртә айырылыуы сәбәпле шул саҡта уҡ ҙур үҙенсәлектәргә эйә булған. Был хаҡта М.Ҡашғари һүҙлегендә әйтелә.

XIII быуат баштарында Башҡортостан Болғар ханлығы менән союзда торған. 1223 йылда улар татар-монголдарҙың еңелмәҫ сиреүен (ғәскәрен) сигенеп ҡасырға мәжбүр иткән. Көнбайышҡа йүнәлгән тәүге яуында Сыңғыҙ хандың был берҙән-бер еңелеүе булған.

Татар-монгол сиреүҙәре Жуси олоҫоноң бөтә булған көсө менән 1229, 1230, 1232 йылдарҙа Башҡортостанға бер-бер артлы һөжүм яһаған, ләкин һәр ваҡыт башҡорттарҙың ҡаты ҡаршылығына осраған. Тик монголдың дәүләт тәхетенә ултырған Үгәҙәй ҡаан бойороғо менән “төнъяҡ илдәрҙе” баҫып алыу өсөн берләштерелгән оло сиреү ебәреп кенә татар-монгол илбаҫарҙары Башҡортостан еренә үтеп инә алған. 1236 йылдың көҙөндә башҡорттар менән болғарҙар татар-монголға ҡаршы ҡырҡ төмәнлек (бер төмәндә – ун мең кеше) сиреү сығарып ҡуйған.[**] Татарҙар был бәрелештә хәрби хәйлә ҡулланыу арҡаһында ғына еңеүгә өлгәшкән: “Батый менән Буралдай төнөн йылға (Яйыҡ) аша сығып, һуғышҡа ташланған... Буралдай бөтә сиреүе менән бер юлы һөжүм иткән. Улар башҡорт батшаһы Киләр сатырына йомолоп, ҡылыс менән бауҙарын сапҡылап өҙгән. Сатыр ҡолағас, уларҙың (башҡорттарҙың) сиреүе ҡаушап ҡаса башлаған.[9]

1237 йылдың йәйенән 1240 йылдың аҙағына тиклем Батый хан яуы Дәшти ҡыпсаҡты (Ҡыпсаҡ далаһын), алан, ас, марҙыуа илдәрен тар-мар иткән, рус кенәзлектәрен бөтәһен дә тиерлек буйһондорған, Киевты алған. 1241йылдың яҙында улар һунған (венгр) короленең, поляк-немец кенәздәренең сиреүҙәренең аяҡ аҫтында ҡалған.

---

[**] Был сиреүҙә болғарҙар өлөшө ҙур булмаған булырға тейеш, сөнки, беренсенән, ике яҡ ҡаршы осрашҡан Яйыҡ йылғаһы Болғар сигенән алыҫ булған; икенсенән, болғарҙарҙың биләгән ере бәләкәй булған, шуға күрә һан яғынан да уларҙың күп булыуы мөмкин түгел; өсөнсөнән, улар, нигеҙҙә, игенселек һәм сауҙа менән шөғөлләнгән, тимәк бик үк яусыл халыҡ булмаған. Рустарҙың Лаврентий йылъяҙмаһындағы 1229 йылға ҡараған бүлектә: “… сторожеве болгарскыи ирибогоша, бьена от татар близ реки, ей же имя Яик”, - тиелгән (Полн. собр. русск. летописей, 1897). Күрәһең, 1236 йылда ла союздаш Башҡорт сиреүендә болғарҙарҙың бағауылдары (сторожевые) ғына булған. 1229 йылда, татарҙар үҙҙәре еңелгән саҡта, туҡмалып ҡасыуҙары болғарҙарҙың яусыл булмағанын раҫлай. Тимәк, дүрт йөҙ меңлек сиреүҙең төп өлөшө яусыл, һәр мәлдә ҡорал тотоп дәррәү ҡалҡырға һәләтле башҡорт яугирҙәренән торған. Ошонан сығып, башҡорт халҡының һаны ике миллиондан да кәм булмаған тип фараз итергә мөмкин, сөнки тарихсылар әйтеүенсә, ул заманда башҡорт һымаҡ халыҡтарҙа һәр биш кешенең береһе яугир булған. Башҡорттоң татар яуына тиклемге һаны тураһында ошоға оҡшаш фекер электән әйтелә килә.

[9] Рашид-ад-дин. Сборник летописей, т. 2. М.-Л., 1960, 37-се бит.

Башҡорт халҡы илбаҫарҙарға ҡаршы һуғышыуын дауам иткән. "Үгәҙәй ҡаан үлгән йылы (1241 й.), яҙ айҙарында, улар (ханзадалар) Мраҡ тауҙары аша бүләр* һәм башҡорттарға йүнәлгән... Батый Истәриләүгә (Стәрлегә) табан барған, башҡорт батшаһы менән һәм монгол сиреүе уларҙы ҡыйратҡан...".[10]** Ләкин башҡорттар өсөн был һуғыш та һуңғы һуғыш булмаған, әлбиттә. Тарау феодаль Рустә һәр кенәзлек татар яуын яңғыҙ ҡаршылап ҡыйралғанда, Башҡортостан, берҙәм дәүләт булараҡ, бер юлбашсы етәкселегендә ҙур сиреү тупларға һәләтле булған һәм дошманға иҫ киткес ныҡ ҡаршы торған. Төп дәүләт сиреүе еңелгәндән һуң да яусыл башҡорттар көрәште туҡтатмаған. Халыҡ теле һәм ижадында башҡорттоң илбаҫарҙар менән йәнтәслим һуғышыуы тураһында бик күп хәбәр һаҡланған. Боронғо "Урал" йырындағы "Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын" тигән һүҙҙәр ҙә шул замандан ҡалған булырға мөмкин. Башҡорттар һәр ерҙә хәрби төркөмдәр ойоштороп, батырҙар йәки ырыу баштары етәкселегендә дошманға ҡаршы һөжүм иткән, көнө-төнө ҡурҡыу һалып торған, эйелгән башты күреп кинәнергә уға мөмкинлек бирмәгән. Татарҙар, ҡаршылыҡ күрһәткән һәр урындағы кеүек, бөтә Башҡортостан буйынса аяуһыҙ ҡан ҡойорға тотонған. Халыҡты тотош ҡырыу, ҙур-ҙур өлкәләрҙе ҡыйратып харабаларға ҡалдырыу татарҙарҙа юғары етәкселәр тарафынан ойошторола торған бер яу сараһы булған.* Халыҡты бөтөрөүҙән тыш, улар ҡала һәм тораларҙы емергән. Шундай ҡырағайлыҡ арҡаһында башҡорт ҡалалары, болғар һәм башҡа халыҡтарҙыҡы һымаҡ уҡ, ер йөҙөнән юҡ ителгән. Таланып хәйерсәгә әйләнгән

* Ҡайһы бер Көнсығыш тарихсылары болғарҙарҙы шулай атаған.

[10] Рәшид-әд-дин. Аталған китап, 45-се бит.

** Рәшид-әд-дин был һуғыштың булған ваҡытын дөрөҫ күрһәтмәгән; ул 1241 йыл түгел, ә 1242йылдың йәйендә, Батый хан Венгриянан Волгаға кире әйләнгәс, булған. Ошо ваҡиғаның артынса уҡ монголдарға килгән Плано Карпини шулай яҙа: "Рәсәй һәм ҡоман (ҡыпсаҡ) иленән баяғы етәкселәр алға китеп венгрҙар һәм поляктар менән һуғышты; татарҙарҙан күп кеше Польша менән Венгрияла үлтерелде... Унан кире әйләнеп, улар мәжүси марҙыуалар еренә килде һәм һуғышып уларҙы еңде. Унан биләрҙәргә, йәғни бөйөк Болгарияға, ҡаршы ҡуҙғалып, улар уны ла тамам бөлгөнлөккә ҡалдырҙы. Унан тағы төнъяҡкараҡ башҡортҡа, йәғни бөйөк Венгрияға, ҡаршы ҡуҙғалып, улар уны ла еңде". (Иоан де Плано Карпини. История Монголов. СПб., 1911, 25-се бит).

* Улар быны шулай эшләгән: ҙур сиреү менән бик киң ерҙе ҡамап, эстәге халыҡты ҡырып, ҡотон алып, уртаға өйөргән дә иҫән ҡалғандарының барыһын, сабый балаларына хәтлем, үҙ яугирҙәренә таратып биргән, шунан һәр яугир үҙ өлөшөнә тейгән кешеләрҙе бәйләп, йөҙөнөкләтеп теҙеп, ҡылыс менән берәм-берәм баштарын сабып өҙгән.

ҡала халҡының әҙ-мәҙ иҫән ҡалған өлөшө күсмә тормошҡа күсергә мәжбүр булған.[11]

Тотҡонлоҡҡа эләккән ир, ҡатын, бала-сағаны татарҙар меңәрләп-меңәрләп ҡоллоҡҡа һатҡан. Ҡоллоҡҡа һатылған ҡыпсаҡ, башҡорт һәм башҡалар Сүриәгә, Мысырға ебәрелгән. Унда ҡатын-ҡыҙ кәнизәк ителгән, ә ир-ат солтан ғәскәренә алынған. Мысыр ғәскәренең күп өлөшө шул ҡолдарҙан, йәғни мәмлүктәрҙән, йыйыла башлаған. Мәмлүк ғәскәрҙәре Көнбайыш Европанан ябырылған тәреләрҙе ҡыйратҡан, татар яуын кире ҡаҡҡан, Мысырҙы һәм ғәрәп цивилизацияһын һәләкәттән ҡотҡарған. Илде ҡурғаусылар даны мәмлүктәргә көс һәм хакимлек килтергән. Мәмлүктәр элекке ҡатнашлыҡ буйынса ла яҡшы таныш булған Мысырға әмир булып, ҙур ғәскәр башлыҡтары булып киткән. Шул Мысыр әмирҙәренең береһе мәмлүк Ғилмитдин Санжар әл-Башҡорди булған.[12] Мәмлүк Бейбарс солтан итеп ҡуйылған (1260-1277 йй.) Мысыр солтандарының мәмлүк нәҫеленә башланғыс биргән. Мәмлүк Ҡалауын һәм уның балалары Мысырҙа 103 йыл хакимлек иткән (1279-1383 йй.). Ғәрәп тарихсыһы әл-Айниҙың хәбәр итеүенсә, Бейбарс менән Ҡалауындың сығышы төрөк ҡәбиләһенең бөржоғлы ырыуынан булған.[13] Бөржоғло, һис шикһеҙ, башҡорттоң бөрйән ырыуына тап килә.[*] Бөрйән ырыуы ла ул заманда иң ҙур, иң алдынғы башҡорт ырыуҙары иҫәбенә ингән. Ғәрәп сығанаҡтарында бөрйәндәр хатта үҙ батшаһы булған айырым халыҡ тип телгә алына. Бейбарс менән Ҡалауын да үҙ илендә, күрәһең, ябай кешеләрҙән булмаған.[**]

---

[11] Өмөтбаев М. Аталған китап, 240-сы бит.

[12] Рамзи М. Тальфик ал-ахбар... т. I, Оренбург, 1907, 328-се бит.

[13] Тизенгаузен В. Сборник материалов, относящихся к истории Золотой Орды, т. I. СПб., 1884, 503-сө бит.

[*] Бөрйән (бөржән) һүҙендәге – и ялғауы (“сойон”, “кидан” тигәндәге кеүек) монгол теленеке. Был урында ул “оғлы” һүҙенә тура килә. Бейбарс үҙ яҙмаларында шул уҡ һүҙ менән яһалған “ҡанғуоғлы”, “анжоғлы”, “ҡарабароғлы” тигән ырыу атамаларын килтерә (Тизенгаузен В. Аталған китап, 540-541-се биттәр). Ошо көнгә тиклем шул форма беҙҙең “байулы” ырыуының исемендә һаҡланған. Бәлки, “әйле”, “меңле” ырыуҙарының исемдәре лә “әйулы”, “меңулы” тигәндән килеп сыҡҡандыр.

[**] Рәшид-әд-дин, Батый сиреүҙәре икенсе тапҡыр башҡортҡа һөжүм иткәндә, “уларға ҡаршы сиреү менән Барз ҡуҙғалды, улар уны ҡыйратты”, тип яҙа (Рәшид-әд-дин. Аталған китап, 40се бит). Бәлки, был Барз шул Бейбарс булғандыр. Уның исеме “бей” һәм “барс” тигән ике өлөштән тора,

Башҡорт Мысырҙа ғәскәр башы һәм солтан булып ҡына түгел, башҡа өлкәлә лә дан алған. Мәҫәлән, башҡорттан сыҡҡан мәмлүк Насретдин әл-Наср бик аҡыллы, ғәҙеллекле әмир, төрлө яҡлап һәләтле кеше булып танылған. Ул фән менән нығ ҡыҙыҡһынған, ғәрәп телен һыу һымаҡ өйрәнеп, шул телдә теҙмә һәм сәсмә әҫәрҙәр яҙған һәм замандаштарынан юғары баһа алған. Әҙәбиәттә Ҡалауындың улы әл-Әшрәф Хәлил дә юғары уңышҡа ирешкән. Замандаштары уның салт аҡылына, йор һүҙенә һоҡланыр булған. Төрөктәр араһынан күренекле шағир булып Таңбаға шөһрәт ҡаҙанған.[14] Исемендәге һүҙынҡы өндәргә ҡарағанда, уның да башҡорт булған булыуы бик ихтимал.[*] Тауар рәүешендә һатылып барған ят илдә ҡол яҙмышының ҡот осҡос бөтә михнәтен үтеп, иң юғары дәрәжәләргә, иң ҙур уңыштарға өлгәшкән был кешеләрҙең рух һәм тән көсөнә шаҡ ҡатып ғәжәпләнергә генә ҡала. Өлгәшкән дан һәм ҡаҙаныштары менән улар үҙ тыуған иленең ғәйәт ҙур көс һәм үҫеш кимәленә эйә булғанын асыҡ күрһәткән. Шундай илдән сыҡҡан кеше булмаһалар, шул хәтле оло эш башҡарырға һәләтле булмаҫтар ине.

Башҡорттарҙың шул кимәлдәге үҫеш кимәле хаҡында әҙәби ҡомартҡылар нигеҙендә лә фекер итергә мөмкин. Шиғри камиллығы, фәлсәфәүи фекер тәрәнлеге менән һоҡландырған “Урал батыр”, “Абуҙат” кеүек гүзәл халыҡ әҫәрҙәре менән бер ҡатарҙан башҡорттоң яҙма әҙәбиәте лә булған. Яҙма әҙәбиәттән Ҡол Ғәлиҙең XIII быуат башында яҙған “Ҡисса-и Йософ” поэмаһы әлеге көнгә тиклем һаҡланып ҡалған. Ҡол Ғәли әйле (әйулы) ырыуының башҡорто булған. Ул Урта Азияла белем алып, күп йылдар буйы шунда уҡытҡан, татар-монгол яуы башланғас, тыуған иленә ҡайтҡан. Уның поэмаһы боронғо башҡорт әҙәбиәтенең, юғары классик шиғриәтенең аҫыл өлгөһө булып тора. Шунан тыш, был поэма башҡорттарҙың Урта Азия һәм Яҡын Көнсығыш менән

---

тәүгеһе – төп исемгә ҡушылған дәрәжә атамаһы. Һүҙҙең мәғәнәһен белмәгән ғәрәптә “бей” тигәне кеше исеменә тоташып китеүе мөмкин.

[14] Амин ал-Холи. Связи между Нилом и Волгой. М., 1962, 31-32-се биттәр.

[*] Әгәр был исемдең эсенә ингән һүҙ башҡа төрки телдәрҙәге кеүек “буға” тип әйтелгән булһа (мәҫәлән, Алтын Урҙа хандарының Тулабуға, Сашибуға тигән исемдәрендәгесә), ғәрәп телендә “уау”хәрефе менән яҙылыр ине; башҡорт телендәге “боға” һүҙе генә ғәрәпсә, тейешле хәрефе булмағанға күрә, “әлиф” менән яҙылырға мөмкин (“оғлы” тигәндәге кеүек).

бик киң бәйләнештә булғанын, көнсығыш әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, фәнен яҡшы белгәнен күрһәтә. Баяғы мәмлүктәр ҙә, күрәһең, ошо мөхиттә тәрбиәләнеп үҫкән, шуның өсөн улар “мосолмандар илдәрендә яҡты эҙ ҡалдырған”.[15] Ләкин татарҙарҙың башҡорт илен ҡаты ҡаршылыҡ күрһәткән өсөн аяуһыҙ ҡырыуы, ҡыйратыуы арҡаһында мәҙәни ҡаҙаныштар һәм мәҙәниәт ҡомартҡылары юҡ ителгән, халыҡтың социаль-экономик тормош нигеҙе емерелгән, уның дәүләте мәңгегә бөтөрөлгән.

1240 йылда Сыңғыҙ хан улы Жуси олоҫоноң Алтын Урҙа тигән дәүләте төҙөлгән. Дәүләттә юғары хөкөм Батый етәкселегендәге Жуси уландарының ҡулында булған. Хан хөкөмөн ғәмәлләштергән дәүләт идаралығына монгол һәм татарҙарҙан торған сиреү башлыҡтары ултырған.

Ҡайһы бер совет тарихсылары Сыңғыҙ хан заманындағы татарҙарҙы монгол телле булған, монгол ырыуҙары иҫәбенә ингән тип раҫларға тырыша. Ләкин былай тип раҫлар өсөн һис бер нигеҙ юҡ. Боронғо авторҙарҙың бөтәһе лә татарҙарҙы төрөк халыҡтарына индергән. Татар халҡының үҙ ырыуҙары булған: тутуклиут, алчи, чаган, куин, терат, баркуй.[16] Рәшид-әд-дин әйтеүенсә, татар менән монгол араһында оҙаҡ йылдар буйы һуғыш барған. Ахырҙа Сыңғыҙ хан татарҙарҙы үҙ хөкөмөнә буйһондорған. Шунан һуң татарҙар һәм ҡайһы бер башҡа халыҡтар “бөйөк һәм дәрәжәле булып күренер өсөн” үҙҙәрен монгол тип атай башлаған.[17] Тимәк, татарҙы монгол иҫәбендә йөрөтөү тәүҙән булған түгел, һуңынан килеп сыҡҡан нәмә, һәм был нәмә татарҙарҙың этник булмышына бөтөнләй ҡағылмаған. Шул уҡ ваҡытта монголдар үҙҙәрен татарҙарҙан ҡырҡа айырған. Вильгельм де Рубрук Алтын Урҙа ханы, уның улы Сартак һәм башҡа юғарғы ҡатлам монгол вәкилдәре менән һөйләшкәнен яҙғанда: “... Татар тип

---

[15] Тизенгаузен В. Аталған китап, 503-сө бит.
[16] Рашид-ад-дин. Сборник летописей, т. I, кн. 1. М.-Л., 1952, 103-сө бит.
[17] Рәшид-әд-дин. Аталған китап, 101-103-сө биттәр.

аталырға теләмәй улар. Сөнки татарҙар бөтөнләй икенсе халыҡ...” – тип асыҡ итеп әйтә.[18]

Ҡайһылыр бер дәүерҙә монгол булып йөрөһә лә, татарҙар, һис һүҙһеҙ, төрки халыҡ булып, төрки телле булып ҡалған. Мәхмүд Ҡашғари Сыңғыҙ хандың тәүге Көнбайыш яуҙарынан ике быуат элек “Төрки телдәр һүҙлеге” эшләгәндә иң элек тел факттарына таянып, татарҙарҙың төрки халыҡтарҙың береһе тигән, һәм телсе, һүҙлексе булараҡ, әлбиттә, яңылышмаған. Уның татарҙыҡы тип һүҙлектә айырып күрһәткән һүҙҙәре, мәҫәлән, “ҡайың”, “ҡат”, - төрки һүҙҙәр. Рәшид-әд-дин тәүге монгол хандарына хеҙмәт иткән татар әмирҙәренең Ит-ҡара, Бек-Тимур, Есун-Туз, Бекдаш һәм татар ханбикәләренең Буракчин, Түрэ-ҡутлуғ тигән исемдәрен килтерә.[19] Был исемдәр барыһы ла төрки халыҡтарҙыҡы, монголдыҡынан бөтөнләй айырыла. Алтын Урҙала ҡулланылған бик күп термин, мәҫәлән, “оғлан”, “бек”, “баҫҡаҡ”, “ҡараул”, “битикчи” һ.б., төрки лексикаға ҡарай һәм улар татарҙарҙың иң баштан уҡ монгол дәүләтенең хәрби-административ терминологияһын төҙөүҙә актив ҡатнашҡанын күрһәтә.

Һаҡланып ҡалған тарихи мәғлүмәттәр нигеҙендә Батый хан сиреүендәге монгол һәм татарҙарҙың самаса һанын билдәләргә мөмкин. Рәшид-әд-дин әйтеүенсә, Сыңғыҙ хан үҙенең һәр улына дүртешәр монгол бүлеп биргән. Батый хан яуында ҡатнашҡан монголдарҙың күпселеген Жуси йортона бирелгән дүрт мең кеше тәшкил иткән, ә ярҙамға тәғәйенләнгән ханзадалар был яуҙа, ғәҙәттәге тәртип буйынса, үҙ кешеләренең берҙән биш өлөшөн генә алған һәм уларҙан бөтәһе 3200 кеше өҫтәлгән. Шул хәтле генә монголдан Батый хандың яу башлағандағы 200-300 мең кешелек сиреүе[*] һис тә килеп сыҡмай. Тимәк, был сиреүҙең бөтә ҡалған өлөшө татарҙарҙан торған.

1240 йылда Батый ханға ярҙамға беркетелгән Ғойоҡ хан, Мәнгү хан һәм башҡа ханзадалар Монголияға ҡайтып киткән. 1252 йылда Жуси олоҫонан һәр ун

---

[18] Вильгельм де Рубрук. Путешествие в восточные страны. СПб., 1911, 92-се бит.

[19] Рәшид-әд-дин. Аталған китап, 106-107се биттәр.

[*] Батый сиреүенең һаны тураһында башҡа мәғлүмәттәр ҙә бар, ләкин улар яу башланған ваҡытҡа ҡарамай.

монголдың икәүһе Иранды баҫып алырға яу башлаған Хулағу хан сиреүенә ебәрелгән. Ошоларҙан һуң Алтын Урҙала күп тигәндә 3000 ысын монгол кешеһе тороп ҡалған. Шул уҡ ваҡытта күп һанлы татар халҡы яу артынса, тотош тигәндәй Себерҙән яңы баҫып алынған ерҙәргә килгән, борондан йәшәгән үҙ ерҙәрендә бик-бик әҙ генәһе ҡалған. Шул сәбәпле татарҙар Алтын Урҙаны тотҡан ханлыҡтың абсолют күпселеген тәшкил иткән. Һан яғынан күп булғас, Сыңғыҙ хан заманындағы уҡ "оло, шөһрәтле әмир, дәүләттең "ышаныслы кешеләре" булып киткән татарҙар[20] бик тиҙ генә Алтын Урҙала өҫтөнлөк итә башлаған, монголдарҙы, шул иҫәптән хан һарайын, үҙ тәьҫиренә буйһондорған, уларҙы татарлаштырған, "бөйөклөккә, оло хөрмәткә" ирешкән. Шулай итеп, татарҙар Алтын Урҙаның иң ҙур көсөнә әйләнгән.

Алтын Урҙаны ҡорғанда рус кенәзлектәре татар биләмәләренә эләкмәгән, улар яһаҡ түләүсе генә булып ҡалған. Шуға күрә политик һәм экономик йәһәттән улар етәрлек дәрәжәлә бойондороҡһоҙ булған, үҙ алдарына йәшәү һәм үҫеү мөмкинлеген һаҡлаған. Башҡортостан тулыһынса Алтын Урҙа биләмәләренең эсенә ингән, уның бөтә ерендә татар деспотизмының ҡанһыҙ хөкөмө урынлашҡан.

Алтын Урҙа халыҡтың үҙ ерендәге тәбиғи үҫеше һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән милли дәүләт түгел, ә баҫып инеп, сит ерҙәрҙә төҙөгән яһалма дәүләт булған. Ул бойондороҡло халыҡтарҙы талау, яһаҡ-һалым йыйыу иҫәбенә йәшәгән. Хан, уның монгол менән татарҙан торған мырҙалары һәм башҡа вазифа эйәләре һәр кешенең үҙенә һәм малына ҡарата сикләнмәгән хоҡуҡ менән файҙаланған. Бөтә кеше вазифа эйәләренә, йәғни түрәләргә, йән башы иҫәбенән бүлеп бирелгән, һәр түрә янында ҡоралы сиреү төркөмө булған. Түрәнең һәр ымына һүҙһеҙ буйһоноу ҡаты закон итеп ҡуйылған. Бер генә кеше саҡ ҡына ҡуҙғалмайыраҡ торһа, бөтә ауыл тар-мар ҡыйратыла булған.

Алтын Урҙа хакимдәре барлыҡ кешене, яңы тыуған балаһынан башлап иң олоһона тиклем, иҫәпкә алып сыҡҡан һәм һәр йән башына, мөлкәттең барын-

[20] Рәшид-әд-дин. Сборник летописей, т. I, кн. 1. М.-Л., 1952, 106-сы бит.

юғын ҡарамай, бик күп төрлө ауыр һалым һалған. Һалым йыйыу эшен үҙенә бер төрлө аппарат башҡарған. Уның башында баҫҡаҡ (даруға) торған. Баҫҡаҡ үҙ ҡулында ҡоралллы төркөм тотҡан. Ҡанһыҙлығы менән халыҡтың ҡотон ала торған был төркөм, үҙенсә әҙ генә кәрәк тип тапһа, ут-яу булып, һалым йыйыусыға ярҙамға ташланған.

Татар ҡул аҫтындағы кешеләр иң элек дөйөм йөкләмә рәүешендә мал-мөлкәтенең ундан бер өлөшөн бирергә тейеш булған. Шунан тыш хәрби һалым, амбар һалымы, ырҙан һалымы, һөргән ер һалымы, көтөүҙәге мал һалымы, төтөн һалымы, ям (почта стансаһы) һалымы һәм башҡа төрлө-төрлө һалым алынған. Кеше ханға һәм уның ярандарына ҡымыҙ бейәләре килтерергә, һәр яҡҡа йөрөп яткан иҫәпһеҙ илсе һәм сапҡындарҙың юлына ат-арба, хеҙмәтсе, һаҡсы бирергә, ашатып-эсерергә, урын йәйеп йоҡлатырға, ҡарарға тейеш булған. Халыҡ шулай уҡ мәжбүри рәүештә ҡала һәм ҡәлғәләр төҙөүгә, бик күп бүтән эш башҡарыуға йәлеп ителгән. Ләкин былар – кеше өҫтөнә һалынған бурыстың закон менән ҡаралған, билдәләнгән өлөшө генә булған. Ғәмәлдә иһә, хан һәм уның вазифа эйәләре, тулы хоҡуҡлы хаким булып, кешеһен дә, малын да үҙе теләгәнсә алған, үҙе белгәнсә ҡылған. Дәүләттә аяуһыҙ көсләү һәм талау хөкөм һөргән. Алырға нәмәһе булмаған кешене улар ҡол иткән. Шуның өҫтөнә, һәр ун кешенең берәүһе, ғәҙәттә йәш егет һәм ҡыҙҙар, ҡол итеп алынырға тейеш булған. Шунан башҡа, өс улы булған кешенең бер улы, ҡатынһыҙ ир һәм ирһеҙ ҡатындар ҙа ҡолға әйләндерелгән. Ҡолдар хужалыҡ эшендә файҙаланылған. Ләкин күпселеге сит илдәргә һатылған. "Ул (Үзбәк хан) ирҙәрҙе ни хәтле үлтерҙе, ҡол итеп төрлө илгә ҡыуҙы", - тип әл-Ғөмәри ошо хәлдәр тураһында яҙған.[21]

Алтын Урҙа дәүләтендә хәрби тәртип урынлаштырылған: тыныс ваҡытта төрлө йөкләмә үтәгән халыҡ һуғыш сығыу менән сиреүгә әйләндерелгән. Сиреү төмәндәргә, меңдәргә, йөҙҙәргә, ундарға бүленгән. Шул сафта һәр берәүҙең урыны билдәле булған. Бойороҡ алыу менән һәр кеше ҡорал-ярағын, атын, бер йыллыҡ аҙығын һәм башҡа кәрәк нәмәләрен алып, урынына баҫырға тейеш булған. Шунда

[21] Тизенгузен В. Аталған китап, 231-се бит.

унын бөтә нәмәһе ентекләп тикшерелгән, хатта бер энәһе генә етмәһә лә, ҡаты язаға тарттырылған. Ирҙәре һуғышҡа киткәндә хужалыҡ эшен башҡарыу, бөтә һалымды ваҡытында түләп тороу, төрлө бурыс-йөкләмәне үтәү тотош ҡатын-ҡыҙ өҫтөнә күсерелгән, уға бер ниндәй ҙә еңеллек бирелмәгән.

Золом һәм йәбер сиктән ашҡан, ауыр хеҙмәт, көс еткеһеҙ һалым-яһаҡтан халыҡ тамам хәлһеҙ, тамам арманһыҙ булған.

Алтын Урҙа сауҙанан, тауар әйләнеше һәм тауар һалымынан да күп төшөм алған. Волга тамағында Хазар ҡағанаты заманын уҡ (VII-X бб.) сауҙа бик көслө булған. Ҡағанаттың баш ҡалаһы Ител ҙур сауҙа үҙәге булып хеҙмәт иткән. Ителде 965 йылда Святослав кенәз ҡыйратҡас, шул уҡ урында төҙөлгән Саҡсин ҡалаһы көньяҡ-көнсығыш Европаның эре баҙарына әйләнгән. Сауҙа менән Болғар ҡалаһы ла дан тотҡан.

Тәүге Алтын Урҙа хандары, Батый менән Бирке, оло каруан үткән Волга тамағының сауҙа эше өсөн уңайлы икәнен аңлаған һәм баҫып алынған был ерҙәрҙә элекке сауҙаны тергеҙеүгә бөтә көсөн биргән. Каруан юлдарында Алтын Урҙа иҫке ҡалаларҙы яңыртҡан, яңы ҡалалар һалған. Ҡырым ҡалаларынан Ҡытайға, Болғарҙан Урта Азияға һәм унан ары бер өҙлөкһөҙ сауҙагәр каруандары йөрөгән. Алтын Урҙалаға каруан сауҙаһы донъя әһәмиәтенә эйә булып киткән. Хан ҡалаһы Ҡарай, Әстрәхан (Хажи тархан), Өргәнс (1387 йылға тиклем) һәм башҡа ҡалалар шаулы баҙарға әйләнгән. Ҡалаларҙың һаны егермегә яҡынлаған. Шаулы сауҙа тормошо татарҙарҙа сауҙа эшенә ҙур әүәҫлек тәрбиәләгән һәм шул әүәҫлек быуаттар үтеү менән уларҙың көслө милли һыҙатына әйләнгән.

Шул уҡ социаль һәм географик шарттар татарҙарҙа мәҙәниәт үҫешенә ҙур мөмкинлек асҡан. Бохара шәйехе Әл-Бәхерзи тарафынан мосолманға күсерелгән Бирке хан заманынан (1257-1266 йй.) һәм бигерәк тә ислам динен Алтын Урҙаның дәүләт дине тип иғлан иткән Үзбәк хан дәүерендә (1312-1342 йй.) татарҙар Урта Азия һәм Мысыр менән яҡын бәйләнешкә ингән. Алтын Урҙа хандарының һарайында Урта Азия һәм Мысырҙан килгән дини һәм донъяуи ғалимдар,

зыялылар, һөнәрмәндәр эшләгән. Уларҙың эшмәкәрлеге татарҙарҙың хан ҡалаһын мәҙәниәт, һәм фән үҙәгенә әйләндергән һәм уларға мосолман донъяһында нык үҫеш алған мәҙәни ҡаҙаныштарҙы тараткан. Шуның һөҙөмтәһендә татарҙар яйлап алдынғы халыктарҙың мәҙәни тормошонда ҡатнаша башлаған һәм, үҙҙәре артык бер ни өҫтәй алмаһа ла, шул халыктар булдырған дөйөм байлыктан күп нәмә алған. Урта Азиянын мәҙәниәт донъяһы менән аралашып, ундағы “төрки” телде ҡабул итеп, татарҙар башҡорт менән бер мәҙәни мөхиттә йәшәй башлаған. Шул уҡ ваҡытта, башҡорттарҙы, иң элек уның оло белем эйәләрен, тапап һәм ҡырып, татарҙар башҡорт мәҙәниәтенең бөтә булған ҡаҙанышын юкка сығарған. “Сыңғыҙ хан балалары фәнгә, мәҙәниәткә, мәғрифәткә хеҙмәт итмәгән; улар үҙҙәре ҡыйраткандың йөҙҙән бер өлөшөн дә кире тергеҙмәгән”, - тип яҙған башҡорт ғалимы Риза Фәхретдинов 1914 йылда. Башҡаларҙан алған һәм әҙ-мәҙ тергеҙгән шул тамсы хәтле генә өлөш тә Иҙел-Урал мосолмандарының тотош ҡыйратылған мәҙәни донъяһында татарҙарға күпмелер өҫтөнлөк биргән.

Монгол дәүләтенең ойошҡан берҙәм халҡы, берҙәм экономик нигеҙе булмаған, уның хөкөмө аяуһыҙ ҡорал көсөнә генә таянған. Шуның өсөн, ни хәтле генә көслө булып күренмәһен, ул ныҡлы дәүләт ҡоралмаһы була алмаған. Донъяға килгән ваҡытынан уҡ ул тарҡаулык, бөтөүгә дусар булған һәм шуның билдәләре тиҙ арала һиҙелә башлаған. XIII быуаттың 60-сы йылдарында уҡ Монгол дәүләтенең көнбайыштағы Сығатай, Жуси, Хулағу олоҫтары бөйөк ҡаан ҡул аҫтынан сығып, айырым-айырым дәүләт булып, үҙ-ара дошманлашып киткән. Шул уҡ заманда Бирке хан үлгәндән һуң (1266й.), Алтын Урҙаның үҙ эсендә лә тәхет өсөн тартыш башланған һәм XIV быуат башында ул Күк Урҙа менән Аҡ Урҙа тигән ике дәүләткә бүленгән. Шуларҙың икенсеһе тәүгеһенә бойондороҡло тип һаналған. Ләкин быны менән дә Жуси балалары араһында талаш туктамаған. Ҡайһы берҙә ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына, дәүләт башында берәй көслө кеше килгәндә (мәҫәлән, 1312-1342 Үзбәк хан заманында), берҙәмлек кире ҡайтҡан һымаҡ булып торған, шунан һуң элеккенән яманыраҡ талаш тоҡанып китер булған.

Алтын Урҙала ныҡлы вариҫлыҡ тәртибе булмаған, Жуси нәҫеленә ингән һәр кеше хан тәхетенә дәғүә итә алған. Әммә талаш-тартыш унан ғына ла сыҡмаған. Алтын Урҙа татар-монгол өсөн тыуған ил булмаған, ханзада, мырҙа һәм шулай уҡ ябай кешеләр баҫып алынған ят ерҙе тыуған иле тип тоймаған. Был ер улар өсөн талау, талап байыу сығанағы ғына булған, һәм һәр кем шул сығанаҡҡа хужа булырға, һис юғында унан мөмкин тиклем күберәк өлөш йолҡорға тырышҡан. Байлыҡ сығанағы өсөн тартышта Жуси балалары бер-береһен тәхеттән ҡолатып, туған – туғанын, улы – атаһын үлтереп, йә тотош Алтын Урҙаның, йә бер өлкәнең ханы булып ултырған һәм шунда уҡ тигәндәй башҡа дәғүәселәр тарафынан ҡолатып йәки үлтереп ташланған. Улар араһында ҡан дошманлыҡ хөкөм һөргән. Әммә төп мәсьәлә, бойондороҡло халыҡтан һалым-яһаҡ түләтеүҙә, улар берҙәм булған. Был эшкә тәғәйенләнгән дәүләт аппараты үҙ хеҙмәтен яҡшы башҡарған. Улай ғына түгел, тәхет һуғышы көсәйгән һайын халыҡты иҙеү ҙә яман көсәйгән, сөнки һәр дәғүәсе күберәк үҙенә һалым йыйырға тырышҡан, һәм халыҡ икеләтә, өсләтә нығыраҡ таланған. Татар хөкөмөндәге ерҙәрҙә хужалыҡ ҡыйраған, сәсеүлек һәм көтөүлектәр ҡороған, халыҡ татар ҡылысынан ғына түгел, аслыҡ-ялanғыслыҡтан да ҡырылған.

Башҡортостанға, бигерәк тә уның көньяҡ һәм көнбайыш ерҙәренә, 1377-1380 йылдарҙа бөтә Алтын Урҙаны үҙ ҡулына алған Туҡтамыш менән Урта Азиялағы Мавернаһһар дәүләтенең хакимы булған Аҡһаҡ Тимер араһындағы һуғыш иҫ киткес ҙур һәләкәт килтергән. Был һуғыш икәү-ара ер бүлешә алмау арҡаһында килеп сыҡҡан.

1391 йылда Аҡһаҡ Тимер 200 меңлек сиреү менән көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанға баҫып ингән дә, юлындағы бөтә нәмәне емереп, көнбайышҡа йүнәлгән. Шул уҡ йылдың йәйендә башҡорт ерендәге Ҡондоҙса йылғаһы буйында ҡаты һуғыш булып, Туҡтамыш ҡыйратылған. “... Йәйәүлеләр 10-ар – 20-шәр ат, ә бер атлы яугирҙәр 100-ҙән артыҡ ат алып ҡайтып киткән; башҡа малға, шул иҫәптән ҡуй-һарыҡҡа килгәндә, уларҙың иҫәбе булмаған. Бигерәк тә Тимергә һәм уның сәрҙарҙарына ҙур өлөш тейгән. Тимерҙең үҙенә ҡол итеп биреү өсөн әсиргә

алынған ҡыҙ һәм егеттәрҙең һаны... 5000 кешенән артҡан. Тимер сиреүе үҙ иленә ҡайтышлай ҙа талауын туҡтатмаған".[22] Башҡорт халҡына ошо көнгә тиклем Аҡһаҡ Тимер яуын иң яман һәләкәт, ҡот осҡос бәлә тип һөйләйҙәр. Архивта һаҡланған "Һуңғы һартай" тигән ҡулъяҙмала һартай ырыуының, Туҡтамыш сиреүендә түгел, ә үҙ алдына тыуған илен ҡурғап, Тимер менән иң һуңғы кешеһе ҡалғанса һуғышыуы, иҫән ҡалған ҡарт ырыу башының тыуған ил ҡазаһы һәм яуҙа үлгән ырыуҙаштары өсөн һаман туҡтамай дошмандан үс алып йөрөүе хаҡында бәйән ителә.

Туҡтауһыҙ дауам иткән ҡанлы талаш-тартыш арҡаһында элекке Алтын Урҙа XV быуаттың тәүге яртыһында Оло Урҙа, Нуғай Урҙаһы, Ҡазан, Себер, Ҡырым, Әстрәхан, Ҡаҙаҡ, Үзбәк ханлыҡтарына бүленгән. Нуғай Урҙаһы менән Ҡаҙан, Әстрәхән, Себер ханлыҡтарының сиктәре – Башҡортостан ерҙәрен бүлгеләп үткән.

Ҡоролошо, политик һәм юридик нормалары, эксплуатация формалары буйынса яңы барлыҡҡа килгән татар ханлыҡтары Алтын Урҙанан бер ҙә айырылмаған. Һалым-яһаҡтың күләме, хәрби һәм башҡа йөкләмәләр кәмеү түгел, киреһенсә артҡан, бөтәһе хан һәм мырҙаларҙың нәфсеһе теләгәнсә алынған. Хан һәм мырҙалар үҙҙәренең аҙаҡкы һулышында сиктән тыш ҡанһыҙлыҡ һәм ҡомһоҙлоҡ күрһәткән. Халыҡ ғазабы самаһыҙ булған.

Башҡорт халҡының Алтын Урҙа һәм унан һуңғы ханлыҡтар заманында татарға ҡаршы көрәшеүе хаҡында мәғлүмәт бик әҙ һаҡланған. Ул дәүерҙең тарихи һәм әҙәби ҡомартҡылары быуаттар буйы һүнмәгән ут һәм яу ялҡынында һәләк булған, беҙҙең көнгә өҙөк-өҙөк кенә хәбәр килеп еткән. Мәҫәлән, башҡорттарҙы яңынан буйһондороу өсөн Ҡазан татарҙарының 1445-1467 йылдарҙа бер нисә тапҡыр яу менән килгәне билдәле; башҡорттоң "Мең һаҙаҡлы Урҙас бей" тигән шәжәрәһендә меңле (меңулы) башҡорттарының Нуғай Урҙаһына ҡаршы һуғышыуы хаҡында әйтелә. Хатта ошо әҙ генә мәғлүмәт нигеҙендә лә, ирек һөйәр

[22] Греков Б.Д., Якубовский А.Ю. Золотая Орда и ее падение. М.-Л., 1950, 360-361-се биттәр.

башҡорт халҡы татар золомона баш эймәгән, быуаттар буйы көрәште туҡтатамаған, XVII-XVIII быуаттарҙағы кеүек үк, ҡоллоҡҡа ҡаршы өҙлөкһөҙ һуғышҡан, тип раҫларға мөмкин. Тынғыһыҙ көрәше менән ул үҙен тағы ла яманыраҡ ҡырыу һәм талауға дусар иткән. Иҫәпһеҙ ваҡыттар буйы аяуһыҙ ҡырыу һәм талау арҡаһында башҡорт халҡының һаны ун тапҡырға кәмегән*, көн итер мал-мөлкәте бөтөп һуңғы сиккә тиклем бөлгән. "Хакимдәре тарафынан таланып һәм тамам бөлдөрөлөп, йәнлек һәм балыҡ тотоп ҡына тамаҡ туйҙырғандар... – тип яҙған башҡорттар тураһында П.И.Рычков. – шул хәйерсе хәлендә улар Ҡазан һәм Себер хандары ҡулына эләккән, был хандар уларҙы тағы лы нығыраҡ бөлгөнлөккә төшөргән, көс еткеһеҙ һалым һалған".[23]

* 300 йыллыҡ татар иҙгенлегендә башҡорт халҡының ун тапҡырға кәмеүен ҡайһы бер Америка илдәрендәге төп халыҡтың шул уҡ хәлдә кәмеүе менән сағыштырып була.

[23] Рычков П.И. Типография Оренбургской губернии. Оренбург, 1887, 58-се бит.

## 2. РУС ДӘҮЛӘТЕНӘ ҠУШЫЛҒАНДАН ҺУҢҒЫ ХӘЛДӘР

Татарға яһаҡ түләүсе генә булып, үҙ аллы политик һәм экономик үҫеш өсөн мөмкинлек һаҡлаған рус кенәзлектәре аяуһыҙ талау һәм ҡырыуҙы күрмәгән. Улар яйлап талаш-тартыштан кимгегән Алтын Урҙаға ҡаршы торорлоҡ көс йыйған. 1380 йылда Мәскәү кенәзе Дмитрий етәкселегендәге берләшкән рус ғәскәрҙәре Кулик яланында татар хакиме Мамай сиреүен ҡыйратҡан. Дмитрийҙан һуңғы кенәздәр ҙә татар иҙгенлегенән ҡотолоуға бөтә эшен йүнәлткән. Ләкин тулы иреккә ирешкәнсе тағы йөҙ йыл үтеп киткән. Ул иректе рустар 1480 йылда, Мәскәү кенәзе Иван III дәүерендә, яу менән килгән Әхмәт хан юлын киҫкәндән һуң ғына алған. Татар бойондороғонан ҡотолоу Иван III-гә көнбайыш һәм көнсығыш рус биләмәләрен киңәйтеү өсөн ҡыҙыу эш башларға мөмкинлек биргән. Төнъяҡ-көнсығышта рус юлбаҫарҙары Төнъяҡ Сулман, Төнъяҡ Урал, Төнъяҡ диңгеҙ буйҙарына, хатта алыҫ Юғыр ерҙәренә үтеп, борондан шунда йәшәгән коми, нена, хант, манси тигән төп халыҡтарҙы көсләп, Мәскәүгә яһаҡ түләргә мәжбүр итә башлаған. Василий III заманында Псков, Рязань, Смоленск кенәзлектәрен ҡушыу менән бөтә булған рус ерен берләштереү тамамланған һәм Рус дәүләте барлыҡҡа килгән. Был дәүләт бик етеҙ көсәйә башлаған. Беренсе рус батшаһы Иван IV-нең ҡаты ҡулы менән дәүләт ныҡ үҙәкләштерелгән, самодержавие власы нығытылған. Иван III башлаған актив баҫҡынсылыҡ политикаһын Иван IV бик уңышлы дауам иткән.

1552 йылдың 2 октябрендә Иван IV 150 меңлек ғәскәр менән оҙаҡ ҡамауҙа тотҡандан һуң Ҡазан ҡалаһын алып ҡыйратҡан, шуның менән татарҙарҙың Ҡазан ханлығын бөтөргән. Ҡазанды баҫып алғас, Рус дәүләте көнсығышта илбаҫарлыҡ эшен көсәйткән. 1554 йылда яҙ 30 меңлек рус ғәскәре караптары менән Волга буйлап Әстрханға йүнәлгән һәм 2 июлдә ҡаланы ҡаршылыҡһыҙ баҫып алған. Әстрхан ханлығын улар 1556 йылдың авгусында икенсе тапҡырға яу менән барып,

бөтөнләйгә юҡ иткән. 1554 йылда рус ғәскәрҙәренең уңышы тәьҫирендә Нуғай Урҙаһы үҙен Рус дәүләтенең вассалы тип таныған. Ләкин вассалитет менән риза булмаған татарҙарҙың бер өлөшө Волганы аша сығып, Аҙау менән Ҡабарда араһында Кесе Нуғай Урҙаһы төҙөгән. Был урҙа Ҡырым ханының ҡанаты аҫтына һыйынған. Оло Нуғай Урҙаһының вассалитеты 1557 йылды тамам нығытылған. Шулай итеп, 1552-1557 йылдарҙа Башҡортостан ерен үҙ-ара бүлешеп тотҡан дүрт татар ханлығының өсөһө Рус дәүләтенең ҡул аҫтына ҡалған. Дөрөҫ, Нуғай Урҙаһы һаман башҡортто үҙ ҡулында тоторға, һаман унан һалым йыйырға маташып ҡараған, әммә рустар татарҙарҙың Ҡазан ханлығын кире тергеҙеү өсөн күтәргән хәрәкәтен баҫтырғас (1553-1557 йй.), нуғайҙар Башҡортостан ерепән тотош ҡасып китеп бөткән. Ҡасҡан ваҡыттарында улар башҡортто ла көсләп алып китергә тырышҡан, ләкин башҡорттар үҙ илен ташламаған, ҡорал тотоп нуғайға ҡаршы торған һәм еңеп сыҡҡан.

Өс йыҙ йылдан артыҡ хакимлек иткән татарҙар ханлыҡтары ҡолағас та көслө халыҡ булып ҡалған. Ләкин улар рус власына оҙаҡ ҡаршылашмаған, сөнки бында боронғо үҙ ерҙәре булмағас, ханлыҡтарын юғалтыу менән улар үҙ иленең азатлығын юғалтмаған, ә хакимлектәрен генә юғалтҡан. Хакимлекте юғалтыуға татарҙар күнгән. Ҡасандыр монголға яраҡлашҡан кеүек, улар яңы хужаға бик тиҙ яраҡлашып алған һәм Рус дәүләтенең тоғро кешеләре булып киткән. Артабан улар рус колонизаторҙарына көнсығыш ерҙәрҙе баҫыуҙа, башҡорттарҙы талап, буйһондороп алыуға, уларҙың ерен талап, буйһондороп алыуға, уларҙың ерен талауға бик тырышып ярҙам иткән. Тоғро хеҙмәте рус власы татарҙарға бик яҡшы ҡараған: уларға юғары исем-дәрәжәләр, төрлө өҫтөнлөктәр биргән, башҡорт ерҙәрен бүләк иткән.

Татар ханлыҡары ҡолағас, башҡорттар, бер яҡтан татар иҙгенлегенән ҡотолған, икенсе яҡтан, шундай уҡ йыртҡыс илбаҫарҙарҙың баҫып алыу ҡурҡынысы аҫтында ҡалған. Татарҙан һуң бик ауыр хәлдә ҡалған башҡорттоң яҡынлап килгән рус һөжүменән ҡаршы тороп, илде һаҡларлыҡ көсө булмаған. Шуның өсөн улар, Нуғай Урҙаһы һымаҡ, вассалитет шарты менән Рус дәүләтенә

буйһонорға, шулай итеп, күпмелер кимәлдә сикләнгән булһа ла, үҙ аллыҡ алырға ҡарар иткән. 1557 йылғы Грамота менән нығытылған шарт буйынса, рус хөкүмәте башҡорттарҙың үҙ еренә нәҫелдән нәҫелгә эйә (аҫаба) булыу хоҡуғын таныған, шул хоҡуҡты эске һәм тышҡы баҫҡынсаларҙан һаҡларға йөкләмә алған, шулай уҡ башҡорттоң эске идараһын, дин тотоу иркен таныған; башҡорттар үҙ нәүбәтендә яһаҡ түләргә, үҙ иҫәптәренә хеҙмәт атҡарырға, алыҫ һәм яҡын походтарҙа ҡатнашырға, күсмәнде халыҡтар яуынан дәүләттең көньяҡ-көнсығыш сиктәрен һаҡларға йөкләмә алған. “Бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән, тамъян башҡорттарының шәжәрәһе”ндә ошо хаҡта: “Жирларемез һәм динларемез илә айрә языб, ислам динендә булған башкырт жәмағәтләрен аслан ғәйре дингә көсламәскә ғәһед вә йәмин идеб (ант итеп), һәм безлар руғ-әнсабларемез ихласлы хезмәтләр ҡылмаҡ өчен, указнамәләр төзеб, бер-беремездан алынмыш бадбичнамәларыбыз Ҡазан шәһәрендә дәфтәргә языулмышдыр”, - тип әйтелгән.[24] Башҡорттарҙың тоғролоғон тәьмин итеү өсөн рус хөкүмәте, күрһәтелгән шарттарҙан тыш, Ҡазан һәм Мәскәүгә күренекле кешеләрҙең уландарынан аманат килтереп тороу шартын ҡуйған. Был шарт оҙаҡ ваҡыттар буйы халыҡ өҫтөндә ауыр йөк булып ятҡан.

1554-1557 йылдарҙа ошо шарт нигеҙендә Рус дәүләтенә Ҡазан, Әстрхан ханлыҡтары һәм Нуғай Урҙаһы ҡул аҫтында булған башҡорттар ҡушылған, ә Урал арты башҡорттары рус бойондороғон һуңыраҡ, рустарҙың Себер ханлығын баҫып алыу барышында, ҡабул иткән. Өҫтәүенә, Урал арты башҡорттарының рус бойондороғона күсеүе батша ғәскәренең йыртҡыслыҡ һәм ҡанһыҙлығы менән нык тотҡарланған. Мәҫәлән, 1596 йыл Төмән ҡалаһының баяр улы етәкселегендәге бер ғәскәри төркөмө һис бер сәбәпһеҙ ҡаратабын башҡорттарының ауылына сапҡын яһап, күп кешене үлтергән, ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаны әсир иткән. Әсирҙәрҙең күбеһе тотҡонда үлгән, иҫән ҡалғандары Себерҙәге рус ҡалаларына һатылған. Шундай йыртҡыслыҡтар ҡаратабын, һеңрән башҡорттарын Күсем хан менән уның уландарына һыйынырға мәжбүр иткән. Шуға ҡарамаҫтан, XVII быуаттың 20 йылдарына хәтлем башҡорттарҙың бөтәһе лә рус бойондороғона

[24] Башкирские шежере. Уфа, 1960, 76-сы бит.

ҡалып бөткән. Рус хөкүмәте биргән грамоталар буйынса , башҡорт халҡы татар-монгол яуына тиклем Башҡорт дәүләте биләгән бөтә ерҙе тигәндәй кире үҙенә ҡайтарып алған.

Вассалитет шарты менән Рус дәүләтенә ҡушылыу ул заманда башҡорт өсөн ҙур уҫеш булған. Шуның менән башҡорттар, берҙән, иң ауыр бер тарихи осорҙарында аяуһыҙ рус ғәскәренең баҫып инеүенән ҡотолған; икенсенән, Рус дәүләте алдында үҙҙәрен боронғо үҙ ерҙәре, үҙ политик һәм экономик мәнфәғәттәре булған айырым халыҡ итеп күрһәткән; өсөнсөнән, милли хоҡуҡтарын һәм милли ерҙәрен яҡлау өсөн юридик нигеҙ һалған; дүртенсенән, бойондороҡло хәлдә булһа ла, Башҡортостанды айырым бер ил итеп теркәҙгән, шул арҡала артабан, административ-террирториаль йәһәттән бүлгеләнеп бөтөүгә ҡарамаҫтан, бөтә кеше уны бер бөтөн ил тип белгән.

Башҡорттар үҙ теләге менән рус бойондороғона ингән, ләкин ул бойондороҡ вассалитет шарты менән сикләнгән булған. Шуға күрә Рус дәүләтенә Башҡортостанды тотош баҫып алып, үҙ эсенә индереү өсөн, ҡушылыу шартын һәм Иван IV ҡул ҡуйған 1557 йылғы Грамотаны тотош боҙоп, ике быуаттан артыҡ аяуһыҙ ҡанлы һуғыш алып барырға тура килгән.

Иван IV дәүерендә рустарҙың төнъяҡҡа һәм Себергә баҫып инеүҙәре тағы ла нығыраҡ көсәйгән. Икһеҙ-сикһеҙ сит ерҙәрҙе буйһондороуҙа Строгоновтар кеүек промышленниктар, сауҙагәрҙәр һәм улар тарафынан файҙаланылған һәр төрлө юлбаҫар һәм ҡараҡтар ҙур урын тотҡан. Шул юлбаҫарҙарҙың бер төркөмөнә "Рус дәүләтенә күрһәткән хеҙмәте өсөн" әлеге көндә лә бик ҙурлап йөрөтөлгән Ермак етәкселек иткән. Промышленниктар, сауҙагәрҙәр һәм юлбаҫарҙар урындағы төп халыҡтарҙы аяуһыҙ ҡырып, мәңге йәшәгән үҙ ерҙәренән ҡыуып, иҫ киткес йыртҡыслыҡтар ҡылған. Шул баҫҡынсылыҡҡа ике нәмә бик хас булған. Беренсенән, илбаҫарҙар, иң ябай ҡарағына тиклем, шул заманда уҡ оло дәүләтселек һәм баҫҡынсылыҡ рухы менән ғәжәп ныҡ һуғарылған, улар алдан уҡ, үҙҙәре бармаҫ борон уҡ, көнсығыштағы бөтә ерҙе Рус дәүләтенең законлы, тәбиғи биләмәһе тип, ундағы төп халыҡтарҙы ("яуыз шайтандарҙы",

“динһеҙ ҡәбәхәттәрҙе”) рус батшаһына яһаҡ түләргә тейеш, тип һанаған (“ерҙәр буш”, йәғни рустар юҡ, һәм “батша ҡаҙнаһына ул ерҙәрҙән һис ваҡыт яһаҡ түләнмәгән”); шулай уҡ рус батшаһы ла үҙе белмәгән ят ерҙәрҙең иҫәпһеҙ киңлектәрен тулыһынса биләү хоҡуғы менән сауҙагәрҙәргә өләшкән. Икенсенән, рус илбаҫарҙары үҙ хәрәкәтенең һәр аҙымын батша бойороғо буйынса ҡала һәм ҡәлғәләр менән нығытып барған (“уңайлы урынға ҡала ҡорорға, ә ҡалаға атар туптар ҡуйырға”, “төрлө ҡәлғә менән бик ныҡ итеп нығытырға”), ҡала-ҡәлғәләргә сиркәү һалған һәм тиҙ генә үҙ халҡын алып барып тултырған. XVI быуаттың икенсе яртыһында Пермь ерҙәрендә төҙөлгән шундай ҡалалар төньяҡ башҡорттарының күп ерен баҫып алған был эш иң мөһим вассалитет шарттарының береһен боҙоу булған. Шуға күрә 1572, 1582 йылдарҙа, төньяҡтағы пермәк, манси, хант, удмурт, мари халыҡтар үҙ ерҙәрендә ҡала-ҡәлғәләр төҙҙөрмәҫ, төҙөлгәндәрен емерер өсөн ҡорал тотоп күтәрелгәндә башҡорттар ҙа бик ныҡ ҡатнашҡан.

1582 йылдың октябрендә Ермак Себер ханы Күсемдең сиреүен ҡыйратҡас, рус хөкүмәте ныҡышмалы рәүештә Себергә үтеп инә башлаған. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Көнбайыш Себерҙә бик күп ҡәлғә һәм нығытылған ауыл төҙөлгән, уларҙың хәрби гарнизоны бик тиҙ көсәйгән. Хеҙмәт кешеләренән тыш, Себергә шулай уҡ Рәсәйҙең үҙәк өлкәләренән крәҫтиәндәр күсерелгән. Себергә үтеү уңышлы булһын өсөн рустарға уңайлы тура юл һалырға кәрәк булған. Урындағы халыҡҡа әүәлдән билдәле был юл Башҡортостан аша, Ҡариҙел тамағынан үткән. Рус хөкүмәте шул юлды үҙләштермәк булып, 1586 йыл Өфө ҡалаһын һалған. Өфөнән үткән Себер юлын Тобольскиға тиклем үткәрергә уйлағандар. Өфө ҡалаһын һалыу бер юлы бер нисә маҡсатҡа яуап биргән: был ҡала Башҡортостанды колонизлау һәм артабан көнсығышҡа үтеү өсөн, Башҡортостанда Рус дәүләтенең хакимлеген нығытыу өсөн терәк хеҙмәтен үтәргә тейеш булған. Әммә килешеү шарттары менән ҡулы бәйләнгән Рус хөкүмәте тәүге мәлдә башҡорттарҙы ҡуҙғатмаҫҡа тырышып, яһаҡ түләтеүҙе еңеләйтер өсөн, яһаҡты алыҫ Ҡазанға йөрөтмәҫ өсөн ҡала һалыу кәрәк, тип башҡортто

алдаған. Башҡорттар шул һуҙгә ышанып, үҙ еренең ҡап уртаһына ҡала ултыртырға ризалыҡ биргән.

Өфөнө һалыу менән Башҡортостанда ысын рус колонизацияһы башланған. Өфөнөң тәүге халҡы ҡаланы төҙөү һәм һаҡлау өсөн ебәрелгән тупсылар, уҡсылар, подъячийҙарҙан торған. Яңы хеҙмәт кешеләре иҫәбенә ҡала халҡы бик тиҙ арта башлаған. Хеҙмәт кешеләре, шул иҫәптән уҡсылар, ҡала тирәһенән ер алған. Өфө эргәһендә баяр һәм алпауыттарҙың фамилияһы менән аталған байтаҡ ауыл барлыҡҡа килгән. Алпауыттар араһында батшаға тоғро хеҙмәт иткәне өсөн дәрәжә алған татар мырҙалары ла булған. Алпауыт биләмәләренә күсерелгән рус крәҫтиәндәре башҡорт ерҙәрен һөрә башлаған. Өфө тирәһендәге ер бик күп саҡрымдарға тиклем башҡорттан тартып алынған. Өфөлә воевода етәкселегендәге колониаль хөкөм урынлашҡан. Воевода үҙ ҡулында ғәскәр тотҡан, ул халыҡтың тотҡарлыҡһыҙ яһаҡ түләп тороуы өсөн яуап биргән, суд һәм хөкөм вазифаһын үтәгән, һәм иң мөһиме, үҙенә тапшырылған территорияла һәр төрлө сара менән башҡорттарҙы баҫып, ҡыҫып торорға тейеш булған.

Өфөлә рус хөкөмө нығығас, Башҡортостандың ҙур өлөшөндә Ҡазан һарайы Приказына бойондороҡло Өфө өйәҙе ойошторолған. Өфө өйәҙе дүрт даруғаға (өлкәгә) – Ҡазан, Нуғай, Юса, Себер даруғаларына – бүленгән. Был даруғалар нигеҙҙә элекке татар хандарының биләгән ерҙәренә тап килеп торған. Төнъяҡ-көнсығыш башҡорттарының ерҙәре Тубыл, Верхотур һәм башҡа өйәҙҙәргә беркетелгән. Башҡортостанға шул рәүешлә административ етәкселек итеү системаһы XVIII быуат башына тиклем һаҡланған. Ләкин унан һуң да ул төрлө өйәҙ, провинция, губерния сиктәре менән бүлгеләгән хәлдә ҡалған. Рус хөкүмәтенең Башҡортостанды админстратив-территориаль яҡтан бүлгеләүе башҡорт халҡының берҙәмлеген тарҡатыу, берҙәмлектең көсәйеүенә тотҡарлыҡ яһау өсөн эшләнгән. Шундай политикаға ҡарамаҫтан, башҡорттар, 1557 йылғы Грамота биргән хоҡуҡтан файҙаланып, үҙҙәрен электән билдәле булған йыйындарын берҙәм милли идара органы итеп тергеҙеп ебәргән. Был йыйындар халыҡты берләштереү, үҙ аллығын ғәмәлләштереү сараһы булып бик яҡшы

хеҙмәт иткән. Йыйындарҙа халыҡтың мөһим тормош мәсьәләләре, хәл ителгән. Башҡорттарҙың XVII быуаттағы һәм XVIII быуаттың тәүге өлөшөндәге оло яуҙары һәр ваҡыт асыҡ йәки йәшерен үткәрелгән йыйын ҡарарҙары буйынса башлана торған булған.*

Өфөнө һалғандан һуң, XVII быуат башында, башҡорттоң ныҡ ҡаршы тороуына ҡарамаҫтан, Башҡортостандың төрлө районында тағы күп ҡала, шул иҫәптән Юса**, Бөрө, Табын ҡалалары ҡоролған. Был ҡала һәм ҡәлғәләр шулай уҡ Башҡортостанды колонизлау терәгенә әйләнгән. Колонизлау терәктәре бик һәләтләп Урал арты башҡорттарының ерендә, Исәт, Тинес (русса: Теча), Мейәс йылғалары буйында ла төҙөлгән.

Башҡортостанды колонизлауҙа монастырҙар актив ҡатнашҡан. Иван IV һәм уның улы Федор заманында уҡ, башҡорттоң ризалығынан тыш, Ағиҙел, Сулмай йылғалары буйынан монастырҙарға бик күп ер бирелгән. Был ерҙәргә дин әһелдәре менән бергә крәҫтиәндәр ҙә килеп ултырған. Монастырҙар бөтә Башҡортостанға таралып, бик тиҙ күбәйеп киткән.

Тарихи материалдарҙағы мәғлүмәтәтр һәм хәҙерге башҡорт тарихсыларының берҙәм фекере буйынса, Рус дәүләтенә ҡушылып, Нуғайҙар тотош ҡасҡас, тәүге дәүерҙә башҡорттоң татар-монгол яуына ҡәҙәр биләгән боронғо ерендә йәнә башҡорттар ғына йәшәгән, һис бер башҡа халыҡ булмаған. Башҡортостанға ят халыҡты күсереү рус колонизацияһының көсәйеүе менән бергә башланған. Рус хөкүмәтенең ҡала-ҡәлғәләргә, монастырҙарға һәм улар һағында булған ерҙәргә төрлө хеҙмәт кешеләрен, һарай, алпауыт, монастырь крәҫтиәндәрен, шулай уҡ татар-мишәрҙәрҙе килтереп ултыртыуынан тыш, Башҡортостанға төрлө ҡыҫынҡылыҡ һәм ҡыҫымдан ҡасҡан татарҙар, сыуаштар, мариҙар, удмурттар, марҙыуалар һәм башҡалар күпләп килә башлаған. Үҙәк

---

* 1736 йылдың 11 февралендә сығарылған батша указы менән башҡорт йыйындары тыйылған, шуның менән башҡорттоң 1557 йылғы Грамотаһында ҡаралған эске үҙидараһы бөтөрөлгән.

** Боронғолар һүҙенә ҡарағанда, Юса ҡалаһы шул уҡ исемдәге боронғо башҡорт ҡалаһы урынына һалынған. Шулай булғас, башҡа ҡалаларҙың да башҡорт ҡалалары урынына һалынған булыуы бик ихтимал.

губерналарҙан килгән рус крәҫтиәндәре лә булған. Башҡорттар, был халыҡтың ағымына ҡаршы торор көс тапмай, рус батшаларына баш орған. Улар, башҡорттоң боронғо аҫаба ерҙәренә ауыл-ауыл булып бик күп килмешәк ултыра, "сәсеүлектәрҙе һөрөп, сабынлыҡтарҙы сабып, урманлы ҡырҡып бөттөләр", шул арҡала яһаҡ сығанаҡтары ҡыҫҡарҙы, "яһаҡ һәм төрлө һалым түләр хәл ҡалманы", тип яҙған.[25] Ләкин рус хөкүмәте, 1557 йылғы Грамота буйынса башҡорттарҙың ер хоҡуғын һаҡларға йөкләмә алыуына ҡарамаҫтан, үтенестәргә иғтибар бирмәгән. Шулай итеп, Башҡортостанды рустар ғына түгел, татарҙар һәм тирә-яҡтағы башҡа халыҡтар ҙа актив колонизлаған. Уларҙың бөтәһе лә тиерлек башҡорт ерен баш-баштаҡлыҡ, көслөк менән алған. Шул арҡала башҡорт менән килмешәктәр араһында бик йыш янъял ҡуба торған булған. Башҡорттар килмешәктәрҙең бик аҙы менән генә ер һәм башҡа тәбиғи байлыҡ өсөн яһаҡтың бер өлөшөн түләтеү тураһында яҙма рәүештә шартнамә төҙөүгә ирешә алған. Был килмешәктәрҙе "кермешәк" тип атағандар.* Ҡалған яһаҡты рус хөкүмәте, ер хужаһы тип башҡорттан түләткән. Ә шул ваҡытта ерҙең бик күп майҙанын сит халыҡтар файҙаланған. Ә яһаҡ, ер биләгән өсөн түләтелгән төп һалым, бик ауыр булған. Ваҡыты-ваҡыты менән хөкүмәт һалымдарҙың күләмен арттырып торған. Ошонан тыш башҡорттарҙан тағы аяҡлы малдың биштән бер өлөшө, батша һәм воевода поминкаһы һәм һәр төрлө һағыҙ һәм аңғыҙ күп һалым түләтелгән. Был ғына түгел, һалым йыйыусыларҙың аяуһыҙ талауы һәм алдауы арҡаһында түләгән түләүҙең күләме ике-өс тапҡырға артып, көс еткеһеҙ йөккә әйләнә торған булған. Түҙмәҫ сиккә еткән төнъяҡ-көнсығыш башҡорттары шул хаҡта хөкүмәткә яҙған: "Ҡыш булыу менән, тигән, уларға (башҡорттарға) воеводалар Верхотурҙан йыйырға ғәскәриҙәрҙе ебәрә, ә ерҙәре урманлы булып, сана юлы булмаған өсөн былар ғәскәриҙәрҙе нарта менән үҙҙәре һөйрәп йөрөтә, шул Верхотур ғәскәриҙәре

[25] Материалы по истории Башкирской АССР (Артабан: Материалы...), ч.I. М..-Л., 1939, 82-се бит

* Кермешәктәр араһында Ҡазан татарҙары, сыуаштар, мариҙар, удмурттар, марҙыуалар һәм хатта еренән яҙған башҡорттар булған. Уларҙың мосолман татар крәҫтиәндәренән торған бер төркөмө "типтәр" тип йөрөтөлгән. Башҡа кермешәктәр этник сығыштарын һаҡлағанда, типтәрҙәр татарҙан айырылып, үҙенә бер төрлө этник төркөм яһаған булған. Хәҙерге көндә типтәрҙәрҙең бөтәһе лә тигәндәй ҡабаттан татар булып китте, тик бер аҙ ғынаһы башҡорт булып яҙыла башланы. Башҡорт яуҙары заманында кермешәктәр, шул иҫәптән типтәрҙәр, рус колонизаторҙары яҡлы булып бик актив сығыш яһаған.

уларҙа алмашлап өҙләкһеҙ ҡыш буйы тора; ә үҙҙәре (башҡорттар) ҡыш көнө яһаҡ өсөн һунар иткән ерҙә йәшәгәс, ирҙәр юкта теге ғәскәриҙәр ҡатындарын, балаларын туҡмай һәм мәсхәрәләй, аҡсаларын талай, йәнлек тирәләрен тартып ала, яһаҡты ла кенәгә буйынса түгел, үҙ файҙаһына артыҡ итеп ала, шул артыҡ яһаҡтан ғәскәриҙәр воеводалар менән үҙҙәре файҙалана һәм башҡортҡа төрлө йәбер ҡыла"; "ҡалын ҡар төшөп, яһаҡ йыйыусыларҙы ат менән йөрөтөп булмай башлағас, шул яһаҡ йыйыусылар ат өсөн һәр өйҙән берәр һум аҡса ала, ә йөрөй саңғы менән"; "воеводалар уларға (башҡорттарға) яһаҡ кенәгәләрен күрһәтмәй, ә яһаҡты артыҡ итеп ала, кемдә ниндәй йәнлек тиреһе күрһәләр – тотош алалар һәм шуның менән үҙҙәре файҙаланалар"; "бынан элек улар (башҡорттар)... Верхотурға яһаҡты йән башына йылына бишәр һыуһар иҫәбенән түләне, ә хәҙер Верхотур воеводалары уларҙан унар һыуһар ала"; "улар (башҡорттар) шундай көслөктән тамам бөлдө, күптәре иҫәпһеҙ бирәсәкле булды, ҡатындарын, балаларын аманатҡа биреп, үҙҙәре таралып бөттө, ә ғәйеп булған яһаҡлылар өсөн яһаҡты барыбер ҡалған башҡорт түләй; урман яғы булғас, уларҙың игенлектәре юҡ, йәй көнө һарына, ҡыш көнө балыҡ менән генә тамаҡ аҫрайҙар".[26] Шулай уҡ золом төнъяҡ-көнсығышта ғына түгел, Башҡортостандың бөтә яғында хөкөм һөргән. Рус хөкүмәте яһаҡ йыйыусы вазифаһын алпауыттарға яҡшы хеҙмәт күрһәткән өсөн бер бүләк рәүешендә биреп, башҡорто таларға үҙе ҡеүәтләгән. Шулай булғас, тейешле яһаҡты йыйыу өҫтөнә үҙ нәфсеһен тыйҙырыу өсөн хөкүмәт вәкилдәре, әлбиттә, халыҡтың мөмкинлегенә ҡарамаған, үҙе белгәнсә көслөк ҡылған. Ваҡытында яһаҡты түләмәгән кешеләрҙе халыҡ алдында таяҡ менән һуҡтырғандар, унан үлмәй ҡалған кеше һирәк булған. Көс еткеһеҙ һалым һәм аяуһыҙ йәбер күп башҡортто үҙенең аҫаба ерҙәренән боронғо башҡорт еренең сигенә, көнсығышҡа һәм көньяҡҡа ҡасырға мәжбүр иткән. Әммә унда улар ҡалмаҡ һәм ҡаҙаҡ ҡулына барып эләккән. Сөнки VII быуаттың тәге сирегендә ситке башҡорт ерҙәрен улар баҫыл алған булған. Ҡасҡан кешеләрҙең күбеһе һуңынан кире ҡайтҡан. Рус колонизаторҙарырның, татар заманындағы кеүек үк, түҙә алмаҫ ауыр хәлгә килтереүенә ҡарамаҫтан, башҡорттар үҙ илен ташлай

---

[26] Материалы..., ч. I. М.-Л., 1936, 69. 73-сө биттәр.

алмаған. Ул ғына түгел, яһаҡ түләткәндәге ҡаты ғәҙелһеҙлек һәм йәбергә зарланһа ла, улар, ғөмүмән, яһаҡҡа ҡарата ризаһыҙлыҡ белдермәгән, сөнки яһаҡты үҙ ерҙәренә аҫаба сифатында эйә булыу хоҡуғын һаҡларлыҡ ныҡлы шарт тип иҫәпләгән һәм 1557 йылғы Грамотаны абруйлы дәүләт актына һанап, шундағы йөкләмәләрҙе үтәүгә ҙур әһәмиәт биргән.

Рус дәүләтенә ҡушылған мәлдән башҡорттар рустың хәрби походтарына йәлеп ителә башлаған. 1557 йылдың көҙөндә үк уларҙы Ливон һәм Ҡырым һуғышына алғандар, XVII быуат башында башҡорттар поляк-швед ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышҡан, Минин һәм Пожарский ополчениеһы менән Мәскәүҙе азат иткәндә ҡатнашҡан. Рус дәүләтенең башҡортто ҡатнаштырмаған бер генә һуғышы һәм походы булмаған. Шунан тыш, башҡорттарҙы ғәскәри бурыслылар сифатында ҡала һәм ҡәлғәләр төҙөргә йөрөткәндәр. Мәҫәлән, 1594 йылда ҙур бер төркөм башҡортто алыҫ Себергә Тара ҡалаһын һалыуға ебәргәндәр. Башҡорттарҙың үҙ иҫәбенә атҡарған хәрби хеҙмәте ифрат ауыр йөкләмә булып торған. Етмәһә, был хеҙмәт йыл һайын бик күп башҡортто хужалығынан айырған, шуның менән бөлгөнлөккә һәм яһаҡ буйынса һаман күберәк бирәсәккә төшөргән. Ләкин хәрби хеҙмәт башҡорттарҙың 1557 йылғы Грамотала күрһәтелгән йөкләмәләре иҫәбенә ингән, шуға күрә хеҙмәт атҡарыуҙы ла улар мотлаҡ бурыс итеп һанаған.

Яһаҡ түләү һәм хәрби хеҙмәт атҡарыуҙан башҡа, башҡорттар һәр төрлө дәүләт йөгөн ташығанда атлы арба менән тәьмин итергә тейеш булған. Был йөкләмәнең ауырлығы хәрби хеҙмәттән кәм булмаған, сөнки Рус дәүләте яңы ерҙәрҙе баҫып алыу буйынса актив эш алып барғанда йөк йөрөтөү күп булған, атты алыҫ араға алғандар һәм йөк хужаларын ашатыу, тәрбиәләү йәнә башҡортҡа йөкмәтелгән.

Шулай итеп татар хандарының хөкөмөнән ҡотолоу башҡортҡа һис бер еңеллек бирмәгән, эксплуатация формалары һәм саралары үҙгәрмәгән, был йәһәттән рустар күп нәмәне татарҙарҙан алған. Өҫтәүенә, “татарҙар, рус

өлкәләрендәге кеүек үк, ер бәрәүҙеке лә түгел, алланыҡы, тип үҙләштермәһә"[27*],
рустар аяуһыҙ көсләү һәм талау менән генә сикләнмәгән, улар бик ҡыҙыҡ рәүештә башҡорт ерҙәрен баҫып ала башлаған. Рус хөкүмәте 1557 йылғы Грамотаны башҡорт һымаҡ изге итеп күрмәгән. Грамотаны дөрөҫләп Федор Иванович та (Иван IV-нең улы), унан һуңғы батшалар ҙа күп тапҡыр белдереү яһаһа ла, рус хөкүмәте ундағы йөкләмәләрҙе үҙенә мотлаҡ итеп һанамаған. Рус батшаһы үҙен бөтә баҫып алынған һәм алынмаған ерҙәрҙең берҙән-бер юғарғы хужаһы тип белгән. Шуға күрә ул һәм уның хөкүмәт органдары, ысын колонизатор булараҡ, бер нәмәнән дә тартынмаған. Үҙе баҫып алыуҙан башҡа, был хөкүмәт Башҡортостанға төрлө килмешәк һәм ҡасҡынсыларҙың күсеп ултырыуын хуплаған, төп халыҡты, уның хәжәм һәм мәнфәғәттәрен һанға һуҡмаған. Бөтә булған ошо нәмә һәм иҫ киткес йәбер-золом башҡорт халҡында көслө ризаһыҙлыҡ уятҡан.

---

[27] Историческая записка о местности прежней Уфимской провинции, гд был центр древней Башкирии (Артабан: Историческая справка…). СПб., 1867, 1-се бит.

[*] Шуның өсөн 1920 йылда Татар АССР-ы төҙөлгәнгә тиклем Алтын Урҙа ҡул аҫтындағы төрлө ергә таралған татарҙарҙың ғәмәлдә үҙ милли территорияһы булмаған. Татар АССР-ы территориаль автономия өсөн көрәшеүҙе белмәгән татарҙарҙың үҙ талабы буйынса төҙөлмәгән, ә бик тырышып та Татар-Башҡорт республикаһын ғәмәлгә ашыра алмаған өсөн генә, башҡорт эшмәкәрҙәрененң һорауы буйынса ғына төҙөлгән. Татар автономияһына территория билдәләгәндә иҫәпкә алынған берҙән-бер шарт булған: һуңғы татар ханлыҡтарынан Ҡазан ханлығы иң көслө булған, Ҡазан ҡалаһы татар араһында Иван IV ғәскәрҙәренә ныҡ ҡаршы тороуы менән дан алған һәм артабан ул бөтә тататрҙың күңелен тартҡан бер үҙәк булып киткән.

## 3. ТӘҮГЕ БАШҠОРТ ЯУҘАРЫ

Рус хөкүмәтенә ризаһыҙлыҡ көсәйгәнен башҡорттарҙың 1572 һәм 1582 йылдарға ҡарғанда 1616 йылғы яуҙа күпкә нығыраҡ ҡатнашҡаны асыҡ күрһәтә. 1616 йылғы яу Ҡазан татарҙары, сыуаштар, мариҙар, удмурттар араһында ҡупҡан. Баш күтәреүселәр Ҡазанды ҡамаған, Сулман йылғаһы буйына яңы һалынған Юса, Сарапул ҡалаларына һөжүм итеп, колонизаторҙарҙы көслө ҡурҡыуға төшөргән. Башҡорттар ныҡ ҡатнашһа ла, был яу уларҙың үҙ аллы сығышы булмаған. Беренсе үҙ аллы башҡорт яуы 1645 йылда булған. Бында төнъяҡ-көнбайыш башҡорттары үҙ ерҙәрендә Минзәлә ҡалаһын төҙөүгә һәм шуның менән 1557 йылғы Грамотаны боҙоуға ҡаршылыҡ белдереп, дәррәү баш күтәргән. Әммә башҡорттарҙың рус политикаһына ҡарата булған мөнәсәбәте ризаһыҙлыҡ һәм ҡаршылыҡ белдереү, алған йөкләмәләрен үтәтергә тырышыу менән генә бөтмәгән. Шуның менән бергә колониаль баҫҡынсылыҡ һәм иҙгенлектең активлаша башлаған сағынан башҡорт халҡында яйлап рус бойондороғонан баш тартыу, үҙ аллы милли дәүләт төҙөү фекере уянған. Был фекер баяғы 1645 йылғы яуҙы аяуһыҙ баҫтырып, етәкселерен язалағандан һуң тамам нығынған, төп маҡсатҡа әйләнгән. Башҡорттар рустарҙың, татар кеүек үк, хас дошман булғанын, киләсәктә вассаль хоҡуҡ өсөн алышыуҙан бигерәк, тулы азатлыҡ өсөн көрәшергә кәрәк икәнен яҡшы төшөнгән.

Шул уҡ ваҡытта рус хөкүмәте лә, күрәһең, күпмелер һығымта яһаған. 1649 йылғы Собор уложениеһында (Ҡандар йыйынтығында) ул яңынан 1557 йылғы Грамота шарттарына тоғро булғанын, башҡорттоң үҙ еренә аҫаба булыу хоҡуғын яҡларға һәм һаҡларға әҙер торғанын дөрөҫләгән. Әммә ғәмәлдә башҡорт тормошо бер ҙә үҙгәрмәгән. Башҡорт һаман элеккесә яһаҡ йыйыусыларҙың һәм хеҙмәт кешеләренең йәберләүенә дусар булған: хеҙмәт кешеһе Никита Юрьев Оничков “башҡорт ерҙәренә хужа булып алған, һунар иткән һәм һәр эштә

башҡорттарҙы ҡаты йәберләгән"; Иван Павлов менән Иван Кулаков тигән хеҙмәт кешеләре "көслөк менән уларҙың аттарын, юрғаларын, ҡондоҙҙарын, төрлө йәнлек тиреләрен тартып алған, ҡатын һәм балаларын талаған, өҫ кейемдәрен систереп алған"[28] һ.б., һ.б. Башҡорт ерҙәрен баҫып алыу тағы ла нығыраҡ көсәйеп, систематик рәүеш алған. 1651-1656 йылдарҙа рус хөкүмәте ете ҡаланан тороп, Минзәләне лә эсенә алған нығытмалы Сулман аръяғы һыҙығын төҙөй башлаған. Был һыҙыҡтың күп өлөшө башҡорт еренән үтеп, бик ҙур башҡорт территорияһын ҡырҡып алырға тейеш булған. Төнъяҡ-көнсығыш Башҡортостанда ла бик ҡыҙыу рәүештә яңы ҡала, ҡәлғә, нығытмалы ауылдар төҙөү эше дауам иткән.

Рустарҙың көслө баҫҡынсылығынан тыш, башҡорттарға көньяҡ һәм көнсығыштан ҙур бәлә килгән: уларҙы ҡаҙаҡ мырҙалары һәм XVII быуаттың 20-се йылдарынан ҡалмаҡтар ныҡ ҡыҫырыҡлай башлаған. Ҡалмаҡтар өҙлөкһөҙ һөжүм итеп, башҡорт ере иҫәбенә йәйләүҙәрен киңәйткән. Ҡалмаҡтарға ҡаты көрәш алып барғанда, рус хөкүмәте тәүҙә башҡорттарҙы яҡлаған, ләкин 50-се йылдарҙа ул үҙ политикаһын ҡырҡа үҙгәртеп, ҡалмаҡ яҡлы булып киткән һәм башҡорттарҙы үҙ ерҙәрен һаҡлауҙан тыйған. Өфө воеводаһы, бойороҡто боҙған башҡортҡа "үлем язаһы бирергә", тип күрһәтмә алған. 50-се йылдарҙың аҙағында Волга менән Яйыҡ араһының Һамар йылғаһынан көньяғы тотош ҡалмаҡ ҡулына ҡалған. Ҡалмаҡтар Рәсәй состтавына ингән. Рус хөкүмәтенең ныҡ көсәргәнешле заманындағы был оятһыҙ яңы хыянаты ҙур башҡорт яуына сәбәпсе булған. Башҡорттарҙың күптән әҙерләнеп килгән ысын азатлыҡ көрәше башланған.

Башҡорт яуы 1662 йылдың июль уртаһында Урал арты Башҡортостаны менән Көнгөр өйәҙендә башланып, бик тиҙ арала бөтә Башҡортостанға таралып киткән. Был хәл төрлө яҡ башҡорттарының һөйләшеп, тотош бергә күтәрелергә килешкәнен күрһәтә. Яу башында феодалдар, йәғни старшина, тархан* һәм

---

[28] Материалы..., ч. I. М.-Л., 1936, 171-се бит.

* Старшиналар башҡортто олоҫтарында етәксе административ вазифа үтәгән, яһаҡ йыйыуҙа ҡатнашҡан, батша хөкүмәте алдындағы йөкләмәләрҙең, төрлө бойороҡтарҙың үтәлешен тәьмин иткән. Улар ғәҙәттә тархандар араһынан һайланғандар. Тархан исеме юғарғы феодал ҡатламының

юғарғы дин башлыҡтары торған, ләкин башҡорт йәмғиәтенең ябай ҡатламдары ла ихлас күңелдән яу яҡлы булған. Был яу көслө тулҡын булып тотош халыҡты ҡуҙғатҡан. Ҡасандыр аяуһыҙ золомдан ҡасып ситкә киткән башҡорттар Һары Мәргән етәкселегендә яуҙы башлаусы һәм иң актив ҡатнашсы булып киткән. Баш күтәреүселәр Нейва буйына һәм Исәт йылғаһының түбәненә тиклем бөтә ҡәлғәләрҙе, монастырҙарҙы, нығытмаларҙы, рус ауылдарын ҡамаған, Көнгөр ҡалаһын алған, Өфөгә һөжүм иткән, Минзәлә тирәһендә ҡаты һуғыш алып барған һ.б., һ.б. Рус хөкүмәте айырым етәкселәр менән берәмләп һөйләшеп, баш күтәреүселәр сафын тарҡатырға тырышҡан. Ул баш күтәреүселәргә илселәр, шул иҫәптән ике Әстрхан татарын, ебәреп, баш һалырға өгөтләгән. Өфө властары вәғәҙәне йәлләмәгән: йәнәһе, улар яуҙа ҡатнашҡан өсөн ғәфү итә, урындағы түрәләр ҡылған йәбер-золомдо тикшерә, төрлө алдау, талауҙы бөтөрә һ.б. Был вәғәҙәләр тәьҫирһеҙ ҡалмаған. 1662 йылдың ноябрендә Ҡазан һәм Нуғай даруғаларының башҡорттары көрәште туҡтатырға булған. Урал арты башҡорттарының да Арыҫланбәк етәкселегендә ҡайһы берҙәре баш һалырға ризалыҡ биргән. Ағай-энеле өс Дәүләтбаев (Нуғай даруғаһының тархандары) халыҡты ҙур ҡорбандан ҡотҡарыр өсөн властың талабы буйынса хатта Һәүер менән Үләкәй тигән ике яу башлығын тотоп тапшырған. Ләкин рус властары бер вәғәҙәһен дә үтәмәгән. Улар ғәфү итеү урынына, тапшырылған етәкселәрҙе язалап үлтергән, 1557 йылғы Грамота буйынса һәр ваҡыт үҙҙәрендә тотҡан аманаттарҙы тотош аҫҡан, баш күтәреүселәрҙе ҡыра башлаған. Был яуызлыҡ һәм мәкерлеккә шаҡ ҡатып, Дәүәтбаевтар Нуғай даруғаһында үҙҙәре яу башына баҫҡан. 1663

---

иң таныҡлы вәкилдәренә, ҡайһы берҙә батырҙарға хәрби хеҙмәттә күрһәткән ҙур хеҙмәте өсөн бирелгән. Тархандар яһаҡ түләүҙән һәм таможня һалымынан бушатылған, уның урынына хәрби хеҙмәт башҡарған. Рус дәүләте тархандарҙы, бирәк тә старшиналарҙы, үҙенә терәк итергә маташып төрлө өҫтөнлөк биргән. Ләкин улар колонизаторҙарҙың ышанысын аҡламаған. Старшина һәм тархандар башҡорт яуҙарын ойоштороусы, халыҡтың азатлыҡ көрәшенә етәкселек итеүсе булған. Шуның өсөн 1735 йылғы Ырымбур экспедицияһының башлығы И.И.Кириллов тархандар тураһында: "... Улар бурлыҡҡа (йәғни колонизаторҙарға ҡаршы көрәшкә) хеҙмәт итә, ә беҙҙең указға түгел, шуның өсөн уларҙың был чины киләсәктә кәрәкмәй", - тип яҙған. Соловьев С.М. История России с древних времен, изд. 3, кн. 4, 136-сы бит). 1735-1740 йылдарҙағы яуҙарҙан һуң шунда ҡатнашҡан тархандар тархандыҡтан төшөрөлә. XIX быуат уртаһында тархандыҡ ғөмүмән бөтөрөлә.

йылдың башында Һары Мәргән үлгәндән һуң Урал арты башҡорттарына Арыҫланбәк етәксе булып алған. Халыҡ яуы яңынан дөрләп киткән.

Башҡортостанға бөтә Волга, Урал буйынан, Себерҙәге ҡала, ҡәлғә һәм нығытмаларҙан көслө хөкүмәт ғәскәрҙәре килтерелгән. Каратель ғәскәрҙәргә дөйөм етәксе итеп Ф.Ф.Волконский тигән бер Ҡазан воеводаһы ҡуйылған. Баш күтәреүселәр кәрателдәр менән бик ҡаты һуғышҡан, ләкин көстәре тиң булмаған, шуға күрә улар еңелә башлаған. Хөкүмәт ғәскәрҙәре башҡорт ауылдарын ҡыйрата, үртәй башлаған, мал-мөлкәтте, һаҡлыҡ аҙыҡты юҡ иткән, халыҡты ҡырған, "бик күп кешене, сабый балаларына тиклем үлтергән, күптәрен әсир итеп Өфөгә килтергән".[29] Улар Арыҫланбәктең ауылын туҙҙырған, үҙен үлтереп, бөтөн өй эсен һуйып сыҡҡан, балаларын да йәлләп тормаған. Әммә яу баҫылмаған. Башҡорттар һуңғы сиккә тиклем һуғышҡан, 1664 йылдың көҙ аҙағында ғына донъя тынысланып ҡалған. Һөҙөмтәлә башҡорт үҙенең законлы талаптарын ҡабул итергә рус хөкүмәтен мәжбүр иткән. 1664 йылды был хөкүмәт тағы бер тапҡыр башҡортто үҙ еренә аҫаба булыу хоҡуғын рәсми рәүештә раҫлап, төрлө йәбер-золомға сик ҡуйырға вәғәҙә иткән, Өфө воеводоһы Ф.И.Сомовҡа ошо вәғәҙәне үтәргә ҡушҡан. Ләкин башҡорт яуының төп маҡсаты был булмаған. Башҡорттар рус бойондороғынан баш тартып, боронғо үҙ дәүләтен тергеҙеүе маҡсат итеп ҡуйған. Был изге маҡсатҡа ирешеү өсөн уларҙың көсө етмәгән.

Совет тарихсыларының күпселеге, рәсми рус фәненең билдәмәләһенә эйәреп, ошо һәм унан һуңғы башҡорт яуҙарының сығышын тик юғарғы феодаль ҡатлам иркенә генә ҡайтарып ҡуя. "Башҡорт йәмғиәтенең көсәйеп, экономик йәһәттән хәлләнеп алған юғарғы феодаль ҡатламы, - ти был тарихсылар, - батша администрацияһының уларҙы әҙ генә сикләгән сараларын да ауыр күрә башлай. Эре башҡорт феодалдары сикләнмәгән экономик һәм политик власҡа ынтыла, башҡорт эшсәндәрен иҙеү хоҡуғы менән үҙе генә файҙаланырға тырыша... Аҙаҡ сиктә, шул көрәш барышында, эре башҡорт феодалдары араһында политик идеал барлыҡа килә: рус бойондороғонан ҡотолоу һәм башҡа хаким, башҡа хан

[29] Материалы..., ч. I. М.-Л., 1936,185-се бит.

эҙләү. Икенсе төрлө әйткәндә, башҡорт феодалдары Рус дәүләтенең әҙ-мәҙ ҡыҫынҡылыҡ килтергән көслө власынан баш тартып, Башҡортостанда хөкөмөнөң исеме генә булырҙай, башҡорт йәмғиәтенең юғары феодаль ҡатламына, тәбиғи, сикһеҙ экономик һәм политик хоҡуҡ бирерҙәй күсмә хандар бойондороғона күсергә тырышҡан. Ҡайһы бер феодалдар хатта үҙ аллы башҡорт ханлығы төҙөргә ынтылған".[30] Бөйөк руссылыҡ һәм колонизаторлыҡ рухы менән үтәнән-үтә һуғарылған был һүҙҙәрҙе ысын тарихи хәлгә объектив баһа биреүҙең әҫәре лә юҡ. Феодаль мөнәсәбәттәге йәмғиәттә феодаль ҡатламһыҙ мөмкин түгел икәне һәм ул ҡатламдың үҙ халҡы эшсәндәрен эксплуатациялауы тарихи яҡтан законлы икәне һәр кемгә билдәле. Башҡаса әйткәндә, феодализм дәүерендә феодалдарға үҙ халҡының эшсәндәрен эксплуатациялау хоҡуғы ижтимағи үҫеш законы менән бирелгән. Ул заманда рустың алпауыт феодалдары шул хоҡуҡ буйынса үҙ крәҫтиәндәрен аяуһыҙ эксплуатациялаған. Ләкин рус алпауыттарына тарихсылар асыу тотмай, ә рустарҙың Башҡортостанда теләгәнсә баш-баштаҡлыҡ ҡылыу хоҡуғын ҡабул итмәгән. Башҡортостанды колонизаторҙар хөкөмөнә бирергә теләмәгән башҡорттар уларҙың асыуына тейә. Башҡорт халҡын тотош ғәйепләргә баҙнат итмәй, тарихсылар башҡорт феодалдарын башҡа халыҡтан айырып, уларға ҡарата дошманлыҡ уятырға маташа. Халыҡ – бер бөтөн, уның эсенә иҙеүселәр ҙә, иҙелеүселәр ҙә инә, һәм, ике социаль төркөмдө айырған синфи мәнфәғәттәрҙән башҡа, бөтәһен бергә берләштергән дөйөм халыҡ мәнфәғәте бар. Һәр халыҡтың, был урында башҡорттоң, феодаль синыфы "үҙ дәүерендә бөтә йәмғиәт өсөн яуаплы" (Ф.Энгельс) һәм үҙенең социаль хәленә күрә ул бөтә халыҡ мәнфәғәтен сағылдырып тора. Шундай вазифа үтәгән өсөн башҡорт феодалдарының иң яҡшы вәкилдәре колонизаторҙарға ҡаршы күтәрелгән башҡорт яуҙарын ойоштороп, етәкселек иткән. Был яуҙарҙы барлыҡ халыҡ, тархандар ҙа, ябай ялпы ла, бер күңел, бер теләк менән күтәргән, улай ғына түгел, рус йыртҡыслығының бөтә әсеһен үҙ елкәһендә татыған халыҡҡа азатлыҡ көрәше етәксе феодалдарға ҡарағанда нығыраҡ кәрәккән.

---

[30] Очерки по истории Башкирской АССР (Артабан: Очерки…), т. I, ч. I. Уфа, 956, 106-сы бит.

Рус тарихсылары башҡорт феодалдарының рус бойондороғонан ҡотолорға тырышыуын оло ғәйеп итеп ҡуя. Улар феодалдарҙың был ҡыйыулығын ғәфү итә алмай һәм башҡорт яуҙарын русҡа ҡаршы булған, тимәк, реакцион булған, тип иғлан итә, сөнки, уларҙың фекеренсә, рус хакимлегенә йүнәлтелгән, рустарҙың бөйөк дәүләтселек тойғоһон рәнйеткән бер нәмәнең дә прогрессив булыуы мөмкин түгел. Шундай ҡара мөһөр баҫылған башҡорт яуҙарын нисектер аҡлар өсөн, ҡайһы бер башҡорт тарихсылары икенсе хата юлға баҫа: башҡорттарҙа Рус дәүләтенән айырылыу маҡсаты булмаған тигән тезис уйлап сығара. Тарихи дөрөҫлөктө улай итеп боҙоуҙың һис хәжәте юҡ. 1662-1664 йылдарҙағы яуҙан башлап, башҡорт яуҙарынынң бөтәһе лә, колонизаторҙарҙы Башҡортостандан ҡыуыу, үҙ аллы, бойондороҡһоҙ Башҡорт дәүләте төҙөү маҡсатын ҡуйған, тип асыҡ әйтергә кәрәк. Башҡаса ул мөмкин дә булмаған. Ни өсөн тигәндә, татар хөкөмө килтергән иҫ киткес ҙур ҡазаға ҡарамаҫтан, берҙәм халыҡ булып һаҡланған, милли тойғоһон юғалтмаған башҡорттар Рус дәүләтенә ҡушылғас, 1557 йылғы Грамотала ҡаралған эске идара хоҡуғынан файҙаланып, үҙ ерҙәренең төрлө өлкәһе араһында сауҙа һәм хужалыҡ элемтәһен тергеҙгән, шуның менән милли берҙәмлеген тағы ла яҡшыраҡ нығытҡан, элекке политик көсөн яңынан ҡайтарған. Әгәр Рус дәүләте 1557 йылғы Грамота шарттарын тейешенсә үтәһә, башҡорттар, бәлки, байтаҡ ваҡыт буйы асыҡтан-асыҡ борсолмай, милли үҫешкә күпмелер дәрәжәлә мөмкинлек ҡалдырған вассаль хәлде ҡабул күреп йәшәр ине. Ләкин рус хөкүмәте Башҡортостанда киң баҫҡынсылыҡ, аяуһыҙ көслөк политикаһы алып бара башлаған. Шундай хәлдә һәм ирешелгән юғары милли берҙәмлек кимәлендә үҙ аллы милли дәүләт ҡороу дөйөм объектив милли үҫеш законы буйынса мотлаҡ тарихи ихтыяжға әйләнгән. Ғәмәлгә килгән объектив ихтыяжға ярашлы рәүештә башҡорт яуҙарының маҡсаты билдәләнгән: ул яуҙар милли-азатлыҡ көрәше булып киткән. Рус тарихсылары шул дөрөҫлөктө белергә теләмәй. Улар яуҙарҙың сәбәбен "һимереп киткән" феодалдарҙың "яуыз уйы" менән генә аңлата.

Милли азатлыҡ көрәше башланыу менән башҡорттар алдында дәүләт тәхетенә хан табыу мәсьәләһе ҡалҡҡан. Билдәле булыуынса, хан тәхете, батша тәхете кеүек үк, тик хан (батша) нәҫеленән сыҡҡан кешегә генә лайыҡ булған. Башҡорттарҙың хан нәҫелен татар-монгол илбаҫарҙары тотош үлтереп бөткән. Шул сәбәпле, ә һис башҡа бер сәбәптән түгел, башҡорттар ҡайһы берҙә ханды үҙҙәренең хан нәҫелдәрен юғалтмаған күрше шәреҡ халыҡтарынан эҙләгән. Ханды ситтән ҡуйыуҙың ул заманда, Петр I үлгәндән һуң Рәсәй тәхетенә сит кешеләр ултырған кеүек үк, бер ғәйебе булмаған.

70-се йылдар уртаһынан рус хөкүмәте бөтә яҡлап элекке политиканы алып киткән һәм бер үк ваҡытта Волга-Урал буйындағы мосолман халҡын христианлаштырыу (суҡындырыу) сараларын көсәйткән. Мосолмандарҙы суҡындырыу ғәмәлдә XVI быуаттың урталарынан уҡ үткәрелгән, шул заманда суҡынған татарҙарҙан хеҙмәт кешеләре була башлаған. XVII быуаттың 60-сы йылдар башында Башҡортостанда христианлыҡты нығытыу өсөн Сиркәү Йыйыны Өфөгә епископ билдәләү тураһында ҡарар сығарған, әммә 1662-1664 йылдарҙағы башҡорт яуы был ҡарарҙы үтәүгә ҡамасаулаған. 1674 йылда иң юғары сиркәү башлығы булып ултырған патриарх Иоаким был эшкә бик ҡаты тотонған. Хөкүмәт бөтә яҡлап уға ярҙам иткән. 1681 йылдың 16 май ҡарары менән Өфө епархияһы ойошторолоп, айырым епископ билдәләнгән. Суҡындырыу эшен иң элек төрлө өҫтөнлөк һәм бүләктәр вәғәҙә итеп башҡарырға булғандар. Ләкин хөкүмәт ундай юл менән генә уңышҡа ирешә алмаҫын аңлап, көсләп суҡындырыу юлына баҫҡан. Көсләп суҡындырыу рус хөкүмәтенең 1557 йылғы буйынса алған тағы бер вәғәҙәһен, йәғни “бер ваҡытта ла башҡа дингә көсләмәҫкә” тигән һүҙен, оятһыҙ рәүештә боҙоу булған, һәм башҡорт ерҙәрен баҫып алыу, төрлөсә йәберләү ҡабаттан нык көсәйгәнлектәрн халыҡ бик ярһып торған мәлдә суҡындырырға тотоноуҙары яңы яу башлар өсөн етерлек сәбәп булып сыҡҡан.

1681 йылдың майынан төрлө даруға башҡорттары халыҡ йыйындары үткәреп, үҙ-ара бәйләнешә, ҡоралды төркөмдәр төҙөшә башлаған. Йәй уртаһында Себер һәм Нуғай даруғаларының төркөмдәре көнбайышҡа юл алған һәм Ҡазан

даруғаһы башҡорттары менән берләшеп, дөйөм һөжүм башлаған. Баш күтәреүселәр иң абруйлы, иң белемле дин башлыҡтарының береһе булған Сәйетте баш итеп, дөйөм етәкселек ойошторған.

Берҙәм күмәк көрәш 1682 йылдың яҙынан башланған. Баш күтәреүселәр көнбайыш башҡорт ерендә урынлашҡан Зәй, Шешмә, Минзәлә, Һамар ҡалаларына ябырылған. Йәй уртаһында башҡорт яуы бөтә Башҡортостанды солғап алған. Башҡорттар Өфөнө, Көнгөрҙө ҡамаған, Чусовой, Исәт һ.б. йылға буйҙарындағы ҡәлғәләргә баҫып инеп, башҡорт ерендәге монастырҙарҙы, сиркәүҙәрҙе, рус ауылдарын үртәгән. Рус хөкүмәте бөтә тирә-яҡтағы ҡала гарнизондарынан ҙур ғәскәр туплаған, ләкин 1682 йыл башҡорт яуына ҡаршы көслө көрәш ойоштора алмаған.

Киң ҡолас алған башҡорт яуынан ҡурҡып, рус хөкүмәте яңы батша булып улырған Иван менән Петр Алексеевичтар исеменән 1682 йылдың 8 июлендә башҡорттарға грамота менән мөрәжәғәт иткән. Был грамотала улар яуҙы туҡтатырға өндәгән, ғәфү итергә вәғәҙә иткән һәм аҙаҡтан, “беҙҙең, бөйөк батшаларҙың, суҡындырыу тураһында көсләп суҡындырырға тигән указы булманы һәм әле лә юҡ, һеҙ ул хаҡта һис тә шикләнмәгеҙ”[31], тип белдереүх яһаған. Рус хөкүмәтен шулай үҙ ниәтенән рәсми рәүештә баш тарттырып, башҡорттар ҙур еңеүгә өлгәшкән. Хөкүмәт грамотаһы баш күтәреүселәр сафына тарҡаулыҡ индергән. Башҡорттоң бер төркөмө бөтә дүрт даруғы исеменән ғаризнамә яҙып Мәскәүгә ебәргән, икенсе төркөмө Сәйет етәкселегендә көрәште дауам иткән. Шул арҡала 1682 йылдың октябрендә хөкүмәт яңы указ сығарырға мәжбүр булған. Был указда башҡорт ерҙәрен баҫып алыуҙы ғәйепкә һанап, ундай эшкә сик ҡуйырға һүҙ биргән. Хөкүмәт баш күтәреүселәрҙә ризаһыҙлыҡ уятҡан бөтә нәмәне бөтөрөргә вәғәҙә иткән. Шул уҡ ваҡытта ул 1683 йылдың мартында Башҡортостанға өҫтәмә ғәскәрҙәр ебәргән, шуның менән һәр төрлө вәғәҙәнең ихласлығына ышанмаған башҡорттарҙың шиген нығытҡан.

---

[31] Центральный гос. архив древних актов (Артабан: ЦГАДА), ф. 248, кн. 132, л. 38 об.

1683 йылдың майында башҡорт хәрәкәте яңынан башланып, Нуғай һәм Ҡазан даруғаларында көрәш ҡыҙып киткән. Ләкин бер нисә һуғышта башҡорттар еңелеп, хәрәкәт элеккесә үк көсәйә алмаған. Хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡалмаҡтар ныҡ ярҙам күрһәткән.

1682 йылды ҡалмаҡтар башҡорт яҡлы булған. Улар Сулман аръяғы крепостарына һөжүм иткәндә, Минзәлә менән Өфөнө ҡамағанда ҡатнашҡан. 1683 йылдың башында Әстрхан воеводаһы төрлө нәмә вәғәҙә итеп, ҡалмаҡтарҙы башҡортҡа ҡаршы ҡотортҡан. Ҡалмаҡ тайшаһы Аюҡа боланан файҙаланып, башҡортто үҙ хөкөмөнә буйһондорорға уйлаған. 40 меңлек ғәскәр менән Башҡортостанға баҫып инеп, ул башҡорт ауылдарын һәм йәйләүҙәрен ҡыйратырға тотонған, башҡорттоң малын талаған, халҡын ҡырған, ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаһын ҡыуып алып киткән. 1683 йыл йәй буйы талап, ҡалмаҡтар бөтә Көнбайыш Башҡортостанды ҡоротҡан, шуның менән башҡорттоң һуғышыр көсөн ныҡ ҡаҡшатҡан. Башҡорттар 1683 йыл Өфө эргәһендә тағы бер тапҡыр бик ҡаты һуғышҡан да көрәште туҡтатырға мәжбүр булған.

Башҡорт яуы баҫтырылған. Иң актив ҡатнашыусылары язаланған, шул иҫәптән Ҡазан даруғаһы башҡорттарының етәксеһе данлы Түләкәй аҫылған. Бик күп кеше һуғыш ҡырында үлгән, рус һәм ҡалмаҡ ғәскәрҙәре башҡорт ауылдарын, йәйләүҙәрен ҡыйратҡан саҡта ла күп кеше үлтерелгән, күп кеше ҡоллоҡҡа ҡыуылған.

## 4. КОЛОНИЗАЦИЯ ҺӨЖҮМЕ. 1704-1711 ЙЫЛДАРҘАҒЫ ЯУ

1681-1684 йылдарҙағы яуҙан һуң рус хөкүмәте, үҙенең рәсми рәүештә биргән вәғәҙәләренә ҡарамаҫтан, башҡорт ерен тағы ла нығыраҡ талай башлаған. Был колониаль йыртҡыслыҡ батша тәхетенә 1682 йыл ултырған Петр I-нең агрессив тышҡы политикаһына бәйле булған. Петр I Ҡара диңгеҙ һәм Балтик буйҙарын баҫып алып, Рәсәйгә сауҙа итер өсөн диңгеҙ юлы асырға маҡсат итеп ҡуйған. 1695 һәм 1696 йылдарҙа хәрби поход яһап, ул Аҙау ҡәлғәһен алған һәм Ҡара диңгеҙгә юл асҡан. 1700 йылдың авгусында Петр I бөтә ғәскәрен швед ҡәлғәһе Нарваға табан ҡуҙғатып, 21 йыллыҡ Төньяҡ һуғышын башлап ебәргән. Көнбайышта алып барылған баҫҡынсылыҡ һуғышы Уралдағы тимер һәм баҡыр рудаларын ныҡ файҙаланыу ниәтенә килтергән. Иҫке башҡорт рудниктарында әҙәм ҡуҙғатылмаған ятҡылыҡтарҙа бик һәләтләп ҡаҙна заводтары һәм хосуси заводтар төҙөлә башлаған. Иң эреләре 1701-1704 йылдарҙа төҙөлгән Невьянский, Каменский, Уктусский заводтары булған. Завод һалыу өсөн мәғдәнгә, төҙөлөш ағасына бай булған ҙур-ҙур майҙанда көслөк менән тартып алынған. Һәр яңы заводҡа 30 саҡрым алыҫлыҡтан уратып “тура һыҙыҡлы квадрат” рәүешендә ер бирелгән. Был ерҙәрҙән башҡорттар ҡыуылған, уларҙың урынына ауылы-ауылы менән рус крәҫтиәндәре һәм заводҡа беркетелгән башҡа халыҡ күсереп ултыртылған. Заводсылар бирелгән ер менән ҡәнәғәтләнмәй, урындағы рус властарының ярҙамына таянып, үҙ белдектәре менән “үҙ биләмәләрен” тағы ла киңәйткән. Шулай итеп башҡорт ерен элек талаған алпауыттар, хеҙмәт кешеләре, сауҙагәрҙәр һәм ирекле килмешәктәр сафына яңы йыртҡыс баҫҡынсы булып заводсылар өҫтәлгән.

Талау политикаһын яңыртыу башҡорт халҡының ризаһыҙлығын тағы көсәйткән. Урыны менән был ризаһыҙлыҡ ныҡлы ҡаршылыҡ күрһәтеү рәүешен ала башлаған. Башҡорттар ҡәлғә төҙөүгә ҡамасау яһаған, төҙөлөп ятҡан рус

ауылдарын ҡыйратҡан, баҫып алынған ерҙе тыныс файҙаланырға юл ҡуймаған, һалым түләүҙән, йөк ташырға ат биреүҙән, рус власының бойороғон үтәүҙән баш тартҡан һ.б, һ.б. XVII быуаттың 90-сы йылдар уртаһында уҡ мишәрҙәр* власҡа, башҡорттар йәнә яу күтәрергә әҙерләнә, тип хәбәр итә башлаған. XVIII быуат башында рус хөкүмәте һалымдарҙы ҡырҡа арттырып, һуғышты рус ғәскәренә башҡорттарҙан өҫтәмә рәүештә 5000 ат менән 1000 кеше талап иткәс, халыҡтың ризаһыҙлығы һуңғы сиккә еткән. Бер үк ваҡытта хөкүмәт "прибыльщик" тигән үҙенә башҡа чиновниктар билдәләгән, улар яңынан-яңы һалымдар уйлап сығарып, халыҡтан түләтергә тейеш булған. Шул "прибыльщик"тарҙың икәүһе 1704 йылда һалдаттар эйәртеп Өфөгә килгән дә, волостарҙан выборныйҙар йыйып, 72 "төшөм статьяһы" тәҡдим иткән. Уның буйынса башҡорттар, элекке яһык-һалымдарҙан башҡа, хәҙер солоҡ һәм умарта, мунса, туй, түләгән ҡалым, һуйған тире, дуға, ҡамыт, мейес, тирмән, күпер, мәке, мәсеттәге имам, намаҙға һәм баҙарға барған һәр кеше һ.б, һ.б. өсөн һалым түләргә тейеш булған.[32] "Төшөм статьяларында" шулай уҡ башҡортто яйлап суҡындырыуға килтерә торған талаптар ҡуйылған. Дин халыҡты буйһондороу юлында иң ышаныслы сараларҙың береһе булған, шуға күрә рус хөкүмәте был өлкәлә бик ныҡышып үҙ политикаһын бойомға ашырырға тырышҡан. Ул башҡорттарҙан мәсетте сиркәүгә оҡшатып һалырға, мәсет эргәһендә зыярат яһарға, дини йолаларҙы христиандарҙыҡына яҡынайтырға, никахты рус побы алдында ғына уҡырға талап иткән. Мәсеттәргә, имамдарға, ғибәҙәт ҡылған бөтә башҡортҡа өҫтәмә һалым һалыу ҙа баяғы суҡыныуға ыңғайлатыр өсөн эшләнгән.

---

* Мишәрҙәр (русса: мещеряки) –туранан-тура Алтын Урҙа татарҙарынан килә. Уларҙың исеме Мещералағы "Мещерский городок" тигән ҡаланан алынған. Был ҡаланы Василий III 1452 йылда тоғро хеҙмәт иткәндәре өсөн Оло Мөхәмәттең Ҡасим менән Яҡуп тигән уландарына биргән. Ҡасим менән Яҡуп 1446 йылда үҙ сиреүҙәре менән Ҡазан ханы Мәхмүтектән ҡасып, Мәскәү кенәзлегенә килгән булған. Һуңынан шул «мещеряк» тигән дөйөм исем менән Алтын Урҙа һәм ундағы оло сыуалыштар заманында Мәскәү кенәзлегенә барып эләккән һәм Ҡазан менән Әстрхан ҡолағандан һуң Урта Волганың уң яғына сыҡҡан нуғайҙар ҙа (шул уҡ Алтын Урҙа татарҙары) аталып йөрөй башлаған. Мишәрҙәр ("мещеряктар") хеҙмәтсе татар сифатында Башҡортостанға XVII быуатта (8 ауыл) һәм XVIII быуатта (127 ауыл, һәр ауылда 21-22 өй) күсә башлаған. XVIII быуат башында мишәрҙәрҙең барыһы ла хәрби хеҙмәткә ылыҡтырылып, һалым түләүҙән ҡотҡарылған (1747 йылға тиклем) һәм улар башҡорт яуҙарын баҫтырыуҙа, башҡорттарҙы буйһондороуҙа батша хөкүмәтенең тоғро ярҙамсыһы булып киткән. Улар башҡорт яуҙарының бик күп етәксеһен, шул иҫәптән Салауатты, тотоп биргән.

[32] Материалы, ч. I. М.-Л., 1936, 119-сы бит.

Яңы һалым һәм талаптар тураһында тыңлап бик асыуы килгән башҡорттар “прибыльщиктар”ҙы тотоп туҡмаған да өйҙәренә таралышҡан. Быға яуап итеп, Ҡазандан А.Сергеев тигән комиссар етәкселегендә ике һыбайлы, дүрт йәйәүле полктан торған каратель экспедицияһы ебәрелгән. 1705 йылдың февралендә рателдәр Минзәләгә килгән, шунан һуң юл ыңғайында кешеләрҙе ҡулға алып, аҫып-киҫеп, ауылдарҙы тар-мар ҡыйратып, халыҡтың ҡотон алып, Өфөгә табан йүнәлгән, Өфөгә килгәс, Сергеев ҡулға алынған кешеләрҙе төрмәгә япҡан, аяуһыҙ язалаған. Ул дүрт даруғанан вәкилдәр йыйып, сафҡа ҡуйырлыҡ егерме мең ат таптырырға бойорған. Ундай бойороҡто үтәр малдары юҡ икәнен әйткәс, Сергеев бөтә йыйылған кешене һуҡтырған, ҡаты туҡмағандан өс кеше үлгән. Үлмәй ҡалған выборныйҙарҙы һәм ҡаланан абайһыҙ тотолған башҡорттарҙы ул таяҡ менән туҡмап, иҫтән яҙҙырғансы араҡы эсергән, шунан ут менән өткән. Шундай язанан Өфөнөң үҙендә генә туғыҙ кеше үлгән. Ошо эштәрҙән һуң кárателдәр халыҡты таларға, язаларға, ҡырырға Нуғай һәм Ҡазан даруғаларына сығып киткән. Был ҡанһыҙлыҡ башҡортта ҡаты нәфрәт уятып, ҡорал алырға мәжбүр иткән.

Хәрби хәрәкәт 1705 йылдың яҙ башында башланған, һәм көсәйә килә, Тубылдан Волгаға, төнъяҡ сиктәрҙән көньяҡҡа тиклем бөтә Башҡортостанды солғап алған. Шул мәлдән ете йыл буйына колонизаторҙарға тынғы булмаған.

Яу башлығы булып Нуғай даруғаһы Бөрйән волосының тарханы Алдар ҡалҡып сыҡҡан һәм ул иң ныҡлы көрәшсе, иң таныҡлы етәксегә әйләнгән. Яуҙа шулай уҡ Ҡазан даруғаһынан Дүмәй менән Күсем, Нуғай даруғаһынан Иман батыр, Себер даруғаһынан Миңдеғужа ҙур етәксе булып дан алған. Яу башлыҡтары тәүҙән үк рустарҙың колониаль бойондороғонан ҡотолоп, үҙ аллы дәүләт ҡороу маҡсатын ҡуйған. Улар башҡорт тарханы Моратты Башҡортостан солтаны итеп иғлан иткән, шуның менән башҡорттоң үҙ хан нәҫелен тергеҙергә уйлаған.

Башҡорт ваҡиғалары ҡыҙған саҡта, 1705 йылдың йәйендә, Әстрхан халҡы баш күтәргән. Төнъяҡ Кавказда ла тыныслыҡ булмаған. Шул хәлдә Петр I төрлө вәғәҙә менән башҡорттарҙы тынысландырырға уйлаған һәм Әстрхандан Ҡазанға

фельдмаршал Б.П.Шереметевты ебәргән. Шереметев Ҡазанға килеп, төрмәләге башҡорттарҙы сығарған, яу башлыҡтарын өгөтләү өсөн илсе ебәргән. Был “яҡшылыҡты” күреп, күп башҡорт батша вәғәҙәһенә ышанған һәм үҙ маҡсатына ҡоралһыҙ саралар менән ирешергә уйлаған. Улар батша исеменә ғарызнамә яҙып, Дүмәй етәкселендә һигеҙ кешене Мәскәүгә ебәргән. Ләкин 1706 йылдың йәйенә Әстрхан болаһы баҫтырылған, хәл еңеләйгән. Шуның өсөн Петр I ғарызнамәне ҡарап, үҙ вәғәҙәләрен үтәй урынына, барған делегацияны Ҡазан властарына тапшырған. Ҡазанда Дүмәйҙе оҙаҡ язалағандан һуң аҫҡандар, ҡалғандарын төрмәгә япҡандар. Делегация ағзаларына ҡылған йыртҡыслыҡ башҡорттарҙың сиктән тыш асыуын көсәйткән, батшаға ышанғандары ла тыныс юл менән ҡаршылыҡты хәл итеүҙән өмөтөн өҙгән, бөтә халыҡ бер күңелдән көрәш байрағы аҫтына баҫҡан.

Колонизаторҙарға ҡаршы яңғыҙ көрәшеү бик ауыр элекке яуҙарҙың тәжрибәһенән белгән башҡорттар бик тырышып яуҙаш эҙләгән. Шул маҡсат менән 1706 йылда көҙ Морат етәкселегендә Төньяҡ Кавказ, Ҡырым һәм Төркиәгә илселек иткән. Ҡырым ханы менән төрөк солтаны башҡортҡа ярҙам күрһәтеүҙән баш тартҡан, ә Төньяҡ Кавказ халҡы ыңғай булған. Һис юғында шул көстө файҙаланмаҡсы булып, 1708 йыл башында Морат унда яу күтәргән. Төньяҡ Кавказ халҡының берләшкән ғәскәре һәм Моратты оҙатып йөрөгән ғәскәри башҡорт төркөмө һөжүм итеп Терек ҡалаһын алған, ҡала гарнизонының ҡалдығы кремлгә инеп бикләнгән. Баш күтәреүселәр кремлде ҡыйратҡас, Әстрханға барып, унан башҡорт яуына ҡушылмаҡ булған. Ләкин ҡалмаҡтарҙан хәбәр алған Әстрхан воеводаһы П.М.Апраксин Терекка полковник етәкслегендә 1200 һалдат һәм 650 Әстрхан татарын ебәргән. Уларға Аюҡа тайшаның 3000 мең ҡалмағы ҡушылған. Шул ғәскәр баш күтәреүселәрҙе еңеп, яраланған Моратты ҡулға эләктергән. Уны Ҡазанға ебәргәндәр. Ҡазанда Моратты аяуһыҙ язалап, тимер ырғаҡҡа ҡабырғаһынан аҫҡандар. Морат һәләк булғас, Алдар яуҙаш эҙләп ҡарағалпаҡтар менән һөйәшә башлаған һәм уларҙың хәрби ярҙамы өсөн башҡорт тәхетенә ҡарағалпаҡ ханының туғанын ултыртырға риза булған. Шул уҡ ваҡытта Алдар

Нуғай даруғаһының башҡорто Хажиҙы йәшерен рәүештә ханлыҡҡа әҙерләп һәр ваҡытта үҙе янында бергә йөрөткән. Ҡарағалпаҡтың тәхет дәғүә иткән кешеһе башҡортҡа әллә ни ярҙам итмәгән. Ул 1709 һәм 1711 йылдарҙа Башҡортостанға килеп, үҙенең ғәскәри төркөмө менән бер нисә яуҙа ҡатнашҡан да китеп юҡ булған. Башҡорттар башҡа яуҙаш таба алмаған. Яҡшы ҡоралланған регуляр хөкүмәт ғәскәренә һәм уның яҡлыларға ҡаршы башҡорттар әҙ көс менән үҙҙәре генә һуғышҡан. Шуға ҡарамҫтан, улар иҫ киткес батыр булған, яуҙың ҡайһы бер осоронда рус хөкүмәтенә һәм урындағы власть вәкилдәренә ҙур ҡурҡыу һалған.

1707 йылдың декабрь урталарында Башҡортостандағы ҡала һәм ҡәлғәләр араһында элемтә өҙөлгән, күбеһе ҡамалған. Өфө ҡалаһы ла ҡамауҙа ҡалған. 1708 йылдың февралендә башҡорт ғәскәрҙәре Ҡазан менән Волганан утыҙ саҡрымда булған, бер үк ваҡытта Башҡортостандың үҙендә лә ҡыҙыу һуғыш алып барған. Колонизаторҙар бик хәүефле хәлгә ҡалған. Шуның өсөн улар башҡорттарға килешеү тураһында һөйләшергә тәҡдим иткән. Яуызын барын һиҙмәгән бер ҡатлы башҡорт был тәҡдимгә ышанып, ризалыҡ биргән һәм ғәскәренең һөжүмен туҡтатҡан. Һөйләшкән арала батша хөкүмәте Ҡазанда бик ҙур ғәскәр туплаған, Ҡазан татарҙарын йәлеп иткән, рус алпауыттары һәм крәҫтиәндәренән өҫтәмә ирекле төркөмдәр йыйған һәм бөтә булған шул көс П.И.Хованский етәкселегендә 22 февраль көнө һөжүмгә күскән. Көтөлмәгән ҡаты һөжөмдән башҡорттар сигенергә мәжбүр булған.

Рус хөкүмәте халыҡты бөтөрөү өсөн һуғышҡан. Ул ғәскәренә һәм ирекле төркөмдәргә һис бер йыртҡыслыҡтан тартынмаҫҡа ҡушҡан. Петр I Хованскийға: “... үлтерергә, тотҡан ерҙә аҫырға”, “ысын дошман һымаҡ ҡырырға”, “бөтә яҡлап ҡотон алырға”, - тип бойороҡ биргән.[33] Каратель С.Аристов “ун йәштән өлкән башҡорттоң башын киҫергә, ун йәштән кесеһенең эсен ярырға” бойорған.[34] Каратель ғәскәрҙең ҡанһыҙлығы сиктән ашҡан, унан яман ирекле төркөмдәр шашҡан. Улар башҡорт ауылдарын ҡыйратып яндырған, мөл-мөлкәтте талаған,

---

[33] ЦГАДА, ф. 248, кн. 101, л. 588; шунда уҡ, ф. 199, № 140, ч. 16, д. 7, л. 9 об.
[34] ЦГАДА, ф. 9, оп. 2, отд. 1, кн. 18, т. 1, с. 241 об.

халыҡты тотош ҡырған. Иреклеләрҙән татарҙар ҙа ҡалышмаған, яу башланғандан бирле улар батша яғына тоғро хеҙмәт иткән, ҙур ихласлыҡ менән башҡортто бөтөрөргә ярҙам иткән. 1683 йылдағы Һымаҡ, рус хөкүмәтенә ҡалмаҡтар ҙа ҙур хеҙмәт күрһәткән.1708 йыл йәй ҡалмаҡтар ун меңлек ғәскәр менән Башҡортостанға баҫып ингән дә Ыҡ йылғаһы башында иҫ киткес яуызлыҡтар эшләй башлаған. Улар бик күп ир-ат, ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаны үлтергән, әсиргә алып киткән, иҫәпһеҙ мал-мөлкәтте талаған. Икенсе тапҡыр ҡалмаҡтар 1710 йылда йәй килеп баҫҡан һәм йәнә күп яманлыҡ ҡылған. Был баҫҡындар башҡорттоң ҡарыуын алған. Ләкин ҡыҙыу һуғыш туҡтамаған, 1711 йылдың аҙағына тиклем барған. 1712 йылда ла әле тыныслыҡ булмаған.

Башҡорт яуы уңышҡа өлгәшә алмаған. Шуға ҡарамаҫтан, рус хөкүмәте колониаль иҙгенлекте бер аҙ йомшартырға, яңы һалынған һалымдарҙы бөтөрөргә булған. Был бәләкәй генә еңеллек, әлбиттә, ете йыллыҡ яуҙағы иҫәпһеҙ ҡорбандарҙы, сикһеҙ ғазаптарҙы саҡ ҡына ла аҡламаған. Ләкин бит башҡорттар ул еңеллек өсөн көрәшмәгән. Улар азатлыҡ өсөн көрәшкән.

## 5. ЯҢЫ КОЛОНИАЛЬ ҺӨЖҮМ.
## 1735-1740 ЙЫЛДАРҘАҒЫ ҮЛЕМЕСЛЕ ЯУҘАР

1704-1711 йылдарҙағы яу шауҡымдарында колониаль иҙгенлекте бер аҙ йомшартыу оҙаҡҡа бармаған. 1715-1716 йылдарҙа рус хөкүмәте яңынан бик ҡыҙыулатып мәғдән заводтары һала башлаған. Петр I батшалыҡ иткән һуңғы ун йыл эсендә генә Башҡортостанда тағы ун дүрт мәғдән заводы һалынған. Шуның менән бергә рус хөкүмәте исем өсөн, йәнәһе, 1557 йылғы Грамотаға тоғролоҡ күрһәтеп, башҡорт ерҙәрендә ер биләүселәрҙең яҙма ризалығынан тыш завод һалыуға башҡорттар ҡырҡа ҡаршы булһа ла, урындағы рус властарының ярҙамына таянып, ерҙе баҫып алыу өсөн төрлө юл тапҡан. “Завод һалырға теләгән кешеләр... ысын ер биләүсе башҡорт исеменән төрлө килмешәк менән договор төҙөгән. Етмәһә, урындағы тау идараһы Уралдағы күп кенә ер тураһында, уның эйәһе башҡорт түгел, ә татар, ти башлаған, һәм күп кеше ер ҡырҡыу һәм мәғдән ҡаҙыуға татар договоры алып, башҡорт ерҙәрендә, уларҙың үҙ ризалығынан башҡа, завод һалған... Тау идараһынан шундай законһыҙ көслөк юлы менән башҡорт ерен алған кешеләр һатып йәки башҡаларға бүлеп ерҙе ваҡларға тырышҡан... Баҫып алғандың эҙе юйылһын һәм аҙаҡтан көслөк менән алған ерҙе үҙ исеменә яҙҙырғанда ҡаршылыҡ булмаһын өсөн, ерҙең законлы хужаһы булған башҡорттарҙы өй эсе менән үлтереп, ҡышлау һәм йәйләүҙәрен үртәп, тотош юҡ итеүҙән дә тартынмағандар”.[35]

“Закон көсөндәге әмерҙәрҙе” урындағы власть һәм эш кешеләре генә түгел, хөкүмәт үҙе лә ныҡ боҙған. Башҡорттарҙан һорамай-нитмәй ул үҙе теләгән ерҙәрҙе ҡаҙна заводтарына биргән, дәүләт алдындағы “ҙур хеҙмәттәре” өсөн айырым промышленниктарға һәм алпауыттарға өләшкән. Был енәйәттәрҙе законлаштырыу өсөн хөкүмәт үҙ өҫтөнә йөкләмәһен юҡ итә торған указдар

[35] Историческая записка... СПб., 1867, 6-7, 8-се бит.

сығарған. Мәҫәлән, 1719-1720 йылдарҙағы махсус указдары менән ул башҡорттоң үҙ ерендәге урмандан файҙаланыу хоҡуғын нығ сикләгән.

Башҡорт ерендә был заманда яңы ҡала һәм ҡәлғәләр һалыу ҙа дауам иткән. 1731 йылда нығытмалы яңы Сулман аръяғы һыҙығын төҙөй башлағандар. Шунан тыш Башҡортостандың төнъяҡ-көнсығыш, көньяҡ һәм көньяҡ-көнбайышындағы хәтһеҙ өлөшөн XVII быуат башынан башлаған хәрби һөжүмдәре менән ҡаҙаҡ һәм ҡалмаҡтар баҫып алған. Һөҙөмтәлә XVIII быуаттың 30-сы йылдарына тиклем башҡорттар үҙҙәренең бик күп боронғо ерҙәренән яҙған. Шуға күрә ер мәсьәләһе ғәмәлдә бөтә башҡорт тартышы һәм башҡорт яуҙарының төп сәбәбе булған. Башҡорттар үҙ ерҙәрен һаҡларға бөтә тырышлығын һалып, асылда үҙ аллы милли тереклек һәм милли азатлыҡ өсөн көрәшкән.

Рус дәүләтенең яңы колониаль һөжүме башланыу менән Башҡортостанда тағы ла хәл нығ ҡырҡыулышҡан. Башҡорттар 20-се йылдарҙың башында һәм уртаһында йәнә баш күтәрмәк булған. Әммә рус хөкүмәте яу башларҙай кешеләрҙе тиҙ генә ҡулға эләктереп, ҡаты язалап, ҡораллы хәрәкәт иҫкәртеп өлгөргән. Император Петр I “баш бирмәҫ башҡорт халҡын мәңгегә ауыҙлыҡлау хаҡында... айырыуса хәстәрлек күргән”.[36] Аяуһыҙ террор алып барыу һәм ҡурҡытыу менән бер ҡатарҙан, Петр I рус халҡын күбәйтеп, илде руслаштырыу юлын көслө ауыҙлыҡлау сараларының береһе, тип һанаған. Петр I-нең күрһәтмәләрен үтәп, ҡайһы бер дәүләт эшмәкәрҙәре башҡорт мәсьәләһенә ҡарата конкрет тәҡдимдәр яһай башлаған. 1724 йылда Себер һәм Ҡазан тау заводтары баш идараһының башлығы В.Н.Татищев хөкүмәт ҡарамағына башҡорттар буйынса, Башҡортостанды йыш ҡәлғәләр селтәре менән ҡапларға, башҡорттарҙы тиҙерәк суҡындырырға һ.б, һ.б., тигән тәҡдим ҡуйған. 1730 йылда Ҡазан губернаторы А.В.Волынский “Россия империяһындағы башҡорт мәсьәләһе тураһындағы записка” тигән яҙмаһын тапшырған. Был яҙмала ул күп төрлө сара билдәләгән: бер яҡтан, башҡорттар, икенсе яҡтан, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ һәм Башҡортостанға күсеп килгән бөтә халыҡ араһында дошманлыҡты көсәйтеү;

[36] Рычков П.И. История Орегбургская (1708-1750). Оренбург, 196, 4-се бит.

башҡорттарҙы Рәсәйҙең хәрби походтарында ныҡ файҙалыныу; Башҡортостанда эре регуляр ғәскәрҙәр урынлаштырыу; башҡорттарҙың һанын икеләтә кәметеү һ.б. 1734 йылда Сенаттың обер-секретары И.К.Кириллов тапшырылған тәҡдимдәрҙең бөтәһен дә иҫәпкә алып, Башҡортостанда колониаль политиканы тағы ла нығыраҡ активлаштырыу һәм рус хөкүмәтенең позицияларын көсәйтеү хаҡында киң план төҙөгән. Кириллов планында күрһәтелгән саралар:

1. Ур йылғаһы тамағында көслө хәрби гарнизон тоторлоҡ Оренбург ҡалаһын һалырға; ул ҡала Башҡортостанды ғәскәри көс менән ҡамау үҙәге һәм Урта Азияға, унан ары Һиндостанға колониаль һөжүм алып барыу терәге булырға тейеш (был һөжүм Иван IV заманында уҡ алға ҡуйылып, Петр I дәүерендә конкрет маҡсат төҫөн алған);

2. Башҡортостандың көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш сиген буйлатып ҡәлғәләр төҙөргә, шуның менән уны Рәсәй империяһының эске өлкәһенә әйләндерергә;

3. Бөтә Башҡортостанда мәғдән эҙләү эшен көсәйтеп, ҙур тиҙлек менән яңы мәғдән заводтары төҙөй башларға;

4. Ҡәлғәләрҙәге гарнизонды һәм мәғдән заводтарындағы эшселәрҙе аҙыҡ менән тәьмин итеү маҡсатында үҙ урынында игенселекте ныҡ үҫтерергә, уның өсөн Башҡортостанға рус крәҫтиәндәрен мөмкин тиклем күберәк күсерергә.

Ҡаралған бөтә эште еренә еткереү тағы бик күп башҡорт ерен тартып алыуҙан, башҡортто бөлдөрөүҙән башҡа һис ни бирә алмаған. Шуға ҡарамаҫтан, хәҙерге рус тарихсылары, шул сараларҙа ҙур прогрессив башланғыс булған, башҡоттар, йәнәһе, шуны аңламаған, тип бара. “Уларҙың әйтеүенсә, “был саралар ошо төбәктә етештереү көстәрен үҫтереүгә, урындағы халыҡтың йәшәү шаттарын яҡшыртыуға, Башҡортостанды бөтә илдең дөйөм хужалыҡ әйләнешенә ылыҡтырыуға, рус һәм башҡорт халыҡтарының үҙ-ара мәҙәни бәйләнешен нығытыуға ярҙам иткән”.[37] Был һүҙҙәрҙең бөйөк руссылыҡ рухы менән һуғарылғаны асыҡтан-асыҡ күренеп тора. Бөйөк руссылыҡ күҙлеге аша был

[37] Устюгов Н.В. Башкирское восстание 1737-1739 гг. М.-Л., 1955, 19-сы бит.

тарихсылар Башҡортостанды айырым колониаль ил итеп түгел, ә үҙ дәүләтенең бер өлөшө итеп күрә. Объектив фекер йөрөткән һәр кеше төбәктә етештереү көстәрен үҫтереүҙән дә, Башҡортостанды Рус дәүләтенең дөйөм хужалыҡ әйләнешенә ылыҡтырыуҙан да колониаль башҡорт халҡы һис нәмә алмағанын аңларға тейеш. Бөтә был нәмә колонизаторҙар файҙаһына ғына, рус йәмғиәтенең экономикаһын үҫтереүгә генә хеҙмәт иткән, ә игенселек һәм малсылыҡ өсөн иң уңайлы ерҙәренән ҡыуылған башҡорттар төпһөҙ бөлгөнлөккә, шыпа аслыҡка, дусар ителгән һәм шул хәл һуңғараҡ йән өҙгөс реаллеккә әйләнгән. Ул саралар башҡорттарҙы рус халҡы менән мәҙәни бәйләнешкә лә килтерә алмаған, ә, киреһенсә, рустың бөтә нәмәһенә ҡарата хас дошманлыҡ ҡына уятҡан. Файҙалы мәҙәни бәйләнеш ирекле халыҡтар араһында ғына булырға мөмкин.

Үрҙә аталған тарихсылар Кириллов планың "прогрессив" әһәмиәте турһында һөйләгәндә юрамал уны тотош күрһәтмәйҙәр. Ә унда шундай саралар ҙа ҡаралған:

5. Башҡорттоң һанын нык кәметергә, унын өсөн төрлө яҡка таратырға, хәрби походтарҙа киң файҙаланырға һәм дә ҡаҙаҡ менән ҡалмыкты ҡотортоп, өҙлөкһөҙ сапҡын яһатып, аяуһыҙ ҡырҙырырға;

6. Башҡортостан ерендә һан яғынан рус элементының өҫтөнлөк алыуына өлгәшергә;

7. Башҡорт феодалдарын һатып алып, рус властарының терәгенә әйләндерергә;

8. Ҙур тырышлыҡ менән башҡорттарҙы суҡындырыу эшен алып барырға.

Был саралар, үрҙәгеләре менән бөтәһе бергә, рәсми рус политикаһының маҡсатын асҡан: Башҡортостанды хужалыҡ йәһәтенән тотош үҙләштереп, колонизацияны тамамлау; башҡортто һан яғынан, хәрби, экономик, политик яҡтан тамам көсһөҙләндереп, киләсәктә ҡабат баш күтәрә алмаҫ хәлгә төшөрөү.

1734 йылдың май башында императрица Анна Иоановна Кириллов планын раҫлаған. Планды бойомға ашарыу өсөн "Ырымбур экспедицияһы" тигән атама менән махсус экспедиция ойошторорға ҡарар ителгән. Ырымбур экспедияһының

башлығы итеп Кириллов ҡуйылған, шул уңай менән уға “статский советник” дәрәжәһе бирелгән. Кирилловтың ярҙамсыһы итеп татар мырҙаһы А.И.Тевкелев билдәләнгән, ул полковник дәрәжәһе алған. Экспедиция етәкселәренә сикләнмәгән хоҡуҡ бирелгән. Императрицаның махсус указы буйынса дәүләт ойошмалары һәм вазифа кешеләре Кииллов менән Тевкелевҡа һәр яҡлап ярҙам күрһәтергә тейеш булған. Экспедицияны һаҡлар өсөн биш меңгә яҡын яҡшы ҡоралланған ғәскәри берәмек тәғәйенләнгән. Шул уҡ ваҡытта хөкүмәт тағы ла ике йөҙлөләнеп, башҡорттарҙың боронғо үҙ ерҙәренә аҫаба булыу хоҡуғын тоғро һаҡларға вәғәҙә биргән.

Экспедиция әҙерләнгәнен башҡорттар Петербургтағы Туҡсура мулланың бөтә башҡортҡа исемләп яҙған хатынан белгән. Туҡсура үҙенең хатында, рустар башҡорттоң бөтә ерен баҫып алырға, уларҙы бөтә хоҡуҡтан мәхрүм итергә уйлай, тип яҙған һәм Ырымбур ҡалаһын һалыуға бөтә көс менән ҡаршы торорға өндәгән. Шул хәбәрҙе алғас, башҡорттар тиҙ генә йыйын йыйып, Ырымбур экспедияһын бара торған еренә үткәрмәҫкә ҡарар иткән. Йыйындың ҡарарын бөтә дүрт даруғаның башҡорто хуплап ҡабул иткнә.

1735 йылында башҡорттар яңы йыйын йыйған һәм йыйын исемен Ырымбур экспедицияһының маҡсаты тураһында аңлатма алыр өсөн Өфөгә ике вәкил ебәргән. Ләкин рус властары үҙ эшен төп халыҡ менән килешеп эшләргә уйламаған: килгән вәкилдәрҙе бик нығ туҡмап, төрмәгә ташлаған. Был хәлдән һуң башҡорттар императрицаның үҙенә барып һөйләшергә паспорт алыу өсөн тағы ике вәкил ебәргән. Өфө властары бер вәкилде үлтергән, икенсеһен сыбыртҡы менән һуҡтырып, төрмәгә ырғытҡан. Кириллов йыйында ҡатнашҡан бөтә кешене шулай итмәксе булып, береһен дә ҡалдырмай тотоп килтерергә бойороҡ биргән. Башҡорттарға ҡорал тотоп көрәшкә ҡалҡыуҙан башҡа сара ҡалмаған.

1735 йылдың 1 июлендә Нуғай даруғаһының Килмәк абыз етәкселегендәге ҡораллы төркөмө экспедияцияның баш өлөшөнә ҡушылырға барған Вологодский драгун полкын ҡыйратҡан. Башҡорттоң Аҡай тигән икенсе етәксеһе Ҡазан даруғаһының ғәскәри төркөмө менән килеп, экспедицияның алдан барған төп өлөшөнә арҡыры төшмәксе булған, ләкин уңышҡа өлгәшә алмаған. Туптарҙан

атып башҡорттарҙы сигендергән дә, экспедиция Ур йылғаһына табан юлын дауам иткән. Июнь аҙағында Себер даруғаһының Йосоп батыр етәкселегендә башҡорттар драгун һағы аҫтында Ырымбур экспедицияһына аҙыҡ алып китеп барған 1084 арбалы ылауҙы ҡыйратҡан. Шулай итеп Башҡортостанда көслө яу ҡупҡан.

Яуға ҡалҡҡан башҡорттарға хөкүмәт ғәскәрҙәре менән генә түгел, бөтә ерҙә башҡортҡа ҡаршы дәррәү күтәрелгән рус, татар, мишәр, типтәр, сыуаш, мари һәм башҡа килмешәктәрҙең ирекле төркөмдәре менән һуғышырға тура килгән. Иҙелгән, ирекһеҙләнгән һәр халыҡтан сыҡҡан кеүек, башҡорттан килеп сыҡҡан һатлыҡ феодалдар ҙа хөкүмәт яғында йөрөгән. Шунан тыш, баш күтәргән башҡорттарға рус хөкүмәте ҡотортоуы менән ҡаҙаҡтар өҙлөкһөҙ сапҡын яһап торған. Дошмандар, ҡоторған эт өйөрө һымаҡ, төрлө яҡтан башҡортҡа ташланған. Шул хәлдә башҡорттар Ырымбур экспедияһының эшенә тотҡарлыҡ яһай алмаған: 15 августа Ырымбурға нигеҙ һалынған. Ырымбурҙан һуң Башҡортостандың уртаһында һәм сиктәрендә йәһәтләп ҡәлғәләр төҙөү башланған. 1735-1736 йылдарҙа ғына 20-нән артыҡ ҡәлғә төҙөлгән.

Башҡорт яуын баҫтырыу өсөн рус хөкүмәте 1735 йылда махсус Башҡорт эше комиссияһы ойошторған, уның башлығы итеп генерал-лейтенант А.И.Румянцев ҡуйылған. Башҡорт яуына ҡаршы ебәрелгән бөтә ҡораллы көс уға буйһондоролған. Румянцев өҫтәмә ғәскәр һорап мөрәжәғәт иткән. Уның мөрәжәғәте ҡәнәғәтләндерелгән. Карателдәр башҡортто баҫтырыу өсөн иң аяуһыҙ саралар ҡуллана башлаған.

1735 йылдың 7 сентябрендә Кириллов яңы һалынған Ырымбур ҡалаһынан кproperлеk походына сыҡҡан. Һаҡмар ҡәлғәһендә ун туғыҙ башҡортҡа хөкөм сығарған: берәүһен ҡаҙыҡҡа ултыртҡан, икенсеһенең дүрт һанын саптырған, биш кешене аҫтырған, икәүһен “күҙләмә” өсөн иҫән ҡалдырған. Һаҡмар ҡәлғәһенән ул ары киткән һәм ун көн эсендә егерме бер ауылды яндырған, ул ауылдарҙың кешеләрен тотош үлтергән, һаҡлыҡ аҙыҡтарын алған, алып китә алмағанын юҡ иткән.

1735 йылдың декабрь аҙағында Тевкелев каратель отряды менән Әй тамағына табан йүнәлгән. 1736 йылдың 19 ғинуарында был отряд Һөйөнтөҫ ауылына барып еткән. Шунда Тевкелев, баш күтәреүселәр юлдағы тау ҡыҫығында уның отрядына һөжүм итергә йыйына икән, тип хәбәр һалған. Ошоға яуап итеп, Тевкелев үҙенең отряды торған Һөйөнтөҫ ауылы тыныс кешеләрен йыртҡыстарса ҡырған. Ауылдың бөтә халҡын, 1000-гә яҡын кешене, ҡатын-ҡыҙ һәм бала-сағыны ҡалдырмай үлтереп бөткән. Шунан башҡа, 105 кешене аҙбарға бикләп, терелəй яндырған.* Ошо ҡот осҡос енәйәттең шаһиты П.И.Рычков: “… Уларҙың үҙәк өҙөп ҡысҡырышыуынан һәм мылтыҡ тауышынан унда йән тетрәткес мәсхәрә булды”, “иң ғәжәбе, бурҙарҙың күбеһе утта янған көйө яман әрләшә-рәләшә амбар эсендәге һөңгөләрҙе шунда торған драгунға ташлап, бер нисәһен яраланы”, - тип яҙған.[38] Кешелек тарихында һирәк осрай торған был ваҡиға шулай булған.

Һөйәнтөҫтәге ҡанлы мәхшәрҙән һуң Тевкелев бөтә ерҙә лә шундай уҡ йыртҡыслыҡ ҡылырға тотонған. Ҡыҫка ғына ваҡыт эсендә ул Себер һәм Юса даруғаларында 51 ауылды яндырған, ныҡ кәметеп алынған мәғлүмәттәр буйынса, ололар һәм балаларҙан 2000 кешене үлтергән. Румянцев карателдәрҙең бөтәһенә лә Тевкелевтан өлгө алырға әмер биргән. Ләкин карателдәр башҡортто ҡурҡыта алмаған. Көрәш аяуһыҙ төҫ алынған. Баш күтәреүселәр йән аямай көрәшкән. 1736 йылдың февралендә улар Себер даруғаһынан карателдәрҙе тотош ҡыуып сығарған. Өҫтөнлөк башҡорттар ҡулына күскән.

Шул мәлдә, 1736 йылдың 11февралендә, башҡорт яуының ныҡ көсәйеүенән ҡурҡып, рус хөкүмәте указ ҡабул иткән. Был указ башҡорттарҙы ҡоралды көрәш алып барыу мөмкинлегенән яҙҙырып, ҡаршылыҡ күрһәтеү теләгенән ваз кисереү маҡсатын ҡуйған.

Указ буйынса яу башлыҡтарына үлем язаһы биреү, иң актив ҡатнашҡан кешеләрҙе һөргөнгә ебәреү, ҡалғандарынан штраф итеп ат түләтеү талабы ҡуйылған. Яуапҡа тарттырылған баш күтәреүселәрҙең ғаиләһе Башҡортостандан

---

* Халҡын үлтереп бөткәс, был ауылға рус крәҫтиәндәре килеп ултырып, ергә хужа булған. “Верхнее Суяново” һәм “Нижнее Суяново” тигән рус ауылдары әлеге көндә лә бар.

[38] Рычков П.И. История Оренургская (1730-1750). Оренбург, 1896, 20-се бит.

ситкә оҙатылып, ҡоллоҡҡа һатылырға һәм көсләп суҡындырылырға тейеш булған.

Указ волость старшиналарын һайлап ҡуйыу тәртибен бөтөрөп, колонизаторҙарға тоғро кешеләр араһынан билдәләп ҡуйыу тәртибен индергән. Старшиналарҙың эшенә ныҡ күҙәтеү ҡуйылған, улар эргәһенә һүҙ еткереп тороу өсөн мишәрҙәрҙән писарь билдәләнгән.* Ләкин был талап яраҡлы старшина табыуҙы ҡыйынлаштырған. Шуның өсөн В.Н.Татищев: "... Тоғролар араһында һәләтлеләр юҡ", - тип әйтергә мәжбүр булған.[39]

Указ башҡорттарға йыйын йыйыуҙы тыйған, тик Өфө янындағы Чесноковка тауында ваҡ мәсьәләләр буйынса һәм рус администрацияһының күҙәтеүе аҫтында бер генә яҙғы йыйын үткәрергә рөхсәт биргән (1737 йылдың 9 июнендә сыҡҡан указ менән ул йыйынды үткәреү мөмкинлеге лә ныҡ ҡыҫылған). Указ шулай уҡ башҡорттоң көндәлек тормошон ныҡ күҙәтеү аҫтына алырға ҡушҡан, һәр урындың үҙенән башҡа билдәләнгән тар сигенән ситкә сығып йөрөүҙе тыйған. Был саралар башҡорттоң милли берҙәмлеген тотош ҡыйратыуға, эске үҙ идараһын юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән булған.

Указ тағы ҡабатлап башҡорттарға тимерлек тотоуҙо тыйған (тәүге тапҡыр тимерлек тотоу XVI быуатта русҡа ҡушылғас та тыйылған) һәм башҡортто ҡоралһыҙландырырға ҡушҡан.

Указ башҡорттоң бөтә булған уҡымышлы кешеләрен ҡаты күҙәтеү аҫтына алырға, дин хеҙмәткәрҙәренең һанын кәметергә, уларҙан тоғролоҡ антын алырға (сөнки "... ундай мосолман уҡымышлылары һәм дин кешеләре иң яман "бур" һәм "яуыз әҙәм" булған"), мәсет һәм мәктәптәрҙе батшаның махсус указы буйынса ғына һалырға ҡушҡан.

Указ башҡорт ерҙәрен алыуға ирек ҡуйған, ерҙең колонизаторҙар ҡулына күсеүен законлаштырған. Сөнки яһаҡ алыр өсөн ер һатыуҙы тыйып килгән тәртип Башҡортостанға ағылған алпауыт һәм сауҙагәрҙәргә ҡамасау яһай башлаған.

---

* Рустар мишәр менән татарҙы һәр ваҡыт шымсы итеп файҙаланған.

[39] ЦГАДА. Дела Правит. Сената по Кабинету (Артабан: По Кабинету), кн. 106/1183, 92-се бит.

Указ мишәрҙәргә нәҫелдән-нәҫелгә эйә булып яһаҡһыҙ файҙаланыу өсөн үҙҙәре баҫып килеп ултырған башҡорт ерҙәрен биргән, типтәр һәм әтәмбәйҙәрҙе* ер һалымынан ҡотҡарған, шулай итеп уларҙы башҡорт халҡын ҡырыуҙа ихлас ҡатнашҡандары өсөн бүләкләп ҡуйған.

Указ, элекке кеүек үк, Башҡортостандан ситкә таратыу, хәрби хеҙмәттә һәм хәрби походтарҙа ныҡ файҙаланыу юлы менән башҡорт халҡының һанын ҡырҡа кәметеү маҡсатын ҡуйған. 1735 йылда Кабинетҡа ебәргән хатында башҡорттар тураһында Кириллов: "... унда (хәрби хеҙмәттә) йөрөгән саҡтарында ҡатындары ауырһыҙ ҡалыр, ә үлтерелгәндәре бөтөнләй ҡайтмаҫ", - тип яҙған. Кириллов "метрополия өсөн Башҡортостандағы колониаль проблеманы иң уңайлы хәл итеү юлы – башҡорт халҡын яйлап үлтереп бөтөрөрлөк шарт булдырыу тип һаналған".[40] Кириллов позицияһы хөкүмәт политикаһы менән тотош тап килгән. Шуның менән бергә указ Башҡортостанға рус халҡын, һөргөнгә ебәрелгән кешеләр иҫәбенә булһа ла, мөмкин тиклем күберәк күсерергә тәҡдим иткән.

Указ тағы бер тапҡыр ҙур гарнизонлы йыш ҡәлғәләр селтәре төҙөү һәм Башҡортостан ерендә регуляр ғәскәр берәмектәрен ныҡ күбәйтеү кәрәклегенә баҫым яһаған.

Указда билдәләнгән саралар рус хөкүмәтенең 1667 йылғы Грамотала алған йөкләмәләренән тулыһынса баш тартып, башҡорттарҙы тамам ҡоллоҡҡа төшөрөргә тырышҡанын ғына түгел, ә башҡорт халҡын үҙ ерендә азат йәшәргә теләгәне өсөн генә ҡаты геноцид политикаһы менән тотош юҡ итергә юл алғанын күрһәтә. Әммә рус хөкүмәтенә шул да әҙ күренгән. 11 февраль указынан һуң, 1736 йылдың 16 февралендә, ул тағы бер указ сығарған. Хөкүмәт унда баш күтәреүселәрҙе бөтөрөү буйынса конкрет юлдар билдәләп, "боласыларҙы һәр төрлө юл менән ҡырырға, йорт-ҡоралдарын ҡыйратырға, ә тотолған бурҙарҙы, бигерәк тә башлап йөрөүселәрен, бүтәндәргә фәһем булһын өсөн, язалап үлтерергә, ә башҡаларын, ғәйебенә ҡарап, ҡатыны, бала-сағаһы менән һөргөнгә ебәрергә: яраҡлыларын хеҙмәткә, көнсығыш ғәскәрҙәренә һәм флотҡа,

---

* Әтәмбәй (русса: бобыли) тип башҡорт ерен бер ниндәй шартһыҙ файҙаланған килмешәктәрҙең рустарҙанбашҡаһы аталған.

[40] Чулошников А.П. Восстание 1755 г. в Башкирии. М.-Л., 1940, 22-се бит.

яраҡһыҙҙарын – Рогервикта эшләргә, ә бәләкәй бала һәм ҡатын-ҡыҙҙарын үҙ илдәренә кире ҡайтармау шарты менән рус ҡалаларына таратып, теләгән кешегә бирергә, ә тороп ҡалған ҡаралды һәм игендәрен алып ғәскәргә һәм мәғәзәйҙәргә тапшырырға, ә аттарын драгун полктарына ебәрергә" әмер биргән.[41] Ошо указ буйынса егерме ике меңдек кешелек регуляр һәм иррегуляр хәрби командалар баш күтәреүселәргә ташланырға тейеш булған. Был ғәскәр һан яғынан ҡоралды башҡорттарға ҡарағанда бер нисә тапҡырға артыҡ булған.

16 февраль указын алыу менән Башҡортостандың бөтә яғына каратель командалары ебәрелгән. Иң баш дүрт каратель – Ырымбур экспедицияһының башлығы Кириллов, уның ярҙамсыһы Тевкелев, башҡорт эше комиссияһының башлығы Румянцев, Себер һәм Ҡазан тау заводтарының баш идараһы башлығы Татищев – үҙҙәренең кherателлек операциялары өсөн дүрт районды билдәләп алған: Кириллов – Нуғай даруғаһының урта һәм көньяҡ өлөшөн, Румянцев – Ҡазан даруғаһын һәм Нуғай даруғаһының көнбайыш өлөшөн, Тевкелев – Себер һәм Юса даруғаларын, Татищев – Урал арты Башҡортостанын.* 1736 йылдың март-май айҙарында был карателдәр, бик кәметеп күрһәтелгән мәғлүмәттәр буйынса, 3042 кешене үлтергән, 503 аулды яндырған, Себер даруғаһы менән Ҡазан даруғаһынан ғына (башҡа даруғалар буйынса мәғлүмәттәр юҡ) 3200 баш ат, 1000 баш һыйыр ҡыуып алып киткән, һаҡлыҡ аҙыҡ һәм бесәнде тотош юҡ иткән, башҡа бик күп мал-мөлкәтте талаған. Бүтән карателдәр һәм "ирекле" командалар тарафынан күпме кеше үлтерелгән, күпме ауыл яндырылған берәү ҙә һанамаған.

---

[41] Материалы по историиРоссии, изданные А.И.Добромысловым. Оренбург, 1900, т. 2, 200-сө бит.

* 1986 йылдың 29 апрелендә Бөтә Союз телевединиеһы В.Н.Татищевтың тыуыуына 300 йыл тулыу айҡанлы "Ватан улы" тигән документаль фильм күрһәтте. Академик Б.А.Рыбаковтың инеш һүҙендә һәм фильмдың үҙендә Татищевты Рус дәүләтенең колониаль сәйәсәтен тормошҡа ашырыуға ҙур тырышлыҡ күрһәткәне һәм "тарихи әҫәрҙәре" өсөн үҙ ватанының ысын улы тип бик ҙурланылар. Татищевтың 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт яуын баҫтырыуҙа ҡатнашҡанын, йәнәһе, ул яманлыҡ эшләгән рус администраторҙарын яуапҡа тарттырған, башҡорттарға яҡшылыҡ күрһәткән, тип бер нисә һүҙ менән маҡтап әйтеп киттеләр, ә уның башҡорттарҙы ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаһына тиклем тотоп ҡырғаны, яу етәкселәрен аяуһыҙ язалағаны тураһында бер һүҙ ҙә өндәшмәнеләр. Әгәр фильмда Татищевтың ысынға тап килеүе бик шикле булған тарихи һыҙмаларын бер ҡаҙаныш тип күрһәткән хәлдә лә, Башҡортостанда ҡылған ҡанлы эштәрен объектив рәүештә баһалаған булһалар, уны ҡан эскес палач тип белгән башҡорт халҡына, бәлки, ул хәтле әсе булмаҫ ине. Ләкин хәҙерге рус тарихсылары бөйөк руссылыҡ рухына иҫереп, рус булмаған халыҡтарҙың тойғоһо менән иҫәпләшмәй, буйһондоролған халыҡтарҙың һөйәгенән "Бөйөк Россия" нигеҙен һалған үҙ кешеләренең бөтәһен дә аҡлай һәм ҙурлай.

Әлбиттә, улар ҙа башҡортто ҡырыуҙа ныҡ тырышлыҡ күрһәткән, үҙ начальниктарынан ҡалмаған булырға тейеш.

Яҙғы ҡанлы походтарҙан һуң баш карателдәр, башҡорттоң көсө лә, күңеле лә һынды, тип ныҡ ышанып, 1736 йылдың 11 февраль указын бойомға ашырырға тотонмаҡ булған. Ләкин күп тә үтмәй, 1736 йылдың майында, бөтә дүрт даруға башҡорто йәнә ҡоралды көрәшкә ҡалҡҡан һәм көҙ бөткәнсә бөтә Башҡортостанда тынһеҙ ҡаты һуғыш барған. Тәүҙә Ырымбур экспедицияһына ҡаршы ҡуҙғалған башҡорт яуы тиҙҙән тағы милли азатлыҡ көрәшенә әйләнгән. Рус дәүләтенең хөкөмө аҫтында булғанда көслөк һәм ҡаты иҙгенлектән һис ҡотолоу юҡлығын башҡорттар белгән. Шуға күрә: "Ҡол булғансы, үлгән артыҡ", - тип улар йән аямай көрәшкән. Яуҙың икенсе дәүерендә етәксе һәм идеолог булып киткән данлы башҡорт улы Бәпәнәй 1736 йылдың 2 авгусында Татищевҡа: "... Элеккесә тотмаһағыҙ, һәләк булырға, үлергә әҙербеҙ", - тип яҙған. Ул иҫ киткес йән әсеүе менән: "... Бүтән беҙҙең барыр еребеҙ юҡ", - тип зар белдергән[42], шуның менән башҡорттоң башҡа ата-баба ере, башҡа тыуған иле юҡ икәнен аңлатҡан. Башҡорт халҡының иреккә, үҙ аллы азат тормошҡа ынтылышы шулай көслө булған.

1736 йылдың көҙөндә таланып, ҡыйратылып, тамам юҡҡа сығарылған башҡорт ауылдарында аслыҡ башланған. Карателдәрҙең береһе башҡорттар тураһында Кирилловҡа: "... Астан ҡырылалар, ҡалғандары эт-бесәй ашай, уныһы ла етешмәй", "малын ғына түгел, аяҡ-кейемдәрен дә ашап бөттөләр, бик күбе үлә", - тип яҙған.[43] Карателдәргә бик ҙур ҡыуаныс булған. Аслыҡ уларға башҡорт яуын баҫыр өсөн иң көслө сара булып күренгән. Татищев ас башҡорттарға мотлаҡ баш һалып килеү шарты менән рус ауылдарынан иген һатып алырға рөхсәт биргән, ләкин "уларға һатыу өсөн игендең бик әҙ табыла торған ерҙәрен билдләгән".[44] Башҡорттарҙың бер аҙ өлөшө баш һалып барырға мәжбүр булһа ла, күпселеге астан үлеүҙе баш һалыуҙан артыҡ күргән. Карателдәр астан ҡырылған башҡортҡа ҡаршы аяуһыҙ һуғыш алып барған. 1736 йылдың баш күтәреүселәргә ҡаршы һуғышҡан регуляр ғәскәрҙең һаны ғына 20 мең кешегә барып еткән.

---

[42] По Кабинету, кн. 56/1133, л. 423.

[43] По Кабинету, кн. 87/1164, л. 384.

[44] ЦГАДА. Дела и приговоры Правит. Сената по Оренбургской губернии, кн.8/139, л. 16.

Шуларҙан Румянцевты алмаштырған Хрущев ҡына сентябрь урталарына тиклем 13 яу башлығын язалаған (тәгәрмәстә әйләндереп үлтергән, ҡабырғаһынан ырғаҡҡа элгән, ҡаҙаҡҡа ултыртҡан, аҫҡан), 144 кешене һөргөнгә ебәргән, 505 ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаны теләгән кешегә ҡоллоҡҡа һатҡан. Татищев мәғлүмәттәре буйынса, 1736 йылдың июнь аҙағына тиклем башҡорттар ололар һәм балаларҙан 15 мең кеше юғалтҡан (аҫҡа үлгәндәрен иҫәпләмәгәндә).

Кириллов менән Хрущев 1737 йылдың яҙ Нуғай һәм Себер даруғаларының алыҫ волостарына каратель походы яһарға уйлаған. Был походтарҙа 18 мең кешелек регуляр ғәскәр ҡатнашырға тейеш булған. Уларҙың ҡарарын хөкүмәт хуплаған. Шул уҡ ваҡытта был башлыҡтар тотолған етәкселәрҙе язалауын дауам иткән. 1737 йылдың 28 февралендә Татищев етәкселәрҙән Һабан, Боҡсура, Иҫәнғолдо язалаған (тәгәрмәскә һалған, дүрт һанын сапҡан, башын сапҡан). Эре яу башлыҡтары, шул иҫәптән Аҡай менән Йосоп батыр, йә язаланған, йә төрмәгә ябылған. Килмәк абызды 1737 йылдың 5 февралендә тотҡандар.

Кириллов императрицаға, “башҡорттар аслыҡ-яланғаслыҡтан ҡырыла”, “ҙур яуызлыҡ башлауға хәлдәре юҡ”, тип хәбәр ебәреп ятҡан.[45] Ләкин ул тағы хаталанған. 1737 йыл яҙ башҡорттар тағы көрәшкә күтәрелгән. Һәләк булған юлбашсылар урынына шундай уҡ батыр юлбашсылар баҫҡан. Уларҙың араһында иң күренеклеһе, иң көсөләһө Бәпәнәй булған. 1735-1736 йылдарҙа иҫ киткес күп кеше юғалтып хәйерселек һәм бөлгөнлөктөң һуңғы сигенә етеүҙәренә ҡарамаҫтан, башҡорттар асыу һәм нәфрәттән ярһып, һаны һәм ҡоралы менән бер нисә тапҡырға өҫтөн торған дошманға ҡаршы һуғышырға көс тапҡан, һуғышып тағы һәләк булған.

Яу башлыҡтары 1737 йылдың ҡышы һәм яҙында өс тапҡыр кәңәшкә йыйылған һәм ни сара табырға белмәй аптырап, зыянһыҙыраҡ күренгән ҡаҙаҡтарҙың хан нәҫеленән хан һорарға булған, хан ебәрһә, ҡаҙаҡ, берҙән башҡорт яғына сығыр, икенсенән, үҙ аллыҡ иғлан итеүгә политик нигеҙ бирер, тип өмөт иткән. Шул өмөт менән башҡорттар, Бәпәнәйҙең аҡылы һәм ҙур дипломатик һәләте арҡаһында, кесе ҡаҙаҡ жузының ханы Әбделхәйерҙе

---

[45] По Кабинету, кн. 87/1164, л. 72 об.

күндереп, батша хөкүмәте яғында йөрөгән еренән үҙҙәренең терәге һәм яҡсыһына әйләндереп алған. Тик тәьҫирле ҡаҙаҡтарҙың көслө баҫымы аҫтында ғына Әбелхәйер бер аҙ ваҡыттан кире элекке юлына ҡайтҡан.

Себер, Нуғай, Юса даруғаарында көҙ аҙағына тиклем көслө һуғыш барған. Ҡазан даруғаһында ғына хәрәкәт һүрелә төшкән, сөнки унда Башҡорт эше комиссияһының үҙәге урынлашҡан һәм бөтә өлкәне ҡаты ҡыҫым аҫтында тотоп, регуляр хөкүмәт ғәскәрҙәренең төп көсө тупланған булған. Карателдәр һәм “ирекле” төкөмдәр башҡорт волостарында яңынан ҡоторонған, башҡорттоң унарын, йөҙәрен бер юлы үлтереп, язалап ташлаған, ни теләһә, шуны ҡылған. Ырымбур төбәгенең башлығы булып алған Татищев, “... өйҙәрен һәм әҙерләгән бесәндәрен тотош яндырырға”, тип бойороҡ биргән, Башҡорт эше комиссияһының яңы башлығы Э.Я.Соймонов 1737 йылдың ноябрендә Кабинетҡа: “... Минең команда уларҙың игенен, шулай уҡ бесәнен һәм ауылдарын тотош яндырҙы”, - тип хәбәр иткән.[46] Шулай итеп ҡоротоу арҡаһында башҡорттарҙа тағы ла аслыҡ башланған. Халыҡ ҡышҡылыҡҡа һарынан башҡа бер нәмә лә әҙерләй алмаған. Ҡорманай тигән мишәр Красноуфимскиҙа башҡорттар тураһында, “... малдарын ашап бөткәндәр, күбеһе астан үлә, ә ҡалғандары ташландыҡ тире-ярыны ашай... Килгән саҡта юлда унлап башҡортто күрҙем”, тип һөйләгән.[47] Астан үлмәһен өсөн ҡайһы кеше балаларын һата башлаған. Кириллов әйтеүенсә, ҡаты аслыҡ һәм һуңғы сиккә еткән бөлгөнлөк кенә башҡортто баш һалып килергә мәжбүр иткән, ләкин баш һалғандар һирәк булған.

Ҡыш башында бер аҙ тынып ҡалған яу 1738 йылдың ғинуарында дүрт даруғала ла ҡабаттан башланған. Апрель һәм май айҙарында һуғыш ныҡ ҡыҙған. 1738 йылдың яҙы менән йәйендә Татищев менән Соймонов бөтә яҡҡа каратель отрядтар ебәргән, һәр отряд 2500-3000 кешенән торған. Был отрядтарға ҡаршы ҙур көс ҡуйырға башҡорттарҙың инде хәле булмаған. Әммә йыш ҡына улар карателдәрҙе сигенергә мәжбүр иткән. Актив хәрәкәт 1738 йылдың көҙөндә, Бәпәнәй тотолғандан һуң, туҡтаған. Һәләкәт иҫ киткес ҙур булған. Соймонов бер

[46] По Кабинету, кн. 87/1164, л. 1017.
[47] По Кабинету, кн. 90/1167, 409-409 об.

үҙе генә 1738 йылдың июленән көҙөнә хәтлем меңдән артыҡ кешене юҡ иткән (үлтергән, язалаған, ҡоллоҡҡа тиратҡан).

Рус башлыҡтары, Башҡортостан тамам тындырылды, тип уйлаған. Татищев Ҡазанға: "... Иң хәүефле Ҡазан менән Нуғай даруғалары шул хәтле ҡыйратылды, хатта (халҡының) яртыһы ғына ҡалды, ә бүтәндәре Юса менән Себер даруғалары халҡы ул хәтле үлмәһә лә, барыһының да аты һәм малы бөттө, ауылдары яндырылды, ашар аҙыҡтары булмағандан бик күбе астан үлде", - тип хәбәр иткән һәм, башҡорттар ҡабат яу күтәрә алмаҫ инде, тип өҫтәп ҡуйған.[48]

Актив хәрәкәт туҡтағас, Татищев менән Соймонов 1737 йылдың 14 июлендә Минзәлә кәңәшмәһе билдәләгән сараларҙы ғәмәлләштерә башларға уйлаған. Ундағы саралар башҡортҡа идара итеү эшен үҙгәртеү хаҡында булған. Үҙгәртеү өсөн, беренсенән, яһаҡ түләү буйынса Башҡортостандың төрлө яғындағы ҡалаларға беркетеп, башҡорттарҙы Өфөләге бер үҙәктән тарҡатыу, икенсенән, башҡорт халҡын, атлы казак һымаҡ, хәрби ҡоролошҡа күсереп, командир вазифаһын рус хөкүмәтенә тоғро булған кешләргә биреү күҙҙә тотолған. Асылда был саралар, йыйын йыйыуҙы һәм ауылдан иркен сығып йөрөүҙе тыйған 1736 йылдың 11 февраль указы кеүек үк, башҡорттоң аралашыуына кәртә ҡуйыу һәм милли берҙәмлеген ҡыйратыу маҡсатын ҡуйған. Билдәләнгән сараларҙы атҡарыу өсөн халыҡтың иҫәбен алырға кәрәк булған. Шул ниәт менән 1739 йыл башында Башҡортостандың бөтә яғына офицерҙар етәкселегендәге иҫәпселәр ебәрелгән. Ләкин рус хөкүмәтенең маҡсатын яҡшы аңлаған башҡорт иҫәпселәргә ҡаты ҡаршылыҡ күрһәткән. "Штрафҡа берәр ат алынһа ла, һаҙаҡ-һөнгөләр әле алынмаған", тип улар яңы яу менән ҡурҡытҡан.[49] Хөкүмәт иҫәпте туҡтатырға мәжбүр булған. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорттар яңы хәрәкәткә әҙерләнә башлаған. Нуғай һәм Себер даруғаларының старшиналары бергә кәңәшләшеп, яңынан яу башларға ҡарар иткән. Уларға теләктәшлек белдереп, Юса даруғаһының башҡорттары хәбәр ебәргән. Бының сәбәбе хөкүмәт командаларының яманлығынан килгән. Башҡортостан буйлап йөрөгән хөкүмәт командалары 1737-

---

[48] Научный архив Башкирского научного ценра Уральского отд. АН СССР, ф. 3, оп. 12, д. 46, лл. 1466-1468.
[49] По Кабинету, кн. 106/1183, лл. 235-236, об 242-242 об.

1738 йылдарҙағы хәрәкәттә ҡатнашҡан кешеләрҙән штраф аты йыйыуын дауам иткән, бер үк ваҡытта улар һәләк булған, язаланған, һөрөлгән кешеләрҙең ҡатыны һәм балаларын эҙәрләп, эҙләп табып, Башҡортостандан ситкә ҡыуған. Был командалар аяуһыҙ йыртҡыслыҡ ҡылған. 1737 йылдың йәйендә башҡорттар бер нисә тапҡыр шундай командаларға ҡаршы сыҡҡан, ләкин киң хәрәкәт башлай алмаған. Яңы башҡорт яуы рустарҙың данлы юлбашсыларҙы – Бәпәнәйҙе, Көҫәп батыр менән Төлкөсураны – ҡаты язлауынан һуң ҡупҡан.* Иң аҫыл кешеләрен һәм иҫәпһеҙ күп халҡын юғалтыу әсеһенән, залимдарҙың ҡанлы хөкөмөнән түҙә алмаҫ сиккә еткән башҡорт бөтә йән асыуы менән хас дошманға ҡаршы һуңғы үлемесле һуғышҡа сыҡҡан. Ошо һуғышта күңел түрендәге иң изге хыялының, һүнмәҫ ихтыярының билдәһе итеп, улар Ҡараһаҡал тигән үҙ ханын күтәреп алған.*

Мөмкинлек буған булһа ла, Ҡараһаҡал башҡорттоң яңы хан нәҫелен башлау өсөн бик яҡшы кеше булыр ине. Ул, Бәпәнәй кеүек, ҙур аҡылға, ҙур белемгә, юлбашсы һәләтенә эйә булған, ғәрәп телен һәм бер нисә тел белгән, Ҡөрьән тәйсиренә оҫта булған, көслө, батыр яугир булып танылған. 32 йәштә генә булһа ла, ул донъяла күпте күргән: ҡол итеп ситкә һатылған, төрлө илдәрҙә йөрөгән, Мәккәгә хажға барған, шунан 1739 йылда үҙ иленә ҡайтып, бик тиҙ шөһрәт алған, алдынғы кешеләр сафына сыҡҡан.

1740 йылдың ғинуар аҙағынан Ҡараһаҡал асыҡтан-асыҡ көс тупларға тотонған. Февраль айында баш күтәреүселәр актив һуғыш хәрәкәте башлаған. Март уртаһына башҡорт яуы Себер даруғаһының күп өлөшөн, ә апрель уртаһына – Нуғай даруғаһының көньяҡ-көнсығыш өлөшөн сорнап алған. Ошо уҡ ваҡытта хөкүмәт ғәскәрҙәре бөтә яҡлап баш күтәреүселәргә ҡаршы һөжүм асҡан. Операцияла туранан-тура ҡатнашҡан хөкүмәт ғәскәрҙәренең һаны 8000 кешегә яҡын булған, ҡалған 11312 кешеһе халыҡты баҫып тотор өсөн Башҡортостандың төрлө ҡала һәм ҡәлғәләрендә торған. Баш күтәреүселәрҙә был хәтле көстөң сиреге лә булмаған. Майҙың егермеләрендә Ҡыҙыл йылғаһы буйында баш күтәреүселәр

---

* Татищев Бәпәнәйҙе иң ғазаплы язаға – тәгәрмәскә һалып, имгәтеп үлтерергә – хөкөм иткән; Татищевтың үҙ әмере буйынса һәм үҙ күҙе алдында Көҫәп батыр аҫып үлтерелгән.

* Уның исеме Юлай улы Миндеғол, Ҡараһаҡал – ҡушаматы, Солтангәрәй исеме менән хан тип иғлан ителгән.

бик күпкә артыҡ дошман ғәскәре менән ослрашҡан. Йән аямай һуғышыуына ҡарамаҫтан, башҡорттар еңелгән. Уларҙың ир һәм ҡатындарынан 400 кешеһе үлгән. 29 майҙа Яйыҡ йылғаһында карателдәр Ҡараһаҡалдың мең ярым кешелек төркөмөнә һөжүм иткән. Башҡорттарҙың күпселеге йылғанан сығып өлгәргән, өлгөрмәгән 150 кешене, олоһон, балаһын айырмай, карателдәр юҡ иткән. Шунан һуң карателдәр башҡорт төркөмө артынан ҡыуа төшкән һәм ҡанлы эшен дауам иткән. Улар бөтә кешене, йәшенә лә, енесенә лә ҡарамай, юҡ итә барған. Июнь башында Тубыл йылғаһынан 110 саҡрым ерҙә карателдәр Ҡараһаҡал төркөмөн ҡыуып еткән. Тағы бик күпкә артыҡ дошман менән аяуһыҙ һуғыш булған. Һуғышта 300 башҡорт үлгән. Төркөмдөң ҡалғаны Ҡараһаҡал менән далаға сығып киткән, ә карателдәр таралышҡан кешеләрҙе үлтереп, бер нисә көн буйы тирә-яҡты ҡыҙырып йөрөгән.

Июнь уртаһынан батша ғәскәрҙәре Себер һәм Нуғай даруғаларының тау-урманы араһына ҡасҡан баш күтәреүселәрҙе бөтөрөү операцияһына тотонан. Бөтә яҡтан ҡамап, татар баҫҡыны заманындағы ысул буйынса карателдәр өс ярым буйы башҡорттарҙы тотош ғаиләһе менән бергә ҡырып йөрөгән. Уларҙың ҡалдыҡ-боҫтоҡ мал-мөлкәтен, ауылдарын, сәскән игендәрен яндырғандар. Операцияла 18 мең кешелек ғәскәр ҡатнашҡан.

Баш күтәргән башҡорттарҙы шулай һыпырып ҡырыу Соймоновҡа һәм Ырымбур төбәгенең яңы башлығы булып килгән суҡынмыш татар, Нуғай кенәздәренең нәҫеле В.А.Урусовҡа әҙ күренгән. Улар башҡорт халҡының быуындан быуынға ҡанын терәтерлек ҡурҡыу һалырға уйлаған. Шуның өсөн 1740 йылдың 25 авгусында Урусов көсләп йыйылған халыҡ алдында ҙур яза ойоштороған: биш кешене тимер ҡаҙыҡҡа ултыртҡан, ун бер кешене ҡабырғаһынан тимер ырғаҡҡа элгән, 85 кешене аҫҡан, 21 кешенең башын сапҡан. Ҡалған әсирҙәрҙе Һаҡмар ҡалаһына ҡыуып, 17 сентябрҙә ул тағы 170 кешене аҫҡан, 301 кешенең ҡолағы менән танауын ҡырҡҡан. Башҡорт халҡының иң яҡшы тоҡомон ҡоротор өсөн язаланған кешеләрҙең ҡатын һәм балаларын каратель операцияһында ҡатнашҡан ҡан эскестәргә таратып биргән. “Ғүмерлеккә Себергә

һөрөлгән боласылар шул хәтле күп булған, уларҙы бушлай тиерлек чиновниктар, сауҙагәрҙәр һәм хатта крәҫтиәндәр ҡоллоҡҡа һатып алған”.[50]

Ошо ваҡиғаларҙың шаһиты булған Рычков яҙыуынса, “рапорттарға һәм кәнсәләр яҙыуына ҡарағанда, шул боласыларҙың егерме һигеҙ мең дүр йөҙ туҡһан бер йән язаланған һәм һуғышта үлгән, көнсығыш ерҙәргә һөрөлгән һәм Россияның эсенә урынлаштырыу өсөн ҡатыны һәм бала-сағаһы төрлө кешегә таратып бирелгән; был иҫәпкә “иреклеләр” һәм еңел партиялар үлтергәне һәм төрлө ергә алып киткәне инмәй, сөнки күбеһе яҙма рәүештә рапорт бирмәгән), улар ҡулынан һәләк булғандарҙың һаны ла әҙ түгел”.[51] Әлбиттә, төрлө ерҙә иҫәпһеҙ үлтерелгән башҡортто берәү ҙә берәмекләп һанап йөрөмәгән, шуға күрә, беренсенән, рапортта күрһәтелгән мәғлүмәттең тулы булмағаны шикһеҙ, икенсенән, “иреклеләр” һәм “еңел партиялар” бөтәһе бергә бер ҙә эре каратель командаларынан кәм үлтермәгән, өсөнсөнән, һаҡлыҡ аҙыҡтарын һыпырып яндырыу, юҡ итеү арҡаһында ас-яланғас ҡалған халыҡ ҡышҡы һыуыҡтарҙа күпләп ҡырылған. Шуны тотош иҫәпкә алғанда, Рычков күрһәткән һанды ике тапҡыр, өс тапҡыр арттырырға, йәғни биш йыл эсендә 90 меңдән артыҡ башҡорт үлтерелгән, тип һис икеләнмәй әйтергә мөмкин. Тимәк, шул йылдарҙа ғына башҡорттарҙың кәм тигәндә өстән бер өлөшө һәләк булған һәм тамам бөлгөнлөккә, хәйерселеккә төшкән халыҡ унан һуңғы осорға меңәрләп-ңмеңәрләп үлергә дусар ителгән. Ләкин колонизаторҙар һаман ҡәнәғәт булмаған. Кенәз Урусов көсләп йыйылған халыҡ алдында асыуынан төкөрөгөн сәсеп ҡысҡырған: “Бынан утыҙ йылға яҡын элек боласылыҡ ниәтен атҡарып йөрөнөгөҙ, иң баш ҡуҙғытыусыларығыҙ етәкселегендә: Ҡазан даруғаһында – Күсем, Нуғай даруғаһында – Алдар, Ҡазан даруғаһында – Исмәғил, шулар замнындағы бурлыҡ һәм боласылыҡ эшегеҙҙә һеҙ бурҙар тарафынан Рәсәйҙең нисәме йыл тоғро кешеһе үлтерелгән. Шуның өсөн генә һеҙҙең ырыуығыҙҙы, әҫәре лә ҡалмаҫлыҡ итеп, тамыры менән юҡ итергә кәрәк”.[52] Был һүҙҙәрҙә халыҡтарҙы боғаҙынан

---

[50] Игнатьев Р. Карасакал – лжехан Башкирии. – Труды научн. общ. При Наркомпросе БАССР, вып. 2. Стерлитамак, 1922, 62-се бит.
[51] Рычков П.И. Топография Оренбургской губернии. Оренбург, 1887, 64-се бит.
[52] Игнатьев Р. Аталған мәҡәлә, 59-сы бит.

алып быуған колонизаторҙарҙың йыртҡыслыҡ логикаһы ап-асыҡ сағыла. Улар илгә баҫып инеп, уның ысын хужаларын аяуһыҙ таларға, көсләргә, ҡырырға тотонған залимдарҙы түгел, ә боронғо үҙ ерендә үҙ азатлығы өсөн көрәшкән халыҡты “бурға” һанаған. Улар сит халыҡты ҡан ҡаҡшатып иҙергә хоҡуҡтары барлығына шикләнмәгән һәм үҙ бандитлығын түгел, ә ысын ғәҙел халыҡ көрәшен законға һыймай тип иҫәпләгән. Шул халыҡты улар тамырынан юҡ итергә ярһыған. Шундай уҡ колониаль политика һәм колониаль логика бөгөнгө көндә лә хөкөм һөрә, ләкин ул икенсе төрлө алһыу төҫтәргә буяп ғәмәлгә ашырыла.

## 6. ҠАТЫ БӨЛГӨНЛӨК ҺӘМ ҠЫҪЫМ. 1755 ЙЫЛДАҒЫ ЯУ

Башҡорт халҡы ауыр һәләкәт ҡайғыһынан һушһыҙ булған. Халыҡтың ҡыйын, арманһыҙ хәленән файҙаланып, рус администрацияһы 1736 йылғы 11 февраль указы билдәләнгән сараларҙы йәһәтләп бойомға атҡарырға тотонған. Башҡорттоң элек ырыу волостары территориаль волосҡа күсерелгән, күбеһенсә мишәрҙән ҡуйылған волость старшиналары батшалыҡтың ысын полиция агентына әйләндерелгән. Башҡорт волостары һәм ауылдарының бөтәһенә лә есаул, сотник, писарь дәрәжәһендәге мишәр ошаҡсылары ебәрелгән. Был колонизатор ялсылары халыҡҡа “сикһеҙ яуызлыҡтар ҡылған, халыҡ малын ашаған, эсеп ҡоторған, кешене ҡылыс менән сапҡылаған, ҡулдарын сабып өҙгән һәм шуның һымаҡ иҫәпһеҙ йыртҡыслыҡтар эшләгән”.[53] Башҡорттар, ябайынан тарханына тиклем, ҡаты күҙәтеү аҫтына алынған һәм хатта ҡырға һунарға сыҡҡанда ла махсус “сығарыу ҡағыҙы” буйынса ғына йөрөй алған. Яуҙа ҡатнашҡан тархандар үҙ дәрәжәһенән мәхрүм ителгән. 1557 йылғы Грамотала ҡаралған үҙ аллы эске идара хоҡуғының һуңғы ҡалдыҡтары тамам юҡ ителгән, башҡорттарҙың бөтә эске тормошо батша администрацияһына буйһондоролған.

1740 йылдан һуң донъялары тотош ҡоротоп, бөлгөнлөктөң сигенә төшкән башҡорттар нисектер тереклек итер өсөн бөтә ерҙә тиерлек ярым күсмә малсылыҡҡа күскән, сөнки ул малсылыҡ игенселеккә ҡарағанда әҙерәк көс һәм сығым талап иткән. Теүәл биш быуат элек татар баҫҡынсалары башҡорттоң ҡалаларын һәм бөтә тормош нигеҙен ҡыйратҡандан һуң булған хәл яңынан ҡабатланған. Тимәк, колонизатор хөкөмө һәм иҙгенлеге башҡорттоң экономик тормошон рус тарихсылары әйткән прогресҡа түгел, ә, киреһенсә, регресҡа килтергән. Өҫтәүенә, иҫәпһеҙ күп малын һәм ифрат күп көтөү көтөр ерен юғалтҡан башҡорттар күсмә малсылыҡты ла кәрәгенсә үҫтерә алмаған. Улар һәр ваҡыт ҡаты аслыҡтан интегеп йәшәгән. Шуға ҡарамаҫтан, уларҙың мал-мөлкәтен

---

[53] Чулошников А.П. Аталған китап, 18-се бит.

һәм ерен талау туҡтамаған, ә, киреһенсә, көсәйә барған, сөнки шул осорҙа яңынан күпләп завод һәм ҡала һалына, рус алпауыттары күсә башлаған.

Был юлы завод төҙөлөү бигерәк тә көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда киң ҡолас алған. 1745-1755 йылдар эсендә шул яҡта 14 тимер һәм баҡыр иретеү заводы һалынған. 1744 йылдың 14 мартында императрица Елизавета Петровна сығарған указ буйынса, заводҡа ҡырҡып бирелә торған ерҙең майҙаны "завод ултырған урындан дүрт яҡҡа табан иллешәр саҡрым алыҫлыҡтан уратып, тура һыҙыҡлы квадрат рәүешендә" билдәләнгән. Шуның менән бергә ер мәғдәнен файҙаланыуға сикләнмәгән хоҡуҡ биреүҙән башҡа, шул уҡ 1744 йыл указы башҡа кешегә, шул иҫәптән ерҙең элекке хужаһы башҡорттарға, заводҡа бирелгән майҙанда йорт-ҡаралды һалыу, йәшәү, мал көтөү, һәм, ғөмүмән, ниҙәндер файҙа ҡылыуҙы ҡаты тыйған, йәғни ҡырҡып бирелгән бөтә майҙан яңы эйәгә тулы һәм мәңгелек хужа хоҡуғы менән беркетелгән.[54]

Бик күп ер майҙаны хәрби ҡәлғәләр өсөн тартып алынған. Ул ҡәлғәләр Каспий диңгеҙендәге Гуртевтан башлап, Себер яғындағы Звериноголовский ҡәлғәһенә хәтле өҙлөкһөҙ нығытмалы ҡоролмалар һыҙығы булып һыҙылған. Нығытмалы һыҙыҡта колонизаторҙар Ырымбур ҡаҙаҡ ғәскәрен ойоштороған һәм шул ғәскәргә тағы бик күп ер ҡырҡып биргән.

Колонизаторҙар 1557 йылғы Грамота менән хәҙер инде бөтөнләй иҫәпләшмәгән, шуға ҡарамаҫтан, "1754 йылда императрица Елизавета Петровна шул Грамота буйынса билдәләнгән башҡорт хоҡуғын бөтә көсө менән яңынан дөрөҫләгән".[55] Был инде ике йөҙлөлөк кенә түгел, башҡорт халҡын мыҫҡыл итеп көлөү булып яңғыраған.

Нығытмалы Ырымбур һыҙығы төҙөлгәс, элек кәрәк саҡта ғына хеҙмәткә алына торған башҡорттар даими хәрби хеҙмәткә ылыҡтырыла башлаған. Улар һыҙыҡҡа йыл һайын кәм тигәндә 2500 , ә ғәмәлдә бик күпкә арыҡ, кеше сығарырға тейеш булған. Быш кешеләр яҙ башынан көҙ аҙағына тиклем, иң ҡыҙыу эш ваҡытында, үҙ хужалыҡтарынан айырылыу сәбәпле тағы ла нығыраҡ бөлгөнлөккә

[54] Историческая записка..., 17-18-се биттәр.
[55] Там же, 4-се бит.

төшкән. Башҡорттар ике ат менән, тотош үҙ тәьминәтендә, ҡаҙнанан һис бер ярҙам алмай хеҙмәт иткән. Шуға күрә уларҙың күбеһе ҙур мохтажлыҡ кисереп, ашар аҙыҡ өсөн бөтә мөлкәтен, хатта аттарын һатып, ҡышҡыһын ғына йәйәүләп ҡайтып етә торған булған. Башҡорттарҙы кәмһетеү һәм өҙлөкһөҙ күҙәтеү өсөн һыҙыҡҡа сығарылған хәрби төркөмдәрҙең башлығы итеп мишәрҙәр ҡуйылған. Һыҙыҡта хеҙмәт иттереүҙе рус администрацияһы башҡорттоң колониаль йәбер-золомға ҡаршы яңы яуға ҡалҡыу мөмкинлеген сикләү өсөн бик уңайлы сара тип иҫәпләнгән.

Хәрби хеҙмәттән тыш, башҡорттар башҡа бик күп йөкләмә үтәгән. Улар ҡаҙна йөгөн ташыу, ҡаҙна кешеләрен йөрөтөү өсөн атлы арба бирергә, шул кешеләрҙе ашатып-эсерергә, өйгә индереп йоҡлатырға, юлда һаҡлап барырға тейеш булған. Илленсе йылдарҙан башлап башҡорттарға почта ямдарын ҡарап, тәьмин итеү эше йөкмәтелгән. Был йөкләмәне үтәү йәнә йыл һайын аҡсалата бер нисә мең һумға төшкән. Урындағы рус түрәләре башҡорттарҙы һәр ваҡыт "эш хеҙмәте"нә йәлеп иткән. "Эш хеҙмәте"нең татар заманындағы ҡол хеҙмәтенән бер ҙә айырмаһы булмаған.

Шуның өҫтәүенә рус хөкүмәте тағы көсләп суҡындарыу политикаһы үткәрә башлаған. Суҡындырыу политикаһы Волга буйында бик ныҡ алып барылған, Башҡортостанда ла атҡарылған. Мәҫәлән, Исәт провинцияһында бик күп мишәр һәм бөтә ғаиләһе менән ун башҡорт өйө суҡындырылған. Астан үлмәһен тип рустарға һатҡан башҡорт балаларын суҡындырыу бик киң таралған. Ҡайһы берҙә аслыҡтан үлер сиккә еткән оло йәштәге башҡорттар ҙа суҡынған. Халыҡ ҡазаһын суҡындырыу өсөн файҙаланыу башҡорттар араһында ҡаты ризаһыҙлыҡ уятҡан.

Юғарыла әйтелгән бөтә нәмәнән халыҡтың асыуы тулышып торғанда, 1754 йылдың 16 март указы түҙемде юғалтырлыҡ һуңғы сәбәп булып сыҡҡан. Был указ буйынса башҡорт менән мишәр һаҡтан ҡотҡарылған*, уның урынына улар ҡаҙнанан ботон 35 тин менән тоҙ һатып алырға, тоҙҙо үҙҙәренең тоҙ ятҡылыҡтарынан буш алмаҫҡа тейеш булған. Яһаҡты тоҙ һатыу менән

* Мишәрҙәргә 1747 йылда ғына яһаҡ һалынған.

алмаштырып, хөкүмәт йыл һайын 11500 һум өҫтәмә төшөм алырға иҫәп тотҡан. Башҡорттар был "мәрхәмәтле" указдың ысын асылын бик асыҡ төшөнгән.

Яңы указ тураһында хәбәр алғас, асыуы килеп, түҙемдең сигенә еткән башҡорттар йәһәтләп яуға әҙерләнә башлаған. Улар башҡа сара күрмәгән. Был тәңгәлдә Нуғай даруғаһының башҡорттары башлап эш ҡуҙғатҡан. Улар Себер һәм Юса даруғалары менән хәбәрләшеп, ризалыҡтарын алған, ҡаҙаҡтар менән бәйләнешкә ингән. Шул заманда Урта ҡаҙаҡ жузының ере аша Омскиға тиклем яңы нығытмалы һыҙыҡ төҙөү сәбәпле, ҡаҙаҡта ла русҡа ҡаршы ризаһыҙлыҡ көсәйеп торған булған. 1754 йылдың көҙөндә башҡорт менән ҡаҙаҡ һөйләшеп, берләштерелгән дөйөм көстө тәүҙә Ҡаҙағстан ерендә туплаpға ла шунан колонизаторҙарға ҡаршы киң һөжүм башларға килешкәндәр.

Шул һөжүмгә әҙерлек барғанда, мишәр муллаһы Батырша (Абдулла Әлиев) пәйҙә булған. Киҫкен хәлде файҙаланып, ул ислам дине өсөн ғазауат башларға, мосолман халҡын, шул иҫәптән мишәрҙәрҙе, йәлеп итергә уйлаған. Суҡындырыу политикаһы һәм тоҙ указы өсөн ныҡ асыулы мишәрҙәр был урында, башҡа яғын алмағанда, башҡорт менән бер теләктә торған. Батырша Башҡортостанды гиҙеп, өндәмә таратып, төрлө милли һәм территориаль төркөмдәрҙе килештерә башлаған. Башҡорттар Батыршаның бергә ҡалҡырға тәҡдимен ҡабул иткән, сөнки улар, һис юғында тәүге мәлдә, мөмкин тиклем күберәк көс туплауҙы мөһим күрә. Ләкин мишрәҙәр, колонизаторҙарҙың ғүмерлек тоғро ялсылары, ҙур ихласлыҡ белдермәгән. Батыршаның өгөтләүенә улар: "Тирә-яҡтағы башҡорттар ҡуҙғалһа, беҙ ҙә ҡуҙғалырбыҙ"*, - тип яуап биргән, йәғни алға сығырға түгел, ә башҡорт артына ышыҡланырға тырышҡан.

Дөйөм ҡораллы сығыш 1755 йылдың 3 июленә билдәләнгән. Әммә Нуғай даруғаһының Бөрйән волосы башҡорттары таш эҙләргә ебәрелгән таш юнаусы Брагиндың йәбер һәм мәсхәрәләренән түҙмәҫ сиккә етеп, 15 майҙа, билдләнгән көндән ай ярым элек, ҡапыл баш күтәргән. Улар Брагинды үлтергән, яҡындағы почта ямын ҡыйратҡан да, аптырап ҡалған: берәүҙәре ҡораллы яуға өндәгән, икенселәре ҡурғаныу менән генә сикләнергә, алдан башлаусыларҙы ҡаҙаҡ яғына

---

* Чулошников А.П. Аталған китап, 53-сө бит.

ебәрергә кәңәш иткән. Бер һүҙгә килә алмау арҡаһында, 124 ғаилә ҡаҙаҡ далаһына сығып китергә булған.

Ә карателдәр оҙаҡ көттөрмәгән, бола ҡуҡан ергә килеп тә еткән, Ырымбур төбәгенең башлығы И.И.Неплюев бойороҡ биргән: "Яуыздарҙы аҡылға ултыртыу, ә ҡалған тәреһеҙҙәрҙең ҡотон алыу өсөн" "өйҙәрендә тамырҙарын табырға һәм , бер нәмәһен йәлләмәй, тамыры менән юҡ итергә", "ҡасҡан яуыздарҙан" кем ҡалған – ҡатындарын, ағай-энеләрен, балаларын, туғандарын – барыһын да тотоп Ырымбурға килтерергә, мөлкәттәрен тотош тартып алырға, малдарын хәрби кешеләргә аҙыҡҡа таратырға.[56] Карателдәр отряды аяуһыҙ террор һәм йыртҡыслыҡ ҡыла, тауға ҡасҡан кешеләрҙе ҡыуып етеп, ҡыра башлаған. Яңы башлаған мәхшәр бөтә Башҡортостандың тыныслығын алған.

Түҙеме бөткән башҡорттарҙың ҡапыл ҡалҡыуы һәм карателдәрҙең ҡотороуо алдан төҙөлгән планды боҙған, шуға күрә күмәк сығыш бик күпкә һуңлап, 8-9 августа ғына башланған. Иң тәүҙә йәнә баяғы Бөрйән волосы күтәрелгән һәм актив хәрәкәт тиҙ арала бөтә көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда таралған. Баш күтәреүселәр иң элек яуыз мишәр старшиналарҙы һәм колонизаторҙарға ярамһаҡланып үҙ халҡын интектергән һатлыҡ йәндәрҙе үлтергән; шунан улар заводтарҙы, почта ямдарын, рум ауылдарын ҡыйратҡан, ҡәлғәләрҙе ҡамауға алған һәм һәр ғәскәри хөкүмәт командалары менән һуғышҡан. Шул эштәрҙән һуң баш күтәргән төркөмдәр, килешелгән план буйынса, ҡаҙаҡ далаларына киткән. Бүтән яҡта яуҙың тотҡарланыуы арҡаһында, ҡаҙаҡ далаһына халыҡ бик күпләп китә башлаған.

Яуҙың икенсе усағы көньяҡ-көнбайыш Башҡортостандағы Гәйнә волосында тоҡанған. Унын артынса Себер һәм Юса даруғаларының башҡа волостары, шулай уҡ мишәрҙәр, күтәрелергә тейеш тип иҫәпләнгән. Әммә Батырша Нуғай даруғаһындағы хәрәкәттең ни менән бөтөрөн көтөп, ә иң мөһиме, үҙ мишәрҙәрен хәүефтән һаҡлап ғәйнәләргә вәғәҙә иткән ярҙамын ебәрмәгән. Киреһенсә, иң яуаплы мәлдә ул урманға ҡасып, йәшенеп ятҡан. Гәйнә волосы башҡорттарының

[56] Шунда уҡ, 73-сө бит.

хәрәкәте, тейешле етәксеһеҙ һәм ярҙамһыҙ ҡалыу сәбәпле, уңышһыҙлыҡҡа осрап, һүнеп ҡалған.

Мишәрҙәр яуҙа ҡатнашыу урынына, хөкүмәттән указ алып, үҙ отрядтары менән Нуғай даруғаһы ъашҡорттарына ҡаршы сыҡҡан. Баш күтәреүселәргә ҡаршы хөкүмәт шулай уҡ Ҡазан татарҙарын ебәргән. Башҡортто ҡырған өсөн уларға ул дин мәсьәләһендә еңеллек биргән һәм һуғышта электергән бөтә нәмәне – мал-мөлкәтте, ҡатын-ҡыҙҙы, бала-сағаны – үҙҙәренә алырға рөхсәт иткән. Хөкүмәт яғында Башҡортостандың бөтә килмешәк халҡы ҡатнашҡан. Рустар кеүек үк, ысын баçҡансы булған был халыҡ башҡорт яуын баçтырыуҙа ҙур ихласлыҡ күрһәткән.

Неплюев башҡорт яуына ҡаршы утыҙ мең кешелек регуляр һәм егерме мең кешелек иррегуляр ғәскәр туплаған. Был хәтле көс ҡоралды башҡорт көсөнән күп тапҡырға артыҡ булған. Тупланған бөтә хөкүмәт ғәскәре август аҙағында яулы райондарға юл алған. Ләкин уға тиклем баш күтәргән башҡорттоң күбеһе Яйыҡ аръяғына китеп йәки урманға йәшенеп өлгөргән. Ҡоралды башҡорттарҙың Яйыҡ аръяғында тупланыуы Неплюевты бик ҡурҡытҡан. Ул, башҡорттарҙың ҡаҙаҡ менән берлектә Башҡортостанға яу сабыуы мөмкин, тип шикләнгән. Шундай мөмкинлеккә юл ҡуймаç өсөн Неплюев ҡайһы бер ҡаҙаҡ феодалдарын, бигерәк тә Кесе жуздың ханы Нурғәлене, төрлө бүләк менән алдаштырып, башҡортто һыйындырған ҡаҙаҡ ырыуҙарына ҡаршы ҡоторҡҡан. Нурғәле хандың ҡоралды төркөмдәре ҡапыл үҙ ҡаҙаҡтарына һөжүм иткән һәм дүрт көнгә һуҙылған ҡаты һуғыштан һуң шундағы күп башҡортто ҡатындары, балалары менән әсир иткән. Башҡорттар әсиргә алынған үҙ кешеләрен һәм ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаһын ҡотҡарыр өсөн ҡаҙаҡтарға барымта яһай башлаған, шулай итеп ике күрше араһында дошманлыҡ көсәйеп киткән.

Бының менән генә башҡорт яуы тынмаған. Көрәштең иң ҡыҙған сағы 1755 йылдың август аҙағынан октябрь уртаһына тиклем осорға тура килгән. Каратель операциялары актив хәрби хәрәкәт туҡтағандан һуң да дауам иткән. Яу барған ерҙәрҙә карателдәр ауылдарҙы тотош яндырған, мал-мөлкәтте талап алып бөткән, яуҙа ҡатнашҡан кешеләрҙе юҡ иткән. Рәсми рәүештә берәү ҙә үлем язаһына

хөкөм ителмәгән, ә ғәмәлдә баш күтәреүселәр һәм уларҙың ғаилә ағзалары меңәрләп-меңәрләп каратель операциялары ваҡытында үлтерелгән, бик күп кеше урындағы зиндандарҙа ҡаты язанан һәләк булған, күбеһен хөкөм буйынса һөрөлгән ерҙәренә алып барғанда туҡмап, ғазаплап үлтергәндәр. Мәҫәлән, 230 кешенән торған бер генә төркөмдә 185 кеше юлда үлгән, шуның 97-һе ҡатын-ҡыҙ һәм бала-саға булған. Тороп ҡалған 45 кеше лә һис ҡотолғоһоҙ үлемгә дусар ителгән. Меңләгән кешене сыбыртҡы менән һуҡтырғандар, зинданға ташлағандар, ғүмерлек матрос йәки һалдат итеп ебәргәндәр, рогервик каторгаһына оҙатҡандар һәм крепостлы ҡол итеп рустарға таратҡандар.

1755 йылғы башҡорт яуы бөтә Башҡортостанға таралмаһа ла һәм оҙаҡ бармаһа ла, ысын мәғәнәһендә милли азатлыҡ көрәше булған. Унда ябай кешеләр ҙә, феодалдар ҙа бер тигеҙ ҡатнашҡан. Әммә тәүҙә уйлаған уй ғәмәлгә ашмаған. Башҡорт яуынан ҡурҡып ҡалған рус властары көсләп суҡындырыу сараларынан баш тарҡан һәм ғөмүмән колониаль иҙгенлекте ваҡытлыса йомшартып торған. Ләкин был еңеллектәң колониазмға ҡаршы көрәшеп иҫәпһеҙ ҡорбан биргән башҡорт халҡы түгел, ә шул башҡорттоң ҡанын ҡойоуҙа ҡорал тотоп ҡатнашҡан татар һәм төрлө килмешәк халыҡ күберәк файҙа күргән.

## 7. ЕР ТАЛАУҘЫҢ КӨСӘЙЕҮЕ. 1773-1775 ЙЫЛДАРҘАҒЫ ЯУ

Башҡорт яуҙары гел генә уңышһыҙлыҡ менә бөтөп торһа ла, колонизаторҙар баҫып алған ерҙәрендә үҙҙәрен тыныс тоя алмаған, шуға күрә, күпләп ҡәлғә төҙөүҙән башҡа, улар һәр рус ҡалаһын, заводын, ауылын ысын хәрби нығытмаға әйләндергән: текә ыуалдар, тәрән ярҙар, ныҡлы ҡоймалар менән ураткан һәм атар туптарын, ҡорал-ярағын, дары-яһағын һәр ваҡыт әҙер тотҡан. Башҡорттарҙа колоизаторҙарҙы ҡурҡытырлыҡ көс һаман әле булған. Шул ҡурҡыныстан ҡотолоу, "элекке болаларҙың ҡабатланыу мөмкинлеген мәңгегә бөтөрөү" маҡсатында Елизавета Петровна рәйеслегендәге махсус комитет башҡорт ерҙәрен юридик рәүештә нығытып, Россия ҡулына күсерергә, уның өсөн заводсыларҙң баҫып алғанын мәңгелеккә "үҙ ирке менән биргән" йәки "һатҡан" тигән ҡағыҙ менән һаҡларға ҡарар иткән. "Быға өлгәшеү менән хөкүмәт өсөн мәжбүри булған 1557 йылғы Грамотаның көсө үҙенән-үҙе юҡҡа сыҡҡаны аңлашылып тора".[57] Ҡабул ителгән ҡарар буйынса рус заводсылары башҡорт ерҙәрен "һатып ала" башлаған, ләкин уларҙың "һатып алыуы" элекке баҫып алыуҙан бер ни менән дә айырылмаған. Ер һатыу үҙәктәге йәки урындағы властар талабы буйынса, уларҙың ныҡ ҡыҫымы аҫтында, аҫаба башҡорттар менән бөтөнләй һөйләшелмәгән көйө башҡарылған. Ер алыу ҡағыҙы күпселек ваҡытта башҡорт еренә бер ҡыҫылышы ла булмаған мишәр старшиналары менән йәки, һис юғында, ырыу еренә яңғыҙ ҡул тейҙерергә лә хаҡы булмаған һатлыҡ старшиналар менән төҙөлгән. Эштең шулай ҡоролоуы арҡаһында заводсылар ерҙе бөтөнләй буш хаҡҡа, күп тигәндә һәр йөҙ дисәтинәһен унышар тингә һатып алған.* Әммә быныһы ла ысын хаҡ булмаған, сөнки заводсылар "купчий договор"ында ҡырҡылған межаны түгел, төптө башҡа межаны күрһәтеп, тағы унар мең дисәтинә ерҙе буштан-буш өҫтәп алған. Шул рәүешле эшләнгән иҫәпһеҙ

---

[57] Историческая записка..., 9-10-сы биттәр.

* Сағыштырыу өсөн: Екатерина II-нең 1775 йылғы 19 февраль указы яуҙа ҡатнашҡан башҡорттарҙан штраф аты алырға ҡушҡан, ат бирергә хәле булмаған кешенән бер ат урынына егерме биш тәңкә аҡса алынырға тейеш булған.

миҫалдың береһе итеп заводсы Я.В.Твердышев менән булған ваҡиғаны килтерергә мөмкин.

1759 йылдың мартында Берг-коллегия Твердышевҡа Эҫем йылғаһында завод һалырға ҡарар сығарған. Был күрһәтелгән ерҙә, Шайтан-Көҙәй башҡорттарының ерендә, Твердышев күптән инде завод һалып ятҡан булған. 1760 йылда ерҙе заводсыға биреү тураһында ҡағыҙ йүнәтер өсөн Өфөнөң провинциаль кәнсәләренә Шайтан-Көҙәй волосынан сотник Юлай етәкселегендәге бер төркөм башҡорт саҡырылған. Юлай был ваҡытта төрлө мутлыҡ һәм уғрылыҡтары өсөн волость старшинаһы вазифаһын үтәп йөрөгән. Провинциаль кәнсәләрҙә башҡорттар ерҙе һатырға ризалыҡ бирмәгән. Үҙҙәренең риза түгеллеген улар Твердышевҡа ла әйткән. Һатыуҙан баш тартыу менән бергә Юлай завод төҙөлөшөнә юл ҡуймаҫҡа тырышып, үҙ башҡорттарын ебәрә башлаған, ләкин завод кешеләре уларҙы барған һайын туҡмап, ҡыуып ҡайтарған. Рус властары ла үҙ яғынан башҡорттарға ҡарата аяуһыҙ көслөк ҡыла башлаған. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорттар үҙ һүҙенән ҡайтмаған һәм ике йылдан артыҡ һәр төрлө көслөккә ҡаршы торған. Ер эйәләренең ҡаршылығын еңә алмағас, провинцияһының администрацияһы Твердышевҡа ер ҡағыҙының теге эшенән төшөрөлгән, башҡорт еренә бер ҡыҫылышы ла булмаған мишәр Шығанай менән йүнәтергә ҡушҡан. 1762 йылдың 21 августында Твердышев заводына 60 йыл биләү өсөн һәр 100 дисәтинәһенән 1-әр тин хаҡ менән Шайтан-Көҙәй еренең бик ҙур майҙанын биреү тураһында акт төҙөлгән.* Ерҙе күрәләтә талап алыу менән Юлай килешә алмаған. 1766 йылды старшина итеп ҡуйылғас, ул бер нисә йыл буйы Твердышев менән судлашып йөрөгән, рус властарының юғарғы органдарына күп тапҡыр мөрәжәғәт иткән һәм, аҙаҡ килеп, үҙ ырыуының мәнфәғәтен яҡлап бик ныҡышҡан өсөн уларҙы, улы Салауат менән икеһен, бығаулап ярты йылға таш ҡапсыҡҡа ултыртҡандар. Шуның өҫтәүенә 600 һум штраф түләткәндәр.[58]

Шундай уҡ законһыҙлыҡ һәм көслөк бөтә Башҡортостанда хөкөм һөрә. XVII быуаттың 70 йылдарына тиклем башҡорт еренең 3 766 659 дисәтинәһе

---

* Был ер башҡорттарға кире әйләнеп ҡайтмаған. 44 йылдан һуң уны Шығанайҙың старшина булып алған улы заводсы И.И.Бекетовҡа һатҡан, хәҙер ҙә ул Башҡортостан эсенә инмәй.

[58] Гвозикова И.М., Салават Юлаев. Уфа, 1982, 183-184-се биттәр.

заводтарға күскән, шуның күпселек өлөшө 50-55-се йылдарҙан һуң баҫып алынған. Ошо уҡ осорҙа Башҡортостанда алпауыт биләмәләре бик ныҡ күбәйгән. 1736 йылдың 11 февраль указы менән Башҡорт ерҙәрен алыуға ирек бирелгәс, алпауыттар ҙа, заводсылар һымаҡ "һатып алып", бына тигән ерҙәрҙең 2 429 547 дисәтинәһен ҡулға эләктергән. Шунан тыш, 4 138 881 дисәтинә ер ҡәлғәләргә тартып алынған, иҫәпһеҙ миллион дисәтинә монастырҙар, чиновниктар, сауҙагәрҙәр, крәҫтиәндәр һәм башҡалар ҡулында булған. Башҡорт ерҙәрен баҫып алыуҙа мишәрҙәр, татарҙар һәм башҡа килмешәктәр ҙур тырышлыҡ күрһәткән. Башҡорт яуҙарын баҫтырыуҙа актив ҡатнашҡаны өсөн башҡорт ерен яһаҡһыҙ биләү хоҡуғы менән файҙаланып, улар үҙ белдеге менән иң яҡшы ерҙәрҙе ҡабат-ҡабат һайлап ултырған, өҫтәүенә, һайлаған ерҙәренән уларҙы ҡайһы бер заводсылар ҡыҫырыҡлағанға зарланған. Башҡорттар иң мөһим, хужалыҡ өсөн иң кәрәкле ерҙәрен юғалтҡан. Шул арҡала бик ауыр экономик хәлгә ҡалған.

Башҡорт хәле рус тарихсылары тарафынан Крәҫтиәндәр һуғышы тип аталған 1773-1775 йылдарҙағы оло яу алдынан шулай булған.

Яуҙы Яйыҡ казактары күтәргән. Элекке ирекtәренең бер аҙ тарайыуынан риза булмаған казактар алтышынсы йылдарҙан уҡ ҡуҙғый башлаған, ҡуҙғый торғас, 1772 йылда ысын бола ҡупҡан. 1772 йылғы казак болаһы баҫтырылған, етәкселәре язаланған. Шул ваҡиғаларҙан һуң бер йыл үтеүгә, казактарҙың асыуы һәм ярһыуы әле баҫылып бөтмәҫ борон, Яйыҡ буйына ҡасҡан Дон казагы Емельян Пугачев килеп сыҡҡан. Бер нисә ышаныслы казак алдында ул үҙен ябай халыҡты, бигерәк тә казактарҙы, яҡлаған өсөн ҡатыны Екатерина II-нән яманлыҡ күргән "император Петр III" тип таныҡтан.* ул казактарҙы үҙенә хеҙмәткә саҡырған. Яңынан ҡалҡыр өсөн етәкләр башлыҡ ҡына көтөп торған казактар "императорға" хеҙмәт итергә риза булған.

1773 йылдың 17 сентябрь көнө иртәнсәк йыйылған казактар адында Пугачевтың беренсе манифесы уҡылған. Был манифесында ул казактарға

* Гольштин герцогы, императрица Елизавета Петровнаның вариҫ итеп билдәләнгән туғаны Петр III 1761 йылдың 25 декабрендә тәхеткә ултырған, ләкин 1762 йылдың 28 июнендә үк гвардия тарафынан ҡолатылып, Ропшин һарайына бикләнгән һәм шунда үлтерелгән. Рус дәүләтенең тәхетенә Екатерина II исеме менән уның ҡатыны, немец принцессаһы ултырған.

“башынан тамағына хәтлем бөтә Яйыҡ йылғаһын, теләгән тиклем ер, сабынлыҡ, дары, ҡурған һәм ризыҡланыр иген” бирергә вәғәҙә иткән. Шунан һуң бәләкәй генә ҡораллы төркөм XVIII быуат Россияһындағы иң ҙур, иң әһәмиәтле ваҡиғаларҙың береһенә юл асҡан. Пугачев отряды бик тиҙ күбәйә барған, ул үҙ юлындағы ҡәлғәләрҙе ала-ала, ошо төбәктең административ үҙәге булып торған Ырымбурға табан йүнәлгән.

Сентябрь аҙағында Пугачев “Петр III” исеменән тирә-яҡтағы халыҡтарға, бөтә иҙелгән “меҫкен бәндәгә” яңы манифестар тарата башлаған. Манифестарында ул һәр халыҡҡа иң мохтаж нәмәһен вәғәҙә иткән, шунан тыш бөтәһенә лә ер, мәңгелек ирек өләшкән.

Башҡорттарға исемләнгән тәүге указ Пугачевҡа алты кешелек башҡорт вәкәләте килгән саҡта, 1773 йылдың 1 октябрендә, яҙылған. Был кешеләрҙе Пугачевтың башҡорт мәсьәләһенә ҡарашын, башҡорттарҙың яуҙа ҡатнашыу мөмкинлеген асыҡлар өсөн Нуғай даруғаһындағы иң күренекле старшиналарҙың береһе Кинйә Арыҫланов ебәргән булған. Указды яҙғанда баштан уҡ Пугачев яуында йөрөгән Иҙеркәй һәм башҡорт вәкәләтенең башлығы, Кинйәнең энеһе, Ҡотлогилде ҡатнашҡан. Шуға күрә указда башҡорт халҡының бөтә булған иң көслө теләге ап-асыҡ сағылыш тапҡан.

Иң төп урында баяғы уҡ ер һәм ирек вәғәҙәһе торған указ менән танышҡас, Ырымбур ҡалаһын ҡамауҙа тотҡан Пугачев лагерына 8 октярбрҙә 500 кешелек отряды менән Яманһары старшина, ә иртәгеһенә шундай уҡ отряд менән Кинйә старшина килгән. Был ҡораллы төркөмдәр баш күтәреүселәр ғәскәрендәге тәүге башҡорттар булмаған. Ырымбур һыҙығында хеҙмәт иткән һәм яҡын волостарҙа йәшәгән башҡорттар Иҙеркәйҙең көслө өгөтө арҡаһында уға тиклем үк яуға ҡушылған. Шуға ҡарамаҫтан, Кинйәнең килеүе һәм аратабанғы эшмәкәрлеге башҡорт халҡының Пугачев яуына ҡарата булған мөнәсәбәтен билдәләүҙә хәл иткес урын алған һәм яуҙың артабанғы барышында ҙур тәьҫир яһаған. Шуға ҡәҙәр башҡорттоң күпселеге рус кешеләре менән, шул иҫәптән үткән яу ваҡыттарында аяуһыҙ йыртҡыслыҡтар ҡылған Яйыҡ казактары менән, бер сафҡа баҫып көрәшергә тәүәккәлләй алмай торған. Әммә Кинйә ҡулда указ, йәғни бөтә ерҙе

кире ҡайтарыу һәм сикләнмәгән ирек биреү тураһындағы яҙма документ булғанда, “император”ға ҡан эскес рус хөкүмәтен еңеүҙә ярҙам итергә һәм шуның менән Башҡортостанды колониаллектән ҡотҡарырға мөмкин тип уйлаған. Яуҙың шулай барып бөтөрөнә ул ныҡ ышанған.

Пугачев лагерына килгәс, Кинйә үҙ уйын тормошҡа ашырыр өсөн бөтә башҡорт халҡын яуға ҡушылырға бик ныҡ өндәй башлаған. Ул Пугачевтың манифесын тоттороп, тейешле кәңәштәр биреп, Башҡортостандың һәр яғына өгөтсөләр ебәргән, үҙ исеменән ялҡынлы хаттар, өндәмәләр тараткан, бик ҡыҙыу эш алып барған. Шундай эшмәкәрлек арҡаһында 20 октябргә үк Пугачев яуына үҙ отрядтары менән егерме өс башҡорт старшинаһы ҡушылған. Кинйә өгөтсөләре шулай уҡ хөкүмәттең каратель ғәскәрҙәрен тулылынадырыу өсөн ойошторған башҡорт командаһы эсендә лә ҙур эш башҡарған.

Ырымбур губернаторы И.А.Рейнсдорп һәм хатта Екатерина II Пугачев яуын баҫтырыуға башҡорттар ярҙам итер тип ышанған. Шунан сығып, Рейнсдорп 25 сентябрҙә 500 кешелек, ә 9 октябрҙә 5000 кешелек башҡорт командаһы төҙөргә бойороҡ биргән. Ләкин Кинйәнең өгөтсөләре менән осрашып өлгөргән башҡорттар каратель командаһына барыуҙан баш тартҡан, улар төркөм-төркөм булып билдәһеҙ яҡка олаҡҡан. 28 октябргә рус властары көс-хәл менән 2355 кешелек командаһы йыйған. Уның командир ярҙамсыһы итеп Нуғай даруғаһының баш страшинаһы Әлебай Мырҙағолов ҡуйылған, ул үҙе лә тупланыш урыны булған Стәрлетамаҡ пристаненән сығыр алдынан ғына Кинйәнән хат алған. Шул командала Шайтан-Көҙәй волосынан үҙ отряды менән килгән Салауат та булған.

Кинйә ебәргән кешеләр башҡорт командаһында өгөттө бик ныҡ көсәйткән. Улырҙың тырышлығы арҡаһында башҡорт командаһы ҡамалған Ырымбурҙы ҡотҡарырға килгән генерал В.А.Кар ғәскәренә ҡушылырға бармаған. 9 ноябрҙә Пугачев ебәргән баш күтәреүселәр Кар ғәскәрен тар-мар иткән. 10 октябрҙә башҡорт командаһының Әлебай етәкселегендәге бер төркөмө пугачевсыларға ҡушылған. 1200 кешенән торған был төркөмдә Салауат отряды ла булған. Команданың ҡалған өлөшөн Пугачев лагерына сотник Ҡаҫҡын Һамаров алып

барған. Әлебай менән Ҡасҡын ҡушылған мәлдә Пугачев ғәскәрендәге башҡорттар һаны 5 меңдән лә кәм булмаған. Һуңғы ике команда ҡушылғас, Пугачев ғәскәренең яртыһынан күбеһен башҡорттар тәшкил иткән.

Ырымбур янынан килгән башҡорт отрядтарының бөтәһен дә Пугачев Кинйә ҡарамағына ебәреп торған. Кинйә уларҙан хәрби берәмектәр төҙөгән, яуҙа һынаған, иң һәләтлеләрен һайлап махсус әҙерлек үткәргән, шунан һуң Пугачевҡа килтергән. Пугачев уларға хәрби исем биреп, Башҡортостандың алыҫ төбәктәренә яңы яу усаҡтары тоҡандырырға ебәргән. Шул уҡ һабаҡты Салауат та үткән.

Салауат иҫ киткес талантлы, бөтә яҡлап унған егет булған. Ул ғәҙәттән тыш һәләтле кеше булып бик иртә өлгөргән. Халыҡ телендә Салауатты ун дүрт йәшендә батыр булған, тиҙәр. Ә батыр исемен алыу ул заманда анһат булмаған, илдә батырҙар берәмләп кенә һаналған. Батыр исеменең бушҡа бирелмәгәнен Салауат ут кеүек янып үткән ҡыҫҡа ғүмере менән иҫбат иткән. Ун алты йәше лә тулмаҫ элек рус властарының яманлыҡтарына ҡаршы актив көрәшкән өсөн уны, ә башҡа бер оло кешене түгел, Юлай менән бергә бығаулап таш ҡапсыҡҡа ултыртҡандар. Юлай хәрби походҡа алынғанда, башҡа берәү түгел, ун ете йәшлек Салауат волоста старшина булып ҡына түгел, сәсән булып та танылып өлгөргән. Ул бик белемле булған, ғәрәп телен, шәреҡ әҙәбиәтен, үҙ халҡының тарихын яҡшы белгән һәм тарихсыларҙың фекеренсә, рус телендә лә һөйләшкән.

Салауат Ырымбур янында 14 ноябрь көндө сығыш яһаған ҡала гарнизоны менән һуғышҡанда тәү башлап батырлыҡ күрһәткән. Баш күтәреүселәр лагерында үткәргән өс аҙна эсендә ул һәр штурм һуғышында актив ҡатнашҡан. Пугачев Салауаттың ҡурҡыу белмәҫ батыр, оҫта ойоштороусы икәнен белеп алған, шуға күрә полковник дәрәжәһе биреп, ун туғыҙ йәшлек егетте Себер даруғаһына яңы отрядтар йыйырға ебәргән.

1773 йылдың көҙөндә халыҡ яуы бөтә Башҡортостанды солғап алған. Ул яуға Башҡортостанда йәшәгән бөтә халыҡ вәкилдәре ҡушылған. Ләкин башҡорттан башҡа халыҡтар бер ҙә тотош ҡатнашмаған. Яуҙы башлаған казактарҙың бөтә страшина һәм бай өлөшө тәүҙән үк хөкүмәт ғәскәрҙәре яғында тороп, баш күтәреүселәр менән көрәш алып барған. Ябай казактарҙың да яртыһынан күбеһе

хөкүмәт яҡлы булған. 64 заводтың 57 888 кешеһенән барлығы алты мең кеше яуҙа ҡатнашҡан. Улар араһында оҫталар һәм даими завод эшселәре булмаған. Ҡалған 65 Урал заводы халыҡ хәрәкәтенән ситтә торған. Улай ғына түгел, 28 завод халыҡ яуына ҡаршы актив көрәш алып барған. Улар хөкүмәттең каратель отрядтарын кеше менән тәьмин иткән, әсирҙәрҙе аяуһыҙ язалаған, башҡорт ауылдарын талаған.* Ҡала халҡы яуҙа ҡатнашмау ғына түгел, ҡала гарнизондары менән бер сафҡа баҫып, үҙ ҡалаларын ажарланып һаҡлаған. Килмешәк халыҡтан ябай ҡатламдарҙың яртыһынан әҙе яуға ҡушылған, улар араһында байҙар бөтөнләй тиерлек булмаған. Байҙар үҙ мөлкәттәрен конфискациянан һаҡлар өсөн генә баш күтәреүселәр сафына баҫҡан. Мишәр страшиналары һәм хеҙмәтсе татарҙар, берәм-һәрәм кешеләрен иҫәпкә алмағанда, шулай уҡ рус властарына тоғро булып ҡалған. И.И. Михельсон 1774 йылдың мартында, Өфө провинцияһының мишәр старшиналары "баштан уҡ бөтәһе лә тиерлек яҡшы мөнәсәбәт һаҡлай", тип дөрөҫ яҙған. Ул старшиналар үҙҙәре каратель отрядтар төҙөп, баш күтәреүселәргә ҡаршы һуғышҡан, шулар араһынан иң актив һәм ҡанһыҙҙары Миндей Тупеев менән Мөксин Әбдесәләмов отрядтары булған.

Башҡорттан башҡа халыҡтан 1773-1775 йылдарҙағы яуҙа иң күп һәм иң ныҡ ҡатнашҡан кешеләр рустың крепостлы крәҫтиәндәре булған. Улар крепостлы ҡоролошон, йәғни шул замандағы рус йәмғиәтенең иң әшәке социаль ғәҙелһеҙлеген, бөтөрөү өсөн көрәшкән. Үҙенең икенсе һәм өсөнсө осоронда был яу бигерәк тә асыҡ төҫ алған. Шуға күрә уны Крәҫтиәндәр һуғышы тигән рус тарихсылары бер ни тиклем хаҡлы, ләкин рус халҡы өсөн генә ул шулай булған.

Башҡортостандағы халыҡтарҙан ҡатнашҡан кешеләр һаны, хәрәкәт масштабы, дөйөм көрәштә тотҡан урыны буйынса беренсе иҫәптә башҡорттар торған. Башҡорттар октябрь урталарынан күмәкләп күтәрелә башлаған һәм декабрҙә үк Пугачевтың үҙ ғәскәрендәге 12-15 мең башҡорттан башҡа, Башҡортостандың төрлө яғында бик күп башҡорт отряды һуғышҡан. Шул уҡ

* Мәҫәлән, Югов заводында ойошторолған каратель отряды Ҡолтай тигән башҡорт ауылының бөтә малын, игенен талаған. Ташып алынған биш йөҙ әүендән ун мең бот иген төшөрөргә иҫәп тотҡандар. (Андрущенко А.И. Крестьянская война 1773-1775 гг. М., 1969, 284-се бит).

ваҡытта, башҡа халыҡтарҙан айырмалы рәүештә, бөтә ябай башҡорт ҡына түгел, юғарғы ҡатлам вәкилдәре лә тотош тиерлек яуға ҡалҡҡан. Өфө провинцияһында яуҙың тәүге осоронда етмеш ете башҡорт старшинаһы ҡатнашҡан. Туғыҙ старшина ғына ситтә торған. Ҡатнашҡан старшиналар нисбәте Ырымбур, Исәт провинцияларында, Көнгөр өйәҙендә һәм башҡорт йәшәгән бөтә ерҙә лә шундай уҡ булған. Рус тарихсылары башҡорт феодалдарының яуҙа актив ҡатнашҡанын күрһәтеп, тағы быны йә ябай халыҡтың баҫымы, йә үҙҙәренең тар феодаль маҡсаты менән аңлатмаҡ булалар. Башҡорт феодалдары, тарихсылар әйткәнсә "ябай халыҡ баҫымы аҫтында" ҡатнашырға мәжбүр булмаған, ә ирек һәм бойондороҡһоҙлоҡ өсөн тынғыһыҙ ауыр көрәшкә үҙҙәре халыҡты әйҙәп алып барған. Яуҙа ҡатнашҡан старшиналар түгел, ә киреһенсә, алпауыт өҫтөнлөктәре алыр өсөн карателдәргә ярҙам итеп, үҙ халҡын һатып, яуҙан ситтә ҡалған бер бәләкәй төркөм генә тар феодаль маҡсатты алға ҡуйған. Шулай феодалдарҙың береһе Ҡолой Балтасов рус властарына эт кеүек хеҙмәт итеүе менән халыҡ һатлығы булып ҙур яманат алған.

Октябрҙең икенсе яртыһында һәм ноябрҙә Башҡортостанда бер нисә яу үҙәге барлыҡҡа килгән.

1773 йылдың 19 ноябрь төнөндә Ҡасҡын Һамаров менән Ҡаранай Моратовтың берләшкән отряды һөжүм итеп Стәрлетамаҡты алған, 24 ноябрҙә Өфөнө ҡамаған. Уларға И.Губанов етәкселегендәге рус отряды ҡушылған. 12 декабрҙә уларға Пугачев тарафынан Өфө тирәһендәге һуғышҡа дөйөм етәкселек булдырыу өсөн ебәрелгән И.Н.Зарубин килгән. Шулай итеп халыҡ яуының Чесноковка үҙәге ғәмәлгә килгән (баш күтәреүселәрҙең штабы Өфө янындағы Чесноковка ауылында торған).

1773 йылдың октябрендә старшина Турай Ишғәлин Ҡазан даруғаһы башҡорттарынан ҙур отряд ойоштороған. Ноябрь аҙағында Өфө янынан килгән Ҡаранай Моратов бындағы отрядтарҙың бөтәһен дә үҙ етәкселегенә алып берләштергән.

1773 йылдың ноябрь-декабрь айҙарында Юса менән Көнгөр тирәһендә Батырҡай Иткининдың дөйөм етәкселегендәге башҡорт отрядтары хәрәкәт иткән. Декабрь урталарында улар Юсаны алған һәм Көнгөрҙө ҡамаған.

1773 йылдың ноябрендә Себер даруғаһының башҡорт отрядтары Эҫем, Ҡатаутамаҡ, Йүрүҙән, Архангель заводтарын һуғышып алған. Декабрь башында улар Һатҡы һәм Златоуст заводтары янына килгән. Себер даруғаһындағы баш күтәреүселәрҙең хәрәкәтен берләштереп ойоштороуҙа Салауаттың атаһы Юлай төп урынды тотҡан. Шул уҡ ваҡытта Юлай Өфө янындағы һуғыштарҙа ла ҡатнашҡан.

1773 йылдың октябрь аҙағында Исәт провинцияһында бик күп бвшҡорт отряды төҙөлгән. Ул отрядтарҙың башында Баҙарғол Юнаев, Юламан Ҡушаев, Һары Абдуллин һ.б. етәкселәр торған. Дөйөм етәкселекте Баҙарғол башҡарған. Ноябрҙә улар провинцияның хәрби-административ үҙәге булған Силәбе ҡалаһын ҡамаған. 1774 йылдың ғинуар башында Зарубин баш етәксе итеп бында И.Н.Грязновты ебәргән. Февралдә баш күтәреүселәр Силәбене алған.

1773 йылдың декабрь аҙағында И.Н.Белобородов етәкселегендә халыҡ яуының Екатеринбург үҙәге барлыҡҡа килгән. Белобородов рус-башҡорт отрядтарын берләштергән. Шунан башҡа унда үҙ алдынан хәрәкәт иткән башҡорт отрядтары күп булған.

1773 йылдың декабрендә Ырымбур янынан ҡайтҡан Салауат отрядтар ойоштора башлаған. Төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда отрядтар төҙөү Салауатты эре етәкселәр сафына баҫтырған тәүге эш булған. Декабрь аҙағында Салауат үҙенең отряды менән Көнгөргә табан йүнәлгән. Юл ыңғайында ул Красноуфимскиҙы алған һәм 1774 йылдың 15 ғинуарында Батырҡай ҡамап тотҡан Көнгөр янына килгән. 19 декабрҙә Зарубин тарафынан Көнгөр тирәһендәге һуғышҡа дөйөм етәксе итеп ебәргән И.С.Кузнецов килгән. Әммә уның килеүе менән Салауаттың был роле кәмемәгән. Көнгөрҙө алыр өсөн 23 һәм 24 ғинуарҙа яһаған һөжүм баш күтәреүселәргә уңыш бирмәгән. Кузнецов барлығы биш көн йөрөп, кире киткән һәм бүтән унда күренмәгән. Ҡаты яраланған Салауат дауаланыу һәм яңы һуғыш хәрәкәттәре әҙерләү өсөн ҡайтып киткән.

Күрһәтелгән яу үҙәктәренең бөтәһендә лә ғәскәр һаны һәм башҡарған эше яғынан ғына түгел, хәрәкәт инициативаһы яғынан да бөтә өҫтөнлөк башҡортта булған. Шуға ҡарамаҫтан, Пугачев менән Зарубин һәр үҙәктә дөйөм етәкселекте рус кешеләре ҡулында тупларға тырышҡан. Был, берҙән, башҡорттарҙың иркен сикләү һәм рустарҙың алдынғынлығын һаҡлау өсөн булһа, икенсенән, милли дошманлыҡ арҡаһында тарҡалырға торған төрлө отрядты берләштереү өсөн эшләнгән. Ләкин, ни хәтле тырышһа ла, тарихсыларҙың бик һаҡ ҡына әйтеүенсә, "Пугачев милли дошманлыҡты тотош бөтөрә алмаған".[59]

Совет политикаһы 1773-1775 йылдарҙағы яуҙа төрлө милләт ҡатнашҡанлығын халыҡтар араһындағы күптәнге дуҫлыҡты күрһәткән ҙур миҫал итеп, үҙҙәренең бөйөк дәүләтселек мәнфәғәтендәге милли политикаһын пропагандалау өсөн файҙаланырға тырыша. Ә ғәмәлдә унда дуҫлыҡ булмаған һәм булырға ла тейеш булмаған. Ни өсөн тигәндә, Пугачевтың "ирек һәм ер" хаҡындағы вәғәҙәһен Башҡортостандағы һәр милли төркөм үҙенсә аңлаған һәм бөтә килмешәк – рус, татар, сыуаш һ.б. был вәғәҙәне башҡорт ерҙәрен биләүгә тулы ирек була тип фараз иткән. Улар Башҡортостандан китергә уйламаған һәм һәр береһе, һәр социаль ҡатламы башҡорт иҫәбенә, башҡортто ҡыҫырыҡлау иҫәбенә "ирек һәм ер" алып байырға хыялланған. Завод эшселәре лә башҡорт ерендәге заводтарҙы емереүгә ҡаршы булған, ул ғына түгел, хатта улар шул заводтарға тағы күберәк башҡорт ерен өҫтәп алырға ынтылған. Бөтә был нәмә башҡорт халҡының теләк-маҡсатына һәм мәнфәғәтенә ҡырҡа ҡаршы килгән, шуға күрә ул башҡорттоң "ирегенә һәм еренә" ҡул һуҙыусыларҙы дошман күрмәй булдыра алмаған. Аралағы дошманлыҡ башҡорттар менән бүтән баш күтәреүселәрҙе, иң элек рустарҙы, ҡаты бәрелештәргә килтергән һәм шул бәрелештәр халыҡ яуының аҙағына тиклем туҡтамаған. Пугачев вәғәҙә иткән "ирек һәм ергә" үҙ мәғәнәһен, үҙ эстәлеген һалып, башҡорттар был яуҙа, элекке кеүек үк, колонизаторҙарҙың һәм килмешәктәрҙең һәр төрлөһөн Башҡортостандан ҡыуып, боронғо үҙ ерҙәрендә ысын ирек алыу, үҙ аллы башҡорт дәүләтен ҡабаттан тергеҙеү маҡсатын ҡуйған. Уларҙың үҙҙәренең законлы "ирege

[59] Краткая история СССР. М., 1983, 197-се бит.

һәм ере" өсөн көрәшкән, сит халыҡтарҙың бер нәмәһенә лә ҡул һуҙмаған. Төп көрәш маҡсатын башҡорт халҡының юлбашсылары – Кинйә, Салауат һәм башҡалар ҙа шулай аңлаған, был тәңгәлдә улар үҙ халҡы менән теләктәш булған. Үҙҙәренең белеме, аҡыл юғарылығынан улар, бәлки, халыҡтың бөтә фажиғәһен асығыраҡ күргәндер, шуның өсөн милли азатлыҡ көрәшенең иң алдағы оло байрағын ҡулға алыу бурысын өҫтәренә йөкмәгәндер. Шул уҡ ваҡытта улар ғәмәлдәге хәлдән сығып, иреккә өлгәшер өсөн тәүге мәлдә баш күтәргән башҡа халыҡтар менән бер сафта көрәшергә кәрәк икәнен, башҡа юл юҡ икәнен белгән. Пугачевсылар менән бергә көрәшеүҙе хуплап, Пугачевҡа бөтә яҡлап ярҙам күрһәткән хәлдә лә, Кинйә менән Салауат үҙҙәренең милли позицияһында ныҡ торған. Быны, мәҫәлән, Салауаттың һан яғынан рус отрядтарына ҡарағанда өс тапҡырға артығыраҡ булған милли отрядтарҙы Көнгөргә килгән Кузнецовҡа бирмәгәненән, уны бер дәрәжәгә түбән ҡуйғанынан да күрергә мөмкин. Рус баш күтәреүселәренең ғәскәре менән бәйләнеш тотоп, ҡайһы берҙә улар менән берлектә хәрби операциялар башҡарһа ла, Салауат һәр ваҡыт үҙ алдына эш иткән, иң элек үҙ маҡсатын күҙ уңында тотҡан. Пугачев штабындағы Кинйә лә башҡорт эштәрен үҙе алып барған һәм баш ғәскәргә ингән башҡорт отрядтары иң элек уға буйһонған. Яу барышында башҡорттарҙың позицияһы һаман көсәйә барған һәм яуҙың икенсе осоронда уларҙың көсө шундай кимәлгә еткән, хатта Пугачев үҙе башҡорт тәьҫире аҫтында ҡалған һәм ул башҡорт маҡсатын бойомға ашырыу ҡоралына әйләнгән.

Хөкүмәттең тәүге мәлдә күҙгә күренерлек уңышҡа ирешә алмаған каратель ғәскәрҙәре 1774 йылдың ҡышы һәм яҙында халыҡ яуының эре үҙәктәренә табан көслө һөжүм башланған.

1774 йылдың ғинуар-февалендә Силәбе яғында бик күп көслө һуғыштар булған. Ҡала ҡулдан ҡулға күсеп торған. Кारателдәр аяуһыҙ йыртҡыслаҡтар ҡылған. Мәҫәлән, 13 ғинуарҙа генерал Деколонг әсиргә алынған 180 кешене бер юлы аҫтырған. 10 апрелдән һуң карателдәр Силәбелә тамам нығынып алған.

1774 йылдың февраль-мартында секунд-майор Д.О.Гагарин етәкселегендә берләшкән хөкүмәт командаһы баш күтәреүселәр менән Красноуфимск

тирәһендә ҡаты һуғыш алып барған. Был һуғыштарҙа яраһы асыҡ уңалып килгән Салауат та ҡатнашҡан. 17 мартта ҡорал көсө күпкә артыҡ булыу арҡаһында карателдәр Салауатты еңгән, ләкин ҡыйрата алмаған. Салауат Башҡортостандың тау араларына киткән.

1774 йылдың март аҙағы менән апрель башында Белобородов катастрофик хәлдә тороп ҡалған. Ғәскәрен тотош тигәндәй юғалтып, ул яңынан көс йыйыу өсөн Һатҡы заводы янына сигенгән.

1774 йылдың 24 мартында подполковник И.И.Мехельсондың ҙур ғәскәри берәмәге ҡаты һуғышта баш күтәреүселәрҙең Өфөнө ҡамап тотҡан ғәскәрен ҡыйратҡан. Баш күтәреүселәрҙең төп өлөшөн уҡ-һаҙаҡ һәм һөңгө менән генә ҡоралланған башҡорттар тәшкил иткән. Улар иҫ киткес ныҡ алышҡан, һуғыш төнгө икенән башлап икенсе көндө сәғәт һигеҙгә тиклем барған.

Пугачевтың Баш ғәскәре лә бик ныҡ еңелгән. 1774 йылдың 22 мартында кенәз П.М.Голицындың каратель ғәскәре Татищев ҡәлғәһе янында Пугачевтың ҙур отрядын тар-мар иткән (3000 кеше үлгән). Шул хәлдән һуң Пугачев эргәһендә булған Кинйә Баш ғәскәрҙе тулыландырыу өсөн бер аҙна эсендә тағы 2000 башҡортто йыйып килтергән. 1-2 апрелдә Һаҡмар ҡалаһы эргәһендә йәнә һуғыш булған. Был юлы ла Пугачев ҡыйратыған (4000 кеше үлгән). Шунан ул 500 кешенән дә артмаған отряды менән, Кинйәнең кәңәше буйынса, Башҡортостандың эске яҡтарына киткән. Кинйә уға 10 көн эсендә башҡорттарҙан яңы ғәскәр йыйып бирергә вәғәҙә иткән.

Баш күтәреүселәрҙең бөтә ерҙә еңелеүе һәм Баш ғәскәрҙең ҡыйратылыуы яуҙа ҡатнашҡан кешеләр араһына бик тиҙ үҙгәреш индергән. Тәүге осорҙа ниндәйҙер еңеллек алыр өсөн яуға ҡушылып киткән төрлө социаль һәм милли төркөм күпләп-күпләп ситкә тарала башлаған. Бәләкәй маҡсат өсөн улар йән бирергә теләмәгән.

Яйыҡ ғәскәренең элекке хоҡуҡ һәм йолаларын ҡайтарыр өсөн яу күтәргән казактар көрәш сафынан сыҡҡан. Май башында Пугачев ғәскәрендә уларҙан барлығы 300-400 кеше генә ҡалған. Етмәһә, 15 апрелдә Яйыҡ ҡалаһы янында булған һуғыштан һуң казактар үҙҙәре ҡотолор өсөн ете отряд башлығын

властарға тотоп биргән. Табын ҡәлғәһенең казактары Зарубинды карателдәр ҡулына тапшырған. Пугачевтың үҙен дә ахыр сиктә казактар һатҡан.

Һалымдың ҙурлығына ғына зарланған рус дәүләт крәҫтиәндәре һәм эш шарттары менән йөкләмәләрҙең ауырлығына рәнйегән теркәүле крәҫтиәндәр шулай уҡ көрәштән баш тартҡан. Теркәүле крәҫтиәндәр өсөн үҙ заводтарын һаҡлау мөһимерәк булған, шуға күрә улар хөкүмәт ғәскәрҙәре яғына сыҡҡан.

Татар һәм бүтән килмешәк халыҡтарға рус алпауыттары һәм заводсыларының былар биләп алған башҡорт ерҙәренән ҡыҫырыҡлауы яуҙа ҡатнашыр өсөн сәбәп булған. Үҙ талаптарының тормошҡа ашмаҫын аңлап һәм яуҙа башҡорттарҙың еңеп ҡуйыуынан ҡурҡып, улар ҙа каратель отрядтарына ҡушылып киткән.

Күрәһетелгән төркөмдәрҙең бик әҙ генә өлөшө, бәлки, баш күтәреүселәр яғында ҡалған да булғандыр, ләкин был өлөш яуға төҫ бирә алмаған. Яуға төҫ биргән халыҡ, бер яҡтан, крепостлыҡ тәртибен бөтөрөү өсөн көрәшкән крепостлы рус крәҫтиәндәре, икенсе яҡтан, милли азатлыҡ өсөн көрәшкән башҡорттар булған.

Башҡорттар һуңғы сиккә тиклем ғәҙел көрәшкә тоғро булып ҡалған. Тәүге осорҙан һуң егерме ете башҡорт старшинаһы ғына яуҙан ситләшкән. Ҡалған старшиналар һәм бөтә ябай халыҡ көрәште тағы ла нығыраҡ көсәйткән һәм изге маҡсатҡа ирешер өсөн үлемдән дә ҡурҡмаған. Михельсон ҡурҡыуҙы ла, ҡаҡшауҙы ла белмәгән башҡорттарға аптырап, бер генә “тел” дә ала алмауы, береһенең дә тереләй бирелмәүе тураһында яҙған, “бик һирәк тереләй тотола, тотолғандары ла кеҫәһенән бәке алып, тотҡан кешеләрҙе сәнсә”, тигән. Ҙур һуғыштарҙа башҡорттар меңәрләп үлгән, әммә үлгәндәре урынына меңәрләгән яңы кеше килгән һәм барыһы ла йән аямай иҫ киткес батыр һуғышҡан. Халыҡтың залимдарҙы дошман күреүе һәм ирекккә сарсауы шул хәтле көслө булған.

Һаҡмар ҡалаһы янында еңелгәндән һуң Пугачевтың бәләкәй генә отрядын Кинйә башлап алып киткән һәм дүрт көн эсендә ул башҡорттарҙан бер нисә мең кешелек ғәскәр йыйған. 2 майҙа Белорет заводынан сыҡҡан сакта Пугачевтың ғәскәрендә биш мең кеше булған, 5 майҙа Магнитлы ҡәлғәһенә еткәндә – һигеҙ

мең, майҙа Троицк ҡәлғәһенә килгәндә ун-ун ике мең кешелек ғәскәр йыйылған. Был ғәскәрҙең ҙур күпселеге башҡорттарҙан торған. Шуның өсөн дә генерал Деколонг "яуыздың һыбайлы көсө өҫтөнлөк тотҡанға" зарланған. Шулай итеп, баштан уҡ баш күтәреүселәр сафына иң яҡшы яугирҙәрен ебәргән башҡорт халҡы Пугачев ғәскәрен тергеҙеп, яуыздың иң төп башҡарғыс көсөнә әйләнгән.

21 майҙа Троицк ҡәлғәһе янына Деколонг ғәскәрҙәре менән һуғышып, Пугачев тағы бик ҡаты еңелгән (4000 кеше үлгән). 22 майҙа Пугачев ғәскәренең ҡалдығы полковник Михельсон командаһы тарафынан ҡыйратылған. Ләкин 2 июндә Силәбенән утыҙ биш саҡрым ерҙә өс мең кешелек ғәскәр менән Салауат Пугачевҡа килеп ҡушылған һәм башҡорттар йәнә уны һәләкәттән ҡотҡарған.

1774 йылдың апрель-майында Башҡортостандың төрлө ерендә Ҡасҡын Һамаров, Ҡаранай Моратов һәм башҡа башҡорт етәкселәренең ҙур отрядтары һуғыш алып барған. Салауат Себер даруғаһының урта тирәһендә хәрәкәт иткән был отряд ҡалаларҙың бөтәһенә лә ҡурҡыу һалып торған. Шуға күрә Михельсон 24 апрелдә Өфөнән Пугачевҡа ҡаршы сыҡҡанда, иң элек уның бараһы юлында һуғыш алып барған Салауат отрядын ҡыйратырға уйлаған. Карателдәрҙең хәрәкәтен күҙәтеп торған Салауат Михельсонды яҡшы әҙерләнеп ҡаршылаған һәм 7 майҙа уның менән беренсе тапҡыр бәрелешкән. Иртәгеһенә Эҫем заводы эргәһендә икенсе мәртәбә һуғыш булған. Михельсон тағы ла башҡорт яугирҙәренең батырлығы һәм ныҡлығына шаҡ ҡатып: "мин яуыздарҙың күлгә төшөп киткән икәүһен саҡ тереләй алдым; ул вәхшиҙәр тотолғандан үлгән артыҡ, тип ҡысҡырышты", - тип яҙған. Был һуғышта өс йөҙ башҡорт үлгән.

Шул бәрелештән һуң Михельсон әллә нисә көн буйы Салауатты эҙәрләп йөрөгән. Улар араһында бер нисә тапҡыр һуғыш булған, ләкин Михельсон Салауатты ҡыйрата алмаған. 23 майҙа Салауат Михельсондың ғәскәрен ял иттереү һәм тәьмин иттереү өсөн файҙаланған Эҫем заводын яндырған. 31 майҙа ғәскәренең бер өлөшө менән Салауат тағы Михельсонға һөжүм иткән.

2 июндә, юғарыла әйтелгәнсә, Салауат Пугачевҡа ҡушылған. Уларҙың берләшкән ғәскәрендә өс мең башҡорт һәм өс йөҙ самаһы рус булған. Шул көс менән 3 июндә улар Михельсон ғәскәренә һөжүм иткән, 5 июндә һөжүмде тағы

ҡабатланған. Алауат тарафынан теткеләнгән Михельсон үҙ бурысын үтәмәгән көйө кире сигергә, Өфөгә ҡайтырға мәжбүр булған.

Яуҙың икенсе осоронда завод кешеләре тотош тиерлек хөкүмәт яғына сығып, заводтар карателдәргә терәк урыны, ғәскәрҙе бөтә кәрәк-яраҡ һәм кеше көсө менән тәьмин итеү сығанағы булып хеҙмәт итә башлағас, Пугачев штабы заводтарҙы ҡыйратырға, кешеләрен Башҡортостандан ситкә, Көнгөр өйәҙенә күсерергә бойроҡ биргән. *Ләкин* был бойороҡтоң сәбәбе завод кешеләренең хыянатынан ғына түгел, ә бөтә көрәштә берҙән-бер терәккә әйләнгән башҡорттар талабы менән Пугачевтың иҫәпләшергә мәжбүр булыуынан килгән. Башҡорт ерҙәрен баҫып алған заводтарҙы юҡ итеү, кешеләрен ситкә ҡыуыу башҡорт халҡының иң изге мәнфәғәтенә яуап биргән. Шул мәнфәғәтте үтәр өсөн 2 майҙа Пугачев Белорет заводын яндырырға ҡушҡан, шунан һуң Златоуст, Һатҡы заводтарын, Сыбаркүл ҡәлғәһен, Кундравин ауылын яндыртҡан. Башҡорттар Пугачев бойороғон үтәргә тотонған. Һөҙөмтәлә Уралдағы 57 завод зыян күргән, шуларҙың 26-һы көлгә ҡалдырылған.

5 июндә Михельсон менән аҙаҡҡы тапҡыр һуғышҡандан һуң, баш күтәреүселәр полковнигы Мартын Андреевтың әйтеүенсә, Пугачев "башҡорт араһынан, заводтар аша барған, уның иң яҡшы терәге һәм ышанысы башҡорттарҙа булған, башҡорттар уға һәр ваҡыт тоғролоҡ һаҡланған, (завод-ҡәлғәләрҙе) ҡыйратҡанда ярҙам иткән, әсиргә төшкән һәм төшмәгән рус кешеләрен килтергән". П.Л.Юдин яҙыуынса: "Пугачевтың шундай "айбарлы" ярҙамсыһы (Салауат) булмаһа, ул Михельсон һәм Деколонгтан бер нисә тапҡыр еңелгәндән һуң Башҡортостанда оҙаҡ ҡалып, яңынан фетнәле кешеләр ялпыһынан ғәскәр тупларға өлгөрмәҫ, шулар менән артабан Ҡазанға табан бара алмаҫ ине".[60] Яуап алғанда Пугачев үҙе әйтеүенсә, Юсаға барған юлда ул "ул мең тирәһе башҡорт һәм бер нисә завод крәҫтиәне" йыйған.

14 июндә Пугачев ғәскәренең алғасҡыһы булып Салауат Юсаға килгән һәм уны ҡамауға алған. Уның артынса үҙ отряды менән Белобородов килеп еткән. Юса ныҡ ҡаршылыҡ күрһәткән. 18 июндә Пугачевтың төп көстәре килгән. Юсаны

---

[60] Юдин П.Л. Суд и казнь Салавата. – Историческая вестник, 1898, кн. 8, 579-580-се биттәр.

штурмлау башланған. Өҙләкһәҙ һөжүм өс көнгә һуҙылған. Ҡойманан ямғыр булып таш атылыуына, бүрәнәләр тәгәрләүенә, эҫе ыҫмала ҡойолоуына ҡарамай, баш күтәреүселәр тулҡын-тулҡын булып ҡәлғәгә ябырылған. Башҡорттарҙың күбеһе ҡорос ҡалҡандары булмау сәбәпле (сөнки уларҙың тимерлектәре бөтөрөлгән) “утыҙ йәки егерме ике ҡатлы итеп, араһына көл һалып теккән киндер ҡалҡан” менән һуғышҡан 21 июндә йән аямаҫ ҡаты һөжүмдәр менән Юсаны алғандар. Иртәгәһенә Пугачев Сулман аша сығып, Ҡазанға табан юл тотҡан. Пугачев ғәскәре менән көнбайышҡа табан йүнәлгән башҡорт отрядтары 12 июлдә Ҡазанды алыуҙа ҡатнашҡан, шунан һуң Башҡортостанға кире әйләнеп ҡайтҡан. Кинйә Пугачев менән тороп ҡалған. Ул рус хөкүмәтенең ҡоларына ныҡ ышанған, шуға күрә хөкүмәт ҡолағас та һаман Пугачев политикаһына тәьҫир итергә, башҡорт халҡының уға күрһәткән яҡшылығына таянып, указдар, манифестар менән нығытылған “ирек һәм ер” хаҡындағы вәғәҙәләрен үтәтергә, Башҡортостанды колониаль бойондороҡтан ҡотҡарырға ниәт тотҡан.

Ҡайһы бер башҡорт отрядтары Юса эргәһендә үк Пугачевтан айырылып ҡалған. Аяғы яраланған Салауат та Пугачев менән китмәгән. Яраһы уңалып бөткәнен дә көтмәй, Салауат урында ҡалған һәм Ҡазандан ҡайтҡан башҡорт отрядтарын туплап алған да, Көнгөр өйәҙендә ҡабаттан һуғыш башлаған. Салауат ғәскәре шул яҡтағы заводтарға, Көнгөр ҡалаһына һөжүм итеп, рус администрацияһының ҡотон алып торған.

Һәр даими урындағы һөжүм һәм һуғыштарҙы ойоштороп, шул һуғыштарҙы үҙе алып барыу менән бергә, Салауат 1774 йылдың ғинуарынан башлап Башҡортосндың төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығышындағы бөтә хәрәкәттә етәкселек иткән, шул региондағы һәр отряд Салауат ғәскәренең бер берәмеге булған. Салауаттың яуы хаҡындағы урыны хаҡында рустың ғәскәри башлыҡтары яҡшы белгән. Шуға күрә Пугачевтың Салауатты Башҡортостанда ҡалдырғанын ишеткәс, улар бик ҡурҡышҡан һәм Өфөнө һаҡларға бик ашығыс сара күрә башлаған. Бының өсөн урындағы бөтә ғәскәрҙе туплауҙан тыш улар Ырымбурҙан кенәз П.М.Голицын корпусын Өфөгә күсергән. Был сара ваҡытлы булып сыҡҡан. Сөнки 1774 йылдың июлендә Көнгөр өйәҙенән Үҙәк Башҡортостанға ҡайтып,

Салауат бөтә башҡорт яуына етәкселек итеү эшен үҙ ҡулына алған һәм иң элек Өфөгә табан һөжүм ойошторған. Өфөнө алыу 1774 йылдың июлендә башҡорттарҙың төп маҡсатына әйләнгән. Танылған башҡорт етәкселәренең ғәскәрҙәре һәр яҡтан ҡалаға яҡынлаша башланған. Ләкин уға тиклем рус башлыҡтары Өфө тирәһенә эре регуляр ғәскәрҙәр туплап өлгөргән. Башҡорттар кире сигергә мәжбүр булған. Шуға ҡарамаҫтан, октябрь айына ҡәҙәр улар ҡалаға ҡурҡыныс һалып торған.

Өфөнө алырға тигән уйҙары бойомға ашмаһа ла, башҡорттар көрәште йомшартмаған. Салауат баш күтәреүселәр хәрәкәт иткән бөтә ер менән бәйләнеш тотҡан, кәрәк булғанда тәжрибәле башҡорттар етәкселегендәге отрядтарҙы ярҙамға ебәргән, көрәш ялҡынын һәр ваҡыт тейешле кимәлдә тотҡан. Рус властары уны “башҡорт халҡын болартыусыларҙың иң ҙуры” тип һанаған, уның исеме “бөтә ерҙә ишетелгән”.

Бөтә Башҡортостанда яу бик көсәйеп киткән. Исәт провинцияһында башҡорт отрядтары Баҙарғол, Юламан етәкселегендә һуғышҡан, урындағы рус командалары бер ни ҡыла алмаған. Нуғай даруғаһында Ҡаҫҡын, Ҡаранай, Ханбулат отрядтары карателдәргә ҡаты ҡаршылыҡ күрһәткән. Юса даруғаһында Батырҡай менән Илсеғол бик уңышлы көрәш алып барған. Себер даруғаһында Эҫем, Ҡатау-Иван һәм башҡа заводтар ултырған ер һуғыш ҡырына әйләнгән, унда Юлай отрядтары эш иткән. Шунан тыш башҡа ерҙәрҙә эре йәки ваҡыраҡ етәкселәрҙең отрядтары ҡурҡыу белмәй батыр алышҡан. Салауат үҙе төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанды тотош айҡап йөрөгән һәм “тыйып алғыһыҙ ярһып” һуғышҡан. Уның хәрби оҫталығына хатта тәжрибәле регуляр ғәскәр командирҙары ғәжәпләнгән.

Башҡорт яуы был осорҙа туранан-тура русҡа ҡаршы йүнәлтелгән. Рус һәм башҡа килмешәк халыҡ вәкилдәре менән бергә хәрәкәт итеү ваҡыты үткән. Пугачев Башҡортостандан киткәс, элекке пугачевсылар тотош яуҙы ташлағас, башҡорттар өсөн бер генә маҡсат – милли азатлыҡ өсөн көрәшеү маҡсаты ғына ҡалған. Был маҡсатҡа өлгәшеү юлында иң яман дошман булып рустар арҡыры торған.

Башҡорт яуының көсәйеүе рус хөкүмәтенең Башҡортостанға бик күп өҫтәмә каратель отряд килтерегә мәжбүр иткән. 1774 йылдың август-сентябрь айҙарында Башҡортстан кателдәр менән нышып тултырылған. Ю.Ф.Фрейман, И.А.Деколонг, П.Д.Мансуров генералдарҙың, П.М.Голицын кенәздең регуляр ғәскәрҙәре, ҡала гарнизондары, ҡалаларҙың, заводтарҙың, мишәр старшиналарының, дүрт һатлыҡ башҡорт старшинаһының каратель отрядтары Башҡортостанды боғал һымаҡ быуып, эт кеүек талаған. Каратель ғәскәрҙәргә шулай уҡ ашығыс солох төҙөп туҡтатылған рус-төрөк һуғышынан А.В.Суворов генералдың регуляр армияһы килеп өҫтәлгән. Күрәһең, Суворовтың хәрби талантын һәм уның оло яуҙарҙа һыналған ғәскәренең хәрби ҡеүәтен ҡулланмайынса, башҡорттарҙы еңеп, ҡанға батырыу мөмкин булмағандыр.* был нәмә үҙе үк башҡорт яуының ни кимәлдә көслө булғанын күрһәтеп тора.

Дошмандың һан һәм ҡорал яғынан күп тапҡырға көслө булыуына ҡарамаҫтан, башҡорттар иҫ киткес батыр һәм ҡаты һуғышҡан. Октябрь урталарында ғына ҡайһы бер старшиналар баш һала башлаған. Шуның менән бергә улар: “Беҙгә Петр Федорович (йәғни Пугачев) теләгәнен алғанса, туҡтап, түҙеп торорға кәрәк”, - тип һөйләшкән. Тимәк, улар яҙмышҡа буйһонмаған, Пугачев батша булғас, башҡорттарға ирек бирер тип ышанған. Пугачевтың был ваҡытта, 15 сентябрҙә, казактар тарфынан рус властарына тотоп бирелгәнен, күрәһең, улар белмәгән. Шундай айырым старшиналарҙан башҡа, тотош ҡалған башҡорт халҡы тынғыһыҙ көрәште дауам иткән.

Рус администрацияһы башҡорттарҙы баш һалырға өгөтләп хаттар ебәргән. Каратель ғәскәрҙәренең баш комадующийы генерал-аншеф П.И.Панин, яуҙы дауам иткән хәлдә “ирҙәр заты бәләкәй балаларға ҡәҙәр иң ғазаплы язалар менән өҙгөләп үлтерелер, ҡатындары, балалары һәм ерҙәре императрица ғали йәнәптәренә тоғро булған кешеләр ҡулына бирелер”, тип ҡурҡытҡан. Ул халыҡты Салауат менән уның атаһын тотоп бирергә өндәгән. Халыҡ Паниндың

* А.В.Суворовтың башҡорттарға ҡаршы каратель операцияларҙа ҡатнашҡаны хаҡында хәҙерге тарихсылар ләм-мим өндәшмәй. Ғәмәлдә, еңелеү белмәҫ бөйөк рус полководецы тип бөгөн данланған Суворов ғүмер буйына Россия империяһының агрессивлыҡ һәм жандармлыҡ политикаһын бойомға ашырған, рус батшалығының күҫәге булып хеҙмәт иткән; ул бер ҡасан да, бер ерҙә лә ғәҙел эш өсөн һуғышмаған.

ҡурҡытыуҙарына яуап итеп, “ҡаршылашырға һәм һуғышырға” әҙер булыуын белдергән, үҙ юлбашсыларын һатмаған. 29 октябрҙә йәшерен комиссия башлығы П.С.Потемкин Салауаттың үҙенә исмеләп хат яҙған: “Ғәфү үтен, үҙ ғәйебеңде таны һәм баш һалып кил...”. Ләкин Салауаттың ғәфү үтенер ғәйебе булмаған, ул изге эш өсөн көрәшкән.

Тик ноябрҙең тәүге ун көнөндә генә, иң һуңғы мөмкинлектәре бөтөп, старшиналарҙың күбеһе ҡорал һалған. Ноябрь уртаһында үҙәк һәм көнбайыш Башҡортостандағы иң ҙур яу башлыҡтарының береһе Ҡаранай баш һалған. Подполковник И.Я.Аршеневский ғәскәре Ҡатау-Иван заводының ҡамауын өҙгәс, “ғәфү ителгән” старшиналарҙың өгөтөн тыңлап, Салауаттың атаһы Юлай өйөнә ҡайтҡан һәм И.Л.Тимашев карателдәре уны шунда уҡ тотоп та алған. Ә Салауат изге маҡсат өсөн көрәшкәнен ныҡ белеп, карателдәрҙең һәм рус агенттарының бөтә тәҡдимен кире ҡаҡҡан, баш һалып бармаған. Ул һәм уның яуҙаштары бер нимәгә ҡарамай көрәшергә булған. Улар “үлгәнсә ҡәҙәр тынмаҫҡа һәм баш бирмәҫкә” ант иткән.

Салауат бер йыл эсендә халыҡ яуының күренекле юлбашсыһы булып үҫкән. Хәрби һәм ижтимағи эшкә бик һәләтле булыу арҡаһында уның абруйы ғәжәп тиҙ күтәрелгән. Ул көрәшкә йәнен-тәнен фиҙа ҡылған, ярһыу-кеүәһен тамсыһына ҡәҙәр изге эшкә биргән, иректе быуған ҡанесәрҙәрҙе бөтә булмышы менән дошман күргән, һатлыҡ йәндәргә аяуһыҙ булған һәм аҙаҡҡы сиккә тиклем һуғышырға һис ҡаҡшауһыҙ әҙер булған. 1774 йылдың ғинуарынан ноябрь уртаһына хәтлем төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда ул ғәмәлдә хәрби һәм донъяуи власть хөкөмөн башҡарған, ә июль уртаһынан бөтә башҡорт яуына етәкселек иткән. Егерме йәшлек батырҙы ябай башҡорттар, аҡ һаҡаллы старшиналар – яуға ҡалҡҡан бөтә башҡорт халҡы юлбашсыһы тип белгән.

Салауат һәм уның яуҙаштары Екатеринбургтан Өфөгә, Юсаға, Көнгөргә тиклем һаман актив һуғыш алып барған. Рус администрацияһы шул яҡҡа яңынан-яңы хәрби көс ташлаған. Ҡала, ҡәлғә, завод һәм хатта ауылдарға эре-эре ғәскәри берәмектәр урынлаштырылған. Ул ғәскәрҙәр баш күтәреүселәргә өҙлөкһөҙ һөжүм яһап торған. Салауатсылар ҙа уларҙы ныҡ ҡына теткеләгән.

Ләкин салауыасыларҙың йән аямай һуғыш алып барған ере бик тар булып ҡалған. Шундай хәлдә көрәште асыҡтан-асыҡ дауам итеү мөмкин булмай башлаған. 1774 йылдың ноябрендә Ҡатау-Иван заводы эргәһендә Салауат карателдәргә һуңғы тапҡыр һөжүм яһаған. Ошо һуғыштан һуң Салауат иптәштәре менән отрядты таратырға, ләкин баш һалмаҫҡа ҡарар иткән. Улар ваҡытлыса боҫоп тороға ла, яҙға сыҡҡас, ҡабат көрәш башларға булған. Ләкин уларҙың уйы тормошҡа ашмаған. Халыҡ араһында гел шымсылап йөрөгән мишәр старшинаһы Мөҡсин Әбдесәләмов Салауаттың йәшенгән ерен белеп, ғәскәр килтергән. 1774 йылдың 25 ноябрендә карателдәр уны тотоп алған.

Салауатты дүрт иптәше (Раҡай Ғәлиев, Әбдрәшит Ғәлиев, Юртым Ғәҙелов, Зәйнәш Сөләймәнов) менән аяҡ-ҡулдарына бығау һалып Өфөгә килтергәндәр. Генерал-аншеф Панин Салауат менән Юлайҙы башҡорт халҡының йөрәгенә мәңге бөтмәҫ ҡаты ҡурҡыу һалырлыҡ итеп язаларға кәрәк һанаған һәм Салауат менән дүрт иптәшен, аяҡ-ҡулдарын бығаулап, Ҡазанға ебәрергә әмер биргән. Силәбелә төрмәгә бикләгән Юлай хаҡында ла шундай уҡ әмер булған.

Ҡазандағы йәшерен комиссия ҡулында Салауат менән Юлайҙы 1775 йылдың февраль башынан 13 февраленә тиклем булған, шунан һуң уларҙы Екатерина II-нең бойроғо менән Мәскәүгә алып барғандар. 25 февралдә Сенаттың генерал-прокуроры А.А.Вяземский, Мәскәү генерал-губернаторы М.Н.Волконский, экспедицияның обер-секретары, һуңғараҡ “дәүләт инквизиторы һәм дәрәжәле сыбырткысы” булып танылған С.И.Шешковский башҡарған. Бүтән ерҙәге кеүек үк, Йәшерен экспедицияла яуап алғанда Салауат менән Юлайҙы ҡаты язалағандар, уларҙы ниндәй ҡанһыҙлыҡ менән нисек ғазаплағандарын күҙ алдына килтереү ҙә мөмкин түгел.

1775 йылдың 16 мартында йәшерен экспедиция тәүге приговорын билдәләгән. Икенсе көнөнә, 17 мартта, Екатерина II 1773-1775 йылдарҙағы яу башлыҡтарының бөтәһен дә ғәфү итеүе тураһында манифест сығарған. Ысын хәлгә һис тап килмәгән был ялған манифест буйынса, ҡаты тән язаһына хөкөм ителгән кешеләр язанан азат ителеп, ғүмерлек һөргөнгә ебәрелергә тейеш булған.

Әлбиттә, Юлай менән Салауатҡа манифест ҡағылмаған. Манифест менән бергә Екатерина II улар тураһындағы приговорға ла ҡул ҡуйған.

“Өҫтәмә рәүештә тикшереү”, дөрөҫө, сығарылған приговорҙы “башҡа яуызлыларҙың ҡотон алып” башҡорт ерендә ғәмәлдә атҡарыу өсөн Салауат менән Юлайҙы Мәскәүҙән Ырымбурға, ә унан, губернатор И.А.Рейнсдорптың ҡарары буйынса, Өфөгә оҙатҡандар.

1775 йылдың 22 июлендә, тағы өс ай буйы яуап алғандан һуң, Өфө провинциаль кәнсәләре экзекуция тәртибе тураһында ҡарар сығарған. Ҡарар буйынса, Салауат менән Юлайҙы 175-әр сыбыртҡы һуҡтырырға, танауҙарын йолҡорға, биттәренә тамға һалырға, шунан һуң Рогервикка (Эстониялағы хәҙерге Палдиски) ғүмерлек каторгаға ебәрергә тигән хөкөм билдәләнгән.

Салауат менән Юлайҙы аяҡ-ҡулдары бығауланған көйө Твердышев тартып алған Шайтан-Көҙәй ерендәге Эҫем заводына алып киткәндәр, аяуһыҙ яза шунда башланған. Юлайға Эҫем, Ҡатаутамаҡ, Ҡатау-Иван заводтарында 45-әр, Орловка ауылында 40 сыбыртҡы һуҡтырғандар. Салауатҡа Эҫем заводында, Юлай һәм Ылыҡлы ауылдарында, Красноуфисмк, Көнгөр, Юса, Йәлдәк ҡәлғәләрендә 25-әр сыбыртҡы һуҡтырғандар. Һәр урында уңалып бөтмәгән ҡанлы яраны сыбыртҡы менән ҡабат ярғандар. Экзекуция башҡарған һуңғы урында уларҙың танауҙарын йолҡоп, биттәренә тамға баҫҡандар. Шул аяуһыҙ ҡаты язаны улар медицина ярҙамы алмай түҙеп үткәргән.

Салауат менән Юлайҙы кире Өфөгә алып килгән, пронциаль кәнсәләрҙең чиновниктары танауҙары ныҡ өҙөлмәгән, тамға эҙҙәре әҙ беленә тип тапҡан һәм 25 сентябрҙә Өфө ҡала майҙанында был язалар ҡабаттан башҡарылған.*

1775 йылдың 2 октябрендә ете ай ярымға һуҙылған яуап һәм язанан, ай ярым барған экзекуциянан һуң Салауат менән Юлайҙы тыуған Башҡортостанынан алып киткәндәр.

Юлайҙың Рогервиктағы сағын белдергән һуңғы документаль мәғлүмәт 1797 йылда яҙылған.

* Батырҙарҙың иҫтәлеген хурлап, башҡорт халҡын мыҫҡыллап, шул урынға “тарихи-башҡорт дуҫлығына” арналған монумент ҡуйылды.

Тимер менән бығауланған Салауат каторганың таш ҡапсығында егерме биш йыл ултырып, 1800 йылдың 26 сентябрендә вафат булған. 46 йыл ғүмеренең 26 йылын ҡот осҡос ғазаплы тотҡонда үткәргән. Шундай ҡаты яза уға үҙ ерендә үҙ халҡына ирек даулап, йән аямай көрәшкән өсөн генә бирелгән. Бөтә ғәйебе уның шул булған.

Салауат менән Юлайҙың ҡатын һәм балаларын үҙҙәре тотолғанға тиклем үк аманат итеп Өфөгә алып киткәндәр. Шунда, күрәһең, йә үлтергәндәр, йәки көсләп суҡырғандар ҙа бөтә нәҫелдәрен ҡоротоу, халыҡ хәтеренән мәңгегә юйыу өсөн чиновник һәм офицерҙарға хеҙмәтсе итеп таратҡандар.

Салауатты тотҡандан һуң башҡорт яуы яйлап һүрелә башлаған. 1775 йыл башына башҡорттарҙың актив хәрәкәте туҡтаған, ләкин йыл аҙағына тиклем бәләкәй ҡоралды төркөмдәр рус, татар, мишәр ауылдарына һөжүм яһап торған, тыныслыҡ һаман булмаған. Башҡорттарҙың яңынан яуға күтәрелеүе ихтимал, тип хәбәр йөрөгән. Шуға күрә рус хөкүмәте Башҡортостанда 1775 йылдың аҙағына ҡәҙәр эре регуляр ғәскәр тоторға мәжбүр булған. П.И.Панни урынына каратель ғәскәрҙәрененң баш командующийы булып ҡалған А.В.Суворов халыҡтың болоҡһоуо хаҡында хәбәр алып, каратель ғәскәрҙәрҙе "көтөлмәгән хәлгә, ауылдарҙы һаҡлауға ғына түгел, ҡаты һөжүм менән яуап биреүгә" әҙерләп ҡуйған.[61]

1773-1775 йылдарҙағы яу бик күп мең башҡортто һәләк иткән һәм халыҡтың бөлгөнлөктөң ситенә килтереп ҡуйған. Ҡаты һуғыштар йөҙәрләгән, меңәрләгән кешене бер юлы юҡ иткән. Яуҙы ҡырылғандан тыш, иҫәпһеҙ күп башҡорт кателдәр ҡулынан үлгән. Губернаторҙар, воеводалар, командирҙар башҡортҡа ни теләһә шуны ҡылған. Улар унарлаған, йөҙәрләгән кешене бер яңғай атып, сыбыртҡы менән һуҡтырып, язалап үлтергән. 1774 йылдың 29 июлендә каратель ғәскәрҙәренең командующийы итеп ҡуйылған генерал-аншеф П.И.Панин халыҡты тотош һыпырып ҡыра башлаған. 1774 йылдың көҙөндә бөтә Башҡортостанға килеп туҡталған каратель ғәскәрҙәренең командирҙарына Панин болартыусыларҙы шунда уҡ дүрт һанын сабып үлтерергә, ә шуларҙы йәшергән

[61] Пугачевщина, т. III. М.-Л., 1931, 411-се бит.

кешеләрҙе йәрәбә буйынса язаларға бойороҡ биргән. Халыҡтың ҡотон алыр өсөн ҡолаҡтары, танауҙары, ҡул бармаҡтары ҡырҡылған башҡорттарҙы ауылдан ауылға йөрөтөп күрһәткәндәр. Панинды алмаштырған Суворов шул уҡ ҡанлы эште дауам иткән. Мең-меңләгән башҡорт каторгаға, һөргөнгә ебәрелгән, ғүмерлек һалдатҡа бирелгән. Үлтерелгән, ғәриплəнгән башҡорттоң иҫәбе булмаған. Шуның өҫтәүенә Екатерина II-нең 1775 йыл 19 февралдә сығарған укзы буйынса, "ҡылған енәйәттәре өсөн" башҡорттар дүрт мең штраф аты, ә аттары етмәгән хәлдә һәр ат егерме бишәр һум иҫәбенән аҡса түләргә тейеш булған. Бөлгөнлөктөң сигенә еткән башҡорттарҙы тотош астан үлеүгә дусар теү өсөн бөтә сара күрелгән. Шул уҡ ваҡытта, яуҙа бер аҙ ҡатнашып та һуңынан карателдәргә башҡортто бөтөрөүҙә ҙур ярҙам күрһәткән рус заводсы крәҫтиәндәренә еңеллек бирелгән: "(1763 йылғы) ҡағиҙәгә ҡаршы рәүештә крәҫтиәндәрҙе артыҡ эш менән интектермәҫкә".[62] Башҡортостанда йәшәгән башҡа халыҡтың тәүге осорҙа яуҙа ҡатнашҡан өлөшө лә әллә ни яза алмаған.

[62] ЦГАДА, ф. Паниных-Блудовых, д. 199, 341-се бит.

## 8. БӨЛГӨНЛӨКТӨҢ СИГЕ. КАНТОН ИДАРАЛЫҒЫ

Яуҙы баҫтырған саҡта аяуһыҙ таланған башҡорттар хәйерселектең сигенә еткән. 1735-1740 йылдарҙағы яу ваҡытында һәм унан һуңғы осорҙа булған кеүе:к, ас башҡорттар ғиаләләрен үлемдән ҡотҡарыр өсөн балаларын ҡоллоҡҡа һата башлаған. Мәҫәлән, 1776 йылда 6 майында Силәбе сауҙагәре Е.М.Сапожников башҡорт балаһын һатып алырға рөхсәт һорап Исәт провинциаль кәнсәләренә шундай ғариза яҙған: "Миңә башҡорт Ҡасимбай Асыҡаев килде, ул үҙенең 18 йәшлек улын Сураны алып килгән һәм миңә мәңгелек хеҙмәтсе итеп илле һумға бирмәксе була. Был аҡса уға үҙе менән ҡатынын, унан бигерәк өйөндәге башҡа бәләкәй балаларын аҙыҡландырыу өсөн кәрәк, сөнки ул, Асыҡаев, билдәле фетнәлә бөлгөнлөк һәм хәйерселектең иң сигенә килеп еткән, өй эсе менән тамаҡ аҫрап торорға бер нәмәһе лә юҡ, ә урман ҡыҙырып, үлән ашап йөрөйҙәр һәм тәғәм-ризыҡһыҙ үлеп ҡуйыуҙан ҡурҡалар".[63] Бындай ваҡиға, әлбиттә, күп булған. Шуға күрә Ырымбур губернаторы И.А.Рейнсдорп 1779 йылдың 3 авгусында: «… башҡорт балаларын һатыу һәм аҡсаға һалыуҙы тыйырға», - тип махсус указ сығарған.[64] Яуҙан һуң ете йыл үткәс тә, башҡорттоң экономик хәле бик ауыр булған. 1782 йылдың 23 июнендә Ырымбур генерал-губернаторы И.В.Якоби Екатерина II-гә ебәргән рапортында: "Башҡорттоң бөтәһе лә аҙаҡҡы болала ҡаҡшағандан һуң һаман бөлгөнлөктән сыға алмай һәм сиктән тыш ярлы хәлдә йәшәй", - тип яҙған.[65] Башҡорттоң хәлһеҙләнеүе Башҡортостанда алпауыттар колонизацияһын тағы ла ныҡ көсәйткән. XVIII быуат аҙағында Башҡортостанға яңы килеп ултырған алпауыттар һаны йөҙ илленән артып киткән. Шулар араһында йөҙәр дисәтинә биләп алған алпауыттар булған. Башҡортостанға шулай уҡ Ҡазан губернияһының татарҙары бик ныҡ ағыла башлаған. Оҙаҡ быуаттар буйы хакимлек иткән татарҙар, башҡа халыҡты аяуһыҙ ҡырып, һан яғынан үҙҙәре туҡтауһыҙ үҫкән. Рус дәүләтенең власы аҫтында ла улар башҡорттар һымаҡ

---

[63] Материалы..., т. V., 1960, 542-се бит.
[64] Шунда уҡ, 549-сы бит.
[65] ЦГАДА. Гос. архив, разряд XVI, д. 932, 28-се бит.

ҡырылмаған. Дөйөм һандарын ныҡ арттырыу менән бергә татарҙар Башҡортостанда ла күбәйгән. Улар башҡорт ерҙәренә XVII быуатта күсә башлаған, XVIII быуат аҙағында уларҙың ағымы ҡапыл ныҡ көсәйгән. Етенсе ревизия үткәрелгәнгә тиклем (1817 йыл) Башҡортостандың көнбайыш һәм төнъяҡ-көнбайыш өйәҙҙәрендә татарҙарҙың һаны башҡорт һаны менән тиңләшкән, өҫтәүенә улар һаман күберәк күсенгән.

Башҡорттоң хәлһеҙләнеүенә ҡарамаҫтан, рус хөкүмәте уларҙың тағы азатлыҡ яуына күтәрелеүенән ҡурҡҡан. Өфө һәм Себер наместничествоһының генерал-губернаторы О.А.Игельстром фекеренсә, "батыр етәксе килеп сыға ҡалһа", башҡорттар "яңынан бола йәки фетнә күтәрергә әҙер" торған.[66] Яңы яуҙы киҫәтер өсөн рус хөкүмәте бер нисә кардиналь сара үткәрергә булған.

1781 йылда генерал-губернаторҙың тотош үҙ хөкөмөнә буйһонған Өфө наместничествоһы ойошторолған. Халыҡ өҫтөнән күҙәтеү эшен нығытыу өсөн өйәҙ башлыҡтары итеп рус офицерҙарынан сикләнмәгән хоҡуҡлы капитан-исправниктар ҡуйылған.

1789 йылды рус хөкүмәте Өфөлә Мосолман диниә назараты аҫҡан, шуның менән башҡорт халҡының рухи донъяның тоғро рус ялсыһы татар руханиҙары ҡулына тапшырған. Шул мәлдән башҡорттоң бөтә дини эше генә түгел, мәғариф һәм мәҙәниәт эше туранан-тура татар хөкөмөнә буйһондоролған.

Башҡорттан хәрби хеҙмәткә алына торған кеше һанын бик киҫкен рәүештә арттырыу шул дәүерҙә атҡарылған сараларҙың иң көслөһө булған. XVIII быуаттың 40-сы йылдарында, йәғни башҡорттарҙы нығытмалы Ырымбур һыҙығына даими хеҙмәткә ылыҡтыра башлаған саҡта, һәр һигеҙ өйҙән бер кеше алынған булһа, 80-се йылдарҙан һәр хәрби походҡа өҫтәмә призыв булмаған тыныс ваҡыттарҙа һәр өс өйҙән бер кеше ала башлағандар. Шуның менән бергә хеҙмәт шарты һәм хеҙмәтте ҡылыҡһырлау өсөн 1793 йылдың сентәбрендә Екатерина II-гә башҡорттар ебәргән ғарызнәмәнән ике генә өҙөк килтереү етә. "Күп кеше, - тип яҙа башҡорттар, - бөтә мөлкәтен һатып, ҡатын һәм бәләкәй балаларын шыпа сараһыҙ итте, ә күпселеге кешегә тереклек өсөн иң кәрәкле булған иген игеү,

---

[66] Архив Гос. Совета, т. I. СПб., 1869, 836-сы бит.

донъя көтөү һәм төрлө хужалыҡ итеү эшен генә түгел, ҡартайып хәлдән тайған атай-инәһен дә бер ярҙамһыҙ ҡалдырып, һәр саҡтағы кеүек үк, үҙ кейеме, үҙ ҡоралы һәм башҡа кәрәк-ярағы менән һеҙ императрица ғали-йәнәптәренә хеҙмәт итергә китте”. Башҡорттар хеҙмәткә алына торған кеше һанын элеккесә ҡалдырып, хеҙмәт ауырлығын еңеләйтергә үтенгән һәм артабан дауам иткән: “Башҡорт халҡы Урал буйында һәм Себер сигендә мишәрҙәр менән хеҙмәт итһә лә, халҡы аҙ булғанға уларҙың һеҙ императрица ғали йәнәптәтәренә хеҙмәт иткән һаны башҡорттоҡона сағыштырғанда һигеҙҙән бер өлөшкә лә етмәй, ләкин төрлө мутлыҡ менән командир булып, улар хеҙмәт иткән башҡортҡа бик күп йәбер ҡыла, шуның өсөн шөһрәтле императрица, башҡортто мишәр менән ҡушмай, һәр саҡ айырым хеҙмәт итергә бойор, сөнки мишәрҙәрҙең төрлө йәбере арҡаһында башҡорттар улар менән бергә хеҙмәт итергә теләмәй”.[67] Башҡорттарҙың һигеҙ өйҙән бер кеше алыу тәртибен ҡайтарыу тураһындағы үтенесе лә, мишәрҙәрҙән айырыу үтенесе лә ҡәнәғәләндерелмәгән, сөнки рус хөкүмәтенең маҡсаты башҡорттарҙа ризаһыҙлыҡ уятҡан нәҡ шул сараларҙы ғәмәлгә ашырыуҙан ғибәрәт булған: беренсенән, хәрби тәртип ҡыҫымында мөмкин тиклем күберәк башҡортто тотоу; икенсенән, мишәрҙәр аша ҡораллы башҡортто ныҡ күҙәтеп, ҡарап тороу; өсөнсөнән, башҡорт халҡының социаль-политик тормош ҡоролошон нигеҙҙән үҙгәртеү, йәғни 1737 йылдың 14 июлендә үк Минзәлә кәңәшмәһендә ҡабул ителгән ҡарар буйынса, уларҙы казак ҡатламына күсереү өсөн ерлек әҙерләү.

Тейешле әҙерлек осоронан һуң уйланған үҙгәреш бойомға ашырылған: 1798 йылдың 10 апрель указы менән рус хөкүмәте башҡорттарҙы һәм улар менән бергә мишәрҙәрҙе граждандлыҡ ҡатламынан хәрби казак ҡатламына күсереп, 11 (1803 йылдан – 12) башҡорт һәм 5 мишәр кантоны ойоштorған. Ойошторолған яңы ҡоролош кантонлы идара ситемаһы тип аталған. Кантон системаһы башҡортттоң бөтә тормошон һәм эшен ҡаты тәртипле, аяуһыҙ язалы хәрби ойошмаға буйһондорған.

---

[67] Материалы.., т. V. М., 1960, 567, 568-се биттәр.

Кантонға идара итеү өсөн кантон башлығы етәкселегендә вазифалы кешеләр аппараты төҙөлгән. Вазифалы кешеләр, иң элек кантон башлыҡтары, рус офицерҙарынан йәки татар һәм ышаныслы башҡорт феодалдарынан билдәләнгән. Ышаныслы кәштән феодалдарға төрлө өҫтөнлөк бирелгән, шул уҡ ваҡытта колонизаторҙарға ярамаған башҡорт тархандары ябай хеҙмәтсе дәрәжәһенә төшөрөлгән. Ябай башҡорттар чиновник итеп ҡуйылмаған, улар тик иң түбәнге иррегуляр ғәскәр чины ғына ала алған. Әммә офицер дәрәжәһе һәм алпауыт исеме алған "тоғро" башҡорттар ҙа шәхси алауытлыҡ менән генә файҙаланған, ә татарҙарға нәҫелле алпауытлыҡ бирелгән. Рус хөкүмәте башҡорт алпауыттарының күбәйеүенә ныҡ тотҡарлыҡ яһаған һәм ғөмүммән башҡорт ғәскәрен баш казак ғәскәрҙәре файҙалнған күп хоҡуҡтан мәхрүм булған.

Кантон башлыҡтары туранан-тура Ырымбур генерал-губернаторына, ә 1834 йылдан һуң Башҡорт-мишәр ғәскәренең командующийына, буйһонған. Уларға хәрби һәм политик-административ эштә, суд, полиция һәм хужалыҡ эшендә ҙур хоҡуҡ бирелгән. Суд һәм следствие эштәрен, шул иҫәптән енәйәтселек эшен, хәрби кантон суды башҡарған. Билдәләнгән тәртип ҡағиҙәләренән әҙ генә тайпылған өсөн дә был суд ҡаты яза биргән. Һуйыл (шпицрутен), сыбыҡ, ҡамсы менән һуҡтырыу киң ҡулланылған. Һуйыл менән һуҡтырғанда 500-1500 кешелек сафтан үткәргәндәр, унан һуң берәү ҙә тере ҡалмаған.

Рус хөкүмәте 1798 йылдың 10 апрелендә һәм 1806 йылдың 24 сентябрендә сығарған указдары менән башҡорттоң йөрөү иркен бөтөнләй киҫкән, шулай итеп, 1736 йылда уҡ тыйылған нәмәне тағы ҡабат-ҡабат нығытып ҡуйған. Тик "сығарыу билеты" һәм "плакат паспорты" менән генә ҡайҙалыр барырға рөхсәт ителгән. Ләкин ундай рөхсәтте хеҙмәт йәшендәге (20-60 йәштәге) кешеләрҙең 3-5 проценты ғына ала алған. Тимәк башҡорттоң ҡалған өлөшө үҙ-ара ҡатнашып, төрлө эш, сауҙа һәм хужалыҡ өлкәһендә бәйләнеш тотоуҙан мәхрүм булған. Шунан тыш, күрше ауыл башҡорттары аралашмаһын өсөн 1828 йылдан күмәк уйындар ҙа ныҡ тыйылған. Тыйылған нәмәләрҙе эшләгән (йәғни рөхсәтһеҙ сығып йөрөгән, уйын йыйған) кешегә ҡаты тән язаһы биргәндәр йәки төрмәгә ултыртҡандар. Мәҫәлән, 1799 йылдан 1831 йылға тиклем өсөнсө башҡорт кантонының йорттарында шул

сәбәптән хеҙмәт йәшендәге кешеләрҙең 50,4 проценты язаға тарттырылған, ҡайһы берәүҙәр бер нисә тапҡыр яза алған. Шундай саралар менән рус хөкүмәте башҡорт халҡының экономикаһын торғонлоҡҡа дусар иткән, милли берҙәмлекте ҡыйратыуға алып барған.

Башҡорт араһында хәрби-феодаль тәртипте тағы ла нығыраҡ көсәйтер өсөн хөкүмәт 1834 йылда "Башҡорт-мишәр ғәскәренең командующийы" тигән вазифа булдырған (тәүге командующийы Т.С.Циолковский булған) һәм нәзирлектәр (попечительстволар) ойошторған. Башҡорт-мишәр ғәскәренең кантондары алты нәзирлеккә бүленгән, уларҙың башына нәзир итеп рус капитан-исправниктары ҡуйылған. Нәзирҙәрҙең төп бурысы бик ҡаты күҙәтеп, "яуызлыҡты бөтөрөү генә түгел алдын уҡ киҫәтеп тороуҙан" ғибәрәт булған.

Кантон системаһының башҡортҡа күтәрткән төп йөкләмәһе нығытмалы Ырымбур һыҙығында хеҙмәт итеү булған. 1798-1848 йылдарҙа һыҙыҡтағы ғәскәрҙең алтмыш биш процентын башҡорт менән мишәр тәшкил иткән. Улар хеҙмәткә йыл һайын 6500-ҙән 10500-гә тиклем кеше сығарған, шул һандың 87-88 проценты башҡорттан торған. Башҡа казак ғәскәрҙәренән айырмалы рәүештә хеҙмәт иткәндә Башҡорт-мишәр ғәскәренә хөкүмәт бер ни ҙә бирмәгән. Хеҙмәткә сыҡҡан кшеләрҙе ҡорал, ат, кейем һәм аҙыҡ менән күмәк ярҙам рәүешендә тәьмин иткәндәр. Шундай ярҙамһыҙ күпселек башҡорттоң ғәскәрҙә хеҙмәт итергә хәле булмаған. XIX быуаттың 20-се йылдарына тиклем ярҙамға йыйылған аҡсаның күләме йән башына 25-37 тин көмөш, ҡайһы берҙә 1,5 һум тура килгән. Был нәмә башҡорт елкәһенә өҫтәмә ауыр һалым булып ятҡан.

Билдәләнгән тәртип буйынса, ысын хеҙмәткә кеше егерменән илле йәшкә тиклем алынырға, унан һуң эске хеҙмәткә күсерелергә тейеш булған. Ләкин был тәртип һәр ваҡыт боҙолған, күп кеше ҡартайып бөткәнсә сафта ҡалдырылған. Алтмыш йәшкә ҡәҙәр һәр берәүгә 8-9 тапҡыр һыҙыҡта хеҙмәт итергә һәм бер нисә тапҡыр оҙаҡ хәрби походтарҙа ҡатнашырға тура килгән. 1847 йылда ғына мотлаҡи хеҙмәттең мөҙҙәтен утыҙ йыл менән сикләп ҡуйғандар.

Һыҙыҡтағы хеҙмәт йәйге һәм ҡышҡы мөҙҙәт тип икегә бүленгән. Һыҙыҡтың үҙендә торған ваҡыт алты ай дауам иткән. Ләкин йыйылыр урынға хеҙмәт

башланырҙан 1,5-2 ай алдан килеү талап ителгән, шуға күрә ғәмәлдә кеше йылына кәм тигәндә һигеҙ ай ваҡытын сарыф итеп, бөтә эш ваҡытын бушҡа үткәргән. Шуның арҡаһында унһыҙ ҙа етешмәгән хужалыҡ һаман нығыраҡ бөлгән, халыҡ төпһөҙ хәйерселеккә төшкән.

1807 йылдың 19 август ындағы указ менән Ырымбур һыҙығындағы һәр ҡәлғәгә комендант ҡуйылған. Ҡәлғә коменданттары үҙ эшен аяуһыҙ эшләтеп һыҙыҡта хеҙмәт иткән башҡорттарҙы ысын ҡолға әйләндерә торған булған. Шул хаҡта 1828 йылда Ырымбур һыҙығына барып киткән подполковник Прянишников әсенеп яҙған. "Ауыр эштән интегеп бөткән башҡорттар, - тигән ул, - ҡыш еткәс, саҡ ҡуҙғалып йөрөгән аттарын менеп ауылдарына ҡайтып китә. Башҡортто иҙеү ғөмүмән бер самаға ла һыймай, һәм мин ҡомһоҙ өҙгөстәрҙең ошо меҫкен ҡорбандарына түрәләр иғтибарын йәлеп итеүҙе изге бурысыма һанайым".[68] Әлбиттә, ошонан һуң түрәләр "ошо меҫкен ҡорбандарға" иғтибар иткәндер тип уйлау үтә бер ҡатлылыҡ булыр ине.

Һыҙыҡ хеҙмәтенән башҡа башҡорттар Россияның һуғыштары һәм хәрби походтарында киң файҙаланылған. 1805 йылды биш йөҙлөк (530-ға тиклем) егерме башҡорт полкы Напалеон менән һуғышырға ебәрелгән. Наполеон Россияға баҫып ингәс, Ырымбур һыҙығында хеҙмәт иткән ун ике мең кешенән тыш, башҡорттарҙың шундай уҡ биш йөҙлөк егерме һигеҙ полк төҙөлгән. Был полктар башынан аҙағына ҡәҙәр һуғышта ҡатнашҡан, шуларҙың утыҙ полкы иң беренселәр сафында Парижға ингән. Һуғышҡа ебәрелгән ғәскәрҙе бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү һаман баяғы башҡорт елкәһендә булған. Ҡоралдары әүәлгесә уҡ-һаҙаҡ менән һөңгөнән торған. Рустар ҙур башҡорт ғәскәренә утлы ҡорал тотторорға ҡурҡҡан. Улар командирҙы башҡорттан ҡуйырға ла ҡурҡҡан. Полк командиры итеп рус, казак офицеры билдәләнгән, ә башҡорттар шуларҙың ярҙамсыһы ғына була алған. Шул ярҙамсыларҙың иң билдәлеһе Ҡаһым түрәне (35 йәшлек) Салауат кеүек булып ҡуймаһын тип, рустар ағыулап үлтергән.

Башҡорттар 1828-1833 йылдарҙа Россияның көнбайыш сиктәрен һаҡларға, 1853-1856 йылдарҙағы Ҡырым һуғышы ваҡытында Балтик буйын ҡурғарға йәлеп

[68] Центр. Гос. Военно-ист. Архив, ф. 36, оп. 7/850. Д. 22, лл. 1-1 об., 81.

ителгән. Рустар Урта Азияға һөжүм башлағанда тағы бик күп башҡорт (һәр биш-алты кешенән берәү) алынған. Урта Азия походтарынан башҡорттар өсөн иң фажиғәлеһе 1839 йылда Ырымбур генерал-губернатор В.А.Перовский тарафынан ойошторолған Хиуа походы булған. Ауыр шарт һәм ҡанһыҙ тән язаһынан был походта 3700 башҡорттоң 2000 кешеһе үлгән.

Һуғышҡа һәм хәрби походҡа ебәрер өсөн башҡорт ғәскәрҙәрен йыйғанда Ырымбур хеҙмәт иткән кеше һаны кәметелмәгән. Шуға күрә башҡорт халҡы ғәскәрҙәрҙе тәьмин итер өсөн бөтә булған кеше көсөн һам матди мөмкинлеген һығып биреп, иҫ киткес хәйерсеклетә йәшәргә мәжбүр булған.

Утыҙынсы йылдарҙан башлап, тышҡы политик маҡсаттарын башҡара килә, рус хөкүмәте бик күп аҡса һәм кеше ҡулы талап иткән ҡаҙна эшендә хаҡһыҙ көс файҙаланыу өсөн башҡортто хәрби хеҙмәттән "эш хеҙмәте" тип аталған икенсе төрлө хеҙмәткә күсерә башлаған. Кантон системаһын индергән мәлдә наряд буйынса алынған кешеләрҙең етмеш-туҡһан проценты хәрби хеҙмәткә ебәрелһә, хәҙер һикһән-туҡһан алты проценты "эш командаларына" билдәләнгән. "Эш хеҙмәте" тағы ла ауырыраҡ булған һәм халыҡҡа хәрби хеҙмәттән бик күпкә ҡиммәт төшкән.

"Эш командалары" Башҡортостандан ситтәге, һыуһыҙ буш далаларҙағы алыҫ нығытмаларға йөк алып барырға, ҡаҙнаға юл һәм күперҙәр эшләргә, ҡәлғә һәм нығытмалар ҡорорға, таш йорт һәм сиркәүҙәр һалырға, Ырымбур, Өфө, Уральск һәм башҡа ҡалаларҙа урам төҙөргә, материалдар (таш, бүрәнә) әҙерләп ташырға, эзбиз һәм кирбес заводтарында эшләргә, ҡыуғын ҡыуырға һ.б., һ.б. эштәргә ебәрелгән. Шул уҡ командалар Ырымбурға һәм һыҙыҡтағы ҡәлғәләрҙең барыһына ла бөтә кәрәк нәмәне (иген, утын, бесән һ.б) килтереп торған. "Эшсе командаларына" йыл һайын меңәрләгән кеше һәм ат алынған. Мәҫәлән, 1850 йылда губернатор ҡушыуы буйынса башҡорттар ҡаҙна эшенә 3500 кеше, 311013 ат биргән, 1853 йылда юл төҙәтеү һәм юл эшләүгә генә 162361 кеше, 102700 ат ебәргән. Бөтә ерҙә башҡорттар үҙ аты, үҙ арба-санаһы менән һәм ғәмәлдә үҙ тәьминәтендә эшләгән. Эш шарты, бигерәк тә ағас әҙерләүҙә шул хәтле ауыр

булған, хатта “йыл һайын шул эштән бик күп башҡорт ғәрипләнеп ҡайтҡан, ҡайһы береһе бөтөнләй үлеп ҡалған”.[69]

Транспорт командаларында йыл һайын 1000 баш ат тирәһе үлеп торған. Генерал-губернатор В.А.Перовский, атһыҙ ҡалған башҡорт “эш командаһынан” “хәйер һорашып” ҡайтып китә, сөнки уларҙы эш урынынан киткәнсе генә ашаталар, тип яҙған. Генерал-губернатор В.А.Катенин әйтеүенсә, башҡорттар “бөтә Ырымбур төбәгенең эш көсөнә” әйләндерелгән.

Түҙә алмаҫлыҡ ауыр хеҙмәткә ҡарамаҫтан, хәрби һәм эшсе команда башҡорттары төрлө һалымдан да (земство һалымы, төҙөлөш һалымы, кәнсәләр һалымы һ.б.) бушатылмаған. Хеҙмәткә түккән сығым менән бергә йән башынан йыйылған аҡса дүрт һум егерме бер тингә барып еткән. Шул уҡ ваҡытта һаҙаҡ хемәтенә генә йөрөп, хеҙмәт иткән мәлдә тотош ҡаҙна тәьминәтендә торған рус казактарынан аҡсалата һис бер төрлө һалым алынмаған.

Хәрби хеҙмәт менән эш хеҙмәтенән башҡа башҡорттар, әүәлгәсә үк, почта йөрөтөү, юл йөрөтөү йөкләмәләрен үтәгән. Бөтә чиновник һәм хатта завод крәҫтиәндәрен бушлай хеҙмәтләндергән юл йөрөтөү йөкләмәһе һәр башҡорт өйөнә йыл һайын кәм тигәндә өс һумға барып төшкән. Почта хеҙмәтен үтәгән башҡа ҡатламдар юл аҡсаһы алған, ә башҡортҡа уны түләмәгәндәр. Башҡорттарҙың почта хеҙмәтенә киткән сығымы йылына һикһән-йөҙ мең тәшкил иткән. 30-сы йылдарҙа почта йөрөтөү менән юл йөрөтөү йөкләмәһен аҡсалата түләү менән алмаштырғандар. Ләкин был алмаштырыу халыҡҡа еңеллек килтермәгән, сөнки почта хеҙмәте өсөн генә, элекке һикһән-йөҙ мең һум сығым урынына, башҡорттар йөҙҙә һикһән мең аҡса түләй башлаған.

Хәрби хеҙмәт һәм эш хеҙмәтенән тыш түләгән күп төрлө һалым һәм йөкләмәләр бирәсәкте арттырыуға килтергән. Бирәсәген түләмәгән кешенең өйөн, атын, эш ҡоралдарын һәм башҡа нәмәнәһен тартып алып һатҡандар. Бирәсәктең күбәйеүе башҡортто унһыҙ ҙа бик бәләкәйгә ҡалған аҫаба ерҙәрен һатырға мәжбүр иткән. Башҡорт еренә һөжүм итеү туҡтамаған. Генераль межалыҡ хаҡындағы указ ер талауға яңы көс биргән.

---

[69] Очерки.., т. I, ч. 2. Уфа, 1959, 47-се бит.

Башҡорт ерҙәрен генераль рәүештә межалау тураһындағы Сенат указы 1797 йылдың 26 июнендә сығарылған. Генераль межа үткәреү юлы менән рус хөкүмәте иң яҡшы башҡорт ерҙәрен ҡаҙна, алпауыт һәм заводсылар файҙаһына тартып алырға, Рәсәйҙең эске губернияларынан хәрби хеҙмәтсе һәм крәҫтиәндәрҙе күсереп ултыртыу өсөн "буш" ер фонды булдырырға тырышҡан. Ерҙе талау иҫ киткес ҙур күләм алған. Мәҫәлән, 1827 йылда Урман-Көҙәй волосының ерен межалағанда башҡорттоң 160295 дисәтинә еренән үҙҙәренә 6420 дисәтинә генә ҡалдырылған, бүтән өлөшө дәүләт файҙаһына тартып алынған.

Ырымбур межа кәнсәләренең мәғлүмәттәре буйынса, 1833 йылдың мартында губернияла бөтәһе 28304856 дисәтинә ер булған, шуның 14093742 дисәтинәһе башҡорттоҡо тип иҫәпләнгән. Ләкин "башҡорттоҡо" тигән төшөнсә һүҙҙә генә йөрөгән, сөнки был ерҙең күп өлөшө башҡорт ҡулында булмаған йәки файҙаланыу өсөн яраҡһыҙ булған. Башҡорттоҡо тип иҫәпләнгән ерҙән тау заводтары һәм тау түрәләре биләгән, рус һәм татар алпауыттары баҫып алған, казактарға бирелгән, файҙаланыуға яраҡһыҙ булған ерҙәрҙе алып ташлаһаң, башҡорттарға барлығы 3074880 дисәтинә ер тороп ҡалған.

1832 йылдың 10 апрель указы башҡорттарҙы "хәҙерге мәлдә улар ҡулында булған бөтә ерҙең эйәһе" тип белдергән, шул уҡ ваҡытта уларҙың биләмәһен етенсе ревизияла иҫәпләнгән һәр ир затының йән башына ҡырҡ дисәтинә надел менән сикләгән. Ләкин ул надел йәнә бөтөнләй ысынға тура килмәгән. Етенсе ревизия буйынса (1817 йыл) башҡорттарҙың 146000 ир заты, ә туғыҙынсы ревизия буйынса (1850 йыл) 242000 ир заты булғанын күҙ уңында тотоп, шул һанға ысынлап башҡорт биләгән ерҙе бүлһәң, тәүге осраҡта 20,9 дисәтенә, икенсеһендә 12,7 дисәтенә генә килеп сыға. Шул уҡ ваҡытта хеҙмәтсе татар, мишәр һәм типтәргә утыҙ дисәтинә, бөтә булған башҡа килмешәккә ун биш дисәтинә ныҡлы, хужалыҡ өсөн уңайлы ер билдәләнгән. Тимәк, һәр килмешәк, хатта үҙ яйына килеп ултырған һәр баш-баштаҡ, Башҡортостандың төп халҡы булған башҡорттан бик күпкә яҡшыраҡ хәлгә ҡуйылған булған. Шуға ҡарамаҫтан, рәсми ҡағыҙҙарҙа башҡорт һаман "ер биләүсе" тип атап йөрөтөлгән. Йыш ҡына алпауыттар һәм батша администрацияһы аҫаба башҡортто ҡыуып, уның ерен

баҫып ала торған булған. Мәҫәлән, 1832-1842 йылдарҙа Бөрө өйәҙендәге ун ете ауылдың башҡорто ҡыуылып, уларҙың ере татар алпауыты Тевкелевҡа бирелгән. Шул рәүештә ҡыуылған башҡорттар йә кермешәк булып башҡа урынға күскән, йәки ерҙе тартып алған алпауыттарға тамаҡ ялына бушлай эшләргә ялсы булып барған.

1863 йылдың 14 май ҡарары башҡорт ерен талауға тағы ҙурыраҡ мөмкинлек асҡан. Был ҡарар башҡорт общинаһына үҙ ҡулындағы ерҙе өй хужаларының шәхси милкенә бүлеп бирергә рөхсәт иткән. Шул хәлдән һуң ауыр йөкләмә һәм бирәсәктәрҙән түҙмәҫ сиккә еткән башҡорт ерҙең үҙенә тейгән өлөшөн һатырға хоҡуҡ алған. Ерен һатҡан кеше үҙ ҡулындағы һуңғы саранан мәхрүм булыр булған.

Рус тарихсылары генераль межалыҡты “буш” башҡорт ерҙәрен тартып алыуы, Рәсәйҙең эске губернияларынан күп-күпләп рус халҡын күсереп ултыртыуы менән прогрессив әһәмиәткә эйә булған тип иҫәпләй. Йәнәһе, ул общиналы ер тәртибен бөтөрөп, башҡорт хужалығын торғонлоҡтан сығарған, төбәктә етештереү көсөнөң һәм ауыл хужалығының үҫеүенә, тауар-аҡса мөнәсәбәтенең тәрәнәйеүенә ярҙам иткән.[70] Рус тарихсыларының рус хөкүмәте атҡарған колониаль сараларҙы аҡлауы тәү тапҡыр түгел (мәҫәлән, И.К.Кириллов планы һәм Ырымбур экспедицияһын аҡлау). Бының сәбәбе нимәлә тигәндә, рус тарихсылары Башҡортостанды рустың үҙ еренә, унда ҡылынған бөтә нәмәне рустың үҙ эшенә һанап, колонизаторҙар политикаһын шул уҡ колонизаторҙар мәнфәғәтенән сығып баһалай. Ерһеҙ, көн күрер сараһыҙ ҡалдырып, рустар башҡортҡа яҡшылыҡ эшләгән, торғонлоҡтан сығырға юл асҡан, тигән һүҙҙәре менән был тарихсылар, “ер башҡортҡа артыҡ йөк булып тора, шул йөктән бушатып вәхшиҙәргә яҡшылыҡ эшләргә кәрәк”, тигән XIX быуат йыртҡыстарының фекеренә ҡушыла. Әммә ғәмәлдә булған ысын факттар башҡорт хужалығын ер һәм общиналы ер биләү тәртибе түгел, ә бөтөнләй бүтән сәбәптәр торғонлоҡҡа дусар иткәнен күрһәтә, ул да булһа – быуаттар буйы халыҡты һыпырып ҡырыу аяуһыҙ талау һәм иҙеү көс еткеһеҙ хәрби хеҙмәт һәм

---

[70] Очерки.., т. I, ч. 2. Уфа, 1959, 51-се бит.

эш хеҙмәте, бөтә тормош һәм эште быуып, талап торған һәр төрлө тыйыу закондары. Ошо ҡот осҡос колониаль шарттар булмаһа, башҡа хужалыҡ кеүек үк, объектив экономик закондарға буйһонған башҡорт хужалығы торғонлоҡто белмәҫ һәм крепостлы ҡоллоҡтағы ҡырағай Рәсәйҙекенән бер ҙә кәм үҫмәҫ ине. Башҡорт хужалығына торғонлоҡ сифаты йәбештереп, рус тарихсылары башҡорт йәмғиәтен ғөмүмән объектив үҫеш закондары тәьҫиренән ситкә ҡуя һәм уның этәргес көсө итеп ҡанһыҙ рус колониаль политикаһын күрһәтә, шуның менән тотош колониализмды яҡлау юлына баҫа. Башҡорт ерҙәрен талау, рус алпауыттарын һәм крәҫтиәндәрен күсереп ултыртыу Башҡортостанда ауыл хужалын үҫтереүгә килтергән хәлдә лә, был үҫеш рус мәнфәғәтенә хеҙмәт иткән, ә ҡаты иҙгенлектән быуылған, тәбиғи үҫеш юлынан тибеп сығарылған башҡорттар бынан бер файҙа ла күрмәгән. К.Маркс “Һиндостандағы британ хакимлеген киләсәк һөҙөмтәләре” тигән мәҡәләһендә: “Инглиз буржуазияһының Һиндостанда бойомға атҡарыуы ихтимал булған бөтә нәмә, халыҡ ялпыһына ирек тә бирәсәк түгел, уның социаль хәлен дә яҡшыртасаҡ түгел, сөнки тегенеһе лә, быныһы ла етештереү көстәренең үҫешенә генә бәйләнмәгән, ә шул етештереү көстәренең халыҡ ҡулында булыу-булмауына бәйләнгән”[71], - тип яҙған. Башҡортостанда ла шулай уҡ хәл булған: колонизаторҙар бойомға атҡарған бер нәмә лә башҡорттоҡо булмаған.

Генераль межа үткәреү һәм “буш” башҡорт ерҙәрен алыу барышында рус хөкүмәте көняҡ-көнсығыш башҡорттарын көслөк менән ярым күсмә малсылыҡтан игенселеккә күсереү өсөн бик киҫкен сара күрә башлаған. Генерал-губернатор Обручев һәм Башҡорт-мишәр ғәскәренең командующийы Циолковский, сәсеүлектәрҙе ныҡ киңәйтергә, “һәр береһе ер һөрөп иген сәскәс кенә, йәй көнө йәйләүгә сығырға”, тип ҡаты бойороҡтар биргән. Кантон башлыҡтарына улар бойороҡтоң үтәлешен күҙәтеп торорға, үтәмәгән кешене таяҡ менән һуҡтырырға ҡушҡан. Был йәһәттән кантон нәзире Филатов бигерәк ныҡ тырышҡан, ул яңы тормош тәртибенә ҡапыл өйрәнә алмаған һәр кешене аяуһыҙ туҡтамаған. Рус администрацияһы, күрәһең, игенселек кенә ауыл

[71] К.Маркс и Ф.Энгельс. Соч., т. 9, 228-се бит.

хужалығының прогрессив формаһы булып тора, тигән ялған ҡараштан сыҡҡан һәм ҡаты көслөк сараларын ҡулланып, башҡортҡа яҡшылыҡ эшләйем тип уйлаған. Ундай ялған ҡараш бөгөнгө көндә лә рус араһында өҫтөнлөк итә, ә ғәмәлдә халыҡтың нормаль экономик тормошон тәьмин иткән һәр хужалыҡ формаһы йәмғиәттә үҙен тулыһынса аҡлай. Рус администрацияһы хужалыҡ ҡоролош тамырҙан үҙгәртеү бөтә тормош тәртибенең тәбиғи үҫеш барышында ғына, әкренләп тәжрибә һәм матди саралар туплау һөҙөмтәһендә, ижтимаға психологияны шул ыңғайға ҡулайлаштырыу нәтижәһендә генә мөмкин булғанын бөтөнләй уйламаған һәм халыҡтың бөтә донъя терәген ҡапыл һындыра башлаған. Улар шулай уҡ был төбәктең алпауыт һәм заводсылар тарафынан урман-тау эсенә ҡыҫырыҡлаған башҡорттары яраҡлы ер булмау сәбәпле бик теләгән хәлдә лә тотош игенселеккә күсә алмағанын иҫәпкә һуҡмаған. Генерал В.А.Перовский ошо хаҡта: “Иртә яҙ менән йәйләүгә сығармауҙың туп-тура һөҙөмтәһе ауыл эргәһендәге сабынлыҡтарҙы үләне сыйыр-сыҡмаҫ көйө малдан тапатып бөтөүҙән ғибәрәт. Йәйләүгә күсеү ғәҙәте кемдеңдер еңел аҡылынан сыҡҡан нәмә түгел; уны бөтөрөү бөтә халыҡ хужалығын ҡыйратыу менән бәрәбәр; шуға күрә генерал Обручевтың бойороғон үтәгәндән бирле башҡорт көтөүҙәренең барған һайын тиҙерәк кәмергә тейешлеген алдан уҡ әйтеп була”, - тип яҙған. Перовскийҙың әйткәне дөрөҫкә тура килгән. Мал һаны ныҡ кәмегән. Күп башҡорт малдан яҙған, ысын игенсе булып китә алмаған. “Ырымбур түрәләренең тәүҙә иген сәсергә, шунан һуң ғына малсылыҡ менән шөғөлләнергә тигән бойороғо башҡорт халҡының былай ҙа бик ярлы хужалығын тамам ҡыйратҡан”.[72] Ләкин башҡорт хужалығының ҡыйрауы көньяҡ-көнсығышта булмаған. Мәҫәлән, 28 йыл эсендә, 1827 йылдан 1855 йылға тиклем, башҡорттарҙа йылҡы башы йән башына тура килгән 1,37 аттан 0,98 атҡа ҡалған, һыйыр малының һаны 0,78 баштан 0,59 башҡа ҡалған, ә игенселек менән шөғөлләнгән төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының малы урта күрһәткестән 1,5-2 тапҡырға кәмерәк булған, йәғни йән башына 0,65-0,49 баш ат тура килгән. Шул уҡ ваҡытта Башҡортосанда йәшәгән башҡа игенсе халыҡтарҙа йән башына кәм тигәндә бер ат тура килгән,

[72] Очерки.., т. I, ч. 2. Уфа, 1959, 56-сы бит.

йәғни игенсе башҡорттарға ҡарағанда ике тапҡырға артығыраҡ булған. Өҫтәүенә, башҡорттоң малы барған һайын кәмегән, ә башҡа халыҡтыҡы артҡан. Тимәк, башҡорт малының кәмеүе һәм башҡорт хужалығының ҡыйралыуы көслөк менән малсылыҡтан игенселеккә күсереүҙән генә түгел, ә бөтә булған аяуһыҙ иҙгенлек ситемаһынан килгән.

Башҡорт хужалығының ҡыйралыуы һәм бөтә башҡорттоң бөтөүе арҡаһында башҡорттар ерҙәрен талап алған алпауыт, кулактарға бөтөнләй эш хаҡһыҙ, тамаҡ ялына ғына, ялсы булып барған һәм уларҙың барлыҡ хужалыҡ эшен эшләгән. 1850 йылда Башҡортостанды өйрәнеп йөрөгән полковник Беклемишев "ҡот соҡос дөрөҫлөктө асып": "етенсе һәм унынсы кантондар эргәһендәге алпауыттарҙың ҡара өйҙәрендә тамам хәйерселеккә төшкән ярым яланғас башҡорттар ҡыш буйы тамаҡ аҫрай, уларҙың һаны йыл һайын арта бара", - тип яҙған.[73] Хәҙерге рус тарихсылары әйткәнсә, "башҡорт хужалығын торғонлоҡтан сығарыу" һөҙөмтәһе шул булған.

Бөлгән башҡорттарҙың бер өлөшө ас ғаиләләрен ҡалдырып, рус һәм татар промышленниктарының ҡулындағы завод һәм алтын приискыларына эшкә ялланырға, зимагурлыҡка киткән. Унда башҡорттарҙы колониаль ҡол сифатында иң ауыр, түбән хаҡлы эштә файҙаланғандар. Администрацияның яманлығына, эш хаҡы түләгәндә алдауына сыҙамай, уларҙың бик күбе контракт бөтмәҫ элек эштән ҡаса торған булған, ләкин заводсылар менән бер төптән эшләгән кантон башлыҡтары ҡаты яза биреп, ҡасҡындарҙы кире тапшырған. Бик күп башҡорт һуҡыр тип аҡса өсөн рус урман промышленниктарына ялланып, шул замандың иң имгәткес эшенә – ҡыуғын ҡыуырға йөрөгән. Бөтә был эш кантон системаһы күтәрткән "эш хеҙмәте"нән тыш өҫтәмә рәүештә башҡарылған.

Рус тарихсыларының, "эшсән халыҡтың ярлыланыуы ахыр сиктә Башҡортостан ауыл хужалығы һәм промышленносында капитализмдың үҫеүенә һәм шул үҫеш өсөн кәрәк булған эш көсө баҙарының барлыҡка килеүенә булышлыҡ иткән"[74], тигән һүҙҙәре бөтөнләй тап килмәй, сөнки бында бөлөү һәм

---

[73] Очерки.., т. I, ч. 2. Уфа, 1959, 56-сы бит.
[74] Очерки.., т. I, ч. 2. Уфа, 1959, 37-се бит.

эш көсө “баҙары” яһалыу бөтә халыҡ иҫәбенә түгел, ә башҡорт халҡы иҫәбенә ғәмәлгә килгән, шуға күрә эксплуатация синфи төҫ түгел, ә милли төҫ алған. Бигерәк тә ундай һүҙҙе промышленносҡа ҡарата әйтеп булмай. Унда башҡорттар эшсе эшен түгел, ҡара эште башҡарған, шулай булғас, ысын промышленность пролетариатына әйләнә алмаған. Ауыл хужалығында ла, промышленноста ла колонизаторҙар колониаль башҡорт халҡын иҙеп, хоҡуҡһыҙ һәи хаҡһыҙ эш көсөн егеп байыған.

XIX быуаттың 50-се йылдарында Ҡаҙағстанды ҡушыу һәм рустарҙың Урта Азияға үтеп инеүе менән Башҡортостан сик буйынан эстә ҡалған, башҡорттарҙы һыҙыҡ хеҙмәтендә файҙаланыуҙың кәрәге бөткән, шуға күрә рус хөкүмәте башҡортто өлөшләп яһаҡлы ҡатламға күсерергә ҡарар иткән. 50-се йылдар аҙағында хәрби хеҙмәткә көньяҡ-көнсығыш кантондар ғына йөрөгән, ҡалғандарына аҡса яһағы һалынған. 1861 йылдан хеҙмәт иткән башҡорттарҙы ла “эш командаларына” ғына ала башлағандар. Кантонлы идара системаһын бөтөрөү мәсьәләһе ҡалҡып сыҡҡан.

Ырымбур, Һамар, Пермь, Вятка губернияларының яһаҡлы ҡатламға күсереү хаҡындағы указды Алексадр II 1863 йылдың 14 майында раҫлаған. Хәрби хәлдә етенсе һәм унынсы кантондар ҡалған. Шуның менән бергә кантон бүленеше ваҡытлыса һаҡланған, кантон башлыҡтары әүәлгесә генерал-губернаторға һәм хәрби етәкселеккә буйһонған.

1865 йылдың 25 июлендә кантонлы идара бөтөнләй бөтөрөлгән. Бөтә башҡортҡа яһаҡ һалынған, был яһаҡ дәүләт һәм батша крәҫтиәндәренең йөкләмәһенән бик күпкә артыҡ булған. Был саранан рус ҡаҙнаһы һигеҙ йөҙ мең һум йыллыҡ төшөм өҫтәлгән.

XVIII быуатта башҡорттар яһаҡлы ҡатламға күсереүҙе ҡабул итмәй ныҡ ҡаршылашҡан булһа, хәҙер был күсереү уларҙа әллә ни ризаһыҙлыҡ уятмаған: кантон осоронда күргән ауырлыҡтарҙан һуң яһаҡлы ҡатламға күсеү уларға еңеллек булып күренгән. Уларҙың инде нимәгәлер ҡаршылашырлыҡ хәле лә ҡалмаған. Хәрби-феодаль ҡоролош үҙенең бөтә тормошто ҡаты тәртипкә буйһондороуы, йөрөү иркен ҡырҡа киҫеүе, аяуһыҙ иҙеүе менән башҡорт

халҡының берҙәмлеге, ижтимағи-политик активлығын һүндергән,бөтә көс һәм ихтыярын һындырған. Бер генә тапҡыр, 1835 йылда, рус дәүләт крәҫтиәндәре һәм казактарының болаһынан дәрттәре тоҡанып, төньяҡтағы дүрт башҡорт кантонының феодалдары халыҡты яңы азатлыҡ көрәшенә күтәрергә тырышып ҡараған да, тик башҡортҡа элекке теләктәшлек, элекке өмөт ҡалмаған, шуға күрә был яу көсәйеп китә алмаған. Кантонлы идара системаһы үҙ эшен эшләгән. XIX быуатта һәм XX быуат башында башҡорт менән шөғөлләнгән этнограф Д.П.Никольский һәм тарихсы В.И.Филоненконың кантон заманын “иң ҡара осор” тип атауы бушҡа булмаған.

## 9. БАШҠОРТТО ЕРҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ СӘЙӘСӘТЕ. БАШҠОРТ БОЛАЛАРЫ

XIX быуаттың урталарынан, бигерәк тә Россияла крепостлыҡ хоҡуғын бөтөргәндән һуң, башҡорт ерен талау тағы ифрат ныҡ көсәйеп киткән. Рус батшалығының политикаһы шуға йүнәлтелгән булған. Ырымбур губернаторы Крыжановский батшаға ебәргән 1866 йылғы отчетында: "... Администрацияның төп хәстәре башҡорт еренең рус халҡына күсеүен мөмкин тиклем еңелләштереүҙән, йәғни башҡортто ерһеҙ итеүҙән, ғибәрәт булырға тейеш. Шул маҡсатҡа ирешеү өсөн башҡорт ерҙәрен межалау берҙән-бер ышаныслы сара булып тора", - тип яҙған. 1869 йылдың 10 февралендә батша башҡорт ерен яңынан межалау хаҡында закон раҫлаған. Был закон Крыжановский тәҡдимдәре нигеҙендә эшләнгән булған. Закон буйынса, башҡорт еренән өс төрлө ер фонды сығарыу күҙҙә тотолған:

1) аҫаба башҡорттарҙың унынсы ревизия (1856 йыл) иҫәбендәге һәр ир затына ун биш дисәтинән билдәләнгән "душевой наделы"*;

2) башҡорттарҙың "душевой наделдан тышҡы", артыҡ тип иркен һатырға йәки ҡуртымға бирергә иркен булған ере;

3) аҙ ерле дайсаларҙан, йәнәһе, кермешектәрҙе килтереп ултыртыу өсөн тәғәйенләнгән "запас"ер.

Иң яҡшы ерҙәр запасҡа сығарылған. 90-сы йылдар аҙағына тиклем Өфө һәм Ырымбур губернияларында ғына "запасҡа" тип 839553 дисәтинә башҡорт ере тартып алынған. Был фондтан кермешәктәргә бер нәмә лә тәғәйенләнмәгән. 1871 йылдың 4 июнендә Крыжановский тырышлығы менән "запас" ерҙәрҙе отставкалағы чиновник һәм офицерҙарға арзан хаҡҡа һатырға рөхсәт иткән закон сығарылған. Шул закон нигеҙендә 1878-1881 йылдарҙа ҡаҙна бүләк итеп йәки

---

* 1832 йылдың 10 апрель указы йән башына ҡырҡ дисәтинә билдәләгән ине.

дисәтинәһен 1 һум 80 тиндән һатып, 503389 дисәтинә ер тараҡҡан. Ер спекуляцияһына киң юл асылған. Буш ҡына хаҡҡа алған ерҙе яңы хужалар йә Нижегород-Һамар банкына ун-ун дүрт тапҡыр артыҡ хаҡ менән закладҡа һалған, йәки утыҙ тапҡыр артыҡ хаҡ менән һатып ебәргән. Башҡорт ерҙәренә Рәсәйҙең бөтә яғынан йыртҡыс ҡулдар һуҙылған.

“Запас” ерҙәрҙе һатып таратыуҙан башҡа, “душевой наделдан тышҡы” ерҙәрҙе лә ныҡ талағандар. Был хаҡта “Оренбургский листок” газетаһы 1876 йылдың 15 февралендә: «Калифорниялағы алтын биҙгәге һымаҡ, ниндәйҙер ер биҙгәгенә оҡшаш нәмә килеп сыҡты”, - тип яҙған. Ғәмәлдәге ҡағиҙә буйынса, “душевой наделдан тышҡы” ерҙәрҙе һатыу хаҡындағы ҡарар аҫаба башҡорттарҙың ауыл йыйылышында 2/3 күпселек тауыш менән ҡабул ителергә тейеш булған. Әммә был ерҙәрҙе һатҡанда башҡорттарҙың ҡырҡа ҡаршы булыуына ла ҡарап тормағандар. Иң киң таралған ысул тураһында 1906 йыл дума сессияһында 1 Дәүләт думаһының депутаты Сыртланов һөйләгән: “... Тәүҙә волость суды менән исправник килеп, тиҙ үк бирәсәкте (недоимканы) түләргә талап итә. Башҡорттар, бирәсәкте түләргә аҡса юҡ, тиһә, исправник әйтә: “Ерегеҙ бар, һатығыҙ шул ерегеҙҙе, хәҙер үк бирәсәгегеҙҙе түләмәһәгеҙ, волость суды һеҙҙе ҡамсы менән һуҡтырырға хөкөм итә лә, шунда уҡ һуҡтыра”, - ти. Ысынлап та, шунда уҡ, ун-ун биш кеше һуҡтырғас, башҡорттар ерҙәрен һатырға риза була, шул минутта, хаҡын да, кемгә һатылғанын да күрһәтмәйенсә, приговор яҙыла”. Ләкин бирәсәк менән ҡыҫыу башҡорттарҙы көсләй торған берҙән-бер сара булмаған. Мәҫәлән, генерал Крыжановскийға хөкүмәт алты мең дисәтинлек тап-таҙа һомғол ҡарағай урманын бүләк иткән. Шуны “түңәрәкләмәксе” булып, генерал башҡорттарҙан күршеләге урманды ла бирергә ризалыҡ талап итә башлаған. Көс ҡулланыу һәм тәьҫирле кешеләрҙе ауылдан ҡыуыу ғына ярҙам итмәгәс, договор төҙөр өсөн кәрәк хәтлем ҡултамғаны генерал ҡурҡышынан хәлһеҙ ҡарттарҙан, үҫмерҙәрҙән һәм хатта үле йәндәрҙән йыйған. Ер “һатып” алғанда һәр ваҡыт алдыҡ, ялғанлыҡ, көс һәм хыянатлыҡ ҡулланылған. Н.В.Ремезов башҡорт ерен “һатып” йәки тартып алған саҡтағы бик күп оятһыҙ ваҡиғалар хаҡында яҙғанда: “Борон башҡорт ерен туранан-тура көс менән баҫып

алғандар – ап-анһат. Был юл менән алырға ярамай башлағас, һатып ала башлағандар, ләкин ер һатып алыу һылтау ғына булған, ғәмәлдә барыбер шул көс менән алғандар; был ысул менән ер алыу мөмкинлеге лә бөткәс, төрлө алдыҡ һәм мутлыҡ эшләй башлғандар"[75], - тип әйткән.

Башҡорт араһында колониаллеккә ҡаршы башланған көслө хәрәкәт ҡыҫымы аҫтында 1878 йылда ерҙе "иркен" һатыу тураһындағы закон бөтөрөлгән, ләкин талау бөтмәгән. 1882 йылдың 15 июнендә башҡорт ерҙәрен һатып алырға ҡаҙна менән крәҫтиән йәмғиәттәренә хоҡуҡ биреү хаҡында яңы закон сыҡҡан. 1886-1888 йылдырҙа Ырымбур һәм Өфө губернияларында ҡаҙна 157351 дисәтинә башҡорт урманын һәр дисәтинәһенә бер һум хаҡ түләп һатып алған. Һаман да әүәлдәгәсә алдағандар, ҡурҡытҡандар, ауылы-ауылы менән ҡамсы һуҡтырғандар.

Башҡорт ерен, шул иҫәптән урманлы вә мәғдәнле майҙандарҙы, 1869 йылдың 10 февраль законы нигеҙендә ҡуртымға алыу ҙа башҡортто талай торған көслө ысул булған. Дисәтинәһенә нисәлер тин генә түләп ун ике йылдан етмеш йылға тиклем ҡуртымға алған ер төрлө ялғанлыҡ арҡаһында ҡуртымсының үҙ милкенә әйләнгән. Был хаҡта башҡорттар үҙҙәре лә хатта белмәгән һәм һаман ер яһағы түләй торған. XIX быуат аҙағында бер Ырымбур губернияһында ғына 1 500 000 дисәтинә мәғдәнле ер, 500 000 дисәтинәһе татар алтын промышленнигы Рәмиевтар тарафынан, ҡуртымға алынған. Башҡорттарҙың алған ҡуртым хаҡы шул хәтлем бәләкәй булған, хатта үҙҙәре түләгән ер яһағының яртыһын ғына ҡаплаған, ә Рәмиевтар сыҡҡан алтындан миллион-миллион файҙа алған.

Ҙур урман майҙандарын ҡуртымға алыу бик киң таралған. Ҡуртымсылар йөҙәр-йөҙәр мең ағасты ҡырҡып, башҡорт урмандарын йыртҡыстарса юҡ иткән. Ағас ҡырҡып улар иҫәпһеҙ күп файҙа сығарған. Алпауыттар, кулактар, сауҙагәрҙәр һанһыҙ һөрөнтө ер майҙандарын ҡуртымға алған. Ҡуртым приговоры көҙ аҙағында, башҡортҡа яһаҡ түләр өсөн бик аҡса кәрәк саҡта, төҙөлә торған булған, шуның өсөн ҡуртымсылар бөтөнләй буш, ысын хаҡтан ун биш-егерме тапҡырға кәм, хаҡ биргәндәр. Мәҫәлән, татар сауҙагәре Хөсәйенов 1891-1892 йылдарҙағы ҡытлыҡ арҡаһында башҡорттарҙың бик ауыр хәлдә ҡалғанын

[75] Ремезов Н.В. Очерки из жизни дикой Башкирии. М., 1889, 88-се бит.

файҙаланып, Орск өйәҙендә 73 745 дисәтинә ерҙе һәр дисәтинәһен 6,6-шар тин йыллыҡ хаҡ менән ҡуртымға алған. Яҙына ул шуны дисәтинәһен 1,5-2 һум менән крәҫтиәндәргә һәм яңы күскән килмешәктәргә биргән. Ошондай нәмә ул заманда ғәҙәттәге хәл булған.

Алпауыттар, промышленниктар, сауҙагәрҙәрҙән тыш, башҡорт ерен талауҙа рус һәм башҡа күскенсе халыҡ крәҫтиәндәре ныҡ ҡатнашҡан. 1863 йылдан крәҫтиәндәр бөтмәҫ-төкәнмәҫ киң ташҡын булып Башҡортостанға ябырылған. Рус администрацияһы Башҡортостанды күскенселәр менән тултырыуға ҙур әһәмиәт биргән. 1873 йылда Өфө губернаторы Ушаков: “Эске губернияларҙан ағылған иҫәпһеҙ күскенселәр массаһы ғына урындағы халыҡ араһында рус элементына өҫтөнлөк бирәсәк”, - тип яҙған. Ошо политиканы бойомға ашырыу өсөн батша хөкүмәте махсус циркуляр һәм ҡарарҙар менән крәҫтиәндәрҙең Башҡортостанға күсеп йәшәүен законлаштырған. Шул заманда Н.В.Ремезов: “күсенеү хәрәкәте – ул рус халҡының иҫ киткес оло көнсығыш һөжүме”[76], - тип яҙған. Уның раҫлауынса, күскенселәрҙең һаны хаҡында һис ниндәй дөрөҫ мәғлүмәт булмаған, рәсми мәғлүмәттәр ысын һанды минимум өс тапҡырға кәметеп күрһәткәндәр, сөнки иң күп өлөштө үҙ белдеге менән килгән күскенселәр тәшкил иткән. Күскенселәрҙең иң көслө ағымы 1871-1885 йылдарға тап килгән. Ни өсөн тигәндә, беренсенән, башҡорт ерен күпләп эләктергән илбаҫарҙар шул осорҙа уны күпләп һата башлаған, икенсенән, 1882 йылдың 15 июнь законы менән башҡорт ерен крәҫтиән йәмғиәттәренә һатыу рөхсәт ителгән. 1891-1895 йылдарҙа ҡытлыҡ һәм Һамар-Златоуст тимер юлын һалып бөтөү сәбәпле Башҡортостанды яңы күскенселәр ташҡыны килеп баҫҡан. Күскенселәр ас бүре өйөрө булып башҡорт ерҙәренә ташланған, улар урындағы власть ярҙамы һәм шул уҡ алдыҡ-ялғанлыҡ менән буш ҡына хаҡҡа күпләп ер ала башлаған. Башҡорт ерҙәренең ҡуртым хаҡы ла шәхси ер биләүселәрҙекенән өс-дүрт тапҡырға кәм булған. Башҡорт ерҙәрендә йыл һайын рус, украин, татар, сыуаш, марҙыуа һәм башҡа халыҡтарҙың яңынан-яңы ауылдары барлыҡҡа килгән. Ғәмәлдәге закондың һәм аҫабаларҙың ҡаршы булыуына ҡарамаҫтан, бик күп ауыл хатта башҡорттоң “душевой надел” еренә

[76] Ремезов Н.В. Аталған китап, 5-се бит.

килеп ултырған. Крәҫтиәндәр ташҡыны араһында 1877-1905 йылдарҙа Өфө һәм Ырымбур губернияларында ғына килмешәк крәҫтиән йәмғиәттәренең ер биләмәһе утыҙ биш тапҡырға артҡан.

Рус хөкүмәте тарафынан ер талау һәм руслаштырыу маҡсатында үткәрелгән күскенселек политикаһы Рус дәүләтенең үҙенә лә ҙур зыян килтергән, сөнки шуның арҡаһында 1861 йылдан һуң ерһеҙ ҡалған эске рус губернияларының крәҫтиәндәре "ирекле" пролетарийға әйләнмәгән, промышленносҡа бармаған, ә, бик әҙ өлөшөнән башҡаһы, ирекле игенсе булып киткән. Был хәл Россияны капиталистик үҫештә башҡа эре Европа дәүләттәренән ныҡ артҡа ҡалдырған төп сәбәптәрҙең береһе булған.

Башҡорт ерҙәрен межалау һөҙөмтәһендә XIX быуат аҙағында Өфө губернияларының етмеш бер башҡорт дайсаһында (бөтәһе һикһән ете булған) һәм Ырымбур губернияларының ун дүрт башҡорт дайсаһында (бөтәһе егерме ете) башҡорт өлөшөнә бөтәһе 8 260 285 дисәтинә ер тороп ҡалған. Әммә ғәмәлдә башҡорт ҡулында унның ла булмаған. Был ерҙең йөҙәр-йөҙәр дисәтинәһе башҡорт ерен "һатып" алып та, межалап айырмаған шәхси хужалар ҡулында булған. Шуға күрә формаль йәһәттән һаман ергә хужа тип иҫәпләнгән башҡорт үҙенең ысын биләгән еренән бик күпкә (ҡайһы берҙә ике-өс тапҡырға) артыҡ майҙан өсөн ер яһағы түләп торған.

Ҡайһы бер тарихсылар 70-90-сы йылдарҙа "һатып" алыу һәм "запасҡа" ҡырҡыу рәүешендә Өфө һәм Ырымбур губерниялары буйынса башҡорттан 2 433 000 дисәтинә ер тартып алынған тип иҫәпләй. Ләкин был һан шул осорҙа таланған башҡорт еренең ысын күләмен сағылдырмай, сөнки уға, берҙән, алтмышынсы йылдарҙа таланған ерҙәр, икенсенән, башҡа губернияларҙағы (Һамар, Вятка, Пермдәге) башҡорттоң таланған ере инмәй. "Волжский вестник" газетаһы 1889 йылдың июлендә 1863-1878 йылдарҙа 2 000 000 дисәтинә башҡорт ере таланған, тип яҙған. Бынан һуң тағы "запасҡа" ер ҡырҡыу һәм күскенселәрҙе талау дауам иткән. Тимәк, башҡорттар һикһәненсе йылдарҙың башына тиклем үк кәм тигәндә 2 500 000 дисәтинә ерен юғалтҡан. Ошо һанға шунан һуңғы егерме йыл эсендә күскенселәр талаған ғына ерҙе ҡушҡанда ла алтмышынсы йылдар

башынан XIX быуат аҙағынаса таланған башҡорт еренең дөйөм күләме 3 500 000 дисәтинә аҫаба ер ҡуртымда иҫәпләнгән, уға ла инде башҡорт үҙе эйә булмаған.

Рус хөкүмәте шул һөҙөмтәнән дә риза булмай, яңынан-яңы ер талау ысулдары уйлап сығарған. 1898 йылдың 20 апрелендә ул ауыл общиналарының ерен межалау хаҡында закон сығарған. Был закондың асылы ҡуртымға алынған башҡорт ерендә ауыл ҡороп ултырырға рөхсәт биреүҙән ғибәрәт булған. Ҡуртым мөҙҙәте үткәс,башҡорттар "тәүге шартта" (йәғни шул уҡ хаҡ һәм шул уҡ күләмдә) договорҙы яңыртмаһа һәм шул ерҙе һатырға ла риза булмаһа, ҡуртымсылар ултыртҡан бөтә йорт-ҡаралты һәм "ерҙе яңыртыу эштәренең" хаҡын ҡайтарырға тейеш булған. Өҫтәүенә ерҙең ҡуртым хаҡын бөтөнләй юҡ кимәлдә, дисәтинәһенә бер йылға ике тиндән дә кәм түләгәндәр. Шул хаҡтың да алтмыш проценты "йәмәғәт фондына" тигән исем менән урындағы властар ҡулына эләккән. Колонизаторҙар көсләп таҡҡан шундай бөлдөргөс шарттарға ҡарамаҫтан, башҡорттар ерҙе һатмаҫҡа, нисектер ҡуртымға бирергә бөтә тырышлығын һалған, сөнки ҡуртым уларға күпмелер ваҡыт ер эйәһе тигән юридик хоҡуҡты һаҡларға мөмкинлек биргән. Хөкүмәт, үҙ нәүбәтендә, башҡортто ҡуртым ерен һатырға мәжбүр итер өсөн бөтә сараһын күргән, ер яһағын һәм йән башы һалымын арттыра барған. Шул һалымдарҙы йыйған саҡта власть вәкилдәре ер "һатып алыусыларҙы" бергә йөрөткән.

1883 йыл Өфөлә, 1885 йыл Ырымбурҙа Крәҫтиән ер банкының бүлектәре асылған. Был банк XIX быуат аҙағына бик көсәйеп киткән һәм 1895 йылдан Башҡортосанда иң яман ер талаусы йыртҡыстарҙың береһенә әйләнгән. Банктың эшмәкәрлеге 1906 йылдан, яңы күскенселәр ташҡыны башланыуы һәм 1914 йылға тиклем йыл һайын тигәндәй ҡытлыҡ килеп тороу арҡаһында бигерәк киң ҡолас алған. Банк ас башҡорттарға әҙме-күпме алдан аҡса биреп, ғәмәлдәге хаҡтан дүрт-алты тапҡырға арзаныраҡ хаҡ менән ерен һатырға мәжбүр булған. Башҡорттар йыйып алған ерҙе ул ссуда биреп, ер алырға ярҙам итеп, күскенселәргә һатҡан. Ксүкенселәр, иң элек улар араһындағы кулактар, банктың аралашлығынан башҡа ла ерҙе күп алған. Шундай эштәрҙең һөҙөмтәһендә 1905-1915 йылдар эсендә башҡорттар йәнә 1 000 000 дисәтинә аҫаба ернән яҙған.

Ерҙе аяуһыҙ талау башҡорт халҡында бик көслө ризаһыҙлыҡ уятҡан һәм улар, бигерәк тә етмешенсе йылдарҙан алып, шул йыртҡыслыҡҡа актив ҡаршылыҡ күрһәтә башлаған. Улар ер "һатыу" тураһындағы яҙған ҡағыҙҙарҙы кире ҡаҡҡан, "һатып" алынған йәки "запасҡа" ҡырҡылған ерҙәрҙе межалатмаған, межалау эшенә кеше ебәрмәгән, землемерҙарҙы ҡыуған, боланы баҫтырырға килгән полиция командаларына ныҡ ҡаршы торған улар яңы "хужаларға" ер менән файҙаланырға ирек бирмәгән, үҙ яйына урмандарҙы ҡырҡҡан, сабынлыҡтарҙа сабып алған, килеп ултырған крәҫтиәндәрҙе туҡмап ҡыуған, утарҙарынан игендәрен ташыған, алпауыт һәм кулак йорттарына ут төрткән һ.б., һ.б. ҡоралды бәрелеш һәм үлем хәлдәренә килтерә торған шундай болалар бөтә ерҙә һәр ваҡыт ҡубып торған. Ләкин йөҙ йыллыҡ "ҡара" дәүер эсендә милли берҙәмлектең йомшауы һәм килмешәктәрҙең бик күбәйеп, көсәйеп китеүе арҡаһында башҡорт халҡы элекке кеүек оло яуға ҡалҡа алмаған.

Ул йылдарҙағы болалар араһында башҡорттарҙы 1873-1874 йылдарҙан регуляр хәрби хеҙмәткә алыу хаҡындағы законға ҡаршы ҡуҙғалған көслө хәрәкәт айырым урын алып тора. Ғазаплы һәм һәләкәтле кантон идараһынан һуң күҙ асып өлгөрмәгән башҡорттар был законды элекке тәртипкә кире ҡайтып, дәүләт крәҫтиәндәренә тиңләү тип ҡабул иткән һәм власҡа буйһоноуҙан баш тартҡан. Ҡаршылыҡ хәрәкәтенең иң көслө урыны Пермь өлкәһе Юса өйәҙенең башҡорттары араһында булған. Хәрәкәтте баҫтырыу өсөн регуляр ғәскәр килтерелгән. Актив ҡатнашыусыларҙы Карелияға һәм Алыҫ Якутияға һөргәндәр. Якутияға һөрөү буштан ғына булмаған.

Етмешенсе йылдарҙа, башҡорт хәрәкәте һәм болалары көсәйгәс, батша хөкүмәте башҡорттарҙы ҙур-ҙур төркөмдәр туплап, Якутияға һөрөргә һәм шунда улар өсөн махсус колония ҡорорға булған. Колония өсөн алыҫ төпкөлдә, Бусанай йылғаһы буйында, Сунтар инород идараһынан 150, Олекминскиҙан 300, иң яҡын яҡут ауылынан 700 км ерҙә билдәләнгән. Билдәләнгән урында кеше йәшәрлек һис бер шарт булмаған. Яҡуттар башҡортҡа ярҙам итер өсөн ун мең һум аҡса, йөҙ баш екке мал, ике йөҙ бот арпа һәм биш мең һумлыҡ эш ҡоралы йыйған, ә хөкүмәт бер тин дә ярҙам бирмәгән. Киреһенсә, яҡуттар йыйған ярҙамдың күп

өлөшөн чиновниктар үҙләштергән. 1874 йылдың яҙында иҫ киткес алыҫ, ауыр юлда аслыҡтан һәм ауырыуҙан нисектер үлмәй ҡалған башҡорттарҙың тәүге төркөмө казактар һағы аҫтында билдәләнгән урынға килтергәндәр. Тейешле урынға еткәс, башҡорттар ағас ҡырҡып беренсе ауылдарын һалған, урман төпләп, ер әҙерләп, арпа сәскән. Арпа бөтөнләй үҫмәгән. Икенсе йылы арпа тағы ла үҫмәгән. Аслыҡ көсәйгән. Ул арала яңы башҡорт төркөмдәре килгән. Колония ҙурая башлаған. Астан үлмәҫ өсөн башҡорттар приискыларға барып, эшкә ялланып ҡараған. Ләкин полиция уларҙы кире тотоп килтергән, һаҡты көсәйткән. Башҡорттар һунар итергә, балыҡ тоторға уйлаған, тик уның көс тә, сара ла булмаған. Улар бик хәлһеҙләнгән, иҫәпһеҙе астан үлгән. Шуға ҡарамаҫтан, 1876 йылда башҡорттар тағы ике ауыл һалған. Оҙаҡламай яҡуттарҙы ярҙам итеүҙән тыйғандар, башҡорттарҙы үҙ яйына ташлап ҡуйғандар. 1887 йылға тиклем Яҡутияға, ирҙәре менән бергә барған ҡатындарҙы һанамайынса, өс мең башҡорт һөрөлгән. Уларҙың иҫән ҡалғаны һирәк булған. Ҡалғандарын ахыр сиктә яҡут округы һәм ҡалаларына таратып, полиция һағы аҫтына ҡуйғандар. 1896 йылға тиклем башҡорт ауылдары бушаған. Батша хөкүмәте Якутияла башҡорт колонияһы ҡороу уйын бойомға ашыра алмаған.

1894 йылдың 6 июнендә "буш" башҡорт урмандарын ҡаҙна ҡулына биреү хаҡында закон сыҡҡас, башҡортта колониаль иҙгенлеккә ҡаршы көрәш тағы нығыраҡ көсәйгән. Башҡорттар урман майҙандарын межалау буйынса приговор төҙөүҙән баш тартҡан. 1895 йылда Өфө өйәҙе Бәләкәй-Көҙәй волосының башҡорттары алты ай буйы үҙ дайсаларына землемерҙарҙы, лесничийҙарҙы, полицияны яҡын ебәрмәгән, власть вәкилдәренә һәм полиция командаһына улар ҡорал тотоп ҡаршы торған.

1903-1904 йылдарҙан һуң башҡорт болалары яңы көс алған. Башҡорттар менән башҡа милләт, бигерәк тә – рус крәҫтиәндәре араһында хас дошманлыҡ урын алған. Ҡанлы бәрелештәр, үрт һалыуҙар киң таралған. 1908-1913 йылдарҙа үрт һалыуҙан меңгә яҡын ут сыҡҡан.

Батша администрацияһы башҡорттарҙың сығышын ғәскәр көсө менән баҫтырған, унарлаған, йөҙәрләгән кешене бер юлы төрмәгә ташлаған, сыбыртҡы

менән һуҡтырған. Башҡа милләт халыҡтары башҡортто баҫтырыуға ихлас ярҙам иткән.

Башҡорттар колонизаторҙарҙың талауына ҡаршы, үҙ ерҙәрен кире ҡайтарыу өсөн көрәшкән. Башҡорт депутаты К.Хәсәнов халыҡ күңелендәген белдереп, икенсе Дәүләт думаһының сессияһында: “Әгәр хөкүмәт тартып алған ерҙәребеҙ ҡайтарылмаһа, бер ерҙе кире алыу өсөн бөтә сараһын күрербеҙ”, - тип сығыш яһаған. Хәсәнов азатлыҡ килеренә ышанған. Ләкин ул ваҡытта бик оҙаҡҡа һуҙылған ҡаты ҡыҫымдан һуң терелә башлаған башҡорт хәрәкәте элекке яуҙар һымаҡ бөтә халыҡты бергә ойоштора алмаған, ысын көрәш башлар өсөн башҡорттоң көсө лә етмәгән.

Һуңғы ер байлыҡтары йыртҡыстарса таланғас, башҡорт халҡы төпһөҙ бөлгөнлөккә төшкән. XVII-XVIII быуаттарҙа, ере әле етерлек саҡта, улар хатта иҫ киткес һәләкәтле ваҡиғаларҙан һуң да үҙ хужалыҡтарын яйлап-яйлап көн итер кимәлгә тиклем тергеҙә алған булһа, хәҙер ундай мөмкинлектән мәхрүм ҡалған. XIX быуат аҙағында хатта шул уҡ быуат уртаһында булған хәйерселек кимәленә ҡарағанда ла башҡорттоң мал һаны һәм сәсеүлек майҙаны ике тапҡырға кәмегән. Башҡорт өйҙәренең егерме проценты шыпа малһыҙ, утыҙ проценттан артығы (ҡайһы бер өйҙәрҙә ҡырҡ проценты) атһыҙ, утыҙ-ҡырҡ проценты һыйырһыҙ булған. Шунан тыш, бер генә атлы өйҙәр бик күп булған, ә бер ат хужалыҡ кәрәген ҡәнәғәтләндерә алмаған. Көнбайыш һәм төнъяҡ райондарҙа башҡорт өйҙәренең 21,5 проценты 6,4 дисәтинә генә ер менән тороп ҡалған, 13 проценты ғына 30 дисәтинәнән артыҡ ер биләгән, көньяҡ һәм көнсығыш райондарҙа 26 процент башҡорт өйө 10,6 дисәтинә, 29 процент башҡорт өйө 50 дисәтинә ер тотҡан. Ә белгестәрҙең иҫәпләүенсә, бер ғаиләне аҫрар өсөн игенселектә 16 дисәтинә, малсылыҡта кәм тигәндә 45 дисәтинә ер кәрәк булған. Тимәк, башҡорт халҡының өстән ике , ҡайһы бер өйҙәрҙә дүрттән өс өлөшө, һәр ваҡыт ас йәшәргә дусар ителгән. Шул уҡ ваҡытта башҡа милләт крәҫтиәндәренең, шул иҫәптән яңы килгән күскенселәрҙең, ярлы өйҙәре әҙ булған, бай өйҙәре бик күбәйгән. XIX быуат аҙағында талап байыған колонизатор крәҫтиәндәрҙең малы һәм сәсеүлеге башҡорттоҡона ҡарағанда ике-өс тапҡырға күберәк булған. Башҡорттоң барған

һайын бөлөүе, килмешәктәрҙең байыуы арҡаһында был айырма йылдан-йыл ҙурайған: 1912-1913 йылдарҙа килмешәк халыҡтың сәсеүлеге алты тапҡырға, малы өс тапҡырға башҡорттоҡонан күберәк булып киткән. Нигеҙҙә игенсе тип иҫәпләнгән Өфө губернияһында башҡорт хужалыҡтарының яртыһынан күбеһе инде иген сәсмәгән, йәки дүрт дисәтинә генә сәскән (былар бер атлы йәки атһыҙ өйҙәр булған), 12,5 процентының ғына 10 дисәтинәнән артыҡ сәсеүлеге булған. Сәсеүлек майҙанын киңәйтеү ер терәмәгәнлектән генә түгел, унан да бигерәк эш малы, эш ҡоралы һәм сәсер орлоҡ булмағанлыҡтын бик ҡыйынлышҡан. Кәрәк нәмәне алыр өсөн башҡорттоң аҡсаһы булмаған. В.И.Ленин: "Аҡсаһыҙ хәҙер ерҙе лә бер нәмә эшләтеп булмай"[77], - тип яҙған. Был һүҙҙәр шул замандағы башҡрт хәленән тотош тура килеп тора. Ерһеҙ ҡалдырыу арҡаһында хәйерселеккә төшкән башҡорт яһаҡ һәм һалымдарын түләр өсөн үҙенең аҙаҡҡы ерен йә ҡуртымға биреп, йә һатып, ялсылыҡҡа, зимагурлыҡҡа китергә мәжбүр булған. 1897 йылда В.Михалковский яҙған: "Мәрхәмәт йөҙөнән генә ялсы итеп алынған ас башҡорттоң бер нисә бот он өсөн ҡуртымға биргән үҙ ерен һуҡалап йөрөүе ғәҙәти бер мыҫҡыллы хәлгә әйләнде", - тигән. Башҡорттар ҡышҡы аслыҡта алдан алған хаҡты ҡайтарыу өсөн рус һәм башҡа халыҡтың килмешәк кулактарына бил бөккән, алпауыт хужалыҡтарында эшләгән, рудниктарҙа, заводтарҙа, алтын приискыларында, урман хужалыҡтарында һәм башҡа ерҙә иң ауыр эштәрҙе башҡарған. Башҡортто колониаль ҡол хәлендәге хаҡһыҙ эшсе итеп файҙаланыу кантон заманында башланып, бик ҙур күләм алған. 1873 йылда Л.П.Сабанеев: "Башҡорттар ғөмүмән йыллыҡ эш көсөнөң бик ҙур өлөшөн тәшкил итә... Ләкин уларҙы барлыҡ хужалыҡтарға килтергән төп файҙаһы шул: улар түбән генә хаҡҡа бөтә игенде тиерлек урып бирә"[78], - тигән. "Башҡортҡа ғөмүмән русҡа ҡарағанда арзан түләйҙәр, - тигән Д.П.Никольский 1899 йылда, - шул уҡ ваҡытта уны бик ҡаты эшләтәләр".[79]

Беренсе донъя һуғышы башланыу менән башҡорттарҙың хәле тағы ла нығыраҡ насарланған. Хеҙмәткә яраҡлы ирҙәрҙе тотош ғәскәргә алыуҙан башҡа,

---

[77] В.И.Ленин, Полн. собр. соч., т. 7, 153-сө бит.
[78] Сабанеев Л. Очерки Зауралья и степное хозяйство на башкирских землях. М., 1873, 123-сө бит.
[79] Никольский Д.П. Башкиры. Спб., 1899, 101-се бит.

башҡортто төрлө мәжбүри эшкә – мәғдән заводтарына мәғдән һәм күмер ташыуға, ғәскәргә аҙыҡ һәм бесән ташыуға һ.б., һ.б. эштәргә йәлеп итеү көсәйгән. Был эштәрҙә эш шарттары сикһеҙ ауыр булған.

Һуғыш башланған тәүге йылда уҡ ҡытлыҡ булып, башҡорт халҡы бик ныҡ асыға башлаған. Бер киҫәк икмәк өсөн улар һатырға ярарҙай аҡтыҡ нәмәһен һатып бөткән. Унһыҙ ҙа бик бәләкәй сәсеүлек майҙаны ҡырҡа кәмегән. Һуғышҡа аттарын алыу сәбәпле атһыҙ һәм сәсеүлекһеҙ хужалыҡтар күпкә артҡан.

XIX быуаттың 60-70 йылдарынан рус йәмғиәтендә башҡорт халҡының бөтөүгә барыуы хаҡында фекер таралған. “Балалар ҡот осҡос күп үлә, - тип яҙған Л.П.Сабанеев 1873 йылда, - башҡорт халҡы, күп булыуына ҡарамаҫтан, күрәһең, бөтөүгә бара”. Н.В.Ремезов һикһәненсе йылдарҙа башҡорттарҙың үҙ ерҙәренә түләр мөмкинлектәре булмағанлыҡтан “юҡҡа сыҡҡан һәм береһе лә ҡалмай үлеп бөткән йәндәр” урынына кермешектәр индергәнен билдәләй, тимәк, башҡорттар тотош өй эстәре меннә үлә торған булған. 1889 йылда Башҡортостанға килгән Г.Успенский иң элек: “Бөтә был башҡорт, бөтә!” – тигән һүҙҙәрҙе ишеткән. “Бигерәк күп үлә башҡорт!” – тип 1889 йылда Д.П.Никольский ғәжәп иткән. XIX быуат аҙағында Д.Н.Мамин-Сибиряк “Икмәк” тигән романында: “Башҡорт ауылы тетрәткес бер хәлдә, - тип яҙған. – Башҡорттарҙың ҡыш һайын астан ҡырылыуы ғәҙәти бер нәмә булып киткән, ләкин ул хәҙер ул ҡот осҡос хәлдә ҡалған. Башҡорт өйҙәренең яртыһы буш, - хужалары йә үлгән, йәки баш һуҡҡан яҡҡа таралып бөткән... Староста ҡарттарҙы уртаҡ мәгәзәйгә килтереп, ишеген асып ебәрҙе, һәм скитниктарҙың ҡоттары осоп артҡа сигенде: мәгәзәйгә иген урынына туңып ҡатҡан башҡорт мәйеттәре өйөп һалынған ине”. Өфө губернияһы жандарм идараһының башлығы 1902 йылғы яҙмаһында: “халыҡтың аборигендары, башҡорттар, бөтөүгә барған көндә”, - тип күрһәткән. Был һүҙҙәр нигеҙһеҙ булмаған: 1912 йылда Өфө губернияһында беҙашҡорттоң үлеүе 29 процент, ә 1913 йылда бөтә Россияла үлем кимәле уртаса өс процент булған.

Башҡорттарҙың иҫ киткес күп үлеүе баяғы жандарм башлығы уйлаған дегенерациянан булмаған. Киреһенсә, үткән быуаттың ғалимдары күҙәтеүенсә, башҡорттарҙың “тән төҙөлөшө ныҡ көслө” булған, улар “иң ҙур ҡыйынлыҡтарҙы

ла күтәрә алмаған” (В.М.Черемшанский), “хеҙмәткә тырыш һәм уҡыуға һәләтле булған” (А.Калачев), йоғошло ауырыу ауырымаған (М.Эверсман), төбәктәге башҡа халыҡҡа ҡарағанда бүтән төрлө ауырыуҙарға ла әҙ бирешкән” (В.М.Черемшанский). Башҡорттоң күп үлеүенә әлеге жандарм башлығы әйткән хәйерселек һәм төпһөҙ бөлгөнләк сәбәпсе булған (“уларҙың малы ла, игенселек ҡоралы ла юҡ”). Башҡорттоң шул бөлгөнлөгөндә шул жандарм башлығы үҙ ғәйебен, колонизаторҙар ғәйебен күрмәгән, ә ялҡау монһоҙ , хәстәрһеҙ” тип башҡорттоң үҙен ғәйепләгән. Башҡорттар хужалыҡ итергә әҙ генә мөмкинлеге бар саҡта “ялҡау” ҙа, “хәстәрһеҙ” ҙә булмаған, ләкин аяуһыҙ талау һәм ҡыйратыу, ҡырыу һәм көсләү, бөтә тормош һәм эш зауҡын быуыу өс йөҙ йылыҡ татар золомонан һуң саҡ баш ҡалҡыта башлаған башҡорттоң бөтә таянысын емереп, XIX быуат уртаһында үлем сигенә килтереп еткергән. Өҫтәүенә, ас башҡортто төрлө киҙеү ҡырған. Мәҫәлән, 1865 йылдағы тиф киҙеүе ҡайһы бер ауылдарҙың 26-40 процент халҡын юҡ иткән. “Улар киҙеү ауырыуҙарынан, мәҫәлән, аслыҡ тифынан, күп үлә икән, - тип яҙған В.М.Флоринский, - организмдары көсһөҙ булған өсөн түгел, сиктән тыш ауыр, хәйерсе булған өсөн түгел, сиктән тыш ауыр, хәйерсе тормошта йәшәгән өсөн үлә”.[80]

[80] Вестник Европы, 1874, т. 6, кн. 12, 739-740-сы биттәр.

## 10. КОЛОНИАЛЬ КӨСЛӨК ЭҘЕМТӘҺЕ. ХАЛЫҠТЫҢ ҺЫНМАҪ АЗАТЛЫҠ РУХЫ

Рус колонизаторҙары атҡарған аяуһыҙ иҙгенлек политикаһының бөтә һәләкәте һөҙөмтәһе ап-асыҡ күренеп торһа ла, хәҙерге рус тарихсылары, “башҡорт халҡы өсөн колонизация ҙур прогрессив әһәмиәткә эйә булған” тип әйтергә һис тә оялмай. Уларҙың фекеренсә, Россияға ҡушылыу һәм күскенселәрҙең килеп баҫыуы “башҡорт араһында игенселек таралыуын” тиҙләткән, башҡорттар рус, татар һәм башҡа игенсе халыҡтарҙан, йәнәһе, ауыл хужалығы ҡоралдарын яһарға, ер эшкәртергә, иген сәсергә, иген йыйырға һәм он тартырға (тирмән ҡорорға) өйрәнгән, “башҡортттар малсылыҡ нәмәләрен эшкәртеүҙә лә рус ысулдарын, мәҫәлән, тире иләү ысулын үҙләштергән”.[81] Рус тарихсылары рустар шөғөлләнгән ауыл хужалығы тармағын ғына прогрессив формаға һанап, башҡортто артта ҡалған, игенселекте бөтөнләй белмәгән ҡырағай халыҡ итеп күрһәтә һәм башҡорттоң күп быуаттар элек белгән нәмәләрен рус тәьҫиренең һөҙөмтәһе тип иҫәпләй. Улар уйынса, “тире иләү ысулын үҙләштереү” башҡорттоң азатлыҡтан, үҙ алдына үҫеү хоҡуғынан мәхрүм булыуын да, колонизаторҙар килтереп түкәткән хәйерселеген дә артығы менән ҡаплай.

Ғәмәлдә игенселекте Башҡортостанға рус колонизаторҙары һәм башҡа килмешәктәр килтермәгән. Быны, мәҫәлән, башҡорт телендә бөтә ауыл хужалығы үҫемлектеренең тиерлек үҙенсә аталыуы, игенселек терминологияһының бай булыуы крһәтә. Ул һүҙҙәр башҡорт теленең иң боронғо лексик ҡатламына ҡарай. Шунан тыш, ошо фактты дөрөҫләгән яҙма тарихи мәғлүмәттәр ҙә бар. Ғәрәп авторы Әл-Ғөмәри XIV быуатта Волга буйында, шул иҫәптән башҡорт ерендә, булып: “Татар баҫып алғанға тиклем ул (ерҙәр) тотош эшкәртелгән булған, хәҙер

---

[81] Очерки, т. I, ч. 1. Уфа, 1956, 97-се бит.

унда шул эшкәртелгәндең әҙе генә ҡалған”[82], - яҙған. Борон замандан игенселек менән шөғөлләнгән башҡорт татарҙарҙың ҡыйратҡыс яуынан һуң ул эште ташларға, йәки, дөрөҫөрәге, нык ҡыҫкартырға, мәжбүр булған. Ләкин барыбер күпмелер ваҡыт үткәс, улар үҙ шөғөлөн ҡабаттан тергеҙгән һәм Рус дәүләтенә ҡушылған саҡта игенселек уларҙың хужалығында ҙур урын тотҡан. Е.Кинишимцев менән И.Гречкин тигән хеҙмәт кешеләре 1675 йылда, йәғни ситтән килгән халыҡ Башҡортостанда әле әҙ булып, башҡортҡа “Тәьҫир” яһап өлгөрмәҫ борон, Нуғай даруғаһын йөрөп сыҡҡас, Өфө воевода йортона: “Ә шул Нуғай даруғаһындағы бөтә башҡорт үҙенең иҫке (!) ҡышлауҙарында ер һөрөп, иген сәсә һәм йорттар һала”[83], - тип хәбәр иткән. Улар быны Башҡортостандың малсылыҡ районадары тип иҫәпләнгән яғы хаҡында яҙған. Ә борондан игенселек өҫтөнлөк иткән төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш райондарында XVIII быуат башына хәтлем башҡорттар игенселекте тергеҙеүҙә ҙурыраҡ уңышҡа өлгәшкән. XVIII быуаттың егерменсе йылдарында бөтә Башҡортостанды тиерлек гиҙеп сыҡҡан Көнгөр бургомистры Юхнев күҙәтеүенсә, Юса даруғаһының башҡорттары “игенде күп сәсә һәм һөргөн ерҙәре күп”, Ҡазан даруғаһының башҡорттары “арыш һәм төрлө иген сәсә... һәм шул даруға Өфөнө туйҙыра”.[84] Ләкин рус колонизаторҙары татарҙан кәм булмаған. Шуға күрә лә 1735-1740 йылдарҙағы яуҙан һуң карателдәр тарафынан тамам бөлдөрөлгән башҡорттар нисектер йән аҫрар өсөн бөтә ерҙә тиерлек игенселекте ташлап, әҙерәк көс һәм сығым талап итә торған ярым күсмә малсылыҡҡа күсергә мәжбүр булған. Шул уҡ нәмә һәр яуҙан һуң тағы-тағы ҡабатланып торған. Һәр яу һайын башҡортто эт кеүек ҡотороп аяуһыҙ талау һәм ҡырыу, яуҙан һуң да шул йыртҡыслыҡты туҡтатмай дауам итеү менән колонизаторҙар башҡорт хужалығының, шул иҫәптән игенселектең, үҫешен ҡабат-ҡабат артҡа алып ташлаған, халыҡҡа тын алып, баш ҡалҡытырға ла ирек бирмәгән.

Башҡорттар бөтәһе лә малсылыҡ менән дә, игенселек менән дә шөғөлләнгән, тик һәр яҡты үҙенә башҡа тәбиғи шарт булғанға көнсығыш

---

[82] Тизенгаузен В. Аталған китап, 233-сө бит.

[83] Материалы.., ч. I, М.-Л., 1936, 204-се бит.

[84] Материалы, ч. III. М.-Л., 1949, 487-се бит.

башҡорттарында малсылыҡ өҫтөнлөк тотҡан, ә көнбайышта игенселек өҫтөнлөк алып киткән. Хужалыҡ йүнәлешендәге был айырма башҡортто ике яртыға айырмаған, ә, киреһенсә, ул эске хеҙмәт бүленешен тәьмин итеп, эске алыш-биреште үҫтереүгә, шул нигеҙҙә берҙәм экономик тормош ҡороуға ярҙам иткән һәм башҡа төп билдәләренең уртаҡ булыуы менән ныҡ бәйле ике башҡорт төркөмөн бер бөтөн милләткә берләштергән. Әгәр “изгелекле” рус колонизаторҙары “прогрессив тәьҫир” менән башҡортто ерһеҙ, малһыҙ, йәшәр сараһыҙ итеп, игенселек менән шөғәлләнерлек бөтә мөмкинлектән яҙҙырған булһа, “малсы көнсығыш” һис бер прогрестан артҡа тартмаҫ ине.

Рус колонизацияһы башҡорт хужалығында һөнәрселек һәм промышленность, иң элек – металл эшкәртеү, үҫешенә бигерәк тә ҙур һәләкәт килтергән. Башҡорттар яуынан күп элек төрлө мәғдән ҡаҙыу, металл иретеү менән уңышлы шөғөлләнгән. Улар араһында тимерселек эшенең оҫталары күп булған. Башҡорттар бик яҡшы ҡорос иреткән, төрлө яу яраға һәм хужалыҡ ҡоралы эшләгән. Татарҙарҙың бөтә ҡороҡос эшенә ҡарамаҫтан, башҡорттар тимерселек оҫталығын юғалтмаған, сөнки азатлыҡ көрәше өсөн уларға һәр ваҡыт ҡорал кәрәк булған. XVII-XVIII быуаттарҙа, Уралдың тимер һәм баҡыр яҡкылыҡтарын файҙалана башлағанда, рус промышленниктары мәғдән заводтарын гел генә башҡорт ҡаҙған йәки башҡорт асҡан мәғдәнлектәргә һалған. Шул уҡ ваҡытта батша хөкүмәте баштан уҡ башҡортто металл эшкәртеү эшенән ситләтеү өсөн ҡаты саралар күргән. Башҡортостан ҡушылғас та, XVI быуатта уҡ, был хөкүмәт башҡортҡа хужалыҡҡа металл ҡулланыуҙы сикләгән, тимерлек тотоуҙы, ҡорал яһап һатыуҙы тыйған һәм көнкүрештә тотона торған тимер нәмәләрҙе әҙер көйө рус властарының ҡулынан ғына алырға рөхсәт иткән. XVII-XVIII быуаттарҙа ла ул ҡабат-ҡабат шуны тыйып, ҡарар сығарып торған, ләкин башҡорттар тәүге мәлдә бик буйһоноп бармаған, йәшерен генә байтаҡ тимерлек тотҡан. Шуға күрә хөкүмәт 1736 йылдың 11 февраль указы менән “Өфө өйәҙендә һәм башҡорт ауылдарына тимерлек тотоуға” тамам сик ҡуйған. Шунан һуң һәр урында тимерлектәрҙе ҡыйратыу, тимер оҫталарын нәҫеле менән һыпырып

үлтереү башланған. Һөҙөмтәлә, улар үҙ маҡсатын ирешкән: XIX быуаттың аҙағында инде “башҡорт тимерлектәре бик әҙ ҡалған”.[85]

Тимерлек тотоуҙы тыйыуҙан башҡа, башҡа хөкүмәте 1719 йылдың 19 декабрендә һәм 1739 йылдың 13 мартында сығарған указдары менән ер аҫты байлыҡтарын, мәғдәнлектәрҙе тотош үҙ монополияһына алған, башҡорттарҙы уға эйә булыу хоҡуғынан мәхрүм иткән һәм рус промышленниктарына ер эйәләренең ризалығынан тыш бөтә ерҙә мәғдән ҡаҙыу, мәғдән эшкәртеүгә тулы ирек биргән. Шулай итеп, колонизаторҙар башҡорттарҙың үҙ промышленносын үҫтереүенә ныҡлы кәртә ҡуйған, уларға бик сикле хоҡуҡ ҡына ҡалдырған: айырым рөхсәт менән ятҡылыҡтарҙы табып, властарға хәбәр биреү мәғдән ҡаҙып, рус промышленниктарының заводтарына ташыу. Рөхсәт алыуға өлгәшкән башҡорттар ҙур тырышлыҡ һәм оҫталыҡ менән үҙҙәренең аҫаба ерҙәренән мәғдән эҙләп, мәғдән сығарған. XVIII быуатта байтаҡ башҡорт таныҡлы мәғдәнсе булып киткән. Улар араһында ҙурҙары Туҡтамыш Ишбулатов, Сәләй Боҫҡонов, Омоҡ Белембаев, Исмәғил Тасимов булған. Шуларҙан Исмәғил Тасимов Россияла Тау училищеһы асыу эшен башлап ҡуҙғатҡан. Уның 1770 йылда Бергколлегияға ебәргән ғарызнамәһе буйынса училище 1773 йылда Петербургта асылған. Башҡорт мәғдәнсәләре училищеның тәьминәтен үҙ өҫтөнә йөкмәгән, ләкин башҡорт баларын унда уҡырға алмағандар.

Башҡорттар тимер, баҡыр сығарып рус заводтарына ташыу менән генә сикләнмәгән. Улар төрлө ерҙә көмөш, алтын, ҡурғаш, күмер, көкөрт, селитра, тоҙ, нефть ятҡылыҡтарын белгән һәм яңы яҡтылыҡтарын асҡан. Башҡорттар тапҡан Иләк ятҡылығынан таҙа тоҙ сығарыу ҙур әһәмиәткә эйә булған. Был ятҡылыҡты XVIII уртаһында рус ҡаҙнаһы башҡорттарҙан тартып алған. Нефтте (ер майын) башҡорттар рус килерҙән элек белгән. Тәүҙә уны дауа өсөн ҡулланғандар, әммә тиҙҙән уның яҡшы яна торған нәмә икәнен дә белгәндәр. 1754 йылда башҡорт Надир Ураҙмәтов үҙенең аҫаба ерендә нефть ҡыуыу заводы төҙөргә рөхсәт алған һәм 1755 йылда уны төҙөй башлаған. Ләкин ҡапыл ауырып, үлеп китеү сәбәпле

---

[85] Руденко С.И. Башкиры, М.-Л., 1955, 136-сы бит.

башлаған эшен тамамлай алмаған. Ул үлгәс, нефтселек эше Россияла оҙаҡ-оҙаҡ йылдарға һүрелеп ҡалған.

Башҡорттар әйтеп килгән бөтә эште туҡтауһыҙ азатлыҡ көрәше барған, халыҡты колонизаторҙар аяуһыҙ ҡырған шарттарҙа башҡарған. Әгәр милли хужалыҡты үҙ алдына, үҙенең тәбиғи ыңғайына үҫтерер мөмкинлек булһа, шундай белем һәм тырышлыҡ барында башҡорттоң промышленноста өлгәшкән уңышы рустарҙыҡынан кәм булмаҫ ине; башҡорт оҫталары һәм феодалдарынан, рустарҙың тимерсе Демидовтары һәм башҡа ундай кешеләре кеүек, үҙ прошленниктары үҫеп сығыр ине. Колонизаторҙар башҡорттоң үҙ промышленносын үҫтереү ынтылышына боғал һалған, уның булған мәғдәнсәләрен дә 1773-1775 йылдарҙағы яуҙы баҫтырғанда үлтереп бөткән.

Татар ханлыҡтары бөткәдән һуң башҡорттар шулай уҡ үҙ иләндә һәм башҡа донъяла (иң тәүҙә Урта Азияла) элекке сауҙа бәйләнештәрен бик тиҙ тергеҙә башлаған. Ләкин яңы баҫҡынсылар милли сауҙаны үҫтереү юлына тағы ныҡлы кәртә ҡуйған. Колонизацияны көсәйтеү, тағы ситкә йөрөү һәм аралашыуҙы ҡырҡа тыйыу арҡаһында башҡорттоң бөтә сауҙа һәм хужалыҡ бәйләнеше өҙөлгән, милли баҙар нигеҙе ҡыйратылған. Колонизаторҙар Башҡортостанда үҙ мәнфәғәттәренә генә хеҙмәт итә торған үҙ баҙарын булдырған. Башҡорт йәмғиәтенең тауар-аҡса мөнәсәбәте иң түбән кимәлгә ҡуйылып, тотош рус баҙарына буйһондоролған.

Шулай итеп, рус колонизацияһының башҡорт халҡына ыңғай тәьҫир яһауы хаҡында түгел, ә ҡот осҡос фажиғәле һөҙөмтәһе хаҡында ғына һүҙ булыуы мөмкин. Рус колонизаторҙары башҡорттоң экономик үҫешен торғонлоҡҡа дусар итеп кенә ҡуймаған, уны хатта XVI быуат кимәленән бик күпкә алып ташлаған. Рус тарихсылары башҡортто иҫ киткес артта ҡалған, игенселекте лә, һөнәрселекте лә белмәгән халыҡ итеп һүрәтләй икән, улар уны үҙ дәүләтенең колониаль политикаһын аҡлар өсөн, бөйөк дәүләтсе рус халҡын яҡшылыҡлы күрһәтер өсөн эшләй. Шуның менән хәҙерге тарихсылар элекке рус колонизаторҙарына идеологик йәһәттән ҡан туған икәнлектәрен аса. Ә ул коолонизаторҙар тураһында Ф.Энгельс: “Һәр баҫҡынсылыҡ, һәр көслөк, һәр иҙгенлекте рус батшалығы

халыҡтарҙы ағартыу, ҡурсыу һәм азат итеү һылтауы менән башҡарҙы"[86], - тип яҙған. Колониаль политиканың ысын асылы хаҡында: "Колониаль политика, йәнәһе, прогрессив нәмә, ул капитализм урынлаштыра, шуға күрә "уны ҡомһоҙлоҡта һәм ҡанһыҙлыҡта ғәйепләргә ярамай", тип ревизионистар ғына күптән туҡый"[87], - тип В.И.Ленин бик асыҡ әйткән. Хәҙерге рус тарихсылары тамам оятты юғалтып, тарихи ваҡиғаларға объектив баһа биреүҙән бөтөнләй ситләште, улар рустарҙың элекке һәм хәҙерге эшен аҡлау һәм яҡлау юлына баҫты.

Рус колонизаторҙары башҡорт халҡының матди донъяһында ғына түгел, рухи донъяһында ла йыртҡыслыҡ политикаһы алып барған. Был өлкәлә улар төп урынға руслаштырыу маҡсатын ҡуйған. Иң ышаныслы руслаштырыу юлы тип, улар, юғарыла әйтелгәнсә, XVII быуаттан уҡ башҡортто суҡындырыу эшенә ныҡлап тотонған. Ни хәтлем тырышып та, суҡындыра алмағас, XIX быуаттың 60-сы йылдарынан улар мәктәп аша эш итергә булып, башҡорт һәм башҡа мосолман балаларына рус грамотаһын өйрәтеү юлын алған. Был эшкә турана-тура Ҡазан миссионер мәктәбе тотонған һәм унда миссионер Н.И.Ильминский үҙенә башҡа ҙур активлыҡ күрһәткән. Етмешенсе йылдарҙа рус мәктәптәренең дәреслеге буйынса рус телендә уҡыта торған "рус-инород" мәктәптәре асыла башлаған. Был мәктәптәрҙең тәғәйенлешен халыҡ мәғарифы министрлығының 1870 йылдың 26 март ҡағиҙәләре асыҡ бидәләнгән. Ул ҡағиҙәләрҙә: "Беҙҙең ватан эсендә йәшәгән инородтарҙы уҡытыуҙың һуңғы маҡсаты, һис бәхәсһеҙ, уларҙы руслаштырыу һәм рус халҡына ҡушыу булырға тейеш", - тип әйтелгән. Шуның менән бергә әгәр ҙә баяғы ҡатнаш мәктәптәрҙең һанына ҡарап, фекер итһәк, башҡорттарҙы руслаштырыуға айырым иғтибар бирелгән. 1887 йылдың 15 март отчеты буйынса, рус-татар мәктәбе ике, рус-ҡаҙаҡ мәктәбе ун өс, рус-башҡорт мәктәбе егерме алты булған. Шулай мәктәп селтәре барған һайын киңәйгән. 1915 йылда бер Ырымбур губернияһында ғына рус-башҡорт мәктәптәренең һаны илле дүрткә еткән. Бөтә Башҡортостанда улар, күрәһең, йөҙҙән дә кәм булмаған. Шуға ҡарамаҫтан, рус эшмәкәрҙәре балаларҙың күпмелер өлөшөн ҡатнаш мәктәптәрҙә уҡытыу менән

[86] К.Маркс и Ф.Энгельс. Соч., т. 22, 24-се бит.
[87] В.И.Ленин. Полн. собр. соч., т. 48, 12-се бит.

генә тейешле маҡсатҡа ирешеү мөмкин түгел, тип һанаған. Шуға күрә 1871 йылда миссионер Ильминский өҫтәмә сара рәүешендә мосолман халыҡтарының яҙмаһын рус алфавитына күсерергә тәҡдим иткән. Уның фекеренсә, был сара рус телен өйрәтеү һәм артабан руслаштырыу эшен еңеләйтергә тейеш булған. Шул уңай менән Ильминскийҙың иң яҡшы шәкерте В.В.Катаринский юғарғы инстанция алдына башҡорт һәм ҡаҙаҡ балалары өсөн рус алфавиты менән яҙылған махсус дәреслектәр төҙөү мәсьәләһен ҡуйған. Ошо уйын ғәмәлгә ашырып, ул “Букварь для башкир” тигән дәреслек эшләгән, дәреслек рус-башҡорт мәктәптәрендә уҡыу әсбабы итеп ҡулланыла башлаған. Шундай уҡ дәреслектәр Ҡазан миссионерҙары мәктәбе еткселегендә татар, сыуаш,мари һ.б халыҡтар өсөн эшләнгән. Ләкин башҡарылған был сараларҙың руслаштырыуға йүнәлтелгәнен яҡшы аңлап, мосолман халыҡтары ҡырҡа ҡаршы сыҡҡан. Мосолмандар рус мәктәптәрендә балаларын уҡытырға теләмәгән, мәҙрәсәләрҙә рус телен уҡытыуҙан баш тартҡан, рус грамотаһын индереү хаҡындағы бойроҡтарҙы үтәмәгән. Башҡорт ғалимы һәм мәғрифәтсеһе М.Өмөтбаев 1882 йылда Өфө земство сессияһында: “Европала һәр халыҡ үҙ телендә уҡып, төрлө фәнде үҙ телендә өйрәнеп белем алған”, - тип әйткән.

Руслаштырыу политикаһы 1906-1907 йылдарҙан һуң бигерәк тә көсәйеп, ҡаты һөжүмгә күскән. Ата ассимиляторҙар III Дәүләт думаһында сығыш яһап, рус булмаған милләттәрҙе “бөтөрөү” тураһындағы megplandарын асҡан. Епископ Н.Варшавский “рус булмаған бөтә халыҡты руслаштырырға, суҡынмаған бөтә элементты суҡындырырға” өндәгән. Улар асыулы, яуыз телмәрҙәр менән генә сикләнмәгән, ә һәр милли үҫеш күренешен ҡаты эҙәрләгән. Өфө һәм Ырымбур губернияларында рус властары мәҙрәсәләрҙе, иң элек йәмғиәт һәм тәбиғәт фәндәрен уҡытҡан, йәдид мәҙрәсәләрен япҡан, уҡытыусыларға һәр төрлө милли ойошмаларға репрессия яһаған.*

Рус батшалығының бөйөк дәүләтселек һәм ассимиляторлыҡ политикаһына ҡаршы милли көрәш көсәйгән. Шул көрәштә башҡорттар сараһыҙҙан татарҙар

---

* Беҙҙең ауылда ҡартатайым Абдулла асҡан йәдид мәҙрәсәһен ике тапҡыр ҡыйратып, үҙен туҡмағандар. Ахыры, 1911 йылда мәҙрәсәне бөтөрөп, үҙен биш балаһы менән икенсе волосҡа һөргәндәр.

менән бер яҡлы булып сыҡҡан, сөнки улар был юлы бер дин һәм уртаҡ бәлә бергә бәйләгән. Татарҙарҙың Урал-Волга буйындағы иң күп һанлы һәм тәьҫирле халҡы, ассимиляторлыҡ политикаһына ҡаршы торорлоҡ көс булыуы ла башҡорттарҙы ла улар менән берләштереүгә килтергән. Татарҙың был тәьҫирлеге Рус дәүләтенә өс быуат буйы уңайлы шартта йәшәп, ныҡ көсәйеүенән булған.

Ханлыҡтары бөткәс, татарҙар, әллә ни суҡындырыуға ҡаршы ҡуҙғалыуҙан башҡа, рус хакимлеге менән көрәшмәгән, шуға күрә улар башҡорт һымаҡ аяуһыҙ ҡырылмаған, һан яғынан һаман арта барған. Рус хөкүмәте тоғро хеҙмәт иткәндәре өсөн хуплап, татарға һәр яҡлап ярҙам иткән, Башҡортостанды колонизлауҙа уларҙы ныҡ файҙаланған, башҡорт ерәрен уларға йәлләмәй өләшкән. Шунан тыш, татарҙар Алтын Урҙа баҙарҙарының гөрләп торған заманынан уҡ сауҙа эшенә бик әүәҫләнеп, бөтә Россия сауҙаһына актив ҡатнашып киткән. Бөтә ерҙә иҫәпһеҙ татар алыпһатары таралған, араларынан эре сауҙагәрҙәр һәм промышленниктар килеп сыҡҡан. “Татарҙың бөтәһе лә тиерлек – алыпһатар һәм маклер, бер генә баҙар, йәрминкә һәм һатышыу урыны ла татарһыҙ булмай”[88], - тип яҙған С.Г.Рыбаков 1897 йылда. Бөтә булған ошо сәбәптәр арҡаһында һан яғынан ғына түгел, экономик яҡтан татарҙар башҡорт алдында өҫтөнлөк алған. Өҫтәүенә, башҡортто баҫып тотоу еңеләйһен өсөн рус хөкүмәте 1789 йыл Өфөлә мосолман диниә назараты асып, татар ҡулына бөтә рухани власты тапшырған. Татарҙар дини эш менән бергә халыҡ мәғарифын да үҙ ҡулына алған. 1800 йылда Петербургтан Ҡазанға ғәрәп шрифтында баҫа торған “Азия типографияһын” күсереү, һунғараҡ Ҡазанда шундай уҡ университет типографияһы һәм башҡа вағыраҡ типографиялар асыу менән татарҙың мосолман мәғрифәтендәге алдынғы урынына матди нигеҙ һалған. Экономик, рухани һәм мәҙәни өлкәләрҙәге уңайлы шарттар татарҙа әүәлге баҫҡынсылыҡ рухының көсәйеүенә бик булышлыҡ иткән, шул арҡала улар рус хөкүмәтенең ассимиляторлыҡ политикаһына ҡаршы көрәшеү менән сикләнмәй, үҙҙәре лә бөтә регионда, иң элек башҡорттар араһында, шундай уҡ актив ассимиляторлыҡ эше алып барған. Татарҙар башҡорттарҙы йоторға, үҙ милләтенә ҡушырға тырышҡан, шул уҡ ваҡытта улар

[88] Рыбаков С.Г. Музыка и песни уральских мусульман. СПб., 1897, 15-се бит.

бөтәһе лә, олоһонан кесеһенә тиклем, башҡортка түбәнһетеп ҡараған. Үҙ маҡсаттарына ирешеү өсөн татарҙар оятһыҙ рәүештә татар менән башҡорт араһындағы милли айырманы инҡар иткән, тәбиғәттәренә хас булған бөтә агрессивлыҡ менән башҡортҡа көслө тәьҫир яһау сараһын күргән. Етмәһә, панисламизм байрағы аҫтында татарҙар Россия империяһындағы төрки халыҡтарҙың барыһына ла баш булырға тырышҡан. Шундай хәлдә башҡорт халҡына, иң элек уның зыялыларына, рус ассимиляторлыҡ политикаһына ҡаршы ғына түгел, ә унан да яманыраҡ татар шовинизмына ҡаршы көрәш алып барған., һәм шул тиңһеҙ көрәштә үҙенең этник булмышын яҡларға тура килгән.

Яҙмышының бөтә әселегенә ҡарамаҫтан, башҡорт халҡы иҫ киткес ныҡышлыҡ менән үҙенең хужалығын һәм мәҙәниәтен үҫтерергә тырышҡан. XIX быуат уртаһында, йәғни ҡотһоҙ кантон идараһы дәүерендә, Ырымбур өлкәһендә үҫтерегән бөтә игендең ҡырҡ процентын башҡорттар биргән. Башҡорт баҫыуҙарында игендең уңышы башҡа милләт крәҫтиәндәрекенән юғары булған. Иген уңышындағы өҫтөнлөктө улар XIX быуат аҙағында ла һаҡлаған. Башҡорттар үҙҙәренең рухи байлыҡтарын һаҡлауҙа ла ғәжәп ҙур тырышлыҡ күрһәткән. Хатта татар хандары һәм рус батшаларының туҡтауһыҙ алып барған ҡанлы ҡырғындары аҫтында ла улар һаман белемгә, үҫешкә ынтылған. Күп быуаттарға һуҙылған азатлыҡ көрәше башҡортта сәсәндәр ижадын ныҡ үҫтергән. Беҙҙең заманға уларҙың оло даны һәм әҫәрҙәренең халыҡ хәтерендә һаҡланған бик әҙ өлөшө генә килеп еткән. Ләкин ул фажиғәле замандарҙа башҡорттоң мәҙәни донъяһы сәсәндәр ижады менән халыҡ ижадынан ғына тормаған, әлбиттә, ниндәйҙер кимәлдә яҙма әҙәбиәт тә йәшәгән булырға тейеш. Быны, “Ек-Мәргән”, “Һуңғы һартай” кеүек, ошоғаса юғалмаған трагик хикәйәләр, ҡулъяҙма киттаптарҙың ситенә яҙылған айырым шиғырҙар, Ғәйет Сибаевтың 1735-1740 йылдарҙағы яуҙа карателдәр тарафынан алынып, әле Боронғо ҡағыҙҙар архивында (ЦГАДА) һаҡланған шиғырҙар ҡулъяҙмаһы асыҡ күрһәтә. Ул ҡанлы замандарҙағы мәҙәниәт ҡомартҡыларын башҡорт халҡы бөгөнгә тиклем тотош килтереп еткерә алмаған, хатта тәрән реалистик йөкмәткеһе менән үҙе үк бай яҙма әҙәбиәт традицияһы булғанын күрһәтеп торған Салауат шиғырҙары ла беҙгә

рус тәржемәһендә генә билдәле. Колонизаторҙар башҡорт халҡының мәҙәниәт һәм мәғариф усаҡтарын тотош һүндереп бөтә алмаған. Мәғрифәтселәренең йән аямай тырышып хеҙмәт итеүе арҡаһында башҡорттоң татар яуына тиклем булған яҡты традициялары өҙөлмәгән һәм белемле кешеләре һәр ваҡыт булған. XVIII быуат башынан мәҙрәсәләр селтәре бик тиҙ үҫә башлаған. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостандың төрлө яғында эре мәҙрәсәләр асылған, уларҙың аҙаҡтан мәғрифәт донъяһында ҙур урын алып, ныҡ танылып киткәндәре 1709 йылда асылған Сөндөк мәҙәрәсәһе, 1713 йылда асылған Сытырман мәҙрәсәһе, 1720 йыл асылған Стәрлебаш мәҙрәсәһе булған. Уҡыу-уҡытыу эше Башҡортстанда киң күләм алған. XIX быуатта ул айырыуса ныҡ үҫкән. Башҡорт өсөн балаларҙы, шул иҫәптән ҡыҙҙарҙы, уҡытыу мотлаҡ һаналған. Һәр белемле кеше олоһон-кесеһен белемгә, һис юғында уҡырға-яҙырға өйрәткән. Ауыл һайын тиерлек мәҙрәсә булған. Мәҙрәсәләр ауыл йәмғиәте иҫәбенә тотолған, уҡытыусылар эш хаҡы алмаған. Уҡытыу хаҡында шундай ҙур хәстәрлек күреү арҡаһында белем кимәле донъя терәген тамам юғалтып бөткән башҡортта ныҡ талап байыған рус колонизаторҙарына ҡарағанда юғары булған. 1897 йылда Өфө губернияһындағы уҡый-яҙа белгән кешенең һаны 16,7 процент тәшкил иткәндә, рустарҙа ун алты процент, башҡорттарҙа 18,5 процент булған. Башҡорттар әҙәбиәтте үҫтереүҙә лә уңышҡа өлгәшкән. 1773-1775 йылдарҙағы яуҙың ҡаты һәләкәтенән һәм тәрән өмөтһөҙлөктән барлыҡҡа килгән төшөнкөлөк һәм суфыйсылыҡ дәүерен үткәреп, башҡорт әҙәбиәте XIX быуаттың икенсе яртыһында донъяға атаҡлы Аҡмулланы биргән. Аҡмулла шиғырҙары халыҡсан оло аҡылы һәм ябайлығы, ихласлығы һәм үткерлеге менән башҡорттоң ғына түгел, күршеләге башҡа төрки халыҡтарҙың да йөрәген тетрәткән. Аҡмуллланан һуң башҡортта яңы яҙыусы һәм шағирҙар үҫеп сыҡҡан, улар араһында бөтә рухы һәм ялҡынлы ижады менән Аҡмуллаға ҡуш килерлек шиғриәт шаһы Шәйхзада Бабич булған.

Башҡорт халҡы Россиялағы колониаль иҙгенлектең бөтә ғазабын үҙ елкәһендә татыған. Шул ғазаптарҙа ул үҙенең батыр көрәше һәм тырыш хеҙмәте менән иҫ киткес ҙур йәшәр көскә һәм үҫәр ынтылышҡа эйә булғанын күрһәткән. Бөтә хоҡуғы, мал-мөлкәте таланған, ас-яланғас ҡалған көйө һаман үҙ ерен һәм үҙ

иркен ҡайтарыу өсөн тынғыһыҙ көрәшкә ярһып, башҡорт халҡы 1917 йылды – ҙур революцион үҙгәрештәр йылын – ҡаршы алған.

## II БАШҠОРТТОҢ 1917 ЙЫЛДАН ҺУҢҒЫ КӨРӘШЕ ҺӘМ ЯҘМЫШЫ

### 1. БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫ. АВТОНОМИЯНЫҢ III БӨТӘ БАШҠОРТОСТАН ҠОРОЛТАЙЫ ТАРАФЫНАН РАҪЛАНЫЛЫУЫ

1917 йылдың февралендә, Беренсе донъя һуғышы барғанда, Россияла буржуаз-демократик революция булған. 2 мартта Ваҡытлы хөкүмәт ойошторолған, унда күпселек урынды конституцион–демократик партия ағзалары (кадеттар) алған. Император Николай II тәхеттән баш тартҡан. В.И.Ленин (Ульянов) етәкселегендәге Россия социал–демократик эшсе партияһы (большевиктар) йәшерен хәлдән сығып, революцияны артабан үҫтереү, уны социалистик революцияға әйләндереп, власты ҡулға алыу өсөн көслө көрәш башлаған.

Февраль революцияһының һәм ҡаты колониаль иҙгенлекте кәүҙәләгәндән батшаның төшөрөлөүен башҡорттар шатланып ҡаршы алған. Ваҡытлы хөкүмәттең ирек һәм халыҡтар тиңлеге хаҡындағы белдереүе башҡортта яҡты азатлыҡ өмөтө уятҡан. Башҡорт халҡы күңелләнеп, киҫкен милли мәсьәләрҙе хәл итеү эшенә ең һыҙғанып тотонған. Башҡорттоң бөтә күңелен билдәләгән төп мәсьәлә ер мәсьәләһе булған. 1917 йыл яҙ Өфөлә йыйылған губерния крәҫтиән съездында башҡорттар ер мәсьәләһе буйынса асыҡ талап ҡуйған: «Беҙ башҡорттар, ерҙе, съезд ҡарар иткәнсә, социалләштереү менән дә, демократтар ҡуйғанса, дәүләштереү менән дә риза түгел. Беҙҙең ер үҙебеҙҙә ҡалдырыу ғына түгел, алдыҡ Һәм көслөк менән беҙҙән тартып алынған бөтә ер кире ҡайтарылырға тейеш». Ләкин яңы власть органдарында башҡорттар ҡуйған талапты аңларға ла, яҡларға ла теләмәгәндәр. Был органдар, элеккеләре кеүек үк, Башҡортостанда рус алпауыттары һәм күскенселәрҙең мәнфәғәтен яҡлаған, ул ғына етмәгән, яңы күскенселек тулҡыны һәм яңы баҫҡынсылыҡ өсөн уңайлы шарттар булдырған.

Шул ваҡытта милли мәсьәлә буйынса үҙ программаһы менән большевиктар сыҡҡан. Үҙҙәренең 24-25 апрелдә үткәргән VII Бөтә Россия (Апрель) конференцияһында улар резолюция ҡабул иткән. Был резолюцияла: «Россия эсенә ингән милләттәрҙең барыһына ла ирекле рәүештә айырылып, үҙ аллы дәүләт ҡороу хоҡуғы бирелергә тейеш. Шул хоҡуҡты кире ҡағыу һәм ғәмәлдә үтәлешен тәьмин итерлек сара күрмәү баҫҡынсылыҡ һәм аннексия политикаһын яҡлауға тиң»[89] тип әйтелгән. Большевиктарҙың революцияһы Ваҡытлы хөкүмәт белдереүҙәренән ҡырҡа айырылып торған һәм башҡорттар теләгенә тулыһынса яуап биргән. Шунан тыш, ул резолюция большевиктарҙың милли политикала II съездарынан (1903 йылдан) бирле үҙгәрмәгәнен күрһәткәндәй булған һәм ихласлығына ышандырған. Шуның өсөн башҡорттар большевиктарҙың власть өсөн көрәшеүен хуп күргән һәм еңеүен теләгән. Большевиктарҙың Апрель конференцияһында ҡабул иткән резолюцияһына таянып, башҡорттар милли - территориаль үҙбилдәнешкә ныҡлы йүнәлеш алған. 1917 йылдың майында Бөтә Россия мосолман съездында башҡорт делигацияһы территориаль үҙбилдәләнешкә ирешер өсөн, аграр мәсьәләне башҡорт хужалығының ихтыяжы һәм талабына ярашлы рәүештә хәл итер өсөн көрәшәсәктәре хаҡында асыҡтан асыҡ белдергән. Шул ваҡытта улар үҙбилдәләнеште, Апрель конференцияһының резолюцияһындағыса, юғарынан күҙәтеү аҫтында тотолмаған киң автономия менән генә сикләргә мәжбур булған, сөнки иҫ киткес ҙур көстәр ҡаршы торғанда үҙ аллы дәүләт булып айырылыу тураһында хыяллана алмаған. Татарҙар шул уҡ съезда Эске Россия һәм Себер мосолмандарына милли-мәҙәни автономия алыу фекерен ярһып яҡлаған, ни өсөн тигәндә уларҙың үҙ милли територрияһы һәм милли территорияль мәнфәғәте булмаған, улар ғәмәлдә панисламизм байрағы аҫтында үҙҙәренең әүәлге хакимлеген тергеҙергә тырышҡан.

Бөтә Россия мосолман съезындағы башҡорт делегацияһы (иллеләп кеше) , автономия һәм ер хаҡында һөйләшер өсөн айырым ҡоролтай йыйырға ҡарар итеп , әҙерлек комитеты төҙөгән. Комитетҡа ингән Аллабирҙе Йәғәфәров һәм

---

[89] КПСС в резолюциях и решениях съездов, конференций и пленумов ЦК (Артабан: КПСС в резолюциях ...) изд. 8, т. 1, 448-се бит.

Сәғит Мерәсовтың ҙур тырышлығы менән 1917 йылдың 20 июлендә Ырымбурҙа I Бөтә Башҡортостан ҡоролтайы йыйылған. Ҡоролтайға, Өфө, Ырымбур, Һамар, Пермь губернияларынан башҡорттоң төрлө социаль төркөм вәкилдәре килгән. Ҡоролтайҙа юғары милли власть органдары ойошторорға, айырым башҡорт ғәскәре төҙөргә ҡарар ителгән.

Бер ай үтеүгә, 1917 йылдың 25 авгусында, Өфөлә II Бөтә Башҡортостан ҡоролтайы йыйылып, айырым башҡорт исемлектәре буйынса Бөтә Россия учредитель (ойоштороу) йыйылышына һайлауға әҙерләү мәсьәләһен ҡараған. Башҡорт Мәркәз шураһы әҙерлек эшен тиҙерәк бөтөрөп, Учредитель йыйылышы асылмаҫ элек Башҡортостан автономияһын иғлан итмәк һәм шуның менән автономияны танырға уны мәжбүр итмәк булған.

Ул арала, Учредитель йыйылышы асылғанға тиклем, Россияла революцион хәл юғары көсәргәнеш алған. 1917 йылдың 25 октяберендә социалистик революция ҡубып, Ваҡытлы хөкүмәт төшөрөп ташланған. Власты большевиктар баҫып алған.

1917 йылдың 2 ноябрендә яңы хөкүмәт. В.И.Ленин председателлегендәге Халыҡ Комиссарҙары Советы, “Россия халыҡтарының хокуғы хаҡындағы декларация” ҡабул иткән. Декларация больщевиктарҙың элек иғлан иткән “Россия халыҡтарының айырылып, үҙ аллы дәүләт төҙөр дәрәжәләге ирекле үҙбилдәләнеш хокуғын” дөрөҫләгән.

Совет хөкүмәте биргән хоҡуҡа таянып, Башҡорт Мәркәз шураһы 1917 йылдың 15 ноябрендә Ырымбур, Өфө, Пермь, Һамар губерниялырындағы бөтә башҡорт территорияһын Россия республикаһының автономиялы өлөшө тип иғлан иткән*. Автономия иғлан иткән Башҡорт Мәркәз шураһы Россиялағы ҡара-ҡаршы торған политик һәм хәрби көстәрҙең конфликтына ҡатышмау яғында ныҡ торған. Был позиция шураның 1917 йыл 11 ноябрҙә сығарған беренсе фарманында асыҡ сағылған. Ул фарманда әйтелгән: “Башҡорт халҡына, тиелгән, сәйәси төркөмдәрҙең эшенә ҡыҫылып, көстө тарҡатыу һис тә ярамай, сөнки ҡыҫылыу

* Ырымбур,Пермь губернияларына ул ваҡытта һуңғараҡ ойошторолған Силәбе һәм Екатеринбург губерниялары ингән булған.

башҡорт халҡының милли – ерле автономияһын ғәмәлгә атҡарыуға тотҡарлыҡ яһар ине... беҙ большевик та, меньшевик та түгел, беҙ башҡорт. Беҙ кем яҡлы ла түгел. Беҙ үҙебеҙ яҡлы”.

1917 йылдың 8-20 декәбрендә Ырымбурҙа үткән III Бөтә Башҡортостан ҡоролтайы иғлан ителгән Башҡортостан автономияһын раҫлаған, Башҡорт хөкүмәтен һайлаған һәм башҡа мөһим мәсьәләләр хәл иткән. Был тарихи ваҡиғаға башҡорт халҡы иҫ киткес ныҡ ҡыуанған. Бөтә башҡортто, уның бөтә социаль төркөмөн уртаҡ ҡыуаныс берләштерелгән. Автонимияла, үҙ хөкүмәтендә башҡорттар иҫәпһеҙ ҡорбан биреп, икһеҙ-сикһеҙ ғазап сигеп, буаттар буйы яулаған азатлыҡ хыялының тормошҡа ашыуын күргән. Милли азатлыҡ көрәшендә шул замандағы рус йәмғиәтен ике дошман лагерына бүлгән социаль ҡаршылыҡ кеүек эске ҡаршылыҡ башҡорт халҡына ят булған. Төп маҡсатҡа, милли азатлыҡ, өлкәшкәнгә тиклем бер ниндәй синфи мәнфәғәт айырмалығы башҡорт халҡын бүлгеләй алмаған.

Башҡорт автономияһының хас дошманы булып баштан уҡ татарҙар ҡалҡып сыҡҡан. Улар башҡорттарҙы милли-мәҙәни мосолман автономияһы төҙөүгә кәртә ҡуя торған сепаратив эштә ғәйепләп, ҡаты һөжүм асҡан. Асыуҙарынан ярһып, улар хатта III Бөтә Башҡортостан ҡоролтайын хәрби көс менән ҡыуып таратырға маташҡан. Эштәре барып сыҡмағас, улар Башҡортостан автономияһы төҙөүгә ҡырҡа ҡаршылыҡ белдереп, ҡоролтайға ультиматум яһаған. Ҡоролтай уларҙың ультиматумын кире ҡаҡҡан. Ләкин татарҙа башҡортҡа ҡаршы эш ҡылыуын туҡтатмаған һәм уларҙың яуыз эше ахыр сиктә башҡорт халҡын ҙур фәжиғәләргә килтергән.

Иғлан итеү менән генә милли автономияны ғәмәлләштереп булмағанын башҡорт хөкүмәте яҡшы аңлаған. Башҡорттар большевиктарынҙың Апрель конференцияһындағы резолюцияла, үҙ билдәнеш мәсьәләһе партия тарафынан “һәр айырым осраҡта тик уҙенә башҡа хәл ителә”, тип шарт ҡуйғанын белгән. Башҡорттар шулай уҡ Башҡортостандың үҙендәге ҡатмарлы хәл менән дә иҫәпләшмәй булдыра алмаған. Татарҙың яман мөнәсәбәте, Башҡортостандағы

ярты халыкты тәшкил иткән рус һәм башҡа килмешәктәрҙең дә башҡорт автономияһына ҡырҡа ҡаршы былыуы, Башҡортостан территорияһының большевиктар менән контрреволюцион казактар ҡул аҫтына ҡалып, ике өлөшкә бүленеүе көс еткеһеҙ ҡыйынлыҡҡа килтергән. Шуға күрә башҡорттар иғлан ителгән автомияны рәсми рәүештә раҫлатыр өсөн Совет хөкүмәтенә мөрәжәғәт итергә һәм шуның менән билдәләнгән сик эсендә автономиялы Башкортостандың юридик нигеҙен нығытырға булған. Милли үҙбилдәләнеш хоҡуғы хаҡында бөтә донъяға иғлан ителгән Совет хөкүмәтенең һис бер тотҡарлыҡ һәм ҡаршылыҡһыҙ башҡорт автономияһын раҫларына башҡорттар шикләнмәгән. Мәсъәләнең анһат хәл ителеренә ышынған Башҡорт хөкүмәте 1918 йылдың ғинуар башында Петербургка Учредитель йыйылышҡа барырға тейеш булған Башҡорт Мәркәз шура вәкиле Шәриф Манатовҡа Халыҡ Комиссарҙары Советының председателе В.И.Ленин менән иғлан ителгән раҫлау хаҡында һөйләшергә ҡушҡан. Манатов В.И.Ленин менән шул мәсьәлә буйынса 1918 йылдың 7 ғинуарында һөйләшкән. Һөйләшкән саҡта В.И.Ленин әйткән: “Беҙ башҡорт хәрәкәтен беҙгә ҡаршы йүнәлтелгән контрреволюцион хәрәкәткә һанамайбыҙ... - тигән. – Беҙ көнсығыш халыҡтарының милли хәрәкәтен бик тәбиғи һәм кәрәк тип һанайбыҙ. Көнсығыш халыктары социаль революцияға милли революция аша ғына килә ала”[89]. Шундай дөрөҫ һүҙҙәр әйтһә лә, В.И.Ленин ҡәтғи ҡуйылған мәсьәлә тураһында һөйләшеүҙән ялтарған һәм шунда уҡ үҙенең властары һәм абруйы менән баҫым яһап, Манатовты башҡорт эштәре менән туранан-тура шөғөлләнеүҙән ситләштергән. Шулай итеп Манатовтың, “талап ителгән автономияны хуплаған хәлдә башҡорт хәрәкәте Советтарға ҡаршы йүнәдтелмәҫ, ә Дутовҡа ҡаршы көрәштә бик ҙур көс булыр”, тип асыҡ әйтеүенә ҡарамаҫтан, Россияның ул дәүерҙә берҙән бер үҙәк хөкүмәте булып торған Совет хөкүмәте башҡорт автономияһын раҫлауҙан баш тартҡан. Уның был эше милли үҙбилдәләнеш хоҡуғы хаҡындағы большевиктар декларацияһының ҡоро һүҙ икәнен асҡан һәм алдағы фәжиғәләргә төп сәбәпсе булған...[90]

[90] Образование Башкирской Автономной Советской Социалистической Республики . Сборник документов и материалов (Артабан; Образование ...) Уфа 1959, 84- се бит

Башҡорт хөкүмәте Ырымбурҙа ойошоп , шунда урынлашҡан , ә ул ҡала 1917 йылдың 25 октябрендә казак атаманы Дутов ҡулында булған. Башҡорт хәкүмәте үҙ-ара дошманлашҡан рус көстәренең ҡайһы яғы ҡаланы биләп тороуына әһәмиәт бирмәгән , кем биләһә лә, битарафлыҡ һаҡлап , ул үҙ урынында , үҙ ерендә ҡалған. Үҙенең битарафлығы араһында хаҡында Башҡорт Мәркәз шурәһе бер нисә тапҡыр белдереү яһаған. Шуның өсөн 1918 йылдың 18 ғинуарында Ырымбурҙы Ҡыҙыл гвардия частары алғас та , Башҡорт хөкүмәте ҡаланан китмәгән , ә үҙ эшен дауам иткән. Ул Совет власына яҡшы мөнәсәбәт белдергән һәм унан дә шуны көткән. Ләкин ғәмәлдә улай булып сыҡмаған. Ҡыҙыл гвардияның командованиеһы башҡорт милле хәрәкәтен Советтарға ҡаршы тип , ә башҡорт хөкүмәтен мулла һәм кулактарҙан ғына торған контрреволюцион хөкүмәт тип һанаған. Татарҙар шунда уҡ быны белеп , башҡорт автономияһын бөтөрөү өсөн уңайлы хәлдән файҙаланмаҡ булған. Улар ҡыҙыл командованиеға башҡорттарҙы Дутов яҡлы тип яманлаған, шулай итеп ҡыҙылдарҙы башҡортҡа тамам дошман иткән. Башҡорттарҙы һәм Башҡорт хөкүмәтен ҡаты эҙәрләй башлағандар. Шундай шартта, 1918 йылдың 3 февралендә татар шовинистарының ояһы булған Мосолман хәрби-революцион комитеты Башҡорт Мәркәз шураһы менән Башҡорт хөкүмәте ағзаларын ҡулға алырға ҡарар сығарған. Әммә ләкин башҡорттарҙың контрреволюцияла ҡатнашыуын, Дутов менән бәйләнештә былыуын һис бер документаль дәлил булмаған. Шуға ҡарамаҫтан , башҡорттарҙы дошман күргән рус большевиктарына татарҙар теләге етәрлек нигеҙ булған: 1918 йылдың 4 февралендә Ырымбур губерния хәрби революцион комитеты Мосолман хәрби ревкомының ҡарарын хуплап, Башҡорт Мәркәз шураһы менән Башкорт хөкүмәте ағзаларын төрмәгә япҡан һәм уларҙың кассаһынан башҡорт хөкүмәт ихтияжына йыйып биргән 217 мең аҡсаһын алған. Шул уҡ ваҡытта Ырымбур бойороғо буйынса Баймаҡта Башҡорт хәкүмәтенең ике ағзаһы (Иҙелбаев менән Мағазов) ҡулға алынып , бер ҡыҙыл банда командирының үҙ ирке менән атып үлтерелгән. Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алыуы һәм ике ағзаһы атып үлтереүе менән милли политикала һис бер көслөккә юл ҡуймауҙы үҙенең принцибы итеп белдерелгән совет власы ҡот осҡос яманлыҡ ҡылған һәм үҙе сығырған

декларацияларҙың нимәгә торош иткәнен тағы бер асып күрһәткән. Был ваҡиға тураһында рәсми хәбәр алған үҙәк Совет хөкүмәте Ырымбур губерния ревкомының эше менән һүҙһеҙ генә килешкән, тимәк, һис бер үлсәүгә һыймаҫ законлыҡты хуплаған.

Башҡорттар хөкүмәттең ҡулға алыуына шаҡ ҡатҡан. Улар был эштең казак атаманы Дутов түгел , ә бөтә халыҡҡа үҙбилдәләнеш хоҡуғы биргән совет власы тарафынан эшләнгәнен башына һыйҙыра алмаған. Хәл бик киҫкенләшкән. Ләкин хатта шундай мәлдә лә башҡорттар автономияны ҡотҡарыр өсөн яңы ҡыйыу аҙым тапҡан: “Тулҡын” тигән әҙәби йәштәр ойошмаһының ағзалары (III Бөтә Башҡортостан ҡоролтайының элекке делегаттары) хөкүмәт ҡулға алынғас та, 1918 йылдың февраль көнө кис, урындарҙан килгән вәкилдәр ҡатнашлығында ашығыс йыйылыш үткәреп, яңы милли власть органы – Башҡортостандың ваҡытлы революцион советын (БВРС) төҙөгән.

БВРС үҙенең Башҡорт Мәркәз шураһының эшен дауам итеүсе тип һанаған һәм III Бөтә Башҡортостан ҡоролтайының ҡараҙарын, иң элек Башҡортостан автономияһы хаҡындағы ҡарарҙы ,үҙ көсөндә ҡалдырған. “Элекке хөкүмәт ҡайһы бер хаталары арҡаһында ҡулға алынған өсөн генә башҡорт халҡының автономияһына ҡарата өмөтһөҙлөк күрһәтергә ярамай, - тип яҙған БВРС “Башҡортостан” газетаһында, ә, киреһенсә , башланған изге эште ғәмәлгә ашырыу көрәшен тағы ла ҙурыраҡ дәрт һәм көс менән дауам итергә кәрәк”. Был эштә – автономияны ҡыйралыштан ҡотҡарыу эшендә – БВРС совет власын асыҡтан-асыҡ ҡабул итеп , автономияны совет власы нигеҙендә ғәмәлләштереп кенә уңышҡа өлгәшеп була тип һанаған һәм үҙенең совет платформаһында торғанлығы хаҡында белдереү яһаған. Шуға күрә Ырымбур губерния ревкомы БВРС-ты шунда уҡ бөтөрөр өсөн һылтау тапмаған һәм уны танырға мәжбүр булған.

Совет платформаһында баҫҡан БВРС ул замандағы башҡорт милли хәрәкәтендә янғыҙ булмаған. Башҡорттар һәр төрлө демократик идара формаһында – совет формаһында , буржуаз формаһында – бер тигеҙ риза булған,

тик унының автономияла үҙ аллыҡ биреуе кәрәк. Тимәк , ғөмүмән башҡорт халҡы совет власына принципиаль ҡаршылыҡ күрһәтергә уйламаған. Быны Крәҫтиәндәр съезына килгән 200 башҡорт бик яҡшы белдергән. Улар 1918 йылдың 26 феврәлендә махсус йыйылыш үткәреп, “башҡорт ерле автономияһы хаҡындағы изге теләккә зыян килтермәгән хәлдә ... башҡорттар Советтар менән ҡулға – ҡул тотошоп барасаҡ”, тигән ҡарар ҡабул иткән[91].

БВРС Башкортостандағы халыҡтарҙы “диненә лә, милләтенә лә ҡарамай”, автономияла берләштерергә уйлаған һәм тиҙ көндә Башҡортостан съезы йыйып, уға бөтә эште тапшырыу бурысын төп бурыс итеп һанаған. БВРС әҙерләгән “Башҡортостан автономияһы һаҡындағы ҡағиҙәләр проектында” Башҡортостан автонимияһы ғәмәлдә булыуы билдәләнгән һәм Автономиялы Башҡортостандың Федератив Россия эсенә инеүе, Автономиялы Башҡортостанда Советтар съездының юғары власть органы булып тороуы һ.б. күрһәтелгән[92]

БВРС Башҡортостанда большевиктар талабына яуап биргән яңы Совет власы органы төҙөгәнлеге хаҡында үҙәк хөкүмәткә тиҙ генә телеграмма ебәргән. Халыҡ Комиссарҙары Советына ул Башҡортостандағы татарҙар ойошторор яҡан Урал-Волга штатына индереүгә ҡырҡа ҡаршы булғанын белдергән һәм башҡорт автономияһын раҫлатыр өсөн Мәскәүгә тулы хоҡуҡлы вәкиләт ебәреүен хәбәр иткән. Бәхтегәрәй Шафиев етәкселегендәге дүрт кешеләй вәкиләт 26 мартта юлға сыҡҡан. Ләкин Халыҡ Комиссарҙары Советы Башҡортостандың хатта совет автономияһы хаҡында ла ишетергә телемәгән. Унының урынына ул башҡортто барыбер татарҙан йотторорға булған һәм башҡорт вәкиләтте юлға сыҡмаҫ борон уҡ, 22 мартта, Татар-Башҡорт республикаһы төҙөү тураһында декрет сығара һалған. Был Татар-Башҡорт республикаһы татар шовинистары ҡорорға уйлаған Урал-Волга штатынан исеме менән генә айырылып һәм ул төҙөлгән көнөнән үк бөтөүгә дусар булған.

[91] Образование..., 121-се бит.
[92] Образование..., 96,107,113-114- се биттәр.

Шул ваҡытта Ырымбур губерния ревкомы БВРС-ты бик ҡаты эҙерләй башлаған. Ырымбур ревкомы башҡорт автономияһының һәр төрөнә принципиаль рәүештә ҡаршы торған һәм башҡорт хәрәкәтен тамам ҡыйратыр өсөн уңайлы мәлде көткән. Был эштә уға бик ныҡ ярҙам иткән. Татарҙар, Башҡорт хөкүмәтенә ҡаршы көрәшкән кеүек, БВРС-ҡа ла тәүге көндән яу булып ҡаршы сыҡҡан. Улар БВРС-ты үҙ ҡулы аҫтына алырға тырышҡан уның эш сараларына бөтә яҡлап аяҡ салған, төрлө ялла яҡҡан һәм башҡорт автономияһына юл ҡуймаҫ өсөн йәнә бөтә көсөн һалған. БВРС-тың Башҡортостан автономияһына күпселек боронғо башҡорт ерен индереүе, батша заманында талап алынған бөтә башҡорт ерен һәм мөлкәтен Башҡортостан хөкүмәте ҡарамағына ҡайтарыуҙы талап итеүе һ. б. татарҙар менән Ырымбур ревкомының бигерәк ныҡ асыуын ҡабартҡан, уларҙың шовинистик сәменә тейгән. Шуға күрә 1918 йылдың 30 мартында хәрби ревком урынына 25 мартта һайлап ҡуйылған Ырымбур губерния Советының башҡарма комитеты ике ай эшләргә лә ирек бирмәй, БВРС-ты ҡыуып таратҡан. Таратыу өсөн башҡорт менән татар араһындағы тартыштың ныҡ көсәйеүе һылтау ителгән, ләкин төп сәбәп ҡарарҙың үҙендә сиселгән. Унда, социалистик революция милли сик һәм милли автономияһы ҡабул итмәй, тип әйтелгән. Үҙәк Совет хөкүмәте БВРС-ты таратыу тураһында хәбәр алғас, тағы бер һүҙ ҙә өндәшмәгән.

Колонизаторҙарҙың һәм совет власының башҡортҡа ҡаршы йүнәлтелгән эше милли хөкүмәт органдарын эҙерләү менән генә бөтмәгән. 1917 йылдың ноябренән башлап, улар башҡорт халҡын аяуһыҙ ҡыра башлаған. Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғас, был террор бигерәк тә ныҡ көсәйгән. Ҡыҙыл ғәскәрҙәр ҡарап тормай, зыялыларҙы, ябай һәм етәксе башҡорт эшмәкәрҙен, ғөмүмән бер эшкә лә ҡыҫылмаған башҡортто һыпырып атҡан, башҡорт ауылдарын талаған. Килмешәк халыҡ, башлыса рустар, ҡулында булған волость һәм ауыл советтары ҡотороп шашҡан. Рус, татар, сыуаш һәм башҡа күскенсе крәҫтиәндәр башҡорттоң милли хәрәкәтенең уҙ мәнфәғәтенә хәүеф күреп, талап йыйған байлыҡтарын

һаҡларға, ул ғына түгел, башҡортто бөтөрөп, ҡалған-боçҡан бөтә ерен баçып алырға ярһып киткән. Шул маҡсат менән улар ҡыҙыл бандаларға яҙылып, ҡорал алған һәм совет власы исеменән башҡортто ҡырған. Улар башҡортто өйөндә лә, урамда ла, юлда ла, ҡайҙа тап килә - шунда үлтергән, тотош өй эсе, ауылы менән юҡ иткән. Мәçәлән, Көньяҡ Башҡортостандың бер ауылында урындағы властар бөтә ир затын, үçмерҙәрҙе лә ҡалдырмай, ҡулға алып, ҡамсы менән ярып, волость үҙәгенә килтергән дә, берәһен ҡалдырмай атып үлтергән. Шундай вәхшилек бөтә ерҙә хөкөм һөргән. Күмәк террор менән бер ыңғай халыҡты талағандар, ерҙәрен баçып алғандар, урмандарын ҡырҡҡандар. Ҡаршылыҡ күрһәткән ауылдарға Ҡыҙыл гвардияның каратель отрядтары ебәрелгән. Улар аяуһыҙ ҡан ҡойоп, халыҡтың ҡотон алған, көс етмәç контрибуция һалған. Башҡорт телендә "урыç азатлығы" тип исем алған революция колонизаторҙарҙың йыртҡыс инстинктына тулы ирек биргән, төп башҡорт халҡын бөтөнләй хоҡуҡһыҙ иткән. Өфө һәм Ырымбур губернияларының үҙәк партия һәм совет органдары башҡорт ерен тартып алып, "эшсән" рус крәçтиәндәренә биреүҙе үҙҙәренең төп бурысына һанаған шуның өсөн терророҙы яҡлаған, үҙҙәре лә туранан-тура уға ҡатнашлыҡ иткән.

Ҡыҙыл ғәскәрҙең һәм совет органдарының ҡанлы эше большевиктарҙан яҡшылыҡ булмаçына башҡортто тамам ышандырған. Улар большевиктарҙы батша ваҡытында төрлө ҡанһыҙлык ҡылған карателдәрҙән бер ҙә кәм тугел икәнен, башкортҡа хас дошман икәнен күргән. Хатта совет органдарында эшләп йөрөгән башҡорттар ҙа, берәм-һәрәмдән башҡаһы, уҙ урынын ташлап, большевиктар менән мөнәсәбәтен өҙгән.

## 2. БАШҠОРТ ХӨКУМӘТЕНЕҢ АҠТАР ЯҒЫНДАҒЫ САҒЫ. КЫҘЫЛДАР ТЕРРОРЫ

Шундай көсөргәнешле мәлдә, 1918 йылдың 4 апрелендә, атаман Дутовтың Ырымбурға сапҡын яһаған сағында Башкорт Мәркәз шураһы менән Башҡорт хөкүмәтенең ағзалары төрмәнән сыҡкан. Төрмәнән ҡотолған хөкүмәт ағзалары Советтар ҡул аҫтындағы ерҙән ҡасып, Силәбегә йыйылған, Силәбе ул ваҡытта совет власына ҡаршы фетнә кутәргән плендағы чех һалдаттарының ҡулында булған.

1918 йылдың, яҙ һәм йәй көндәрендә Башҡортостан ерендә ҡыҙылдар менән аҡтар һуғышы ҡыҙып киткән. Башҡортостан аша үткән I фронт башҡорт халҡының ҡазаһын йөҙләтә көсәйтеп ебәргән. Большевиктар ҡылған аяуһыҙ террор өҫтөнә уларҙың сигенгән ғәсҡәрҙәре ҡоторонған. Большевиктар артында тотош таланған, ҡанға баткан ауылдар тороп ҡалған.

Силәбелә урынлашҡан Башҡорт хөкүмәте яйлап эш башлаған. Әлбиттә, булған хәлдәрҙән һуң Башкорт хөкүмәте, бөтә башҡорт халҡы кеүек үк, совет власына элеккесә ҡарай алмаған, ул уны ысын дошман итеп күргән. Большевиктарға ҡаршы көрәшкә саҡырып, Башҡорт хөкүмәте: “Әгәр беҙ, башҡорттар, ...уларҙы Урал буйынан ҡыумаһаҡ, ер хоҡуғын, автономия хоҡуғын тотош юғалтабыҙ.” – тип яҙған. Большевиктарҙың хөкөмөн татыған башҡорттарҙы был һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөнә ышандырып тороу кәрәкмәгән, улар бөтә йөрәге менән үҙҙәренең яңынан терелгән хөкүмәтенә тартылған. Башҡорттар большевиктарға ҡаршы көрәшергә нык ҡарар иткән, ләкин большевиктарға ҡаршы көрәшеү башҡа контрреволюцион төркөмдәр өсөн төп маҡсат булғанда, башҡорттар өсөн төп маҡсат булмаған, ә берҙән-бер маҡсатҡа — халыҡтың тереклеген һәм үҙ аллы үҫешен тәьмин итерлек милли автономияға өлгәшер сара ғына булып торған. Яңынан эш башлағас

та, Башҡорт хөкүмәте шул маҡсатты ғәмәлгә атҡарыу хаҡында хәстәрлек иткән.

Башҡорт хөкүмәте иң элек Силәбелә власть тотҡан чехтар менән башҡорт автономияһы тураһында килешеү төҙөгән. Автономияны хуплау менән бергә чехтар килешеү ҡағыҙына, автономияға һуңғы санкцияны Бөтә Россия учредитель йыйылышы бирә, тип иҫкәрмә индергән. 1913 йылдың июнендә, Бөтә Россия учредитель йыйылыш комитеты (Комуч) йәки, икенсе төрлө әйткәндә, Һамар хөкүмәте төҙөлгәс тә, башҡорттар уның менән һөйләшкән һәм Комуч Башҡортостан автономияһын ҡабул иткән. Ләкин был ғына әле етмәгән, сөнки Башҡортостандың ҙур өлөшө 1918 йылдың ғинуарында уҡ Томск ҡалаһында ойошторолған Ваҡытлы Себер хөкүмәтенең ҡул аҫтында булған. Ул хөкүмәт менән башҡорттар 1918 йылдың июлендә килешеү яһаған. Себер хөкүмәте лә башҡорт автономияһын таныған. Хәҙер Башҡорт хөкүмәте алдына милли автономияны ысынлап ғәмәлгә ашырыу, Башҡортостан ерендә үҙ хөкөмөн урынлаштырыу һәм уны ышаныслы һаҡ менән тәьмин итеү мәсьәләһе килеп баҫҡан. Быны өсөн көслө генә Башҡорт ғәскәре ойоштороу кәрәк булған.

Башҡорт ғәскәрен ойоштороуға Башҡорт хөкүмәте ғәмәлдә эш башлаған тәүге көндәренән үк тотонған. Себер хөкүмәте менән һөйләшкәнгә тиклем уның 2 йәйәүле полкы һәм 12 ҡурғаныу төркөмө булған, был ғәскәри берәмектәрҙә бөтәһе 3500 кеше иҫәпләнгән. Ләкин ғәскәри көстө тейешенсә тәьмин итеү һәм күбәйтеү өсөн башҡорттарҙың матди (материаль) сараһы булмаған. Шуға күрә улар ярҙам һорап ирекһеҙҙән Комуч менән Себер хөкүмәтенә мөрәжәғәт иткән. Комуч ҙур вәғәҙәләр биргән, ләкин киләсәк көнгә, Себер хөкүмәте килешеү яһағанда уҡ Башҡорт ғәскәрен ҡорал-яраҡ менән тәьмин итергә йөкләмә алған һәм үҙ йөкләмәһен күпмелер кимәлдә үтәгән. Алған ярҙамы өсөн башҡорттар үҙ ғәскәрен оператив йәһәттән Себер хөкүмәтенен хәрби етәкселегенә буйһондороруға риза булған, ләкин

оператив эшкә ҡағылмаған башҡа яҡтан Башҡорт ғәскәре Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлегенә һәм үҙенең Баш штабына буйһонған айырым ғәскәри берәмек булып ҡалырға тейеш булған. Башҡорттар Себер хөкүмәте менән булған мөнәсәбәтте политик бойондороҡҡа юл ҡалдырмай торған килешеү нигеҙенә ҡорорға тырышҡан. Башҡорт хөкүмәте тағы бер тапҡыр тик үҙ позицияһында ғына торғаны һәм партияһыҙ, ләкин демократик, орган булғаны хаҡында рәсми белдереү яһаған.

1918 йылдың 10 июлендә Башҡорт хөкүмәте "изге Башҡортостан ерен залимдарҙан һаҡлау өсөн" башҡорттарҙы ғәскәргә мобилизациялау тураһында фарман сығарған. Ғәскәр төҙөү ниәтен башҡорт халҡы бик ныҡ хуплаған һәм үҙ ғәсҡәренә ҙур теләк менән барған. Шуның өсөн Башҡорт хөкүмәте бик тиҙ генә ваҡыт эсендә 2 атлы һәм 6 йәйәүле полк төҙөргә өлгәшкән. Шунан тыш, халыҡты рус һәм башҡа килмешәк крәҫтиәндәр терроронан һаҡлау, урындағы башҡорт власын көсәйтеү өсөн ирекле һыбай төркөмдәр ойошторолған.

Башҡорт хөкүмәте менән бер үк ваҡытта Һамар һәм Себер хөкүмәттәре лә мобилизация иғлан иткән. Башҡорт хөкүмәте, уларҙың мобилизацияһы башҡорт кешеләренә ҡағылмай, тип фарман сығарған. Ләкин был фарманды аҡ гвардия хөкүмәттәре иҫәпкә алмаған, шулай итеп автономиялы Башҡортостан хоҡуғын тупаҫ рәүештә инҡар иткән. Был хәл башҡорттарҙы рус хөкүмәттәре менән тәүге ҙур ҡаршылыҡҡа килтергән.

Башҡорт хөкүмәтенә Көнбайыш Башҡортостанда үҙ власын урынлаштырыр мөмкинлек булмаған: тәүҙә ул фронт һыҙығы арьяғында булған, ә Ҡыҙыл ғәскәр сигенгәс, аҡ гвардия хөкүмәттәре автономияны киңәйтергә ирек бирмәгән. Шуға күрә автономия көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыштағы "Бәләкәй Башҡортостан"да ғына ғәмәлләштерелгән. Башҡорт хөкүмәте Бәләкәй Башҡортостанды административ йәһәттән 13 кантонға, ә кантондарҙы волость һәм

йорттарға бүлгән. Ул административ берәмектәрҙә милли власть органдары ойошторолған. Ләкин Башҡорт хөкүмәте элекке өйәҙ идаралығын бөтөрә алмаған. Өйәҙ идаралығы аҡтар бойондороғона күсеп, һаман эшләп ятҡан. Рус административ органдары башҡорттоҡо менән йәнәш эш иткән, улар аша аҡ гвардия хөкүмәттәре автономиялы Башҡортостан ерендә үҙ власын атҡарған һәм шуның менән автономияның эске эшенә ҡыҫылмаҫҡа тигән йөкләмәһен боҙған. Башҡортостан эшенә ҡыҫылыу менән бергә улар башҡорттарҙы кәмһеткән, рәнйеткән һәм идара итеүгә булдыҡһыҙ итеп күрһәтергә тырышҡан. Былар бөтәһе лә тағы башҡорт менән рус властары араһын нығ боҙоуға сәбәп булған.

Башҡорт хөкүмәтенең демократик платформала тороуы һәм революцияға ҡаршы ысын союздаш булырға теләмәүе аҡтарҙа ҙур ризаһыҙлыҡ уятҡан. Юғарыла әйтелгәнсә, башҡорттар революция яһағандары өсөн түгел, ә яман дошманлыҡ ҡылғандары өсөн болышевиктарға ҡаршы барған. Башҡорт хөкүмәте совет яғында ябай эш кенә түгел, етәксе вазифа башҡарып киткән кешеләрҙе лә эҙәрләмәгән, уларҙы үҙенең урындағы һәм үҙәктәге власть органдарына эшкә алған. Бындай позиция аҡтарға башҡорттарҙы “большевиклыҡта” ғәйепләргә һәм өҙлөкһөҙ эҙәрләргә сәбәп биргән. 1918 йылдын 23 сентябрендә Һамар һәм Себер хөкүмәттәре урынына Бөтә Россия ваҡытлы хөкүмәте, икенсе төрлө әйткәндә, Өфө Директорияһы, ойошторолғас, башҡортто эҙәрләү бигерәк көсәйгән. Директория ябай һәм яуаплы башҡорт хеҙмәткәрҙәрен ҡулға ала башлаған. Себер төрмәләре башҡорт менән тулған. Эҙәрләүҙең көсәйеүе “большевиклыҡ” менән көрәшеүҙән түгел, ә Директорияның элекке хөкүмәттәр биргән башҡорт автономияһын бөтөрөргә уйлауынан булған.

Башҡорт автономияһына ҡаршы дошманлыҡ эше эшләп, Директория иң элек Башҡорт ғәскәренә күҫәк төшөрөргә, шуның менән Башҡорт хөкүмәтен ҡоралһыҙландырырға ҡарар иткән.

Башҡорт ғәскәре был ваҡытта ҙур көскә әйләнгән булған. Тәьминәте насар булыуға ҡарамаҫтан, фронтта ул ғәжәп ҙур ҡыйыулыҡ, күмәк батырлыҡ күрһәткән. Фронт һыҙығы аръяғында ла уны яҡшы белә, бик иҫәпләшә башлағандар, аҡтар яғында ла ул ҙур хәүеф уятҡан. Шуға күрә Директория милли теләк һәм бер маҡсат менән ныҡ ойошҡан был ғәскәри берәмекте бер һуғыуҙа ҡыйратырға булған: 1918 йылдың 15-19 октябрендә Юғарғы баш командующий штабы Башҡорт ғәскәренә мобилизация үткәреүҙе туҡтатыу, Башҡорт корпусын таратыу, уның полктарын рус ғәскәри берәмектәренә беркетеп, тотош рус етәкселегенә буйһондороу һәм Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби советын бөтөрөү тураһында бойороҡ биргән. Һөҙөмтәлә, башҡорт полктары фронттың төрлө еренә күсерелгән, юғарғы башҡорт командованиеһы улар менән бәйләнеш тотоу хоҡуғынан мәхрүм ителгән. Бер юлы башҡорт ғәскәрҙәренең етәкселегенән мосолман офицерҙар алынып, улар урынына рус казак офицерҙары, милли автономияның ата дошмандары, ҡуйылған. Шунан башҡа, башҡортто яуҙа ҡырыу өсөн электән ҡулланылған ысул буйынса башҡорт полктарын фронттың иң ҡурҡыныс ерҙәренә, һөжүмгә барған сафтарҙың алдынан ебәрә башлағандар.

Әлбиттә, башҡорттар менән аҡтар араһы баштан уҡ киҫкен булған, ул мөнәсәбәт һаман нығыраҡ боҙолоуға барған, шуға күрә яҡшылыҡ көтөр урын булмаған. Ләкин барыбер Башҡорт ғәскәренә төшкән күҫәк башҡорттарға йәшен һуҡҡан кеүек тәьҫир иткән: йәнә уларҙың аяҡ терәр таянысы ҡалмаған. Башҡорт һалдаттары үҙ ғәскәренә үҙ автономияһын һаҡлар өсөн барған, шул автономия өсөн йәнен бирергә әҙер булған. Ә хәҙер уларҙы яуыз батша заманын кире ҡайтарыр өсөн үлемгә ҡыуалар.

Төрмәнән ҡасып эш башлаған тәүге мәлдә Башҡорт хөкүмәтенә һайланыр сара ҡалмаған: совет власы – башҡорт халҡының дошманы, уға ҡаршы көрәшеү берҙән-бер юл. Хәҙер инде хәл уҙгәргән: бер яҡтан

башҡортто аҡтар быуа, икенсе яҡтан ҡыҙылдар ҡыҫа. Ике яҡҡа ла бер юлы ҡаршы торорға башҡорттарҙың көсө етмәй, битараф булып ситтә ҡалырға ла мөмкинлек юҡ: уларҙың битарафлығы менән берәү ҙә иҫәпләшмәй. Башҡорттар ике ут, ике яманлыҡ араһында ҡалған, шуның бәләкәйерәген һайлау мәсьәләһе ҡалҡып сыҡҡан. Ошо ауыр мәсьәлә менән баш ҡатырып, Башҡорт хөкүмәтенең етәкселәре совет яғына ауыша башлаған, яңы шарттарҙа ҡыҙылдар яғы бәләкәйерәк бәлә булып куренгән. Сөнки Советтар, башҡорт халҡына ни хэтле яуызлыҡ эшләһә лә, милли үҙбилдәләнеш хаҡында рәсми рәүештә белдереп. 1918 йылдын 10 июлендә V Бөтә Россия Советтар съезы тарафынан ҡабул ителгән РСФСР Конституцияһы менән нығытып ҡуйған. Тимәк, Советтар автономия тураһында һөйләшергә исмаһам нигеҙ биргән. Аҡтар яғында ундай нигеҙ ҡалмаған. Әлбиттә, Советтарҙың, автономия хаҡындағы һүҙе менән эше араһында ҙур айырма бар. Быны Совет хөкүмәте йыл башында башҡорт автономияһын раҫлауҙан ике тапҡыр баш тартып, башҡорт халҡына ҡаршы ҡаты репрессия үткәреп, бик асыҡ күрһәткән. Ләкин ул саҡта Советтар башҡортто айырым хоҡуҡ даулап маташҡан меҫкен бер халыҡ тип белгән. Хәҙер башҡорттар ныҡышмалыҡ һәм яуҙағы батырлыҡ менән үҙенең кем икәнен уларға таныҡкан. Хәҙер уларҙың башҡортҡа фекере үҙгәргән. Ошо нәмәләр хаҡында уйлап, Башҡорт хөкүмәте ғәскәр менән бергә бер юлы ҡыҙылдар яғына сығырға кәрәк тигән ниәткә килгән. Башҡорттарға был аҙым бик хәүефле булып күренгән. Өҫтәүенә, ваҡытынан алда сыҡһаҡ, аҡтар ҡулында ҡалған башҡорт халҡына ҙур бәлә килер, тип ҡурҡҡандар. Шуға күрә хөкүмәт ныҡлап ҡарар итергә ашыға алмаған.

Ул арала башҡорт полктарында рус командирҙары менән бөтә һәләкәтте аңлаған ябай башҡорт һалдаттары араһында асыҡ ҡаршылыҡ башланған. Башҡорт һалдаттары бергәләшеп, рустар бойороғон үтәүҙән, һуғышҡа инеүҙән баш тарҡан, башҡорттар менән рус казактары араһында ҡоралды бәрелештәр сыҡҡан, башҡорт һалдаттары араһында дезертирлыҡ йышайған. Башҡорт хөкүмәте тулыһынса үҙ һалдаттары менән теләктәш булған.

Башбирмәҫ хөкүмәтте бөтөрөр өсөн Өфө Директорияһы уны таратырға ҡарар сығарған. Башҡорт хөкүмәтен таратыу тураһында шулай уҡ Директорияның хәрби министры адмирал Колчак һәм казак атаманы Дутов бойороҡ биргән. Ләкин улар үҙ бойороғон бойомға ашыра алмаған, Башҡорт хөкүмәте һаман эшләп ятҡан.

1918 йылдын 18 ноябрендә адмирал Колчак Өфө Директорияһын таратып, Омск ҡалаһында үҙен "Россия дәүләтенең юғарғы хакиме" тип иғлан иткән һәм "Бөйөк Россияны" тергеҙеү маҡсатын алға ҡуйған. Колчак "берҙәм һәм бүленмәҫ" Россияла һис бер автономиялы ҡоролмаға урын бирмәгән. Шуға күрә башҡорттарға был диктатор менән ниндәйҙер мөнәсәбәткә инеүҙән мәғәнә булмаған. Башҡорт хөкүмәте Колчак һәм уның Ырымбурҙағы вәкиле Дутов менән араны ҡырҡа өҙгән. Шулай итеп ул Колчакка һәм ғөмүмән аҡтарға дошман булып киткән. Хәҙер инде Советтарға йөҙ тотоуҙан башҡа сара ҡалмаған.

1918 йылдың 21 ноябрендә Башҡорт хөкүмәте совет власы яғына сығыу мәсьәләһен рәсми рәүештә ҡарар өсөн ултырыш йыйған. Башҡорт хөкүмәте Советтарға үтенес менән мөрәжәғәт итергә уйламаған, ул үҙ көсөн һәм хоҡуғын белеп, Советтар менән тик үҙ-ара килешеү нигеҙендә мөнәсәбәт ҡорорға иҫәп тотҡан. Был килешеүҙә башҡорттар үҙ өҫтөнә контрреволюцияға ҡаршы сығырға йөкләмә алмаҡ иткән, ә Советтар алдына һис кисекмәҫтән, Бәләкәй Башҡортостан күләмендә булһа ла, башҡорт автономияһын таныу, Башҡорт ғәскәрен бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү, Башҡортостанда эске тәртипте һаҡлау эшен башҡорт ҡоралы төркөмдәренә тапшырыу, большевиктарға ҡаршы йөрөгән башҡорт эшмәкәрҙәрен аҡлау талабын ҡуймаҡ булған. Шул шарттар менән Башҡорт хөкүмәте бик йәшерен рәүештә фронт һыҙығы аша Гәрәй Ҡарамышев менән Сәләх Атнағоловтан торған тәүге вәкәләтен ебәргән. Ләкин Ҡарамышевты казактар тотоп алған, Атнағолов ҡурҡҡан, тәүге вәкәләт тейешле йомошто үтәй алмаған. Ебәрелгән вәкәләттең яҙмышы хаҡында хәбәрһеҙ ултырған Башҡорт хөкүмәте, уның өндәшмәгәненә аптырап, шиккә ҡалған. Шулай булһа ла, Колчак менән килешергә уйламаған.

1918 йылдың 3 декабрендә Башҡорт хөкүмәте башҡорт полктарына Дутовтың һуғыш ҡырына ебәреү хаҡындағы бойороғон үтәмәҫкә әмер биргән. Ул ҡайһы бер казак даирәләренең ярҙамы менән Ырымбурҙағы Дутов власын ҡолатырға булған. Ләкин ниәт барып сыҡмаған, Башҡорт хөкүмәте Ырымбурҙан Башҡортостандың төпкөлөнә, Баймаҡ ауылына, ҡасырға мәжбүр булған.

Был мәлдә Ҡыҙыл ғәскәрҙең Көнсығыш фронты һөжүмгә күскән. Шул уңай менән совет командованиеһы Колчак ғәскәрҙәре араһында мөрәжәғәт тарата башлаған. Башҡорт ғәскәрҙәренә махсус өндәмәләр ебәрелгән. Ул өндәмәләр һәр төрлө яла, ялған менән тулы булған, ҡыҙылдарҙың башҡортҡа ҡылған яуызлығын яҡларға тырышҡан, ләкин шул сүп-сар араһынан уларҙың башҡортто көслө халыҡ тип, үҙ мәнфәғәттәре өсөн көрәшергә хаҡлы милләт тип танығаны күренеп торған. Йыл башында ундай нәмәнең әҫәре лә булмаған. Шул яғы менән совет өндәмәләре вәкәләттән хәбәр ала алмай аптырап торған Башҡорт хөкүмәтенең иғтибарын тартҡан һәм ул совет яғына сығыу мәсьәләһен ҡарар өсөн тағы ултырыш йыйған. Ултырыштың ҡарары менән 1918 йылдың 15 декабрендә фронт һыҙығы аша хөкүмәт ағзалары Муллаян Халиҡов менән Хәйретдин Сәғитовтан торған икенсе вәкәләт ебәрелгән.

Вәкәләт ебәргәс, Башҡорт хөкүмәте әҙерлек саралары күрә башлаған. Төп мәсьәлә төрлө ергә таратылған башҡорт ғәскәри берәмектәрен бер урынға туплау мәсьәләһе булған. Был мәсьәлә иң мөһим генә түгел, иң ауыр мәсьәләгә әйләнгән: Колчак командованиеһы ҡуйған төрлө сик-кәртәне үтергә, шул уҡ ваҡытта ғәскәрҙе бергә туплау маҡсатын ҡаты сер итеп тоторға кәрәк булған. Бер ҡаршылыҡҡа ла ҡарамай, 1919 йылдың 16 ғинуар көнөндә Башҡорт хөкүмәте үҙенең полктарын икенсе яҡҡа сығыр өсөн уңайлы бер урынға тотош йыйып алған. Шул уҡ ваҡытта ул үҙ ғәскәрен аҡ рус офицерҙарынан таҙартып, тағы бер ҙур эш эшләгән. Шулай итеп, башҡорттар алда тағы ла яманыраҡ бәлә һәм ҡаза көткәнен белмәй, үҙҙәренең яңы тарихи аҙымына әҙерләнгән.

## 3. БАШҠОРТ ХӨКҮМӘТЕНЕҢ ҠЫҘЫЛДАР ЯҒЫНА СЫҒЫП, ҮҘӘК МЕНӘН АВТОНОМИЯ ХАҠЫНДА КИЛЕШЕҮЕ. АЯУҺЫҘ ТЕРРОР ДАУАМЫ

1919 йылдың ғинуарында Башҡорт хөкүмәте ебәргән вәкилдәр Ҡыҙыл ғәскәр ҡулындағы Өфө ҡалаһына килеп еткән. Вәкилдәрҙең, береһе Халиҡов бик һаҡ ҡына, кеше аша ғына хәбәр иттереп, Өфө губерния революцион комитеты (губревком) менән бәйләнеш булдырған һәм үҙенең килеү маҡсатын белдергән. 1919 йылдың 30 ғинуарында Өфө губкомының ултырышы йыйылып, шунда ике яҡ тәүге тапҡыр осрашҡан. Ултырышта Россия Совет Республикаһы Халыҡ Комиссарҙары Советының вәкиле лә ҡатнашҡан. Башҡорт хөкүмәте ҡуйған килешеү шарттары менән танышҡас, губревком, Совет Россияһы «милли совет республикалары төҙөү принцибында тора», тип белдергән һәм «был ултырыш рәсми булмаған тәүге һөйләшеү көсөнә лә эйә түгел, ул Совет Россияһының, милли мәсьәләгә ҡарата мөнәсәбәтен асыҡлау ғына булып тора», тип билдәләгән. Башҡорт яғы өсөн шул мөнәсәбәтте асыҡлау, Советтарҙың автономия бирергә риза икәнен белеү мөһим булған.

Башҡорт вәкиле менән осрашыу хаҡында хәбәр алып, Совет Россияһының Халыҡ Комиссарҙары Советы тиҙ генә Өфөгә телеграмма һуҡҡан. Ул телеграммала: «Халиҡовты ситкә этмәҫкә, башҡорт полктары менән Колчакка ҡаршы берҙәм фронт булдырған хәлдә амнистияға риза булырға тәҡдим итәбеҙ. Әлбиттә, шул ыңғайҙа башҡорт халҡының контрреволюцион элементтарын бик ҡаты араларға һәм Башҡорт ғәскәренең пролетар ышаныслығын фактик контролгә алырға кәрәк», — тип әйтелгән. Күренеүенсә, телеграмманың эстәлеге ҡаршылыҡлы булған. Тәүге өлөштә Совет хөкүмәте башҡорттарға бер йыл элек бирмәгән милли азатлығын бирергә ашыҡҡан булһа, Ленин ҡулы менән өҫтәлгән

икенсе өлөшөндә шул «азатлыҡты» тотош рус революцияһы мәнфәғәтенә буйһондорған, өҫтәүенә, «ҡаты араларға» талап итеп, ул рустарҙың һәр башҡортто контрреволюционерға һанауҙан файҙа тапҡан хәрби һәм граждандлыҡ властарына, һәр рус «большевигына» тулы ирек биргән.

Башҡорт хөкүмәте, әлбиттә, был хаҡта бер нәмә лә белмәгән. Халиҡов әйләнеп ҡайтҡас, 1919 йылдың 8 февралендә, хөкүмәт ултырыш үткәргән һәм осрашыу һөҙөмтәһенән бик ҡәнәғәт булып, Совет Россияһының урындағы һәм үҙәктәге власть органдары менән килешеү хаҡында кисекмәҫтән һөйләшә башларға ҡарар иткән. Һөйләшеү өсөн Башҡорт хөкүмәтенең рәисе Мөхәмәтхан (Мстислав) Ҡулаев етәкселегендә тулы хоҡуҡлы вәкәләт һайланған. Килешеү шарттары элеккесә ҡалған.

Ысын һөйләшеү ҙә, килешеү ҙә булмаҫ борон уҡ башҡорттар совет власының автономия бирергә риза икәнен белеп, мәсьәләне үҙҙәренсә хәл ителгәнгә һанаған. Шуға күрә икенсе көнөнә үк, 1919 йылдың 9 февралендә, Башҡорт ғәскәренең командующийы Әхмәт-Зәки Вәлидов Ҡыҙыл ғәскәрҙең V армияһы штабына башҡорт частарының фронт тотҡан урыны хаҡында хәбәр иткән һәм уларҙың Ҡыҙыл ғәскәр менән берлектә хәрәкәт итергә әҙер булғанын белдергән. Ләкин башҡорттоң ҙур ышанысына яуап итеп, Ҡыҙыл ғәскәр һөжүмгә күскән һәм башҡорттарҙың килешеү хаҡында һөйләшер алдынан мөнәсәбәтте боҙорға теләмәүенән файҙаланып, һис ҡаршылыҡһыҙ бик күп алға шылған. Шул саҡ 20-се дивизияның (Пенза дивизияһының) 1-се бригада командованиеһы һөжүм алып барған Смоленск полкы командирына бер тәҡдимгә лә риза булмаҫҡа, ҡорал һалыуҙы талап итергә, «бөтә контрреволюционерҙы пуля менән ҡаршыларға» бойороҡ биргән. Шулай итеп, совет яғы менән мөнәсәбәткә ингән тәүге мәлдән башҡорттарға ҡаршы дошманлыҡ башланған. Шундай ҡылыҡтарға тиҙерәк сик ҡуйып, урындағы хәрби властар менән мөнәсәбәтте асыҡлар өсөн Башҡорт хөкүмәте 1919 йылдын 16 февралендә, һөйләшеү тамамланғанын көтөп тормай, 18 февралдә иртәнге сәғәт 10-дан Башҡорт хөкүмәтен совет власы яғына тамам сыҡҡан тип иҫәпләргә, Бәләкәй Башҡортостан территорияһын РСФСР-ҙың «Башҡорт Совет Республикаһы» исемендәге бер өлөшө тип иғлан итергә,

ҡоралды революция дошмандарына ҡаршы борорға, Ваҡытлы революцион комитет төҙөргә ҡарар ҡабул иткән. Башҡорт ғәскәренә шул уҡ йөкмәткеләге фарман бирелгән. Ҡабул ителгән ҡарар нигеҙендә Башҡорт хөкүмәте менән Башҡорт ғәскәре 1919 йылдың 18 февралендә совет власы яғына сыҡҡан. Башҡорт полктарының ҡушылыуы Ҡыҙыл ғәскәргә фронт һыҙығын көнсығышҡа, Урал артына табан ҙур араға күсереү мөмкинлеге биргән.

1919 йылдың 19 февралендә Өфөлә Башҡорт хөкүмәтенең вәкәләте менән Совет яғы араһында тәүге һөйләшеү булған. Совет яғында Өфө губревкомының, V армия революцион хәрби советының, РСФСР революцион хәрби советынын һәм РСФСР Милли эштәр халыҡ комиссариатының вәкилдәре ҡатнашҡан. Һөйләшеү һөҙөмтәһендә тәүге килешеү шарттары билдәләнгән. Ул шарттарҙа:

а) башҡорт халҡына – РСФСР Конституцияһы нигеҙендә власть ойошторған хәлдә, милли автономия;

б) Башҡорт хөкүмәте ағзаларына – үткән эшмәкәрлектәре өсөн амнистия;

в) Башҡорт ғәскәренә – ҡоралын үҙендә ҡалдырыу һәм үҙ ғәскәри берәмектәрен һаҡлау гарантияһы бирелгән.

1919 йылдың 21 февралендә совет власы яғына күсеү уңайы менән 1 Бөтә башҡорт хәрби съезы йыйылған. Съезд Башҡорт хөкүмәтенең договор төҙөү өлкәһендә алып барған эшен хуплаған һәм уның шарттарын раҫлаған. Съезда иғлан ителгән тәүге һөйләшеү һөҙөмтәләре башҡорттарҙа дөйөм шатлыҡ, ирек хыялының ғәмәлгә ашырына ҙур өмөт уятып ебәргән. Съезд Башҡорт революцион хәрби комитеты (Башревком), йәғни милли совет власы органы, һайлаған. Съезда ҡатнашҡан Көнсығыш фронты 1 армияһының 20 дивизия штаб начальнигы Майстрах башҡорттарҙы ҡотлап сығыш яһаған. Ләкин уның ҡатнашыуы ла, башҡорттарҙың Советтар менән берҙәмләшергә ихлас күңелдән ынтылыуы ла, ике аралағы һөйләшеүҙең тәүге һөҙөмтәһе лә Ҡыҙыл ғәскәр тарафынан башҡорт халҡына ҡаршы алып барылған дошманлыҡ эшен туҡтатмаған. 1 армияның ғәскәри берәмек командирҙары иң ҡәтғи рәуештә, Россия һис бер

автономияһыҙ бер бөтөн булырға тейеш, тип белдергән һәм шул белдереү нигеҙендә эш иткән. Улар Ҡыҙыл ғәскәрҙә милли берәмектәрҙе һаҡлауға ҡаршы сыҡҡан һәм Башҡорт ғәскәрен ҡоралһыҙландырырға бойороҡ биргән. Был бойороҡ урындағы Ҡыҙыл ғәскәр командованиеһының баш-баштаҡлығынан ғына сыҡмаған, ә совет етәкселәре араһында иң ныҡ таралған позицияны сағылдырған һәм принципиаль яҡтан В.И.Лениндың конкрет күрһәтмәләренә, айырым алғанда, «башҡорт халҡының контрреволюцион элементтарын бик ҡаты араларға һәм Башҡорт ғәскәренең пролетар ышаныслығын фактик контролгә алырға», тигән талабына ҡаршы килмәгән. Бигерәк тә В.И.Лениндың 19 февралдә: «...Башҡорттарға килгәндә, йә ҡоралһыҙланыуын, йә һис кисекмәҫтән Колчакка ҡаршы сығыуын талап итеп, һеҙ дөрөҫ эшләйһегеҙ», — тип биргән телеграммаһы ҙур әһәмиәт алған[93]. Юлбашсының шундай күрһәтмәһе бар сағында, намыҫ һәм политика нескәлектәрен ҡарап тороу, башҡорттарҙын һөйләшә башлағандан кисекмәҫтән Колчакка ҡаршы сығырға йөкләмә алғанын иҫтә тотоу кәрәкһеҙ булған, уларҙы контрреволюционер тип юҡ итәһе генә ҡалған.

Башҡорт ғәскәренең командующийы Зәки Вәлидов 1919 йылдың 26 февралендә Сталин менән телефон аша һөйләшкәндә, башҡорт корпусының таратылыуы һәм ҡоралһыҙландырылыуына ҡырҡа ҡаршылыҡ белдергән, ҡоралды көсһөҙ республика дошманлыҡ менән ярһып, башҡортто быуып ташларға әҙер торған күскенсе кулактар һәм колонизаторҙар алдында бер фикцияға әйләнә[94], тип әйткән. Ләкин уның әйтеүенән бер нәмә лә үҙгәрмәгән.

Башҡорт ғәскәрен ҡоралһыҙландырыу яман януарҙы тоҙаҡҡа эләктергән вәхшиҙәрҙең ҡотороуына оҡшаш бер рәүеш алған, Башҡорт

---

[93] В.И.Ленин. Полн. собр. соч., т. 50, 259-сы бит.

[94] Центр, гос. архив БАССР, ф. 1107, оп. 1, д.75

ғәскәренең бөтә мөлкәтен ҡараҡтарса талау башланған. Урындағы рәсми газеталар, башҡорттар көслө яҡҡа ҡасып сыҡты, пленға төштө, тип хәбәрҙәр баҫҡан. Газета хәбәрҙәре эш менән нығытылған. Башҡорт ғәскәренең һалдат һәм командирҙары хәрби тотҡонға әйләндерелеп, һаҡ аҫтына алынған. Уларға аяуһыҙ репрессия яһарға тотонғандар, туҡмай, мыҫҡыллай, теҙеп-теҙеп ата башлағандар. Хатта ҡышҡы һыуыҡта итеген, шинелен сисеп бирмәгән өсөн кешене атып, үлгәс кейемен һыҙырғандар. Сисендерелгән, аяғына алам-һолам ураған һалдаттарҙы ҡар өҫтөнән унарлаған саҡрымға мал урынына ҡыуғандар. Рус ауылдарынан үткәндә уларҙы туҡмаған, мыҫҡыллағандар, ат тиҙәге менән бәргеләгәндәр. Зәки Вәлидовтың шундай йыртҡыслыҡтарға ҡаршылыҡ белдереп, 20-се дивизия командиры Воробьевҡа, 1 армия командующийы Гайға яҙған рәсми хаты яуапһыҙ ҡалған. Киреһенсә, командование вәкилдәренең береһе:«Был әле башы ғына, башҡорттарҙың ысын күрәсәге алда», — тип белдергән.

Көслөк һәм ҡанһыҙ йыртҡыслыҡ ҡыҙылдар яғына сыҡҡан башҡорт һалдаттарының ғына түгел, бөтә башҡорт халҡының башына төшкән. Башҡорт ауылдарының бөтәһен дә шашынып талағандар, кешеләрен атҡандар. Үртәп, бөтөнләй көлгә осоролған ауылдар күп булған. Ырымбур губерния советының башҡарма комитеты (губисполком) яғы һайланған Башревкомды һанға һуҡмай, Бәләкәй Башҡортостан ерҙәрендә үҙенең рус ревкомдарын төҙөгән. Был ревкомдар «башҡорттоң аҡ гвардия төркөмдәрен» бөтөрөү һылтауы менән халыҡты ҡырған. Уларҙың баҙитлыҡ эшен тәьмин итер өсөн губисполком мул итеп аҡса биргән. Башҡортостандың көньяғыдағы бер кантонда март башында башҡорттоң ҡурғаныу төркөмөнән 40 кешене, тағы 47 милиционерҙы тотоп атҡандар. Шунда уҡ күренекле башҡорт эшмәкәре А. Атанғолов менән уның улы Х. Атанғолов атылған. Ошондай йыртҡыслыҡ бөтә ерҙә хөкөм һөргән. Һис бер ғәйепһеҙ кешеләрҙе тимер шомпол менән һуҡтырыу, ҡатын-ҡыҙҙы күмәкләп талау киң таралған.

Мәсхәрә өсөн был әшәкелектәр ҡыуып килтерелгән халыҡ алдында ҡылынған.

Ҡаушап, сараһыҙ ҡалған Башревком ағзалары нисек булһа ла тәьҫир итергә тырышып, Ырымбур губисполкомы менән 1 армия командующийына күскәнсе кулактарҙың ҡанһыҙлығына ҡаршы кисектергеһеҙ сара күреү хаҡында мөрәжәғәт иткән. Ләкин Ырымбур властары вәхшилекте туҡтатырға уйламаған. Киреһенсә, ВКП(б)-ның губерния комитеты 2, 9, 10 мартта үткәргән ултырыштарында Башҡорт автономиялы республикаһын төҙөүгә ҡаршы ҡарар сығарған[95]. Рәсми газеталарҙа Башревком ағзаларын ҡулға алырға талап иткән мәҡәләләр баҫылған. 1 армия командующийы Гай ғына 12 мартта Башревком ағзаларының үтенесенә яуап итеп, «башҡорт халҡына һәм ғәскәренә ҡарата насар мөнәсәбәтте бөтерергә», ғәйеплеләрҙе яуапҡа тарттырырға, тип бойороҡ биргән. Ләкин был бойороҡ ҡағыҙҙа тороп ҡалған, бер генә кеше үлтереүсе лә, бер генә талаусы ла яуапҡа тарттырылмаған. Йыртҡыслыҡ дауам итеү генә түгел, тағы ла нығыраҡ көсәйеп киткән.

Ул арала, 1919 йылдың 20 мартында, РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советы «Үҙәк Совет власының Башҡорт хөкүмәте менән Башҡорт Совет автономияһы хаҡындағы килешеүенә» ҡул ҡуйған. Килешеүҙең тексы 1919 йылдың 23 мартында «Известия Всероссийского Центрального Исполнительного Комитета Советов» газетаһында, «Коммунар» тигән Ырымбур газетаһында һәм башҡа ерҙә баҫылып сыҡҡан. Килешеү буйынса, Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы Бәләкәй Башҡортостан сигендә төҙөлөп, РСФСР-ҙың федератив өлөшөн тәшкил итергә, Башҡортостандағы тимер юл, завод һәм рудниктар туранан-тура үҙәк Совет власы ҡарамағында ҡалырға тейеш булған, Башҡортостанда совет власын нығытыу һәм контрреволюцияға ҡаршы көрәшеү өсөн дөйөм командование бойондороғондағы айырым башҡорт армияһы төҙөү ҡаралған, Советтар съезы йыйылғанға тиклем Башҡорт Совет Республикаһында бөтә власть Башревкомға тапшырылған,

[95] Партархив Оренбург, обкома КПСС, ф. 1, оп. 1, д. 3, л. 12; д. 2, лл. 6—7.

Башҡорт хөкүмәтенең, административ һәм ижтимағи ойошмаларҙың ағзалары элекке эштәре өсөн репрессияға тарттырылмаҫҡа тейеш булған [96].

Килешеү бик сикле автономия биргән. Автономиялы Башҡортостандан ситтә бер нисә тапҡырға күберәк башҡорт территорияһы һәм башҡорт халҡы тороп ҡалған. Ер мәғдәндәре менән файҙаланыу хоҡуғын рустар тулыһынса үҙ ҡулына алған, йәғни ике быуат элек (1744 йылдың 13 мартында) батша указы билдәләгән колонизаторҙар хоҡуғын улар шул көйө һаҡлаған. Шуға ҡарамаҫтан, хатта шул сикләнгән шарттарҙы боҙмай үтәгәндә һәм артабан территорияны тейешенсә киңәйткәндә, башҡорттар күпмелер кимәлдә автономия принцибын ғәмәлләштерә алған булыр ине. Ләкин улай булып сыҡмаған. Совет хөкүмәте үҙе ҡул ҡуйған Килешеүҙе үҙе өсөн мотлаҡ тип һанамаған. Уға ҡул ҡуйып ярты ай үтеүгә, 1919 йылдың 5 апрелендә, РСФСР революцион хәрби советы башҡорт армияһы төҙөү тураһындағы бойороғонда, Килешеү шартын тупаҫ рәүештә боҙоп, «төҙөлгән һәр ғәскәри берәмекте Башҡортостандан ситкә сығарырға»[97], тип ҡуйған. Был бойороҡ 1734 йылда И.К.Кириллов билдәләгән политикаға тотош тап килгән.

Башҡортостанда ҙур көскә эйә булған килмешәк халыҡ башҡорт автономияһын ҡабул итмәгән. Килешеүгә ҡул ҡуйғандан һуң был халыҡ башҡортҡа ҡаршы тағы ла нығыраҡ репрессия яһарға тотонған. Башҡортостандағы ғәскәри частар ҙа аяуһыҙ ҡоторонған. 1919 йылдың 28 мартында 20-се дивизия Смоленск полкының күҙенә ҡан һауған ҡыҙылармеецтары Преображенск (Йылайыр) ауылында Башревком типографияһын күсереп алып китеп барған атаҡлы башҡорт шағиры Шәйхзада Бабич менән йәш шағир Әбделхай Иркәбаевты тотоп алған. Был икәүҙән башҡа, шул уҡ полкта ҡулға алынған тағы 160 башҡорт һалдаты булған. Күпселеге менән урындағы күскенсе рус крәҫтиәндәренән торған ҡанһыҙ ҡыҙылармеецтар тотҡондағы бөтә башҡортто йыртҡыстарса язалап үлтергән. Уларҙы туҡмағандар, төрлөсә ғазаплағандар, ат ҡойроғона бәйләп

[96] Образование..., 227—232-сө биттәр.
[97] Образование..., 235-се бит.

ташлы урамдарҙан саптырғандар, тамам өҙгөләп, алдан әҙерләнгән соҡорға ауҙарғандар. Элекке ололар һөйләүенсә, соҡорға ташлағанда Бабич эле үлмәгән булған, ҡалҡынмаҡ булып ҡуҙғалғас, башына һуғып йыҡҡандар ҙа, күмеп ҡуйғандар. Шул яуызлыҡтарҙың шаһиты булған бер кеше: «Судһыҙ-ниһеҙ язалап үлтерҙеләр, ҡот осҡос мәхшәр булды», – тип яҙып ҡалдырған.

Шул уҡ Смоленск полкы 1-се Башҡорт атлы полкының кире аҡтар яғына сығып китеүенә сәбәпсе булған. Муса Мортазин командалыҡ иткән 1-се Башҡорт атлы полкы һәм 2-се Башҡорт атлы полкының бер эскадроны Башҡорт ғәскәрен ҡоралһыҙландырған саҡта ҡорал һалыуҙан ҡырҡа баш тартҡан һәм аҡтарҙың казак ғәскәренә ҡаршы фронт тотоп ҡалған. 36 көн буйы был полк казактарға ҡаршы уңышлы һуғыш алып барған. Ул Ҡыҙыл ғәскәрҙән ҡорал-яһаҡта, аҙыҡ та алмаған, дошмандан һуғышып алыу иҫәбенә һәм башҡорт ауылдарының ирекле ярҙамы иҫәбенә үҙен-үҙе тәьмин иткән. Шул ваҡыт эсендә башҡорт полкы үҙенең хәрби оҫталығы һәм батырлығы менән Смоленск полкын ике тапҡыр ҡыйралыштан ҡотҡарған. Смоленск полкы дошмандан ҡурҡып ҡасһа ла, башҡорт ауылдарын талау, ҡырыуға шәп булған. Шул нигеҙҙә Башҡорт атлы полкы менән Смоленск полкы араһында ҡаты ҡаршылыҡ килеп сыҡҡан. 1-се бригада командиры ҡаршылыҡты бөтөрөргә тырышыу урынына башҡорт полкын таратырға бойороҡ биргән. Башҡорттар ғәҙеллек эҙләп, 20-се дивизия штабына 10 кешелек вәкәләт ебәргән, ләкин Смоленск полкы уларҙы юлда тотоп, атып үлтергән. Шуның өсөн башҡорттар гел бандиттар шайкаһынан торған был полкты ҡоралһыҙ-ландырырға мәжбүр булған. Смоленск полкын ҡоралһыҙландырғас, башҡорт полкының командиры хәлде аңлатыр өсөн Кананикольск ауылындағы 1-се бригада штабына 35 кешелек вәкәләт ебәргән. Ләкин штаб был вәкилдәр менән һөйләшеп тормаған, уларҙы тотош атҡан да, бөтә бригада менән башҡорт полкына ҡаршы һөжүм башлаған. Шундай хәлдә мөнәсәбәт асыҡлау мөмкинлеге ҡалмаған: 13 апрелдә 1-се Башҡорт атлы полкы казактарҙың тәҡдимен ҡабул итеп, аҡтар яғына сығып киткән. Бөтәһе 6566

кешенән торған Башҡорт ғәскәренән 1500 кеше кире аҡтарға киткән. Ҡоралһыҙландырылған Башҡорт ғәскәренән әҙ-мәҙ йолҡондо ғына тороп ҡалған.

Башҡорт ғәскәри берәмегенең аҡтар яғына сығыуы Ҡыҙыл ғәскәрҙәр сигенгән саҡҡа тап килеп, тағы ла яманыраҡ ҡанлы мәхшәргә килтергән. Сигенгән Ҡыҙыл ғәскәр, 1918 йылдағы кеүек үк, ҡот осҡос йыртҡыслыҡтар ҡылған, Колчаксылар ҙа ҡыҙылдарҙан бик ҡалышмаған. Туранан-тура аяуһыҙ террор үткәреүҙән башҡа, һуғыштағы ике яҡ ғәскәргә лә көслөк менән күпләп алынған башҡорттар үҙ-ара, ҡара-ҡаршы атышырға мәжбүр ителгән. Был иһә, уларҙың күңеленә һәм милли маҡсатына бөтөнләй ят нәмә булған. Башҡорт халҡының яҙмышын рәүешле хәл итеүгә ҡаршы Башревком бер ни ҙә эшләй алмаған.

1919 йылдың 21 февралендә 1 Бөтә башҡорт хәрби съезында һайланған Башревкомдың был ваҡытта ҡоро исеме генә йөрөгән, уға Килешеү нигеҙендә бирелгән власты ғәмәлләштерергә ирек ҡуймағандар. Шуға ҡарамаҫтан, Башревком РСФСР революцион хәрби советының 1919 йыл 5 апрелдә сығарған бойороғон үтәр өсөн ҡыҙылдар бөтөргән башҡорт ғәскәри берәмектәрен ҡабаттан ойоштора башлаған. Был эште, беренсенән, большевистик террорҙың шашыуы, икенсенән, Ҡыҙыл ғәскәрҙең Башкортостан еренән ҡырға сигенеүе бик ауырлаштырған. Башревком ҡыҙылдар менән бергә сигенеп, башҡорттарҙан алыҫтағы Саранск ҡалаһына күсергә мәжбүр булған. Шулай булһа ла, ул ситтә торған еренән башҡорт ғәскәри берәмектәрен тергеҙеү буйынса йылдам эш алып барған һәм майҙың икенсе яртыһына 2 атлы, 2 йәйәүле башҡорт полкы ойоштороп өлгөргән.

Башревком был башҡорт полктарын Башҡортостанды Колчактан азат итергә ебәрелә икән тип уйлаған. Ләкин Ҡыҙыл ғәскәрҙең баш командованиеһы башҡорт ғәскәрен башҡорт халҡынан айырыу, Башревкомды ғәскәри терәктән мәхрүм итеү политикаһы үткәреп, башҡорт полктарын ойоштороп бөтөр-бөтмәҫтән ағылауһыҙ, ҡорал-яраҡһыҙ көйө тиерлек йәһәт-йәһәт кенә Саранскиҙан Көньяҡ фронтҡа ебәргән. Шулай итеп, Килешеү

буйынса Башҡортостанда совет власын нығытыу һәм эске тәртипте һаҡлау өсөн хеҙмәт итергә тейеш булған башҡорт полктары туранан-тура рус революцияһын яҡлауға файҙаланылған. Башревком башҡорт полктарын уҙ ҡарамағында ҡалдырырға, Көньяҡ фронтҡа ебәрмәҫкә тырышып, Ленин менән Сталинға хат яҙып ҡараған. Әммә бер файҙа ла булмаған. Ҡыҙылдар яғына сыҡҡанда башҡортҡа бер аҙ иркенлек биргән Совет хөкүмәте хәҙер ул иркенлекте бөтөрөп, тотош үҙ йүнәлешен алған. Был йүнәлеш Өфө Директорияһының йүнәлешенә тап килеп торған. Колонизаторҙар политикаһы ниндәй төҫтә генә булмаһын, аҡмы, ҡыҙылмы, нигеҙҙә бер-береһенән бер ҙә айырылмаған. Ҡыҙылдар аҡтарҙан бик күпкә ҡаты ҡуллы булыуы менән генә айырылған: Башҡорт хөкүмәте ҡыҙылдар яғына сығыр алдынан үҙ ғәскәрен үҙе теләгәнсә йөрөтөргә яй тапҡан, Башревком бер ҙә улай йөрөтә алмаған.

Көньяҡ фронтта дүрт полктан 1 ҡушылма Башҡорт дивизияһы төҙөлгән. Был дивизияны дүрт ай буйы ҡаты һуғыштан сығармағандар, бында уның менән йәнә «һәр тишекте ямағандар», башҡорттар йәнә, бер ҙур рус эшмәкәре әйтмешләй, «батырлыҡ менән үлгәндәр». Уларҙың үлеүе шул хәтле булған, хатта һуғыш баҫылыуға, сентябрь аҙағына, дүрт башҡорт полкынан саҡ-саҡ бер полк йыйырлыҡ кеше ҡалған. Ул полкты тағы йәһәтләп Петроград фронтына ебәргәндәр.

1 ҡушымта Башҡорт дивизияһы Көньяҡ фронтта ҡырылғанда, яңынан ойошторолған башҡорт полктары (2 атлы, 1 йәйәүле полк) Көнсығыш фронт сафында һуғышҡан. Көнсығыш фронттың революцион хәрби советы Башревкомды башҡорттан тағы ғәскәри берәмектәр төҙөп, фронтҡа ебәрергә ашыҡтырған.

1919 йылдың йәй башында Ҡыҙыл ғәскәрҙең Көнсығыш фронты Колчакка ҡаршы һөжүмгә күскән. Совет власы яңынан Башҡортостан еренә яҡынлашҡан. Шул уңай менән фронт командованиеһы, үҙ уңышын хәстәрләп, башҡорт халҡының күңелен яулар өсөн алдан уҡ сара күрә башлаған. Ул Башҡорт хәрби комиссариатының вәкилдәренә башҡорттарҙы

Ҡыҙыл ғәскәр яғына өндәргә, пролетар властың ғәҙеллегенә төшөндөрөргә һәм уларға «Совет власы бер үҙе генә ярлы халыҡтың һәм иҙелгән милләттәрҙең ысын яҡсыһы икәнен аңлатырға» ҡушҡан. Ҡылған яуызлыҡтарынан һуң да ҡыҙылдар халыҡҡа бөтөнләй киреһен төшөндөрөп маташырға оялмаған. Башҡортостанға яҡынлай килә Көнсығыш фронттағы Көньяҡ ғәскәрҙәр төркөмөнөң революцион хәрби советы ла башҡортто иҫенә төшөрөп, ике ай элек Вәлидов ебәргән докладҡа яуап рәүешендә үҙ ғәскәрҙәренә циркуляр хат таратҡан. Революцион хәрби совет ул хатты Башҡортостандың хеҙмәтсән элементтарын яҡшы мөнәсәбәт менән ылыҡтырырға саҡырып яҙған. «Башҡорт халҡына ҡарата тиелгән ул хатта, ҡот осҡос мөнәсәбәт күрһәтелгән. Талау, ҡулға алыу, атыу, ҡатын-ҡыҙҙы көсләү иҫ киткес киң ҡулланыу алған. Һәр ауылға тиерлек аҡсалата һәм натуралата контрибуция һалынған. Аҡса түләй алмаған өсөн Башҡортостандың революцион эшмәкәрҙәре, шағирҙары, художниктары атылған. Игенселек менән шөғөләнмәгән башҡорт халҡының тапҡан-таянған һуңғы игене тартып алынған... Башҡорттарға мөнәсәбәт ҡырҡа үҙгәртелергә тейеш. Тыныс башҡорт халҡына ҡарата һис бер аҡланмаған йыртҡыслыҡ, талау, баш-баштаҡлыҡ, контрибуция, көслөк булырға тейеш түгел. Шул уҡ ваҡытта элек булған көслөк, яманлыҡ, хыянатлыҡ башҡорт халҡын Ҡыҙыл ғәскәргә һәм ғөмүмән совет власына нык асыулы иткәнен иҫтә тоторға кәрәк. Башҡорт халҡы совет ғәскәрҙәренең тағы Башҡортостанға инеүенә ҡыуанасаҡ түгел, сөнки был власты ул иҙгенлек һәм хоҡуҡһыҙлыҡтан ҡотҡарыусы итеп түгел, ә аяуһыҙ золом-йәбер ҡылыусы итеп күрә... Беҙ үткән хаталарҙы төҙәтергә һәм башҡорт халҡын үҙебеҙгә ауҙарырға тейеш. Башҡорт контрреволюционерҙары менән көрәшкәндә һис тә башҡорттарҙы иҙеп байыған рус күскенселәренә таянырға ярамай...»[98].

Был хаҡта Революцион хәрби совет ағзалары Куйбышев менән Новицкий ҡул ҡуйған, ә Көньяҡ ғәскәрҙәр теркөмөнөң командующийы

---

[98] Образование..., 248—251-се биттәр.

Фрунзе ҡул ҡуймаған: уны башҡорт халҡының фажиғәһе борсомаған, ул һөжүмдә аяуһыҙ көс менән еңергә өмөт тотҡан, башҡорттарҙың яҡшы мөнәсәбәтенә мохтаж булмаған.

Ҡаты һуғыш һөҙөмтәһендә Ҡыҙыл ғәскәр 1919 йылдың авгусында бөтә Башҡортостан территорияһын баҫып алған. Башҡортостан алты тапҡыр ҡанлы һуғыш ҡырына әйләнгән. Хәҙер һуғыш үтеп киткән, ә башҡорттоң күҙендә бөтә кисергән мәхшәрҙең ҡот осҡос эҙе ҡатып ҡалған. Ләкин бының менән башҡорттарҙың көрәсәге әле бөтмәгән.

## 4. БАШРЕВКОМДЫҢ АВТОНОМИЯНЫ ҒӘМӘЛЛӘШТЕРЕҮ ЭШЕНДӘГЕ ТЫРЫШЛЫҒЫ. ҮҘӘК ҺӘМ УРЫНДАҒЫ ВЛАСТАРҘЫҢ ҠАТЫ ҠАРШЫЛЫҒЫ

1919 йылдың август уртаһында Бәләкәй Башҡортостанға эвакуациянан Башревком ҡайтып, Стәрлетамаҡ ҡалаһында урынлашҡан. Башревком председателе вазифаһын 1919 йылдың 18 майында һайлап ҡуйылған Харис Йомағолов башҡарған (тәүҙәге Әхмәт-Зәки Вәлидов урынына), председателдең беренсе урынбаҫары М.Ҡулаев, икенсе урынбаҫары Г.Ҡарамышев булған. Башревкомда комиссариаттар эшләгән. Шул иҫәптән Ситке бәйләнеш комиссариаты төҙөргә уйлағандар. Юғарғы Халыҡ Хужалығы Советы (С о в н а р х о з) президиумының 1919 йыл 12 июнь ҡарары менән Башревком янында Башҡортостан Совнархозы төҙөлөп, уның председателе итеп Г.Ҡарамышев ҡуйылған. Башкортостан Совнархозы тулыһынса Юғарғы Совнархоз бойондороғонда булған. Уның ҡарамағына урындары әһәмиәткә генә эйә булған, йәки, дөрөҫөрәге, һис ниндәй экономик әһәмиәткә эйә булмаған, ваҡ хужалыҡтар ғына бирелгән. Шул уҡ ваҡытта Юғарғы Совнархоз теләгән бер ваҡытта теләгән бер хужалыҡты үҙенә тартып алырға хоҡуҡлы булған.

Башревкомдың Стәрлетамаҡҡа килеүе башҡорт халҡын уятып, политик йәһәттән активлаштырып ебәргән. Башҡорттар Башревкомды үҙҙәренең берҙән-бер законлы хөкүмәте итеп ҡаршы алған һәм уның ҡушҡанын ғына иҫәпкә алып, бер һүҙһеҙ үтәй башлаған, параллель рәүештә эшләгән губерния властарының бойороғына буйһонмаған. Колчак яғында йөрөгән башҡорттар төркөм-төркөм булып, тотош батальондары менән үҙ хөкүмәте яғына сыға башлаған. 13 апрелдән бирле аҡтар яғында йөрөп, дүрт ай эсендә оло бригадаға әйләнгән Мортазин полкы ҡыҙылдарға сығыу өсөн ҡаты шарт ҡуйған:

а) ҡоралһыҙландырмаҫҡа, мыҫҡылламаҫҡа, атмаҫка һәм командирҙарҙы үҙ урындарында ҡалдырырға;

б) ҡаршылау өсөн Башревком һәм совет командованиеһы вәкилдәре менән ике-өс башҡорт совет полкын ебәрергә;

в) сыҡҡандан һуң заводтарҙын, йәки рус күскенселәренең ауылдарына урынлаштырмаҫҡа.

Ошо шарттарҙы үтәмәгән хәлдә Мортазин үҙ бригадаһы менән ҡаҙаҡ далаларына сығып китергә ниәт тотҡан. Ләкин ҡыҙылдар бригаданы тыныс ҡаршы алған, күрәһең, Мортазиндың яҙ көнө биргән һабағынан фәһем алғандар. 1919 йылдың 24 авгусында ҡыҙылдар яғына сыҡҡан был бригаданы шунда уҡ Көнсығыш фронтҡа оҙатҡандар, һуңынан, август аҙағында, уны Урал фронтына күсергәндәр. Бригадаға тынғы бирмәгәндәр.

Башревком эш башлап, Башҡоргостан республикаһына күсә торған территорияны, мөлкәтте, эштәрҙе ҡабул итер өсөн Ырымбур, Пермь, Өфө губревкомдары менән бәйләнешкә ингән һәм улар яғынан шунда уҡ яман ҡаршылыҡҡа осраған. Губревкомдар Башҡорт республикаһына урын бирмәҫкә тырышҡан, бөтә көсө менән Башревком эшенә аяҡ салыу маҡсатын ҡуйған. Тапшырыу һәм ҡабул итеү мәсьәләһе буйынса тәүге ултырыш 1919 йылдың 18 авгусында Өфө губревкомында булған. Ултырышта губревком башҡорт вәкилдәренең талабын кире ҡағып, тапшырыу эшен ҡатмарлы бер бюрократик мәшәҡәткә әйләндерә торған ҡарар ҡабул иткән, ә аҙаҡ һәм башҡа төрлө нәмә әҙерләү аппаратын тапшырыуҙан бөтөнләй баш тартҡан. Өфө губревкомы был баш тартыуын аҙыҡ әҙерләү эшенең мөһимлеге менән аңлатып маташҡан. Ырымбур губревкомы Башревкомдың Стәрлегә килеп төшөүе менән унда башҡорт автономияһының хас дошманы Ғәли Шәмиғоловты коммунистар фракцияһының председателе итеп ебәргән һәм уның менән берлектә башҡортҡа ҡаршы көслө эш башлаған. Шул уҡ ваҡытта Ырымбур губревкомы аҙыҡ әҙерләү эшен бөтөнләйгә үҙендә ҡалдырыу хаҡында Үҙәк менән һөйләшә башлаған. Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитетының (ВЦИК-тың) Өфө губернияһындағы вәкиле, әгәр кемдер берәү уға ҡаршы эш алып барһа, ҡулындағы бөтә власть көсөн файҙаланып, тейешле сара күрәсәге хаҡында ҡаты иҫкәртеп ҡуйған. Башревкомға республикала үҙ власын урынлаштырырға юл бирмәҫ өсөн бөтә нәмә эшләгән.

Таланған, бөлгән, астан ҡырылып ятҡан башҡорт халҡын ҡотҡарыр өсөн ашығыс сара күрер саҡта, улар Башревкомдан иң элек аҙыҡ эшен тартып алырға тырышҡан.

Ни хәтле аяҡ салһалар ҙа, Башревком ҙур тырышлыҡ менән янып, бөтә көсөн биреп эшләгән. Кадрҙар мәсьәләһенең ауырлығына ҡарамаҫтан, Башревком комиссариат һәм бүлектәренең эшен яйлау, кантондарҙа ревком һәм милиция органдары төҙөү, улар менән даими бәйләнеш булдырыу, төрлө ҡарар һәм бойороҡтар таратыу, күрше губревкомдар менән элемтә ойоштороу кеүек бик күп эш башҡарған. 26 августа Башревком Башҡортостан Совет Республикаһында етәкселекте үҙ ҡулына алыуы хаҡында фарман сығарған. Башревкомдың был ҡыйыулығы, һорауһыҙлығы рус менән татарҙа яман асыу һәм ҡаршылыҡ уятҡан. РКП(б)-ның Өфө губерния комитеты секретары Нимвицкий асыу һәм нәфрәткә тулышып, 1919 йылдың 14 сентябрендә булған губком пленумында, «башҡорттар етәкселек кимәленә бөтөнләй үҫеп етмәгән», тип белдергән, шулай итеп, батша администрацияһы һәм аҡтар хөкүмәтенең бөйөк дәүләтсе ата шовинистары менән тулыһынса фекерҙәш икәнен фаш иткән. Нимвицкий хатта Башревком аппаратына кадрҙар етмәүен дә мыҫҡылға алған, был ауыр хәлде рус колонизаторлыҡ политикаһының һәм революциянан һуңғы аяуһыҙ ҡыҙыл террорҙың әсе һөҙөмтәһе тип уйлай белмәгән. Секретарь Нимвицкий тәҡдиме менән шул пленум Башҡорт республикаһының тереклек нигеҙен ҡыйратыуға, уға ҡаршы рус халҡын ҡотортоуға һәм республикала власты баҫып алыуға йүнәлтелгән ҡарар ҡабул иткән Был йәһәттән Өфө губерния властырының ынтылышы Ырымбурҙыҡыларҙың ынтылышы менән тотош тап килгән..

Ырымбур губерния башкарма комитеты һәм РКП(б)-ның губерния комитеты 1919 йыл 20 сентябрҙә ВЦИК Президиумы Председателе М.И.Калинин ҡатнашлығында ултырыш үткәргән. Шул ултырышта губком секретары Акулов Башревкомға яла һәм бысраҡ яғып, урындағы ойошмалар Башҡортостан республикаһына ҡаршы булды. Килешеүҙән һуң ирекһеҙҙән генә уны таныны, тип асыҡ әйткән. Ул Башревком эсенә рус эшмәкәрҙәрен индереүҙе талап иткән, Баш-

ҡортостан республикаһына баш булырға дәғүәләшкән. Председатель Калинин уға ҡаршы һүҙ әйтмәгән, тимәк, тулыһынса уның фекеренә ҡушылған.

Күрше губерния властарының дошманлык эшенә Бәләкәй Башҡортостандың үҙендәге рус һәм татар эшмәкәрҙәре ныҡ ярҙам иткән. Уларҙы үҙәк һәм губерния властары ҡороҡкослоҡ өсөн юрамал килтереп тултырған. Был эшмәкәрҙәр ҡотороноп Башкортостан республикаһына ҡаршы агитация алып барған, төрлө яуызлыҡтар эшләгән. Урындағы коммунистик ойошмалар милләт, ер, территория ҡаршылыҡтары нигеҙендә башҡорт власть органдарына һуғыш иғлан иткән. Улар ғәҙәттән тыш комиссия (ЧК) һәм трибунал бурысын үҙләштереп, башҡорттарҙы теләгәнсә ҡулға алған, атҡан, башҡорт милиция органдарын ҡоралһыҙландырған, мал-мөлкәт һәм аҡса талаған, башҡорт халҡын аяуһыҙ эҙәрләгән. Башҡорт власть органдарының ул бандиттарға ҡаршы торор көсө булмаған. Башҡортостан ерендә һуғыш бөтөп, республика етәкселегенә Башревком килеү менән башҡорт халҡының ғазабы бөтмәгән. Террор ҙа, аслыҡ та элеккесә дауам иткән. Аслыҡ 1919 йылдың көҙөнән бигерәк ҡурҡыныс төҫ алған.

Ике йыл буйы вәхшиҙәрсә талау һәм көсләү арҡаһында былай ҙа бик ярлы йәшәгән башҡорт халҡы тамам бөлгән, һәләкәт сигенә килеп баҫҡан: ауылдар яндырылған, мал ҡыуылған, һаҡлыҡ аҙыҡ таланған, бөтә мөлкәт һәм игенселек ҡоралдары яттар ҡулына таралған. Меңәр-меңәр башҡорт, күбеһенсә эш эшләр йәштәге ирҙәр, һуғышта үлгән һәм һаман үлеү өҫтөндә булған, үртәлгән ауылдарҙа аслыҡтан һәм тифтан ҡырылып сараһыҙ халыҡ ҡына ҡалған. Шул ваҡыттағы бер мөрәжәғәттә башҡорт халҡы тураһында: «һеҙҙең көнөгөҙ ҡот осҡос хәҙер... Балаларығыҙ аслыҡ-яланғаслыҡтан үлә. Ҡатындарығыҙ тәнен ҡаплар нәмә тапмай сыр-яланғас көйө мискә эсендә ултыра, төндә генә сығып йөрөй»[99], – тип яҙылған. Шул хәлдән ҡотолор әмәл булмаған. Халыҡ тотош өй эсе, тотош ауылы менән үлгән. Хужалыҡты тергеҙер, экономиканы йүнләр өсөн башҡорттоң бер сараһы ла ҡалмаған. Совет хөкүмәте башҡорт халҡының тотош һәләк булғаны өсөн үҙ өҫтөнән ғәйепте төшөрмәк булып, бер аҙ ярҙам күрһәтергә уйлаған.

[99] Образование ..., 386-сы бит.

РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советы 1919 йылдың 6 октябрендә Ленин ҡултамғаһы менән ҡарар сығарған. Ул ҡарарҙа: «Башҡорт Совет Республикаһының, аҡ Колчак бандалары айырыуса ныҡ ҡоторонған өс районындағы халҡы сиктән тыш ауыр хәлдә булыу сәбәпле, кисекмәҫтән, ғәҙәттән тыш дәүләт сараһы рәүешендә, Башҡортостан территорияһындағы аҡ гвардия ҡылған көслөк һәм ҡырғын ҡорбандарына ярҙам ойоштороурға...» — тип әйтелгән. Был ҡарарҙа башҡорт халҡының һәләкәтле хәле өсөн бөтә ғәйеп оятһыҙ рәүештә колчаксыларға ауҙарылған, ә ғәмәлдә эштең бөтөнләй киреһенсә булғанын һәр кем белгән. Хатта уларҙың үҙ кешеһе, Ҡырғыҙ ревкомының председателе С.С.Пестковский, Председатель Калинин алдында: «Ҡыҙыл армия үткән саҡта башҡорттар бик күпкә ҙурыраҡ ҡаза күрҙе»[100], — тип әйткән. Шул фажиғәле заманды башынан үткәргән ололар әле булһа, аҡтар ул хәтле булманы, иллә ҡыҙылдар яман ҡанһыҙ булды, тип һөйләй. Бөтә халыҡ алдында аҡтарҙың ҡоторонноуы тураһында әйтеп, үҙҙәренең һаман дауам итеп ятҡан йыртҡыслыҡтары хаҡында өндәшмәҫ өсөн ниндәй оятһыҙ булыу кәрәк. Шул ваҡытта башланған оятһыҙлыҡ һәм ике йөҙлөлөк бара-бара улар ҡорған бөтә система өсөн ҡағиҙәгә әйләнеп киткән.

Халыҡ Комиссарҙары Советының ҡарарын үтәү рәүешендә башҡорттарға ярҙам итер өсөн «Башкирпомощь» тигән ойошма төҙөлгән. Ысын мохтажлыҡ менән сағыштырғанда был ярҙам бөтөнләй бәләкәй булған. 1920 йылдың ғинуарынан сентябренә ҡәҙәр 90 мең бот иген, 200 мең, аршын тауар бирелгән [101], шуны ас-яланғас башҡортҡа бүлһәң, иң күп тигәндә һәр кешегә 1,4 кг иген һәм 0,2 аршын тауар тура килгән. Ләкин тамсы хәтле генә шул ярҙам да башҡорттоң үҙенә теймәгән. «Башкирпомощь ойошмаһына етәкселек итеп, бөтә эште башҡарған кешеләр үрҙән түбәнгә тиклем рус булған. Улар, «рус, немец, татар һ.б. күскенсе кулактар тарафынан ҡол ителгән» [102]ас башҡортто түгел, ә иң элек

[100] Образование..., 323-сө бит.

[101] «Совет Башҡортостаны» 1988 йыл, 29 март.

[102] Образование ..., 395-се бит

үҙҙәренең туҡ ҡарынлы рустарын ҡайғыртҡан, бөтә ярҙамды шуларға тотонған. Ошо иç киткес ғәҙелһеҙлек хаҡында Башревком ВЦИК-ка, Ленинға, Сталинға доклад яҙып, «Башкирпомощь» ысын мәғәнәһендә рус шовинистарының ойошмаһына әүерелде, башҡорт халҡына ул бөтөнләй ярҙам итмәй, рустарҙы Башҡорт республикаһына ҡаршы ҡотортоу менән генә шөғөлләнә, «башҡорттар өсөн төҙөлгән приюттар ҡоро башҡорт балаларын үлтерә»[103], тип хәбәр иткән. Башревком бер нисә тапҡыр Үҙәккә «Башкирпомощ»ты үҙ ҡарамағына биреүҙәрен үтенеп мөрәжәғәт иткән. Әлбиттә, ундай үтенес үтәлмәгән, сөнки Үҙәк башҡорт халҡына ярҙам итеү эшен башҡорттоң үҙенә ышанып тапшырырға теләмәгән.

Башҡорт халҡы һәләкәтле хәлдә булыуға ҡарамаçтан, Совет хөкүмәте уның әле һаҡланып ҡалған кеше көсөн тулыһынса үҙ мәнфәғәтенә рус революцияһын ҡурғау өсөн – файҙаланған.Ҡатын-ҡыҙ, бала-саға астан үлгәндә, өй хужаһы ирҙәр ғәскәргә алынып фронтҡа оҙатылған.

1919 йылдың сентябрь башында Урал фронтына аҡ казактарға ҡаршы Мортазиндың атлы бригадаһы ебәрелгән. Ул декабрь уртаһына тиклем сикһеҙ ҡаты һуғыш алып барған. һуғышҡан осорҙа уның 2700 кешеһенән яу ҡырында һәм тифтан 2000-гә яҡын кешеһе үлгән.

Шул уҡ сентябрь башында төҙөүле башҡорт ғәскәри берәмектәренең барыһы ла Ленин бойороғо буйынса Петроград фронтына ҡыуылған. Фронтта Башҡорт ғәскәри төркөмө ойошторолған, төркөм эсендә бөтәһе 10 меңгә яҡын кеше һуғышта ҡатнашҡан. Башҡорт төркөмөн һуғыштың иң ҡурҡыныс ерҙәренә, йыш ҡына ысын үлемгә ебәрер булғандар. Мәçәлән, һис бер разведка мәғлүмәте булмаған көйө дошман ҡулына оҙатылыу сәбәпле Иляпурская ауылы янында 3-сө йәйәүле полктың бер батальоны ҡамалып, тотош юҡ ителгән. Ошо урында ирекһеҙҙән И.К.Кирилловтың 1735 йыл кабинетҡа ебәргән доношениеһы иçкә төшә. Ул унда, башҡорттарҙы хеҙмәткә ебәрергә кәрәк, «унда булған саҡтарында

---

[103] ЦГА БАССР, ф.1107, оп. 1, д.75

ҡатындары ауырһыҙ ҡалыр,ә үлгәне бөтөнләй ҡайтмаç. Бөтә дәүләттә электән шул политика тотолған..., хеҙмәт бурысы итеп, ә ғәмәлдә өйҙә кәрәкмәгәндәре өсөн, бөтә ерҙә уларҙы ғәскәр алдынан үлемгә ебәргәндәр», тип яҙған. Шулай итеп күрәләтә ҡырыу арҡаһында, Петроград эргәһендәге һуғыш бөтөүгә Башҡорт ғәскәри төркөмө тотош һәләк булған. Төркөмдән иҫән ҡалған 900 кешене бер полкка йыйып, 1920 йылдың майында Польша фронтына оҙатҡандар.

Башҡорт һалдаттары алыç фронттарҙа совет власын һаҡлап һәләк булғанда, Башҡортостандың үҙендә, ярҙам итеү урынына, астан һәм тифтан ҡырылған башҡорт халҡын аяуһыҙ иҙгәндәр Башревкомды эҙәрләгәндәр. Башревком Килешеү шарттарын нык һаҡлап, республикала Совет власын ғәмәлләштерергә, Үҙәктең талаптарын үтәргә тырышҡан. Ул ҡаршылыҡтарҙы тыныс юл менән хәл итеү саралары күргән, эшләргә һәм, бирелгән хоҡуҡ кимәлендә генә булһа ла, автономияны бойомға ашырыуға мөмкинлек бирһендәр өсөн ҡулынан килгән бөтә нәмәне үтәгән. Ләкин башҡорт халҡының дошмандары нәҡ шул автономияның бойомға ашыуын теләмәгән. Улар Килешеүҙе хатаға һанаған, башҡорт автономияһының бөтөрөлөүен талап иткән. Башҡорт автономияһына ҡаршы көрәштә рус менән татар берҙәм булған, уларҙңн тик көрәшеү сәбәбе генә бер булмаған: татарҙар башҡорттоң автономия төҙөп, татар йотоуынан ҡотолоуына түҙә алмаған, ә рустар «берҙәм һәм буленмәç» Россияны һаҡларға тырышҡан. Был йәһәттән бөйөк дәүләтсе рус шовинисы булған большевиктар колчаксыларҙан айырылмаған, ләкин үззәренең төп маҡсатын, коммунистик төҙөлөш РСФСР хужалығының берҙәмлеген талап итә тигән тезис менән йәғни һаман да шул башҡортҡа көсләп тағылған үҙ мәнфәғәттәре менән, ышыҡлап маташҡандар. Большевиктар «Россия халыҡтарынын айырылып, үҙ аллы дәүләт төҙөр дәрәжәләге ирекле үзбилдәләнеш хоҡуғы» хаҡында үҙзәре иғлан иткәнен бөтөнләй оноткан, «шул хоҡуҡты кире ҡағыу һәм ғәмәлдә үтәлешен тәьмин итерлек сара күрмәү баçҡынсылыҡ һәм аннекция политикаһын яҡлауға тиң», «ирекле рәүештә айырылыу хоҡуғын кире ҡағыу туранан-тура батшалыҡ политикаһын дауам итеүгә килтерә», тигән Апрель конференцияһының резолюцияһы ла уларҙың иçенән сыҡкан. Улар оятһыҙ рәүештә шул уҡ

аннекция, шул уҡ батшалыҡ политикаһын дауам иткән. Ленин үҙе үк Башҡортостанды рус колонияһы тип әйткән. Шул колонияны һәм баҫып алынған башҡа ерҙәрҙе большевиктар Россияның айырылғыһыҙ өлөшә тип һанаған, үҙҙәрен колониаль ерҙәрҙең тулы хоҡуҡлы вариҫы тип белдергән.

Башҡортостанда алған йүнәлеш урындағы большевиктарҙың баш-баштаҡлығынан ғына булмаған, ул йүнәлеште үҙәк Совет хөкүмәте билдәләгән һәм Россияның бөтә колониаль халыҡтарына ҡарата үткәргән. 1917 йылдың декабрендә үк, тимәк революциянан һуңғы пропагандистик декларациялар ваҡыты үткәс тә, В.И.Ленин Россия империяһының ситтәрендә милли тенденцияларҙын көсәйеүенә ирек ҡуймаҫҡа, айырылыу маҡсатындағы һәр ынтылышты ҡорал көсө менән баҫырға ҡаты юл алған. Башҡортостандағы большевиктар шул юлға ярашлы рәүештә эш иткән башҡорттоң һәм Башревкомдың бәләкәй генә үҙ аллы эшен дә улар милләтселек тип, айырылырға тырышыу тип иҫәпләгән һәм контрреволюцияға тиңләгән. Улар башҡорт һәм ғөмүмән совет автономияһын ваҡытлы бер бәлә тип белгән, шул бәләгә ҡайһы бер хәл арҡаһында, иң элек үҙҙәренең үк көнсығыш политикаһы мәнфәғәтендә, бер аҙ түҙергә кәрәк тип һанаған. Көнсығыш илдәрендә – Һиндостан, Афғанстан, Иран, Төркиә кеүек күп илдә – революцион Россияның милли мәсьәләне хәл итеүе менән бик ҡыҙыҡһынғандар. Шуға күрә көнсығыш илдәр һәм халыҡтарға ҡарата ҙур пландар ҡорған большевиктар улар алдында матур йөҙлөк (фасад) ҡороуға оло әһәмиәт биргән, шул йөҙлөктә актив хәрәкәте менән танылып өлгөргән башҡортто төп урындарҙың береһенә ҡуйған. Тышҡы йөҙлөк артында большевиктар башҡортҡа ҡаршы көрәш алып барған һәм Башҡортостанда бөтә власты үҙ ҡулына алырға тырышҡан.

Шундай шарттарҙа 1919 йылдын 8-11 ноябрендә Стәрлетамаҡ ҡалаһында РКП(б)-ның I Бөтә Башкортостан конференцияһы булған. Күршеләге Ырымбур, Өфө, Екатеринбург, Силәбе РКП(б)-губкомдары Башҡорт республикаһының партия үҙәген ойоштороу эшенә ныҡлы тәьҫир яһар был конфернцияға алдан ук әҙерлек алып Комитетының рөхсәте менән улар Ырымбурҙа ошо мәсьәлә

буйынса бергәләп кәңәшмә үткәргән алдынан Ырымбур губкомының секретары Акулов шунда ҡатнашлыҡ итергә ҡаты тәҡдим яһап, күрше губернияларға телеграмма һуҡҡан һөҙөмтәлә Ырымбур, Өфө, Силәбе губернияларының вәкилдәре РКП(б)-ның Бөтә Башҡортостан конференцияһында тулы хоҡуҡлы делегат булып ҡатнашҡан, шуның менән улар үҙ партия уставын оятһыҙ рәүештә боҙған. Шундай законһыҙ юл менән рустар һәм татарҙар күпселек тауыш алып, РКП(б) өлкә комитетына үҙ кешеләрен һайлаған. Был комитетҡа хатта Башревком председателе Йомағолов та «үҙ дошмандарының дипломатик ярҙамы арҡаһында ғына»[104]үтеп киткән. Башҡорт республикаһының партия үҙәген ҡулға төшөрөп, рус-татар эшмәкәрҙәре бөтә көсөн Башревкомды баҫып алыуға йүнәлткән. Был өлкәлә улар үҙәк Совет хөкүмәте менән бергә эшләгән.

Апрель конференцияһының резолюцияһында «киң өлкә автономияһы, юғарынан күҙәтеүҙе бөтөрөү вәғәҙә итеүенә ҡарамаҫтан, башҡорттарға көсләп тағылған шарт буйынса, ВЦИК Башревкомға тулы хоҡуҡлы ағза сифатында үҙенән ике вәкил ебәрергә хаҡлы булған, ләкин икәү менән генә ул сикләнмәгән. Шунан башҡа, 1919 йылдың 15 сентябрь ҡарары менән ул Башҡортостанға үҙенән Аҙыҡ халыҡ комиссары ебәрергә хоҡуҡ алған һәм, Башревкомдың ҡаршы булыуы менән иҫәпләшмәй, шул вазифаға Өфө губревкомының ағзаһы А.М.Дудникты ҡуйған. РКП(б) Үҙәк Комитеты ла үҙ кешеләрен Башревкомға һәм обкомға урынлаштырған. Шундай вәкилдәр, күп тауыш биләүҙән тыш, Үҙәктең делегаттары булараҡ, ҙур көскә эйә булған һәм Башревкомға һәр ваҡыт ҡаты баҫым яһаған. Шундай вәкилдәрҙең береһе Ф. Н.Самойлов, һуңынан үҙе яҙғанса, хатта Килешеү бар икәнен дә, кемден Башревком председателе икәнен дә белмәгән [105]. Күрәһең, вәкил итеп билдәләнгәндә, уға берҙән-бер күрһәтмә бирелгән булған: «Тот та ебәрмә!» Шул күрһәтмәне ул ысынлап та ҙур тырышлыҡ менән үтәгән.

---

[104] Образование..., 457-се бит.

[105]Самойлов Ф. Малая Башкирия в 1918—1920 гг. М., 1933, 23—26-сы биттәр.

Башревком агитацион (өгөтсө) аппарат ҡына булып ҡалырға теләмәгән. Килешеү нигеҙендә бирелгән автономияны ул ысын мәғәнәһендә аңлаған һәм, шунан сығып, мөмкин тиклем үҙ алдына эшләргә тырышҡан. Ул бөтә көсөн һалып автономия дошмандарының һөжүменә ҡаршы торған һәм ике як араһындағы мөнәсәбәт барған һайын киҫкенләшкән. Башревком бер нәмәлә хаталанған: ул башҡортҡа ҡаршы алып барылған яман һөжүмде урындағы эшмәкәрҙәрҙең генә эше тип уйлаған һәм үҙәк Совет хөкүмәтенең килешеү шарттарын тоғро үтәренә ышанып, унан ярҙам һораған, ләкин ярҙам ала алмаған.

Республикалағы тартыш БашревкомдыңСитке элемтә бүлеге ойоштороу хаҡында ҡарар ҡабул итеүенән һуң киҫкен һынылыш нөктәһенә еткән. Был булек тураһындағы мәсьәлә яңы булмаған. Башревкомдың структураһын билдәләгәндә тәүҙән үк, 1919 йылдың 23 февралендә, Ситке эштәр комиссариаты төҙөү хаҡында һүҙ булған. Икенсе мәртәбә был мәсьәлә Башревком ултырышына 1919 йылдың 17 майында, өсөнсөгә – 20 октябрендә ҡуйылған. Аҙаҡҡы ултырышта комиссариат түгел, ә Башревком председателенең үҙ ҡарамағындағы бер бүлек ойошторорға ҡарар ителгән. Был ҡарарҙарҙың береһенә лә үҙ ваҡытында үҙәк хөкүмәт һәм уның, урындағы вәкилдәре ҡаршы килмәгән. Башревком раҫлаған положение буйынса, Ситке элемтә бүлеге РСФСР-ға ингән совет республикалары менән хоҡук, сауҙа, хужалыҡ һәм финанс бәйләнештәре урынлаштырырға тейеш булған. Автономияны ысын мәғәнәһендә аңлап, Башревком үҙен РСФСР эсендә бөтә башҡорт эшен, шул иҫәптән Бәләкәй Башкортостан менән башҡа республикалар араһындағы бәйләнеште, ғәмәлләштерергә бурыслы тип һанаған. Ул Килешеү шарттарына ҡаршы килерлек бер маҡсат та ҡуймаған. Иң зыянһыҙ, ябай бер теләктән сығып, Башревком президиумы 1920 йылдың 12 ғинуарында күптән һөйләп киленгән баяғы Ситке элемтә бүлеген ойошторған һәм К.М.Ракайҙы мөдир итеп билдәләгән. Рус-татар төркөмөнә шул етә ҡалған: улар был эштә «тулыһынса айырылыуға тәүге аҙым» яһалғанын күреп,

Башревкомды быуырға булған. Икенсе көнөнә үк был төркөм РКП(б) өлкә комитетында ашығыс ултырыш йыйған.

РКП(б) өлкә комитеты тулы хоҡуҡлы үҙ ағзаларын кәрәк булғанда һәм кәрәк хәтлем Башревкомға индерергә ҡарар ҡабул иткән һәм шунда уҡ тәүге ағза итеп Артемды (Ф.А.Сергеевты) тәғәйенләгән, шуның менән ул Башревкомдың теләгенән тыш уның составын билдәләү хоҡуғын үҙенә үҙләштергән. РКП(б) өлкә комитеты ҡаты бойороҡ рәүешендә: «Коммунистарҙың а) айырылыу тураһында агитация алып барырға, б) асылда айырылыуға килтерерлек саралар тураһында агитация алып барырға хаҡы юҡ», – тип үҙ ҡарарына яҙып ҡуйған. Ул Ракайҙы бөтә яуаплы эштән алырға ҡарар иткән, Башҡортостандың ғәҙәттән тыш комиссияһы (БашЧК) председателе итеп Башревкомда һайланған кеше урынына үҙенекен раҫлаған[106].Ҡарарҙың бөтә пункты Башревком ҡулынан властьі тотош тартып алыуға йүнәлтелгән.

Ғәмәлдә автономияны бөтөрөү өсөн эш эшләнеп ятҡанда, Башревкомға тейешенсә ҡаты сара күреүҙән башҡа юл ҡалмаған һәм ул иң элек башҡортҡа ҡаршы дошманлыҡ менән ярһыған татарҙар төркөмөн ҡыйратырға булған. Шундай төркөмдөн барлығы бер кемгә лә сер булмаған, ул үҙ эшен асыҡтан-асыҡ алып барған һәм маҡсатын йәшермәгән. Уның барлығын 1920 йылдын 26 ғинуарында РКП(б) Үҙәк Комитетына ебәргән докладында Ырымбур губкомы ла дөрөҫләгән һәм уның баштан уҡ етәксе башҡорт эшмә- кәрҙәрен ҡыуырға йүнәлтелгән эшен ихлас күңелдән хуплаған[107].Татар төркөмөнөң етәксеһе F.Шәмиғолов булған. Был мишәр революциянан һуңғы иң тәүге көндәрҙән башлап, башҡорт милли хәрәкәтенә ҡаршы аяуһыҙ көрәш асҡан. Уның инициативаһы менән 1918 йылда Башҡорт хөкүмәте төрмәгә ултыртылған һәм ВБРС ҡыуып таратылған. Башревком звакуациянан ҡайтҡас, ул үҙенең яуыз эшен дауам итер өсөн тиҙ генә Ырымбурҙан Стәрлетамаҡҡа күскән. Башҡорттоң бөтә булмышына

---

[106] Образование ..., 341-342 биттәр.

[107] Образование..., 450—455-се биттәр.

дошман булған көйө Шәмиғолов, әшәкелектең сигенә сығып, рус етәкселәренә үҙен башҡорт тип танытҡан*.

Стәрлетамаҡтағы Үҙәк вәкилдәре политик хәйлә йөҙөнән Шәмиғолов төркөмөнә инмәгән, улар оло хакимлек юғарылығын һаҡлап, эште үҙ алдына алып барған, ләкин Шәмиғоловты ныҡ яҡлаған һәм уның менән тығыҙ бәйләнештә булған.

Башревком 1920 йылдың 14 ғинуар ултырышында татар төркөмөнөң авантюраһын ҡырҡа киҫер өсөн иң актив дүрт ағзаһын, шул иҫәптән Шәмиғоловты, ҡулға алырға ҡарар иткән һәм 16 ғинуарҙа иртәнге сәғәт дүрттә үҙ ҡарарын еренә еткергән. Шул уҡ ваҡытта Башревком уларҙың йәнен алырға уйламаған, ә башҡарылған сара хаҡында тиҙ генә ВЦИК-ка, Ленинға, Троцкийға, Сталинға телеграмма һуғып, ҡулға алынған кешеләрҙе бөтә эше менән бергә тикшереү өсөн РКП(б) Үҙәк Комитетына оҙатырға булған. Башревком һаман әле үҙәк Совет хөкүмәтенә ышанған һәм үҙенең ҡарарында: «Беҙ был төркөмдөң политикаһын үҙәк Совет хөкүмәте һәм юғарғы РКП органының политикаһы тип, БССР-ҙы ҡыйратыу инициативаһы Үҙәктән килә тип, һис кенә лә уйлай алмайбыҙ»,— тип яҙған. Башревком шул сара менән тик ғәҙеллек табырға, автономияны һаҡларға тырышҡан, ә, ул саҡта һәм хәҙер баһаланғанса, бер ниндәй фетнә лә, восстание ла күтәрмәгән. Башревком тыныс маҡсат ҡуйған, шуға күрә ғәскәри берәмектәргә һәм кантон идараларына тыныслыҡ һаҡларға, әүәлгесә революцияны ҡурғарға өндәп, телеграмма таратҡан[108]. Ләкин ҡаршы яҡтағылар конфликтты тыныс юл менән хәл итергә теләмәгән.

Шәмиғолов төркөмөнөң дүрт кешеһен ҡулға алыу Үҙәк вәкилдәрен, Самойлов менән Артемды, яман ярһытып ебәргән. Улар тиҙ генә

---

* XVIII—XIX быуаттарҙа татарҙар ергә аҫаба хоҡуҡ алыр өсөн башҡорт булып яҙылған булһа, ошо Шәмиғоловтан башлап улар башгкорт исеменән етәксе һәм башҡа урьндарға үрләп, башкортто эстән ҡыйратыр өсөн башҡорт булып яҙыла.

[108] Образование ..., 433-435- се бит

Стәрлетамаҡтың төрлө ойошмаһынан һәм күрше губернияларҙың ҡалаға килгән өйәҙ эшмәкәрҙәренән 10 коммунист йыя һалып, бөтөнләй хоҡуҡһыҙ шул кәңәшмәлә: «Йомағолов менән Имаҡовты партия судына биреп, партия тәғәйенләгән бөтә партия һәм совет эшенән бушатырға, ошо хаҡта Үҙәк Комитетҡа хәбәр итергә... Йомағоловты Мәскәүгә саҡыртып алыуҙарын талап итергә» [109], – тип ҡарар сығарған. Самойловтың РКП(б) өлкә комитеты исеменән кантондарға тараҡан циркуляр хатында: «Стәрлетамаҡта берҙән – бер иректә ҡалған Самойлов иптәштең һәм РКП Үҙәк Комитетының вәкиле Артемдың ҡарары менән...» [110] — тип әйтелгән. Был факт автономиялы хөкүмәттең ни кимәлгә ҡуйылғанын асыҡ күрһәтә: бер кеше йәки ике кеше уны туҙҙырып ташларға хаҡлы һаналған һәм юғарғы инстанция уларҙың эшен законлыға иҫәпләгән.

Шул уҡ көндө, 16 ғинуарҙа, Самойлов менән Артем был ваҡиға хаҡында Халыҡ Комиссарҙары Советы һәм Ҡурғаныу Советы председателе Ленинға, Төркөстан фронты командующийы Фрунзеға хәбәр иткән һәм шул көндө үк Ленин Йомағоловҡа телеграф аша «Эште урынбаҫарға тапшырып, һис кисекмәҫтән аңлатма биреү өсөн Мәскәүгә килеп етергә[111] бойороҡ ебәргән, ә Фрунзе Ырымбур нығытмалы районының коменданты Каширинға Стәрлетамаҡҡа ҙур атлы отряд ебәрергә бойороҡ биргән, Стәрлетамаҡ коменданты Файгелгә, ҡулға алынған кешеләрҙе һис кисекмәҫтән сығарырға партия судына бирелгән Йомағоловтың бер әмерен дә үтәмәҫкә, тип телеграмма һуҡҡан[112]. Ырымбур нығытмалы районының коменданты Каширин да Йомағоловты ҡурҡытып телеграмма ебәргән[113]. Ырымбур эргәһендә торған Башҡорт бригадаһын ул бик көслө күҙәтеү аҫтына алған, телеграфҡа махсус цензура ҡуйған, командир Мортазинды бригаданан айырған. Ғәҙәттәгесә, конфликтҡа күрше губерния властары килеп ҡыҫылған, улар бөтә башҡорт эшенә туранан-тура ҡатнашыуҙы үҙҙәренең бурысы һанаған.

[109] Образование 435-436- сы биттәр
[110] Образование..., 440-сы бит.
[111]Образование..., 438-се бит.
[112] Образование..., 437—438-се биттәр.
[113] Образование.,., 439-сы бит.

Улар РКП Үҙәк Комитетынан «иң яҡшы партия эшмәкәрҙәренең иркенә ҡул һуҙған «авантюристарға» иң ҡаты сара күрергә талап иткән. Башҡорт республикаһындағы Үҙәк вәкилдәре, Төркөстан фронтының ҡулға алынған иптәштәрҙе кисекмәҫтән сығарырға тигән бойороғон үтәмәй тороп, Башревком менән Башҡортостандың законлы власть вәкиле тип һөйләшә алмауҙары тураһында ультиматум яһаған. «Федератив республиканың берҙәм Ҡыҙыл ғәскәр командованиеһынан килгән бойороҡто үтәмәү, тиелгән был ультиматумда, РСФСР менән БССР араһындағы килешеүҙең иң төп бер шартын боҙоу булып тора»[114]. Ахыры килеп, улар Килешеү бар икәнен иҫенә төшөргән, ләкин шунда ла уның йөкмәткеһен үҙ файҙаһына яраҡлаштырып, боҙоп күрһәткән: Килешеүҙә хәрби властарҙың бойороғона буйһонорға тигән шарт булмаған, киреһенсә, республикалағы властың тулыһынса Башревкомға күсеүе хаҡында әйтелгән. Мәскәү хөкүмәте һәм уның вәкилдәре Килешеүгә теләгәнсә төҙәтмә индерергә һәм Башҡорт хөкүмәтен бер һүҙһеҙ буйһонғанда ғына законлы тип һанарға үҙҙәрен хаҡлы иҫәпләгән. Фрунзе ВЦИК вәкилдәренең ультиматумын яҡлап, «Йомағолов етәкселегендәге авантюраны... восстание тип кенә баһаларға мөмкин һәм һис кисекмәҫтән уны юҡ итергә кәрәк»[115], тип Ленинға хәбәр ебәргән. «Автономия» биргән совет власы башҡорттоң әҙ генә үҙ хоҡуғын яҡларға тырышыуын батшалар быуған кеүек быуырға әҙер торған һәм әҙер торғанын ул баштан уҡ асын эш менән күрһәткән.

Үҙҙәренең дүрт кәштәнен яҡларға үҙәк хөкүмәт вәкилдәре тотош иле менән күтәрелгән. Ленин менән Фрунзе береһенән-береһе ҡурҡынысыраҡ телеграммалар яуҙырып торған, шул уҡ ваҡытта башҡорт халҡын өсөнсө йыл айҡаған ҡанлы ҡырғынды улар күрмәгән дә белмәгән. Дүрт бөртөк үҙ кешеһе улар өсөн тотош бер халыҡтын тереклегенән ҡәҙерлерәк булған.

Ҡоторонған ҡыҫымға сыҙамай, Башревком 19 ғинуарҙа өс көн үткәс, ҡулға алынған татарҙарҙы сығарған. Ҡотолоп сыҡҡас, Шәмиғолов шунда уҡ башҡорт эшмәкәрҙәрен бөтөрөргә талап иткән, ләкин РКП(б) Үҙәк Комитеты политик

---

113 Образование..., 442-се бит.

115 Образование..., 442-се бит.

хәйлә менән ундай аҙымға бармаған, уның ҡарыуы Башревком ҡулында милли властын әҫәрен лә ҡалдырмаған.

РКП(б) Үҙәк Комитеты өлкә партия комитетына Башревкомды яңынан төҙөргә күрһәтмә биргән. Яңы талап буйынса, Башревкомда Үҙәккә кәрәк хәтлем партия вәкилдәре булырға, Башревком функцияһын биш кешенән (өс Башревком кешеһенән, ике ВЦИК кешеһенән) торған президиум үтәргә, Башревкомдың һәр ҡарарын ВЦИК-тан билдәләнгән махсус вәкил раҫларға һ.б. тейеш булған [116]. Үҙәктең ошо күрһәтмәһе буйынса, РКП(б) өлкә комитеты ултырыш үткәреп, тейешле ҡарар ҡабул иткән. Шул уҡ ултырышта Йомағолов һәм башҡалар партиянан сығарылған. Шунан тыш, Йомағолов, кире ҡайтыу хоҡуғынан мәхрүм ителеп, Мәскәүгә ебәрелгән. Раҡайҙы ултырыш бер тауыштан атырға хөкөм иткән [117].

Үҙәк Совет хөкүмәте һәм уның Бәләкәй Башҡортостанда эшләгән вәкилдәре Шәмиғолов төркөмөнөн барлығын, уның башҡортҡа ҡаршы эш алып барғанын инҡар иткән, шуның менән үҙҙәренең алдаҡсы һәм бысраҡ икәнен фаш иткән. Башревком төҙөгән комиссия ҡулға алынған кешеләрҙең ғәйебен бик күп документ нигеҙендә иҫбат итеп, Үҙәкте дөрөҫлөккә һәм ғәҙеллеккә саҡырып ҡараған, ләкин Үҙәккә ғәҙеллек кәрәкмәгән, сөнки ғәҙеллек күрһәтеп, үҙен-үҙе фашлай алмаған. РКП(б)-ның Ырымбур губкомы 1920 йылдың 26 ғинуарында РКП(б) Үҙәк Комитетына ебәргән докладында, оятһыҙ яла һәм ялған, мыҫҡыл һәм дошманлыҡ менән башҡортто яманлаған, Башревкомдың ҡылығын үҙенсә аңлатҡан булған. «Күрәһең, тиҙҙән, Бөтә Башҡортостан совет съезынан һуң, үҙҙәренең ҡоларын һиҙеп, — тиелгән был докладта, — улар Коммунистар партияһы һәм уның иң яҡшы эшмәкәрҙәренең үҫә барған йоғонтоһон емерергә маташа... Уларҙың был сығышы «уңмаған политиктарҙың» Башҡортостандағы

---

[116] ЦГА БАССР, ф. 1107, оп. 1, д. 122, л. 25.
*Шундай сара Үҙәк тарафынан абруйлы милли эшмәкәрҙәрҙе урындағы милли органдарҙың эшенән айырырға, ситләштерергә кәрәк булғанда һәр республикала ҡулланылған.

[117] Образование..., 464—465-сө биттәр.

бөтә партия эшен ҡыйратырға маташыуҙан башҡа бер ни ҙә түгел». Әммә шунда уҡ, әҙ генә аҫтараҡ, бөтөнләй ошоноң киреһе яҙылған: «Милләтселәрҙең (йәғни Башревкомдың) йоғонтоһо башҡорт ярлылары араһында сиктән тыш ныҡ үҫә. Бындай шартта съездың ниндәй булырын әйтеүе ҡыйын түгел»[118]. Тимәк, «тиҙҙән ҡоларын һиҙгән» «уңмаған политиктар» Башревкомда түгел, рус-татар төркөмөндә йөрөгән. Рус һәм татар коммунистарының, шул иҫәптән Ырымбур губкомы әйткән «иң популяр» Шәмиғоловтың, башҡорт халҡында бер абруйы ла, бер ҡатнашлығы ла, бер йоғонтоһо ла булмаған, шуға улар алдағы Бөтә Башҡортостан совет съезында һәләкәткә осрауҙан иҫ киткес ҡурҡҡан, һәләкәттән һуң власты баҫып алыуы ауыр булырын белгән. Шул хәлгә юл ҡуймаҫ өсөн улар юрамал бәләкәй мәсьәләне ҙур итеп ҡабартып, оло конфликт ҡуптарып, Башревкомды юҡ иткән. Әлбиттә, улар элекке Башревкомды тотош юҡҡа сығармаған. Йомағоловты һөрһәләр ҙә, Башревком әле ҡалған, ләкин ул Башревкомдың ҡулында власть бөткән. Башревком ағзалары бының менән килешә алмай, йә власты башҡорттоң үҙ ҡулына бирергә, йәки ялған автономияны бөтөрөргә талап итеп, юғарғы власть органдарына мөрәжәғәт иткән. Ләкин был талаптарҙың береһе лә Үҙәктең политикаһына тап килмәгән. Үҙ эшен эшләгәс, Үҙәк конфликтты йомшарта башлаған булған. Шул рухта 1920 йылдың 14 мартында Стәрлетамаҡта берлектәге кәңәшмә үткәрелгән. Кәңәшмәлә РКП(б) Үҙәк Комитетының вәкиле Л.Д.Троцкий ҡатнашҡан. Кәңәшмә ике яҡты яраштыра алмаған. Башревкомдың башҡорт өлөшө менән рус-татар төркөмө араһында дошманлыҡ һаҡланған. Кантондарҙа ла хәлдәр бик насар булған. Ҡыҙылармеецтар һәм һәр төрлө ҡыҙыл бандалар һаман элеккесә башҡортто ҡырған, башҡорт халҡын талаған. Коммунист ячейкалары урындағы Башревком органдарының эшенә һорауһыҙ ҡул тыҡҡан, ағзаларын тотоп атҡан. Был енәйәт өсөн берәү ҙә яуап бирмәгән.

---

[118]Образование ..., 448,449,459-сы биттәр

Башревкомды һәм башҡортто эҙәрләүҙә РКП(б)-ның Өфө һәм Ырымбур губкомдары ҙур ныҡышмалылыҡ күрһәткән. Улар башҡортто «совет власының тоғро эшмәкәрҙәрен ҡыҫыуҙа», «Башҡортостандағы рус һәм татарҙарҙың законлы мәнфәғәтен» ситкә тибеүҙә, рустарҙы иҙеүҙә ғәйепләгән. Шундай ялған һылтау менән «башҡорт тенденцияһы» тигән нәмәне баҫырға башҡортто бөтөрөргә тырышҡан. Был губкомдар ер мәсьәләһенең тиҙерәк хәл ителеүен, йәғни рус менән татарға башҡорттоң ҡалдыҡ-боҫтоҡ һуңғы ерен таларға мөмкинлек бирелеүен, талап иткән. Улар, Башҡорт республикаһын төҙөү «яғыулыҡ һәм сырьенан яҙҙырып, бөтөнләй критик хәлгә ҡалдырып, төбәктең хужалыҡ тормошон бик түбәнәйтте, һәм шунан тыш, республиканың асыҡланмаған сиктәре ҙур талашҡа килтерҙе», тип раҫларға маташҡан. Бының береһе лә дөрөҫ булмаған. Улар Башҡорт республикаһын бөтөрөү кәрәк икәнлеген иҫбатлар өсөн юрамал хәлде шулай киҫкенләштереп күрһәткән. Күрше губернияларҙың губком һәм губисполкомдары үҙ газеталарында Башревкомды һәм башҡортто әшәкеләп, рус, татар һәм башҡа халыҡты тары ла көслөрәк террорға ҡоторткан. Был эштә шул уҡ губернияларҙа һәм Ҡазанда эшләгән татарҙар ҙа ҡалышмаған. РКП(б) Үҙәк Комитеның Татар-Башҡорт республикаһы төҙөү хаҡындағы декреты 1919 йылдың 13 декабрендә юҡҡа сығарылған булһа ла, татарҙар һаман шул республика өсөн даулашып, үҙ матбуғаттарында Башҡорт республикаһына ҡаршы дошманлыҡ агитацияһы алып барған; башҡорт эшмәкәрҙәренә шашып һөжүм иткән.

Башревком өсөн шундай ауыр мәлдә Үҙәк Совет хөкүмәте Зәки Вәлидовты Мәскәүгә алған һәм башҡорттарҙың көсөн йәнә нығыраҡ кәметкән Йомағолов артынса Вәлидовтың Мәскәүгә алыныуы Башревкомдың башҡорт өлөшөндә ҙур ризаһыҙлыҡ уятҡан, ләкин Үҙәк был ризаһыҙлыҡҡа иғтибар бирмәгән. Башревкомды көсһөҙләндереү уға Башҡорт республикаһына ҡарата артабанғы пландарын ғәмәлләштереү өсөн кәрәк булған.

Башҡорт республикаһы буйынса ҡоролған планды ғәмәлләштереү эшенә Башҡорт атлы бригадаһының, Башҡорт ғәскәренән ҡалған берҙән-бер хәрби көстөң, Ырымбур эргәһенән Польша фронтына оҙатылыуы ла туранан-тура бәйле булған. Мортазин етәкселегендәге был бригада 1920 йылдың апрель аҙағында оҙатылып, май башында фронтҡа килеп еткән һәм шунда уҡ һуғышҡа инеп киткән. Май уртаһында бригадаға элекке Петроград фронтындағы Башҡорт ғәскәри төркөмөнөң ҡалдығынан йыйылған полк килеп ҡушылған. Башҡорт атлы бригадаһы 1920 йылдың 30 ноябренә ҡәҙәр һан һәм ҡорал яғынан күп тапҡырға көслө поляк ғәскәрҙәре менән иҫ киткес ауыр һуғыш алып барған. Бригада бик насар тәьмин ителгән, артиллерия булмаған, бөтә ҡорал трофей карабинынан торған, кейем дә ғәниməттән килгән, медицина персоналы юҡ хисабында булған. Рус ғәскәри берәмектәренә беркетелгән атлы бригаданы, элекке кеүек үк, иң ҡурҡыныс һуғыштарға ебәргәндәр, нығытмалы дошман позицияларына рустарҙың йәйәүле ғәскәре алдынан ҡыуғандар. Бригаданың разведкаһыҙ ебәрелгән ике полкы 1920 йылдың 24 июлендә Суск ауылы янында ҡамауға эләгеп, яртылаш юҡ ителгән. Шулай ҡырылыу арҡаһында һуғыш бөтөүгә бригадала кеше бик әҙ ҡалған, шуға күрә 1920 йылдың декабрендә унын ҡалдығынан булыр-булмаҫ ике полк төҙөлөп, Россияның көнбайыш сиктәрендә бандиттар менән һуғышыуға тәғәйеләнгән. «Бандиттар» менән һуғышып, тағы кешенең яртыһы үлгән. 1921 йылдың 25 мартына бригаданан барлығы дүрт эскадронлыҡ һалдат ҡалған, ләкин улар ҙа Башҡортостанға ҡайтарылмаған. Оҙаҡламай уларҙы Ҡыҙыл ғәскәрҙең төрлө ғәскәри берәмектәренә таратып бөткәндәр. Шулай итеп, ҡасандыр башҡорт автономияһының терәге булған Башҡорт ғәскәрен юҡ иткәндәр.

## 5. АВТОНОМИЯ ХАҠЫНДАҒЫ КИЛЕШЕҮҘЕҢ ЮҠҠА СЫҒЫУЫ. ТЕРРОР ҺӘМ АСЛЫҠ ҠАЗАҺЫ

1920 йылдың апрель аҙағында, Башревком председателе Вәлидов Мәскәүгә алынып, Башҡорт атлы бригадаһы Польша фронтына ебәрелгән мәлдә, Мәскәүҙә башҡорт эше буйынса махсус комиссия эшләй башлаған. Был комиссия башҡорт автономияһы хаҡында яңы положение төҙөү менән шөғөлләнгән. Килешеү шарттарына индерелә торған үҙгәрештәрҙең асылын белеп, Вәлидов Башревком ағзаларына хат яҙған: «Үҙәк хөкүмәт Башҡортостандың бөтә экономик байлығын тартып ала һәм дә уның политик ойошмаларын үҙенә буйһондора, беҙгә милли-мәҙәни мөхтәриәт рәүешендәге бер нәмә ҡалдыра». Башревком ағзалары 1920 йылдың 15 майында яңы үҙгәрештәргә ҡаты ҡаршылыҡ белдереп, Үҙәккә телеграмма һуҡҡан. Ләкин уларҙың ҡаршылығына иғтибар биреүсе булмаған. 1920 йылдың 19 майында РСФСР Үҙәк Башҡарма Комитеты һәм Халыҡ Комиссарҙары Советы «Автономиялы Башҡортостан Совет Республикаһының дәүләт ҡоролошо хаҡында» ҡарар ҡабул иткән. Ҡарарға ВЦИК Председателе Калинин менән Халыҡ Комиссарҙары Советының Председателе Ленин ҡул ҡуйған[119]. Вәлидовтың «милли-мәҙәни мөхтәриәткә» генә ҡалдырыуҙары тураһындағы һүҙе дөрөçләнгән һәм был хаҡта ете башҡорт коммунисы белдергән ҡәтғи ризаһыҙлыҡҡа яуап итеп яҙған аңлатмала Башҡортостан РКП(б) өлкә комитеты ап-асыҡ әйткән: «Башҡорттарға, – тиелгән был аңлатмала, –мәҙәни үçеш өсөн киң мөмкинлек бирелә. Коммунистарҙың бурысы – автономияның кәрәген бөтөрөү өсөн эш алып барыу[120]. Мәсьәлә шулай ҡуйылған. Революцияға тиклем милли-мәҙәни автономияға ҡаршы ярһып көрәшкән В.И.Ленин революция булып, милли хәрәкәттәрҙе быуып бөткәндән һуң мили-

---

[119] Образование.., 487—488-се биттәр.

[120] Образование...,492-се бит.

территориаль автономияны барыбер шуға уҡ ҡайтарып ҡалдырған, ҡайтарғанда ла ныҡ сикләп, мәктәп эшен уның ҡарамағынан тартып алып ҡайтарған. Был автономия тик йырлау-бейеүгә, күпмелер кимәлдә әҙәбиәткә генә ҡағылышлы булып ҡалған. Шуға күрә партия артабан үҙенең «ғәҙел» милли политикаһын күрһәтер өсөн шул мәҙәниәт төрҙәрен киң файҙалана башлаған, бүтән күрһәтерлек бер милли нәмә ҡалмаған.

Шулай итеп, Үҙәк Совет власы менән Башҡорт хөкүмәтенең Автономиялы Совет Башҡотостаны тураһындағы Башревкомдың

Ҡырҡа ҡаршы былыуына ҡарамаҫтан Совет хөкүмәте тарафынан бер яҡлы рәүештә юҡҡа сығарылған. Батша хөкүмәте өс йөҙ йыл буйы тырышып та 1557 йылғы Грамотаны тотош юҡ итә алмаған булһа, Совет хөкүмәтенә үҙ ҡултамғаһы менән тәсдиҡланған дәүләт актын ҡыйлыҡҡа сығарып ташлар өсөн бер йыл ваҡыт еткән. Башревком ағзалары хөкүмәт ҡарарынан шаңҡып ҡалған. Шулай ҙа улар нык алданғандарын аңлай алмаған, һаман ысын автономияны һаҡлауҙан өмөт өҙөп бөтмәгән, ҡаршылашып маташҡан.

Был ваҡытта кантон совет съездарын һәм I Бөтә Башҡортостан совет съезын үткәреүгә әҙерлек барған. Башҡорт эшмәкәрҙәре шул съездарҙа позицияны нығытып, власть көсө менән хоҡуҡ дауларға ҡарар иткән. Съездарға әҙерлек эшен Башревкомдың Үҙәк ойоштороу комиссияһы башҡарырға тейеш булған. Әлбиттә, демократия принцибын әҙ генә тотҡанда ла, бөтә башҡорт халҡының ихлас ярҙамына һәм теләктәшлегенә таянған башҡорт эшмәкәрҙәре теләгән уңышҡа ирешер ине. Ләкин РКП(б) өлкә комитеты исеменән эш иткән Үҙәк вәкилдәре 1920 йылдың 20 майында Башревком төҙөгән комиссияны ҡабул итмәй, ҡыуып тараткан, башҡорттарҙы съезд үткәреү буйынса агитаторҙар йөрөтөүҙән ҡаты тыйған, шулай итеп, башҡорт эшмәкәрҙәрен совет органдарына һайлау әҙерлегенән ситләштергән, бөтә эште үҙ ҡулына алған. 1920 йылдың 27 майында кантондарға тараткан циркуляр хатында Үҙәк вәкилдәре коммунистар алдына совет органдарынын, ғәмәлдәге составын

тамырҙан үҙгәртеү бурысын ҡуйған, «Башҡортостан власында коммунистар ныҡлы урын алырға тейеш», тип күрһәтмә биргән. Улар, РКП өлкә конференцияһы Бөтә Башҡортостан совет съезынан алда үткәрелә, ул съездың көн тәртибен раҫлай. БашЦИК һәм БССР халыҡ комиссарҙары советына кандидаттар билдәләй, шул уҡ тәртип РКП(б) кантон конференцияларын һәм кантон совет съездарын үткәргәндә лә атҡарылырға тейеш, тип талап иткән. Улар, «съезд йыйғанда съезға коммунистарҙы үткәреү өсөн бик тырышырға кәрәк»[121], тип ныҡ әйткән. Ата рус шовинистарынан һәм ҡанһыҙ енәйәтселәрҙән торған кантондар шундай ҡаты күрһәтмә менән ҡоралланғас, аяуһыҙ көсләк ҡулланып, кантон совет съездарында күпселеккә ирешкән һәм үҙҙәренә кәрәк ҡарарҙар сығарған. Ҡайһы бер кантон съездарындағына, мәҫәлән Тук-Соран, Арғаяш, Ялан кантондарында, башҡорттар күпселек делегат тауышы алып, Башревкомды яҡлап сығыуға өлгәшкән. Кантон съездарының дөйөм һөҙөмтәһе башҡорт эшмәкәрҙәренең ышанысын аҡламаған һәм шундай ажарлы көслөк хөкөм һөргәндә, әлбиттә, яҡлай ҙа алмаған. Бынан һуң өмөт итер бер нәмә лә ҡалмаған. Башҡортостандың хужалыҡ һәм экономика өлкәһендәге автономия хоҡуғын тартып алыуҙан башланған эш башҡортто үҙ республикаһында бөтә политик власть ҡалдығынан мәхрүм итеү менән тамамланған. Сараһыҙлыҡтан башҡорт эшмәкәрҙәренең бөтөнләй күңеле һүрелгән. Бөтә башҡорт халҡының йән аямай түккән көсө, иҫәпһеҙ ҡорбаны, күргән ғазабы бушҡа сыҡҡанда, ниҙер эшләп маташыуҙан мәғәнә ҡалмаған. Шунда ауыр хәлдең йоғонтоһонан тәрән ҡайғыға төшкән башҡорт эшмәкәрҙәре иң һуңғы аҙымға аяҡ баҫҡан: 1920 йылдың 16 июнендә эш урынын ҡалдырып, ситкә таралышҡан. 17 июндә улар Бөрйән-Түңгәүер кантонының Яңы Усман ауылында кәңәшмә йыйып, декларация ҡабул иткән. Декларацияла: «Милли әҙселектең үҫешенә аяҡ салған рус бөйөк дәүләтселек тенденцияһы һәм Үҙәктең башҡорт коммунистарына ышанмауы сәбәпле яуаплы башҡорт хеҙмәткәрҙәре

---

[121] Образование.., 478-481-се биттәр.

Башҡортостанды ташлап китә... Китеүҙең маҡсаты – һис тә халыҡ ялпыһын совет власына ҡаршы күтәреү түгел, ә эш ҡалдырып, рус шовинизмына ҡаршылыҡ белдереү»[122], – тип әйтелгән.

Башревкомдың эш ташлап китеүен Стәрлетамаҡта һәм урында эшләгән күп башҡорт хуп күргән. Уларҙың ҡайһы береһе, шул иҫәптән хөкүмәт ағзалары һәм етәксе хеҙмәткәрҙәр, шулай уҡ эш ташлаған. Уларҙың өлгөһөнә Башҡорт республикаһындағы әҙ-мәҙ башҡорт ғәскәри берәмектәре эйәргән: был берәмектәр ҡоралды көйө өйҙәренә таралышҡан. Башҡорт халкы араһында Үҙәк хөкүмәттең политикаһына ҡарата ризаһыҙлыҡ көсәйгән.

Ғәҙел милли политика үткәреүсе булып күренергә тырышҡан РКП(б)-ның политикаһында әҙ генә ғәҙеллек булып, бәләкәй милләттәрҙең мәнфәғәттәренә иғтибар бирелгән булһа, Үҙәк вәкилдәре эш ташлап киткән Башревком ағзалары менән нисек тә осрашып, был эштең сәбәбен асыҡларға, аңлашырға тырышыр ине. Бәлки, башҡорт етәкселәре ҡаршылыҡ белдергәндә шуға иҫәп тотҡан булғандыр. Ләкин РКП(б) Үҙәк комитетына һәм уның вәкилдәренә ундай нәмә кәрәкмәгән. Улар аңлашыу һәм килешеүгә мохтаж булмаған, ә тик үҙҙәренең власын нығытыу яғын ғына ҡараған . Восстание-фәлән булып ҡуймаһын тип, улар Башҡортостанды төрлө яҡтан уратып алған Ырымбур, Троицк, Орск, Преображенск һәм башҡа нығытмалы нөктәләрҙе (большевиктар тергеҙгән элекке ҡәлғәләрҙе) яу әҙерлегенә килтергән, хәүеф хаҡында Волга аръяғы хәрби округына, Урал эске һаҡлыҡ секторына хәбәр иткән, шулай итеп хәүефһеҙлек сараһы күргәс, «ҡасҡан» Башревкомға ҡаршы яман тауыш күтәргән. Яуаплы партия хеҙмәткәрҙәре матбуғат биттәрендә башҡорттарҙы контрреволюцияла «фашлаған», үҙҙәренең шовинистик зәһәрҙәрен түккән, улар шул хәтле күп мәшәҡәт һәм хәүеф килтергән дошманды еңгәненә тантана иткән.

1920 йылдың 23 июнендә берҙән-бер ағзанан, ВЦИК вәкиле П.М.Викмандан, торған РКП(б) өлкә комитет «президиумы» һәм шунда ғына билдәләнгән ике яңы

---

[122] Муртазин М.Л., Башкирия и башкирские войска в гражданскую войну. М., 1927, 187-се бит,

өлкә комитет «ағзаһы» менән биш «актив партия хеҙмәткәре» ултырыш үткәреп, яңы Башревком төҙөгән. Был яңы Башревкомда гел рус менән татар ғына булған. Яңы Башревкомдың председателе итеп татар Ф.Мансырев ҡуйылған, Викман уның урынбаҫары булып алған. Тағы, 1920 йылдың ғинуарындағы кеүек,Үҙәктең берҙән-бер вәкиле республикала власть мәсьәләһен хәл иткән. Үҙәктең ризалығы менән Викман төҙөгән яңы Башревком 1920 йылдың 26 июнендә үҙенең Башҡорт республикаһында етәкселеккә тотоноуы хаҡында бойорок сығарған һәм, «Башревкомдың ҡушҡанына буйһонмаған, ҡаршылашҡан кешеләр һуғыш ваҡытындағы закон буйынса язаға тарттырыласаҡ»[123], тип ҡаты тәнбиһ яһаған. Шул уҡ ваҡытта яңы Башревком кантон парткомдарына «уға тулы һәм ысын ярҙам күрһәтергә», яңы Башревкомды яҡлап көслө агитация үткәрергә контревком йәки кантком ағзалары «ҡасҡан» хәлдә, улар урынына үҙ кешеләрен ҡуйырға бойороп, телеграмма тараҡан[124]. «Совет Башҡортостанының бөтә хеҙмәтсәндәренә, бөтә башҡорт ғәскәрҙәренә, пандар Польшаһына ҡаршы һуғышҡан батыр башҡорт полктарына» тигән мөрәжәғәтендә РКП(б) өлкә комитеты элекке Башревком ағзаларын контрреволюцион эштә, милли-шовинистик агитацияла ғәйепләп, үҙен ас башҡорт ярлыларының мәнфәғәтен яҡлаусы итеп күрһәтеп, «Башҡорт ярлылары үҙ яҙмышы өсөн тыныс булһын!»[125] тип оран һалған. Мөрәжәғәт баштан аяҡ алдыҡ, ике йөҙлө ялған менән тулы булған. Башҡортто ул алдай алмаған.

Яны Башревкомды башҡорт халҡы ҡаты ҡаршылыҡ белдереп ҡаршылаған. Күпселек ағзаһы башҡорттан торған ҡайһы бер кантон ревкомдары яңы Башревкомды белергә теләмәгән. Үҫәргән кантонының председателе Сабирйән Усаров яңы Башревкомға ҡаршылыҡ белдереү йөҙөнән председателлек вазифаһынан баш тартҡан. Бер нисә көндән уны ҡулға алып атҡандар. Ҡулға алыу, атыу бөтә Башҡортостан республикаһында яңынан шашып киткән. Рус, татар, сыуаш һәм башҡа килмешәк халыҡ башҡортто бөтөрөүгә яңы һылтау

[123] Образование..., 502-се бит.
[124] Образование..., 503-сө бит.

[125] Образование..., 504—506-сы биттәр.

табып, ҡотороуҙың сигенә сыҡҡан. Аяуһыҙ репрессия менән бер ыңғай бөтә урында башҡорт ауылдарының ерен баҫып алыу киң таралған.

Яңы Башревком элекке Башревкомдың эш һөҙөмтәһен юҡ итеүгә ҡыҙыу тотонған. Башҡорт ғәскәре төҙөлә, имеш, ул совет власына ҡаршы сығырға әҙерләнә, имеш, тигән ялған хәбәрҙән ҡурҡып, яңы Башревком менән РКП(б) өлкә комитеты бөтә Волга аръяғы хәрби округын аяҡҡа баҫтырған. «Дошмандың» фарази тупланған урынына Преображенск нығытмалы нөктәһенән тиҙ генә ҙур разведка отряды ебәрелгән. Уның артынса хәрби округтың революцион советы шул уҡ ергә аҡ гвардия бандаларын бөтөрөүгә тәғәйенләнгән махсус ҙур атлы ғәскәр ебәргән. Республиканың башҡа райондарында ла ҡоралды отрядтар эш иткән. Улар яңы Башревкомға ҡаршы булған башҡорттарҙы һыпырып кулға алған, атҡан, язалаған. Шундай шартта III өлкә партия конференцияһына һәм I Бөтә Башкортостан совет съезына ашығыс әҙерлек барған.

Элекке Башревком киткәс, РКП(б) Үҙәк Комитетының инициативаһы менән I Бөтә Башҡортостан совет съезын саҡырыу буйынса Үҙәк ағзаһы һәм урындағы ике татарҙан торған яңы комиссия төҙөлгән. Комиссия съезд саҡырыу хаҡында манифест сығарған. Манифест башынан аҙағына тиклем оятһыҙ ялған һәм яла менән тулы булып, уны яҙған кешеләрҙең бик намыҫһыҙ икәнен асып күрһәткән[126]. Манифеста: «Башкортостан беренсе башлап һүҙ менән түгел, ә эш менән Көнсығыштың иҙелгән халыҡтарын һәм бөтә донъяға таралған колонияларҙы азатлыҡҡа саҡыра», «бөтә донъяны иҙеүсе (империалистик) буржуазияһы автономиялы бәләкәй халыҡтың был беренсе съезын йөрәге ҡалтырап, ҡото осоп ҡаршылаясаҡ», – тип әйтелгән, ә шул саҡта был «автономиялы бәләкәй халыҡ» ҡот осҡос эҙәрләнгән, аслыҡтан һәм ҡыҙыл башкиҫәрҙәрҙең ҡулынан ҡырылған. Манифеста, тулы, ысын автономия «контрреволюцион сигенеш, айырымланған (шуның өсөн дә көсһөҙ) ваҡ милли дәүләттәрҙең үҙ-ара дошманлашҡан иҫке донъяһына кире ҡайтыш була», «ундай

[126] Образование..., 531—541-се биттәр.

автономия ҡотолғоһоҙ рәүештә батша бөйөк дәүләтселегенә, йәғни иҫке деспотик иҙгенлеккә, алып бара һәм алып барырға тейеш» һ.б., һ.б., тиелгән, ә ғәмәлдә «бөйөк дәүләтселеккә» һәм «деспотик иҙгенлеккә», ҡанлы террор һәм бәйһеҙ золомға большевиктарҙың иғлан иткән үҙ милли политикаһынан баш тартыуы, башҡорттоң автономия хоҡуҡтарын тартып алыуы килтергән.

1920 йылдың июлендә Мәскәү вәкилдәре етәкселегендә III өлкә партия конференцияһы булған. Конференцияла РКП өлкә комитеты яңынан һайланған. Өлкә комитеты президиумына Шәмиғолов та ингән.

Партия конференцияһы үткәс тә, 1920 йылдың 25 июлендә, I Бөтә Башҡортостан Совет съезы йыйылған. Съезд тотош тигәндәй коммунистарҙан торған. Делегаттар араһында башҡорттар булмаған. Республиканы ойоштороу съезында төп халыҡтан бер генә вәкил дә ҡатнашмаған. Шәмиғолов әйтеүенсә, тәүҙә делегаттарҙың күпселеге тиерлек башҡорттарҙан һайланған булған, ләкин һайланғандарҙың ҡайһы береһен улар милләтсе тип ҡулға алған, шунан һуң ҡалғандары ҡурҡышып ҡасып бөткән, ҡасҡандар урынын тотош рус һәм татар биләгән[127]. Шундай яуызлыҡ ҡылыу өсөн «ҡасҡан» Башревком һылтау ғына булған, ғәмәлдә РКП(б) органдары үҙенә кәрәк эште эшләгән: һис кем менән бүлешмәй ҡаты власть урынлаштырған. Уларға милли автономия үҙе түгел, исеме генә кәрәк булған. Шуға күрә милләттең үҙ ҡатнашлығынан башҡа «милли» республиканы һаҡлау уларға ғәжәп тойолмаған.

Советтар съезы ерҙе дәүләтләштереү хаҡында ҡарар ҡабул иткән, ВЦИК һәм Халыҡ Комиссарҙары Советының автономиялы дәүләт ҡоролошо тураһындағы 19 май ҡарарын хуплаған Башревком урынына республиканың юғарғы власть органы итеп Үҙәк совет башҡарма комитеты (БашЦИК) һайланған һәм Башҡортостан халыҡ комиссарҙары советы төҙөлгән. БашЦИК менән Башсовнарком «тотош коммунистарҙан торған, ул

[127]Мостовенко П. О больших ошибках в «Малой» Башкирии. — Жури. «Пролетарская революция», № 5/7 1926, 109—110-сы биттәр.

коммунистар ниндәй милләттән булһа булған, тик башҡорттан булмаған»[128]. Съезд урындағы советтарҙы башҡорттарҙан таҙартыу өсөн яңынан һайларға ҡарар иткән.

БашЦИК һәм Башсовнарком председателе итеп Шәмиғолов һайланған һәм ул тиҙ үк асыҡтан-асыҡ көслөк ҡулланырға тотонған. Ул власты баҫып алыуға ризаһыҙлыҡ белдергән бөтә халыҡҡа ҡаты репрессия үткәрә башлаған; генерал-губернатор Обручев заманындағы кеүек, көнсығыш башҡорттарын мәжбүри рәүештә тотош игенселеккә күсерергә тотонған, нисә йыл буйы таланып тамам бөлгән халыҡтың ҡапыл игенселеккә күсер өсөн малы ла, ҡорал-ҡорамалы ла, бер мөмкинлеге лә юҡлығын иҫәпкә алмаған; ул малсылыҡ менән шөғөлләнгән хужалыҡтарға иген развёрсткаһы (булған игенде тотош тартып алыу) индергән һ.б., һ.б.

Башҡорт республикаһын мәсхәрәгә, мыҫҡылға әйләндергән май-июнь ваҡиғалары, рус һәм татар төркөмдәренең шовинистик эште тағы ла нығыраҡ көсәйтеүе, ҡабат тергеҙелгән нығытмалы хәрби нөктәләрҙең (батша ҡәлғәләренең) ҡотороноуы, үҙенән үҙе ойошоп, бер кемгә лә буйһонмаған «партизан» отрядтары һәм совет органдарының аяуһыҙ баш-баштаҡлығы һ.б., һ.б. — шулар бөтәһе лә башҡорт халҡында нәфрәт уятҡан. Бәләкәй Башҡортостанда, бигерәк тә уның көньяҡ-көнсығышында, буталыш һәм хәрәкәт башланған. I Бөтә Башҡортостан Совет съезы БашГК-ға «контрреволюцияға ҡаршы көмлө көрәш алып барырға, контрреволюционерҙарҙы йәшергән кешеләргә ҡаты яза бирергә» ҡушҡан. Шул уҡ ваҡытта съезд башҡорт халҡынан ҡаҡшатҡан көслөк һәм йәбер-золомдо бөтөрөү яғын ҡарамаған, был йыртҡыслыҡты ул тейеш тип һанаған.

I Бөтә Башҡортостан Совет съезының ҡарарын үтәр өсөн БашЧК башҡорттар буталышҡан яҡҡа В. Поленов етәкселегендә ҙур отряд ебәргән. Шул уҡ районда Руденко етәкселегендәге бер ҙур отряд дезертирлыҡҡа

[128] Мостовенко П. Аталған мәҡәлә, 17-се бит.

ҡаршы көрәшеп йөрөгән. Был отрядтарға ярҙам итер өсөн урындарҙа теләһә ниндәй рус колонизаторҙарынан «коммунистик отряд» тигән нәмәләр төҙөлгән.

БашЧК һәм РКП(б) өлкә комитеты вәкиле Поленов тәғәйенле ергә килеп еткәс тә, 1920 йылдың 1 августа, беренсе бойороғон сығарған[129]. Бойороғонда ул Бөрйән-Түңгәүер кантонының территорияһын хәрби хәлдә тип иғлан иткән, граждандарҙың, урындағы ойошма һәм власть органдарының бөтәһенә «банданы» бөтөрөргә ярҙам итеү, айырым «шайка» һәм «дезертирҙар» күренгән йәки торған ер хаҡында кисекмәҫтән хәбәр итеү бурысын йөкмәткән, «бандиттарға» ял итер урын йәки аҙыҡ биреп ярҙам иткән өсөн шунда уҡ атыу һәм мал-мөлкәткә конфискация яһау менән ҡурҡытҡан. Поленов ҡул ҡуйған бойороҡ, һис шикһеҙ, республиканың юғары власть органдары, йәғни РКП(б) өлкә комитеты БашЦИК һәм БашЧК, тарафынан эшләнгән булған. Бойороҡтоң йөкмәткеһе Советтар съезы ҡуйған талапҡа тотош тап килеп торған.

Кантон территорияһында хәрби хәл иғлан итеп, Поленов кантон съезында һайланған башҡарма комитетты ҡыуып таратҡан, башҡарма комитеттың ҡайһы бер ағзаларын атҡан, ҡалған ағзалар ҡасып бөткән. Поленов төҙөгән хәрби совет бөтә власты үҙ ҡулына алған. Поленов кантондың диктаторына әйләнгән. Кантон башҡарма комитеты председателе Шәһит Хоҙайбирҙиндең һуңынан һөйләүенсә, ғәмәлдәге хәл һис бер ҡаты сара ҡулланыуға сәбәп бирмәһә лә, Поленов менән Руденко отрядтары һәм тирә-яҡтан йыйылған «коммунистик отрядтар» башҡорттарҙы аяуһыҙ һуя башлаған. Карателдәр халыҡты талаған. донъяһына тентеү һалған, бөтә мөлкәтенә конфискация яһаған, иҫәпһеҙ ҡулға алған, төркөм-төркөмөн бер юлы тотоп атҡан. «Дезертирҙар»ға урын һәм аҙыҡ биргән өсөн, хатта ирекһеҙҙән биргән булһа ла, карателдәр ауылдарҙы яндырған, балаларҙы штык менән сәнсеп утҡа ташлаған, сараһыҙ башҡортто

[129] Образование.... 554—555-се биттәр.

һыпырып ҡырған. Уларҙың ҡанлы туйҙары аяуһыҙлыҡ яғынан XVIII быуаттағы батша карателдәре ҡылған эштән һис тә айырылмаған.

БашЦИК председателенең урынбаҫары татар Мансырев каратель операциялары үткәрелгән урындарҙа булып, Поленов менән Руденконың эшен тотош хуплаған. Халыҡты һыпырып ҡырыу һәм талау дауам иткән. Шундай хәлдә башҡорттоң бергә ойошоп карателдәргә ҡаршы тороуҙан башҡа сараһы ҡалмаған. Башҡорттарҙың берләшкән көсөнә элекке Башревком ағзаһы С.Ш.Мырҙабулатов етәксе булып алған. Башҡорт хәрәкәте көсәйгән, ләкин ул пассив булған, яу төҫөн алмаған. Башҡорт отрядтары һөжүм алып бармаған, улар тау юлдарын биләп, карателдәрҙе башҡорт ауылдарына үткәрмәй торған. Властар был хәрәкәтте үҙенең аяуһыҙ көсөнә, бәйһеҙ хөкөмөнә ҡаршы сыҡҡан өсөн восстание тип ҡабул иткән. Башҡорттоң ҡаршы тороуы карателдәрҙе сығырынан сығарған, улар ысын һуғыш аскан. Республика хөкүмәте хәрби хәрәкәт барған ергә ҡыҙыл ғәскәрҙең регуляр частарын туплай башлаған. Тағы ла яманыраҡ саралар күреп, ул баш күтәргән башҡортто ут һәм яу менән баҫтырып ҡуймаҡ булған.

Ленин етәкселегендәге РКП(б) Үҙәк Комитеты башҡортҡа ҡаршы алып барылған каратель операцияларын өндәшмәй генә хуплап ятҡан, ләкин был операциялар һуғыш төҫөн ала башлағас, политикаһын бер аҙ үҙгәртергә мәжбүр булған ул Башҡорт республикаһынан башҡоттарҙың хас дошманы Шамиғоловты саҡыртып алған һәм үҙенең вәкиле П.Н.Мостовенкоға башҡорттар менән мөнәсәбәтте йомшартыу, хәрәкәтте үҙ ара килешеү юлы менән туҡтатыу сараһын күрергә ҡушҡан. Шул йомошто үтәү рәүешен, Мостовенко «Милли мәсьәлә һәм Башҡортостандағы совет ҡоролошонон нәүбәттәге бурыстары»[130] тигән политик тезис эшләгән. 1920 йылдың 8 ноябрендә ул ошо тезисты РКП(б) өлкә комитетының пленумы менән БашЦИК-тың 3-сө сессияһында берләшкән ултырышҡа ҡуйып,

[130] Образование..., 559—562-се биттәр.

ҡабул иттергән. Тезиста совет власының йәнәһе ысын ихласлыҡ менән һәр милләттең үҙбилдәләнеш хоҡуғын яҡлауы хаҡында әйтелгән, шунан сығып, милләтселек һәм тормош мәсьәләләренә милләтсе күҙлегенән ҡарау аҡланған, ҡайһы бер етәксе хеҙмәткәрҙәрҙең «хөкөм итергә, эҙәрләргә һәм яза ҡылырға үҙен хаҡлы һанап», законһыҙлыҡтар ҡылыуы ғәйепләнгән. Шулай итеп, РКП(б) Үҙәк Комитеты донъя алдында үҙен аҡлар өсөн бөтә законһыҙлыҡты айырым эшмәкәрҙәр өҫтөнә ауҙарып ҡуйған.

Шуның менән бергә, тезиста, бәләкәй милләт вәкилдәренә яуаплы эш урыны алыр өсөн милли республика менән РСФСР араһындағы экономик мәнфәғәттәр берлеген танырға кәрәк, тип айырым баҫым менән әйтелгән, йәғни РКП(б) Үҙәк Комитеты үҙбилдәләнеш хоҡуғын «ихлас» яҡлау менән бергә, шул хоҡуҡты иң төп бер терәгенән мәхрүм иткән һәм милли дәғүә ҡуймаҫлыҡ, ҡурсаҡ булып хеҙмәт итерлек кешеләрҙе генә эш урынына үткәргән.

Ҡабул ителгән тезисты киң даирәгә таратып, РКП(б) өлкә комитеты баш күтәргән башҡорттар менән һөйләшергә делегация ебәргән, делегацияға юрамал абруйлы башҡорт кешеләре лә индерелгән. Берләшкән башҡорт отрядтарының етәкселеге менән һөйләшкәндән һуң 1920 йылдың 26 ноябрендә килешеү төҙөлгән. Совет власының органдары башҡорттарҙың бер нисә бик мөһим талабын ҡәнәғәтләндерергә мәжбүр булған: элекке яуаплы башҡорт эшмәкәрҙәрен, шул иҫәптән иҫке Башревком ағзаларын, кире эшкә ҡайтарырға (Йомағолов, Вәлидов, Алкинды ҡайтырыуға Мостовенко риза булмаған); карателдәрҙең мал-мөлкәткә килтергән зыянын ҡапларға һәм талаусыларҙы яуапҡа тарттырырға; Башҡорт республикаһына һәм уның халҡына ҡаршы эш алып барған кешеләрҙе республиканан ҡыуырға һәм Ревтрибунал судына бирергә һ.б.[131].Килешеү уңайы менән таратылған мөрәжәғәттә БашЦИК менән РКП(б) өлкә комитеты «айырым вәкилдәрҙең һәм Башҡортостанда йәшәгән ҙур рус төркөмдәренең, элекке хакимлек иткән милләт ғәҙәтен ҡыуып, башҡорт

[131] Образование ..., 565 – 566- сы биттәр

халҡына ҡарата шовинислыҡ күрһәтеүе, Башҡорт республикаһының бөтә РСФСР халҡы ҡабул иткән автономияһы менән килешергә теләмәүе» хаҡында әйтергә мәжбүр булған. БашЦИК менән РКП(б) өлкә комитеты шулай уҡ, «Бөрйән-Түңгәүер кантонындағы айырылған башҡорт төркөмөндә һис бер контрреволюцион ынтылыш булмаған...», тип белдергән. Төҙөлгән килешеү Совет власының башҡорт халҡы алдында бер ни ҡәҙәр йомшарғанын анлатҡан. Әлбиттә, килешеүҙә ҡуйылған шарттарҙың күбеһе, бигерәк тә килтерелгән зыянды ҡаплау тәңгәлендә, һуңынан үтәлмәгән, һәм бер ниндәй килешеү ҙә карателдәр үлтергән меӊ-меӊ башҡортто терелтә алмаған, ләкин был килешеү совет хакимдәрен башҡортҡа хөрмәт менәнерәк ҡарарға, Башҡортостан республикаһында һағыраҡ политика үткәрергә мәжбүр иткән.

Киҫкенлекте бер ни кимәлдә йомшартҡан килешеү барыбер республикалағы дөйөм хәлде яйлай алмаған. Власты баҫып алған рус-татар төркөмө элекке Башревкомдың ҙур көс түгеп яйға һалған идаралыҡ эшен тотош ҡыйратҡан, бөтә ерҙә иҫ киткес бола, тәртипһеҙлек хөкөм һөргән. Шул ваҡытта Бөрйән-Түңгәүер кантон башҡарма комитетының председателе Хоҙайбирҙин әйткән: «Иң элек Башҡортостанда республикаға етәкселек итерҙәй абруйлы власть төҙөргә кәрәк, башҡорт халҡының күңелен һәм тормош шарттарын аңлай алмаған бөтә кешене һис кисектермәй Башҡортостандан ҡыуырға, Башҡортостанда теләһә ниндәй үткенсегә урын бирмәҫкә кәрәк»[132], — тигән. Мостовенко етәкселегендәге РКП(б) өлкә комитеты, ауыр хәлдән сығырға маташып, тәртипһеҙлеккә ҡаршы сара күрергә, милләттәр араһындағы дошманлыкты бөтөрөү юлын эҙләргә, бер башҡорт вәкиле лә булмау арҡаһында республика хөкүмәтенең, халыҡ алдында, бигерәк тә башҡорт араһында, бөтөнләй абруй юғалтҡанын иғтибарға алырға мәжбүр булған. РКП(б) өлкә комитеты «башҡорттарҙың совет һәм партия етәкселегендә ҡатнашыу хоҡуғын»

[132] Образование ..., 572-се бит.

ҡабул иткән. Конференция «башҡорт халҡын революцияның материаль табышынан ауыҙ иттерергә» ҡарар сығарған. «Ауыҙ иттерер» өсөн РКП(б) өлкә комитеты үҙ составына өс башҡортто индергән. Ошо конференцияның һәм Х РКП(б) съезының, «урындағы халыҡтар тормошон һәм психологияһын белгән кешеләрҙе» эшкә үрләтергә, тигән ҡарарын үтәү йөҙөнән РКП(б) өлкә комитетына индерелгән башҡорттар яуаплы эшкә билдәләнгән. Шуларҙың береһе, Әхмәҙулла Биишев, Башҡортостан халыҡ комиссарҙары советының, председателе итеп ҡуйылған. Юғары вазифанан файҙаланып, Биишев шунда уҡ РСФСР-ҙың Милли Халыҡ Комиссариаты (Наркомнац) алдына башҡорт тормошонон, иң мөһим мәсьәләләрен ҡуйған. Шулар араһынан ВЦИК менән РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советының 1920 йыл 19 майҙа сығарған «Автономиялы Башҡортостан Совет Республикаһының дәүләт ҡоролошо хаҡындағы» декретын яңынан ҡарау мәсьәләһенә төп урын бирелгән. Был мәсьәләне ҡабат күтәреү башҡорттарҙың, бер ниндәй баҫым һәм ҡыҫымға ҡарамаҫтан, иҫәпһеҙ ҡорбан биреп, яулап алған автономияны юғалтыу менән һис тә» килешә алмағанын күрһәткән. Наркомнац Коллегияһы декреттың яңы проектын әҙерләү хаҡында ҡарар ҡабул иткән. Әҙерләнгән проект 1921 йылдың июль башында II Бөтә Башҡортостан совет съезы ҡарамағына ҡуйылған [133]. Проектта декретты яңынан ҡарау кәрәкләге «илдең (Башҡортостандың) экономик һәм политик шарттарына яуап бирмәүе», «башҡорт дәүләт власының компетенцияһын асыҡ билдәләмәүе» һәм шул нәмәнең «илдәге эске тормошҡа бик насар йоғонто яһап, совет ҡоролошона тотҡарлыҡ итеүе» менән нигеҙләнгән. Биишев тәҡдим иткән декрет проекты күп урында республиканың экономик һәм политик хоҡуғын киңәйтеү хаҡында тәүге Башревком ҡуйған талаптарҙы яңынан ҡабатлаған. Башҡорт республикаһының советтар съезы БашЦИК-ка тәҡдим ителгән проектты раҫлау мәсьәләһен Үҙәк алдына ҡуйырға ҡушҡан. Ләкин мәсьәләне ҡуйыу һөҙөмтә бирмәгән: Ленин етәкселегендәге Үҙәк милли республиканың экономик һәм

[133] Образование..., 601 —606-сы биттәр.

политик хоҡуғын киңәйтергә лә, башҡорт дәүләт власының компетенцияһын билдәләргә лә уйламаған, киреһенсә, уның, бөтә компетенцияһын тартып алыу яғында торған.

Биишев докладды буйынса, Наркомнац Коллегияһы шулай уҡ Башҡорт республикаһының урман һәм тау райондарындағы граждандар һуғышы ваҡытында бик ҙур ҡаза күргән халҡына ярҙам күрһәтеү мәсьәләһен ҡараған. Юғарыла әйтелгәнсә, 1919 йылдың октябрендә шундай ярҙам тураһында РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советының ҡарары булған, ләкин башҡорттар ул ярҙамды ала алмаған, ярҙам итеү урынына уларҙы һаман талағандар. Шуға ҡарамаҫтан, Ленин 1921 йылдың ғинуарында бурысты үтәгән төҫ менән «ярҙамды» туҡтатыу хаҡындағы ҡарарға ҡул ҡуйған, ә башҡорттар был ваҡытта 1919 йылға ҡарағанда бик күпкә ауырыраҡ хәлдә булған. Шуға күрә Наркомнац Коллегияһы яңынан ярҙам һорап ВЦИК-ка барырға ҡарар иткән. Ләкин ВЦИК был үтенесте үтәмәгән һәм башҡорт халҡы 1921 йылдың ҡот осҡос ҡышына ас көйө барып ингән.

1921 йылдың яҙы һәм йәйендә килмешәк халыҡтар, нигеҙҙә рустар, араһында «партизанлыҡ» һаман әүәлгесә яман ҡоторған. РКП(б) өлкә комитеты күргән саралар һөҙөмтә бирмәгән. Партия ячейкаларының, коммунарҙарҙың һәм айырым кешеләрҙең отрядтары бандитизм менән көрәшеү һылтауынан башҡорт халҡын элеккәсә талаған, аяуһыҙ эҙәрләгән, атҡан, үлтергән. Уларҙың йыртҡыслығынан ҡото осҡан башҡорт хатта күргән йәбер-золомо хаҡында әйтеп, ярҙам һорарға ла ҡурҡҡан. Рустар һәм башҡа халыҡтар менән башҡорт араһындағы дошманлыҡ төп халыҡтың иҫ киткес ярлылығы, килмешәктәрҙең байлығы һәм башҡорттарҙың узурпаторҙар власына ныҡ ҡаршылығы арҡаһында бик көсәйеп, партия комитеттарының милли принцип буйынса фракцияларға бүленеүенә, түҙмәҫ хәлгә еткән башҡорттарҙың дошман эҙәрләүенән

һаҡланыр өсөн тағы ҡораллы отрядтар төҙөй башлауына килтергән. Башҡорттоң колонизаторҙар көслөгөнә ҡорал тотоп ҡаршы тороуынан яңы милли хәрәкәт барлыҡҡа килгән. Хәрәкәткә Ғ.Алмантаев етәкселек иткән. Баш күтәреүселәр республика хөкүмәтенә элекке башҡорттарҙы ҡайтарырға талап иткән.

РКП(б) өлкә комитеты яны политик кризисты хәл итергә һәләтһеҙ булып сыҡҡан. Шуға күрә 1921 йылдын 27 июнендә РКП(б) өлкә комитетының президиумы янынан һайланған, политик (беренсе) секретарь итеп Әхмәҙулла Биишев ҡуйылған. Был эш баш күтәреүселәрҙең талабын ниндәйҙер кимәлдә үтәү булып сыҡкан. РКП(б) өлкә комитетының яны составы ҡан ҡойоуға юл ҡуймаҫ өсөн баш күтәреүселәрҙең етәкселәрен айырып, ябай ҡатнашсыларҙы аҡлау тураһында килешеү төҙөгән.

РКП(б) өлкә комитетының яңы составы шул уҡ 27 июнь пленумында бик ҡаты тәнҡитләп, башҡорт араһындағы ҡыҙыу эш башларға, башҡорт эшсәндәрен совет һәм ҡоролошона ылылыҡтырырға, башҡорт телен рус теле менән бер ҡатарҙан дәүләт теле итеп ҡабул итергә, башҡорт ерен колонизация өсөн файҙаланыуҙы бөтөрөү хаҡында иткән. Өлкә комитеты шул ҡарарҙы 1921 йылдың 1-4 июлендә булған II Башҡортостан Совет ҡабул иттергән. Партия һәм совет эшенә ҡуйылған башҡорт эшмәкәрҙәре башҡорт халҡы һәм башҡорт автономияһы мәнфәғәтендә йән аямай янып эшләгән. Ләкин уларҙың ҙур активлығына РКП(б) Үҙәк Комитеты оҙаҡ сыҙай алмаған. 1921 йылдың аҙағынараҡ Биишев бөтә яуаплы эштән алып ташланған, ул башлаған эштәрҙең иң мөһимдәре проектта ғына тороп ҡалған, һуңынан Шәһит Хоҙайбирҙин дә шундай уҡ яҙмышҡа дусар булған. Был ваҡытта Әхмәт-Зәки Вәлидовҡа һәм «вәлидовсылыҡҡа» ҡаршы политик кампания башланып киткән.

Был кампания Мәскәүҙә тотолған Валидовтың күҙәтеү аҫтынан ҡасып, Урта Азиялағы баҫмасылар хәрәкәтенә ҡушылып китеүенән һуң башланған, РКП(б) Үҙәк Комитеты Башҡортостанда, йәнәһе, эшләп ятҡан милләтсе вәлидовсы төркөмгә аяуһыҙ көрәш иғлан иткән. Ул Валидовты контрреволюционер, совет

власының хас дошманы тип ғәйепләп, Вәлидовтан һәм «вәлидовсыларҙан» ҡырҡа айырылырға талап иткән Үҙәк Комитеты Башҡортостан өлкә комитетына 1922 йылдың 4 ғинуарында ебәргән директиваһында «Вәлидов һәм уның агенттары менән яҡындан йәки ситтән бәйләнеш тотоу Совет власына хыянат тип иҫәпләнергә тейеш»[134] - тип яҙған. «Вәлидовсылыҡ» менән көрәшеү башҡорт эшмәкәрҙәрен тотош «вәлидовсылыҡ»та, контрреволюцион милләтселектә ғәйепләр өсөн, колонизаторҙар мәнфәғәтендә башҡорт халҡын тағы ла нығыраҡ эҙәрләр өсөн уңайлы һылтауға әйләнгән. «Вәлидовсылыҡ»ҡа ҡаршы көрәш байрағы аҫтында ата шовинистар Башҡорт республикаһының дәүләт органдарын ҡабаттан тотош башҡорттарҙан таҙартырға, милли автономияның әҫәрен ҡалдырмай бөтөрөргә тырышҡан. РКП(б) Үҙәк Комитеты үҙ политикаһынан сығып, шовинистарҙың ярһыуын бер аҙ тыйырға мәжбүр булған. Шуға ҡарамаҫтан, «вәлидовсы» мөһөрө бер нисә тиҫтә йыл буйы башҡорттарҙы эҙәрләү эшендә төп ҡоралдарҙың береһе булып хеҙмәт иткән[*].

1921 йылдың яҙында власҡа үрләтелгән башҡорт эшмәкәрҙәре үҙәк хөкүмәт алдында һис кисекмәҫтән ас башҡорт халҡына ярҙам

---

[134] Образование..., 624-се бит.

[*] * РКП(б) Үҙәк Комитеты Әхмәт-Зәки Вәлидовты 1917—1920 йылдарҙағы башҡорт хәрәкәтенең идея етәксеһе тип һанаған. Һис һүҙһеҙ, Вәлидов башҡорт халҡының милли азатлыҡ көрәшенә тоғро хеҙмәт иткән һәләтле кеше булараҡ, ҙур абруй менән файҙаланған һәм башҡорттарға уның тәьҫире көслө булған. Ләкин был тәьҫир милли хәрәкәткә тулыһынса йүнәлеш бирмәгән. Вәлидов башҡорт милли хәрәкәтендә туранан-тура ҡатнашыу менән бергә үҙ күңелендә унан киңерәк план йөрөткән. Башревкомдың төрлө ваҡытта Башҡорт Ҡырғыҙ республикаһы, Башҡорт-Ҡырғыҙ ғәскәре төҙөү хаҡында ҡуйған тәҡдимдәре Төркөстан тураһындағы хәстәрлектәре ғәмәлдә Вәлидовтан сыҡҡан, уның планын сағылдырған. Вәлидов Мосолман Шәрҡендә тиң хоҡуҡлы төрлө төрки халыҡтарҙың демократик федератив республикаһын төҙөү хаҡында хыялланған (был республикаға үҙ милли территорияһы булмаған көйө бөтә мосолманға баш булырға тырышҡан татарҙы ул индермәгән). П.М.Мостовенко әйтмешләй, Башревкомдағы башҡа башҡорттарҙы берләштергән идеяның Вәлидов идеяһы менән уртаҡлығы булмаған. Башҡорттоң бүтән политик эшмәкәрҙәре башҡорт милли мәнфәғәте, башҡорт автономияһы өсөн генә көрәшкән (П. Мостовенко. Аталған мәҡәлә, 113-сө бит). Шул сәбәпле Башревком һәм РКП(б) өлкә комитеты ағзалары эш ташлап киткәс, Вәлидовтың Көнсығышҡа таралып, Төркөстан халыҡ хәрәкәтенә ҡушылырға тигән тәҡдиме булһа ла, Башҡортостандан китмәгән (бер нисә яҡын иптәшенән башҡаһы) һәм бер аҙ ваҡыттан кире ҡайтҡан. Ул замандағы башҡорт эшмәкәрҙәрен «вәлидовсы» тип атау һәм «вәлидовсылыҡҡа» бәйләү дөрөҫ түгел, улар башҡорттоң үҙ милли эшмәкәрҙәре булған. Башҡорттоң үҙ милли мәнфәғәте һәм идеяһы өсөн көрәшкән.

итеү мәсьәләһен ҡуйған. Ләкин Үҙәк ашыкмаған. Ул арала революциянан һуңғы фажиғәле дәүерҙең ин яман, иң ҡот осҡос аслыҡ йылы килеп еткән.

Башҡорттар аслыҡтан һәм аслыҡ тифынан 1919 йылдан бирле ҡырылған. 1921 йылдың йәйендә лә уларҙың хәле сикһеҙ ауыр булған. РКП(б) өлкә комитеты менән БашЦИК төҙөгән комиссия шул йәйҙә Үсәргән кантонын тикшереп, «астан һәм аҙыҡтың (төрлө суррогаттың) туҡлыҡһыҙлығынан ярлылар себен урынына ҡырыла», тип яҙған. Дүрт йыл буйы туҡтауһыҙ талау һәм эҙәрләү башҡортто бөтөнләй малһыҙ, һаҡлыҡ аҙыҡһыҙ иткән. Шуға күрә 1921 йылғы әҙәм күрмәгән яман ҡоролоҡ башҡорт башына ҙур һәләкәт килтергән. Башҡорт халҡы тәғәм ризыҡһыҙ шыпа ас ҡалған. Башҡортто талап байыған рус, татар һәм башҡа күскенселәр ундай хәлгә төшмәгән, уларҙың малы ла, һаҡлык игене лә булған. Ас халыҡты ҡотҡарыр өсөн ойошторолған «Башкирпомгол»дың ярҙамы диңгеҙҙәге бер тамсы хәтле генә булған. Хәлдең иҫ киткес ауырлығы, үҙәктән аҙыҡтың бик әҙ килеүе, аҙыҡ тейәгән вагондарҙың насар йөрөүе (уларҙың база һәм станцияларҙа оҙаҡ туҡтап тороуы, «Башреспубликаға оҙаҡ килеп етә алмауы») хаҡында 1922 йылдың 16—21 ғинуарында булған V Башҡортостан РКП(б) конференцияһында ла әйтелгән. Шундай «тиҙлек» менән килгән, тамсы хәтле генә ярҙам ғәҙел итеп бүлгәндә лә башҡортто үлемдән ҡотҡара алмаҫ ине. Ләкин ғәҙел итеп булеү ҙә булмаған. Рус һәм татарҙар, элекке «Башкирпомощь»тағы кеүек, «Башкирпомгол»дың бөтә бүлексәһенә эйә булып, килгән аҙыҡтың күп өлөшөн үҙҙәре файҙаланған. Аслыҡтан ҡотҡарыр өсөн ойошторолған приюттарҙа башҡорт балалары ҡырылып үлгән, иҫән ҡалғандары бик һирәк булған. Шул иҫән ҡалғандарҙың береһе, Ғәли ағай Ишбулатов, үҙенең иҫтәлектәрендә нисек тәүҙә үҙ кантонындағы, шунан Өфөләге приютта булыуы, приютта эшләгән һәм инспектор булып килгән татарҙарҙың бай табын ҡороп типтереүҙәре, ә шул саҡта балаларҙың бәҙрәфтән сей картуф ҡабығы йыйып, яҙ көнө ишек алдында шытҡан һәр йәшел үлән башын сүпләп ашауҙары һәм иҫәпһеҙ үлеүҙәре хаҡында яҙған.

Яҙға сыҡҡас тә аслыҡ бөтмәгән. 1922 йылдың 27 июнендәге бер хәбәрҙә: «Тау яғындағы ауылдарҙың хәле ҡот осҡос яман. Ас кешенең иҫәбе юҡ. Тотош өй эсе, тотош ауылы менән астан үләләр. Кеше түгел, күләгәләр генә йөрөй»[135] тип яҙылған. 1922 йылдың йәй башында ғына Америка ярҙам адмнистрацияһының (АРА-ның) хәстәре менән хәл арыуланған. Башҡорттар был ярҙамды онотмай, улар үҙ йөрәгендә Америка халҡына мәңгелек рәхмәт һаҡлай.

[135] Образование ..., 660-сы бит.

## 6. АҪАБАЛЫҠ ХОҠУҒЫНЫҢ БӨТӨРӨЛӨҮЕ. БАССР СИГЕНЕҢ КИҢӘЙТЕЛЕҮЕ

Был йылдарҙа башҡорт халҡы үҙ тарихының иң фажиғәле бер осорон кисергән. Был фажиғәнең әҙемтәһе хатта XVIII быуатта башҡорт яуҙарын баҫтырған саҡтағы ҡот осҡос хәлдәр менән дә сағыштырғыһыҙ булған. 1917 йылда башҡорттоң һаны кәм тигәндә 1 400 000 кеше булған, ә 1920 йылғы иҫәп буйынса шул һандан 1 186 000 кеше ҡалған. Тимәк, 1917—1920 йылдарҙа ғына төрлө башкиҫәрҙәр үлтереп, һуғыштарҙа һәләк булып, астан һәм аслыҡ тифынан үлеп, халыҡ һаны 200 меңдән артыҡ кешегә кәмегән. 1921— 1922 йылғы аслыҡта кәметелгән рәсми мәғлүмәт буйынса 1920 йылғы һандың 40 проценты, ә асылда 45—50 проценты үлгән. 1922 йылдың көҙөнә 600 меңдән әҙ генә күберәк башҡорт иҫән ҡалған. 1917—1922 йылдар эсендә бөтәһе 800 мең, йәки 57 процент башҡорт һәләк ителгән (шул осорҙа әҙ-мәҙ тәбиғи үҫеш булғанын иҫәпкә алғанда, был процент артығыраҡ булып сыға). Быға ышанырлыҡ та түгел һымаҡ, ләкин был дөрөҫ. Ҡот осҡос фажиғә йылдарын башынан үткәргән ололар ҙа шул дәүерҙә башҡорттоң яртыһынан күбеһе үлгәнен һөйләй. Улар халыҡтың шул хәтле ҡазаларҙан яртылаш ҡырылғанына түгел, ә тотош үлеп бөтмәй тороп ҡалғанына ныҒыраҡ аптырай. Беҙҙең заманда Белоруссияның һәр дүрт кешеһенең береһен үлтергән Гитлер фашистарын ҡәһәрләйҙәр, ләкин революциянан һуңғы тәүге биш йылда ғына һәр ике башҡорттоң береһе түгел, унан да күберәге юҡ ителгәнен иҫкә лә алмайҙар. Был ҡырғын ысын мәғәнәһендәге геноцид булған һәм ғәмәлдә Октябрь революцияһы менән совет власының башҡорт халҡына биргән иң ҙур нәмәһе шунан торған. Башҡорттарҙы колониаль, милли, социаль иҙгенлектән тотош ҡырып үлтереү юлы менән «азат иткәндәр».

Совет власы килтергән икенсе һәләкәт башҡорттоң ҡалдыҡ-боҫтоҡ бөтә ерен бер юлы тартып алыуҙан хасил булған.

Башҡорттар өс быуаттан артыҡ ҡанлы яуҙарҙа үҙ ерен йыртҡыс колонизаторҙарҙан яҡлаған, иҫәпһеҙ ҡорбандар биреп боронғо ерҙәренең бәләкәй генә киҫәгендә булһа ла, аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлап алып ҡалған. Был ер уларҙың хужалыҡ итеү урыны, тереклек сығанағы ғына түгел, ә милли булмышының билдәһе, милли территорияһының өлөшө булған. Аҫабалыҡ хоҡуғы башҡорттоң милли-социаль үҙенсәлеген билдәләп, юридик яҡтан уларға үҙенә бер төрлө ижтимағи хәл, ерле милли автономия биргән, милли берҙәмлек һәм милли тойғоно һаҡлауға нигеҙ булып торған. Башҡорттар бер ваҡытта ла үҙ ерен, үҙ территорияһын юғалтыу менән килешә алмаған, һәр ваҡыт ул ер һәм территорияны кире ҡайтарыу теләге менән янып йәшәгән. Рус революцияһын да улар шул теләк һәм өмөт менән ҡаршылаған. Ләкин революция уларҙың өмөтөн аҡламаған, ғәҙеллек килтермәгән, ә, киреһенсә, иҫ киткес көслө яңы күскенселәр тулҡынына юл асҡан, башҡорт еренең ҡалған хәтлемен яңынан йыртҡыстарса талау башланған. Автономиялы Башҡорт республикаһы төҙөлгәс, Башревком колониаль баҫҡынсылыҡ һөҙөмтәһен әҙ генә кәметер өсөн, исмаһам, 1914 йылдан һуң күсеп килгән халыҡты кире сығарырға уйлап ҡараған, ләкин уның ниәтенә колонизаторҙар һәм большевистик властар айбарланып ҡаршы күтәрелгән. Баҫып алған ерҙәрен бирмәҫ өсөн колонизаторҙар башҡортҡа ҡаршы тағы ла нығыраҡ ҡанлы террорҙы көсәйткән. «Башревком политикаһы рус крәҫтиәндәрен асыуландыра» тигән һылтау менән күрше губерния властары ла һөжүмгә ташланған. Шулай итеп, батша ваҡытындағыға ҡарағанда ла яманыраҡ колонизация башланған. Был колонизация «революцион» талаптар менән нигеҙләнгән. «Революцион» талаптар, йәнәһе, күп ер биләгән башҡортто «ерһеҙ» рус крәҫтиәне менән тигеҙләү маҡсатынан сыҡҡан. Ә ғәмәлдә башҡорттар күптән инде ҙур ер хужаһы булмаған, рустар һәм башҡа күскенселәр Башҡортостанда төп халыҡҡа ҡарағанда куберәк ер биләгән: күскенселәр йән башына 6,01 дисәтинә ер тотҡанда, башҡорттоң ере йән башына 2,98 дисәтинә генә тура килгән.

Бынан тыш, күскенселәрҙең күбеһе күрше губернияларҙа ла етәрлек ер биләгән [136].Шуға күрә ерҙе «тигеҙләү» талабы башҡортто ерһеҙләндереү, бүлдереү өсөн электән үткәрелгән колонизаторлыҡ политикаһының бер төрө генә булған.

Революцион законһыҙлыҡ шарттарында тулы ireклек алған яңы колонизаторҙар башҡорт ауылдарының ерҙәрен юлбаҫар һымаҡ тартып алған, ҡаршылыҡ күрһәткән башҡорттарҙы ҡорал менән ҡурҡытҡан йәки бөтөнләй юҡ иткән. Был йәһәттән бигерәк тә ҡыҙыл коммунарҙар, артелдәр, товариществолар һәм бай рус крәҫтиәндәре аяуһыҙ булған. Айырым община һәм крәҫтиәндәр ҡорал менән баҫып алмаған хәлдә лә, астан үлеү хәленә еткерелгән башҡорттоң ерен бөтөнләй буш ҡына хаҡҡа һатып алған йәки оҙаҡ мөҙҙәтле ҡуртымға алған. Баҫып алыу һәм йыртҡыстарса һатып алыу бик ҙур күләмдәргә еткән.

Шундай колониаль баҫҡынсылыҡ шарттарында 1920 йылдың 25 - 28 июлендә булған I Бөтә Башҡортостан Совет съезы, колонизаторҙар баҫып алған ерҙе ысын хужаларына ҡайтарып, ғәҙеллек эшләү урынына, башҡорттарҙың үҙ ҡатнашлығынан тыш, Совет власы исеменән ерҙе дәүләтләштергән һәм бер һелтәүҙә башҡортто бөтә ер биләү хоҡуғынан мәхрүм иткән. Башҡорттар үҙ еренең хужаһы түгел, ә «файҙаланыусыһы» ғына булып ҡалған. Ерҙе дәүләтләштереү менән колонизаторҙарҙың ҡулы сиселгән уларҙың юлбаҫарлығы законлаштырылған.

Башҡорт халҡы был хәлгә риза була алмаған. 1921 йылдың йәйендә республиканың власть башына үрләтелгән башҡорттар бөтә булған ҡаршылыҡты еңеп, башҡорт файҙаланған ерҙе талауҙан ҡотҡармаҡ булған. Уларҙың талабы буйынса, яңы һайланған РКП(б) өлкә комитетының 1921 йылғы 27 июнь пленумы «башҡорт ерен колонизация маҡсатында файҙаланыуҙы бөтөрөү, үҙ белдеге менән ер баҫып алған кешеләрҙең бөтә өй ҡаралтыһы һәм ҡорал - ҡорамалына конфискация яһау хаҡында» декрет сығарырға ҡарар иткән [137]. Биишевты етәксе вазифаһынан төшөрөп ташлағас, 1921 йыл аҙағында

---

[136] Образование ..., 668-сы бит.
[137] Образование ..., 612-сы бит.

РКП(б) өлкә комитеты секретары, аҙаҡтан БашЦИК председателе вазифаһын башҡарған Шәһит Хоҙайбирҙин пленум ҡарарын ғәмәлгә ашырыу бурысын үҙ өҫтөнә алған. Ул РКП(б) Үҙәк Комитетынан башҡорт ерҙәрен үҙ белдекле рәүештә баҫып алыуҙы, һәр төрлө күсеп ултырыуҙы, башҡорттарҙы бөлдөрә торған өҙгөслөктө тыйыу хаҡында директива сығартыуға өлгәшкән[138]. РКП(б) Үҙәк Комитетының директивалары 1922 йылдың 19 ғинуарында булған бөтә Башҡортостан РКП(б) конференцияһында хуплаған. Шул документтар һәм РСФСР үҙәк ер органдарының ҡарарҙары нигеҙендә БашЦИК һәм Башҡортостан халыҡ комиссарҙары советы 1922 йылдың 2 - 4 мартында 5, 6, 7 нумерлы бойороҡтар сығарған. 5-се нумер бойорок башҡорт ерҙәрен үҙ белдекле рәүештә баҫып алыуҙы бөтөрөргә, баҫып алған кешеләрҙе ерҙән ҡыуып, мөлкәтенә конфискация яһарға, революция осоронда (1917 йылдың 1 мартынан) баҫып алынған хеҙмәт ерҙәрен элекке хужаларына кире ҡайтарырға талап иткән. 6-сы нумер бойороҡ Башҡорт республикаһына үҙ белдеге менән күсеп килеү арҡаһында күп ауылдың халҡы 2 – 3, хатта 5 – 10 тапҡырға артҡанын билдәләп, 1914 йылдан 1918 йылдың 19 февраленә тиклем күскәндәрҙе ваҡытлыса йәшәй тип һанарға, 1918 йылдың 19 февраленән 1920 йылға тиклем күскәндәрҙе хеҙмәт ерҙәре менән файҙаланыуҙан мәхрүм итергә, 1921 йыл эсендә күскәндәрҙе һис кисекмәҫтән кире ҡыуып, мөлкәтенә конфискация яһарға талап иткән. 7-се нумер бойороҡта надел эсендәге ерҙе ваҡытлыса ҡуртымға биреү тәртибе ҡаралған. Башҡорт крәҫтиән хужалыҡтарының бөлгөнлөгөн һәм хәлһеҙлеген иҫәпкә алып, БашЦИК ҡуртымға ер алырға рөхсәт иткән, ләкин тик Башҡорт республикаһының граждандарына, бөтә общинаның ризалығы менән генә һәм ас башҡорттоң ауыр хәленән файҙаланған һәр төрлө өҙгөслөк булмағанда ғына һ.б[139]. Был бойороҡтар тамам бөлгөнлөккә төшкән башҡорт мәнфәғәтен яҡлауға йүнәлтелгән һәм башҡорт халҡының йә үлеү, йә ҡалыу мәсьәләһен хәл иткән. Ләкин бөйөк дәүләтселек маҡсатында

[138] Образование ..., 624-сы бит.
[139] Образование..., 661—667-се биттәр.

Башҡортостанды рус элементы менән тынҡысларға тырышҡан үҙәк Совет хөкүмәте был бойороҡтарҙы оҡшатмаған. Дәүләтләштергәндән һуң бөтә башҡорт еренең тулы хоҡуҡлы хужаһы булып алған ВЦИК шунда уҡ тиҙ генә БашЦИК менән Башҡортостан халыҡ комиссарҙары советының бойороҡтарын юҡҡа сығарған, улар урынына 1922 йылдың 20 июлендә ҡарар сығарған. Был ҡарар, 4 ғинуарҙағы директива кеүек үк, үҙ белдекле рәүештә башҡорт ерен баҫып алыуҙы ҡаты тыйған кеүек булһа ла, ерҙе файҙаланыу буйынса төп халыҡтың хоҡуғы менән 1918 йылдың 19 февраленә тиклем килгән күскенселәрҙең хоҡуғын тигеҙләгән, шул көндән һуңғы күскенселәрҙән ерҙе кире ҡайтарыу эшен ҡатмарлы бюрократия һәм суд мәшәҡәтенә әйләндергән һ.б.[140]. Ғәмәлдәге ауыр шарттарҙа ундай мәшәҡәт баҫып алынған ерҙе баҫҡынсылар ҡулына нығытып биреп ҡуйыуҙан башҡа бер нигә лә килтермәҫен ВЦИК яҡшы белгән. ВЦИК ҡарары закон булып киткән, ә колонизацияға ҡаршы көрәшеп маташҡан Ш. Хоҙайбирҙин юғары вазифанан төшөрөлгән. Бер юлы БашЦИК менән Башҡортостан халыҡ комиссарҙары советының юғарыла күрһәтелгән өс бойороғона ҡул ҡуйып, уларҙың дөрөҫлөгөн яҡлаған. Үҙәк вәкиле Е.П.Пестун да Башҡортостан республикаһынан саҡырып алынған. Ошо ваҡиғанан һуң башҡорт эшмәкәрҙәренә бер ваҡытта ла Башҡорт республикаһының экономик тормошонда үҙаллылыҡ күрһәтергә ирек ҡуйылмаған.

ВЦИК-тың 1922 йылғы 20 июль ҡарары БАССР ер кодексы менән нығытып ҡуйылған, был кодекс РСФСР-ҙың ер кодексына тотош тигәндәй тап килеп торған. Башҡорт халҡы колонизаторҙар баҫып алған үҙ ерен кире ҡайтарыр өсөн көрәшеү мөмкинлегенән мәхрүм ителгән. Һуңғы ваҡытта килгән колонизаторҙарҙы ғына булһа ла Башҡортостан республикаһынан сығарырға тырышыу «вәлидовсылыҡ» тип баһаланған һәм аяуһыҙ рәүештә эҙәрләнгән.

Бойондороҡһоҙлоҡ мәсьәләһе иң элек мөлкәт мәсьәләһенә, экономик бойондороҡһоҙлоҡ мәсьәләһенә бәйле. Шуға күрә, ни хәтле ғәжәп күренмәһен, башҡорт халҡы батша ваҡытында, үҙ еренең күпмелер өлөшөндә аҫабалыҡ

---

[140] Образование..., 671—673-сө биттәр

хоҡуғын һаҡлағанда, революциянан һуңғыға ҡарағанда бойондороҡһоҙораҡ булған. Халыҡ үҙ ерендә үҙенә үҙе хужа булып, билдәле бер кимәлдә үҙ тормошон үҙенсә ҡора алған. Ерҙе дәүләтләштереү халыҡтың ундай мөмкинлеген тотош юҡҡа сығарған. Ул һәр нәмәлә сикләнмәгән партия хөкөмө аҫтында ҡалған.

Башҡорттар һәм уларҙың етәксе эшмәкәрҙәре автономия өсөн көрәшә башлағандан уҡ ер мәсьәләһен төҙөләсәк Башҡорт республикаһының территорияһы менән тығыҙ бәйләп ҡараған. Үрҙә әйтелеүенсә, 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан шураһы башҡорт автономияһын иғлан иткәндә, Башҡортостан территорияһына Ырымбур, Өфө, Һамар һәм Пермь губернияларын индергән, шуның менән боронғо Башҡорт дәүләте биләгән бөтә территорияны кире ҡайтарыу маҡсатын ҡуйған. Ләкин граждандар һуғышы барышында, рустың революцион һәм контрреволюцион көстәре һәм шулай уҡ рус, татар һәм башҡа халыҡтарҙың килмешәктәре ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтеү сәбәпле Башҡорт хөкүмәте үҙ хөкөмөн бөтә территорияла урынлаштыра алмаған, Башҡортостан автономияһының идараһын Бәләкәй Башҡортостан сигенә генә таратыу хаҡында «Ваҡытлы ҡағиҙә» ҡабул итергә мәжбүр булған. Бәләкәй Башҡортостан эсенә Ырымбур, Бырауылыҡ, Орск, Верхнеуральск, Троицк, Шадринск, Силәбе өйәҙҙәренең башҡорттар күпселек халыҡты тәшкил иткән өлөштәре ингән. Килешеү төҙөгәндә Башҡорт хөкүмәтенең ошо территорияға ғына дәғүә итергә мөмкинлеге булған. Шуға ҡарамаҫтан, Башҡорт республикаһының территорияһын киңәйтеү мәсьәләһен Башревком һәр ваҡыт иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе тип һанаған һәм шул йүнәлештә саралар күргән. Башревком күргән сараға Өфө, Ырымбур губернияларының властары ажарланып ҡаршы сыҡҡан, был властарҙы үҙәк Совет хөкүмәте яҡлаған. Губерния властары үҙ ҡулындағы башҡорт ерен бирергә теләмәгән. Уларҙың көслө һөжүмен еңер көс тапмағас, Башревком ситтә ҡалған башҡорттарға мөрәжәғәт итеп, Башҡорт республикаһына ҡушылыу хаҡында юлларға үҙҙәренә тәҡдим иткән. Халыҡ был тәҡдимгә ҙур ихласлыҡ менән яуап биргән, төрлө волость һәм ауылдарҙан ғарызнамәләр яуа башлаған. Күрше губернияларҙың етәкселәре

Башревкомдың был ҡылығын контрреволюцион эш тип баһалаған. Улар үҙ мәнфәғәтенә яуап бирмәгән һәр нәмәне контрреволюцияға бәйләргә әҙер торған. Өфө губерния башҡарма комитеты 1920 йылдың 14 ғинуар телеграммаһында: «Башревком һәм уның комиссарҙарының тактикаһы һаман мулсылыҡ һәм килешһеҙлек төҫө алып тора»[141]- тип белдергән. Ул башҡорт ерен баҫып алып хакимлек иткән рустарҙы түгел, ә башҡорттарҙы баҫҡынсылыҡта ғәйепләгән. Ә шул уҡ ваҡытта, борондан башҡорт ере булған, башҡорттар йәшәгән Минзәлә өйәҙен халыҡтың теләге менән бөтөнләй иҫәпләшмәйенсә Өфө губернияһынан Татар АССР-ына ҡырҡып биргәндә, шул уҡ Өфө властары һис бер ризаһыҙлыҡ белдермәгән.

Тәүге Башревком киткәндән һуң да Башкорт республикаһының сиген үҙгәртеү мәсьәләһе онотолмаған. Эшкә үрләтелгән яңы башҡорт етәкселәренең инициативаһы менән БашЦИК республика территорияһын Оло Башҡортостан дәүмәленә тиклем киңәйтеү хаҡында ВЦИК-ка мөрәжәғәт иткән. 1921 йылдың 17 мартында ебәрелгән телеграмалла: Оло Башкортостан төҙөү Башреспубликаның бөтә административ һәм экономик шартын тамырҙан үҙгәртәсәк, әлеге көндә республиканан айырылған миллиондан артыҡ башҡорт уға ҡушыласаҡ, ул эре мәҙәни һәм административ үҙәк булып торған Өфөнө, ҙур тикер юл һәм һыу базаһын, промышленность һәм экономика йәһәтенә бер бөтөн территорияһына (көнбайышта – игенселек, көнсығышта – промышленность) эсенә аласаҡ, шул арҡала Баш республиканың эшен тейешле план буйынса үҫтереп, тиҙҙән экономик харабаны бөтөрөргә мөмкинлек буласаҡ[142], — тип әйтелгән.

1921 йылдын 10 майында БашЦИК президиумы менән РКП(б) өлкә комитетының берләшкән ултырышы Башҡортостан халыҡ комиссарҙары советының председателе Муллайән Халиҡов доклады буйынса, Златоуст

---

[141] Образование ..., 365-се бит.
[142] Образование ..., 230 –сы бит

ҡалаһы менән Златоуст завод районын, Магнитлы тауҙы, Ырымбур ҡалаһын, Өфө ҡалаһы менән бөтә Өфө губернияһын, Минзәлә өйәҙенең Татар республикаһына бирелгән башҡорт волостарын Бәләкәй Башҡортостанға ҡушыу тураһында ҡарар ҡабул иткән[143]. Ләкин был ҡарар үҙәк Совет хөкүмәте раҫламайынса законлы көс ала алмаған. Шунан һуң етәксе урындарҙағы башҡорттар ошо мәсьәләне бер нисә тапҡыр республика органдарының ултырыштарына ҡуйған һәм уның РКП(б) Үҙәк Комитеты кимәлендә ҡуҙғатылыуына өлгәшкән. Шуға ҡарамаҫтан, РСФСР-ҙың үҙәк хөкүмәте мәсьәләне хәл итергә ашыҡмаған. Тик 57 процент башҡортто үлтергәс, халыҡтың политик активлығын баҫҡас ҡына, ул Башҡорт республикаһының территорияһын киңәйтергә мөмкин тип тапҡан. Был аҙымға эткән төп сәбәп уның башҡорт теләген ихтирам итеүенән бигерәк, үҙ файҙаһын ҡарауынан булған, сөнки территорияһын киңәйтеү менән Башҡорт республикаһы бер бөтөн административ – территориаль берәмеккә генә түгел, бөтә дәүләттең хужалыҡ системаһында мөһим урын тотҡан бер ҙур экономик районға әйләнергә тейеш булған. Шундай фекерҙән сығып, 1922 йылдың 14 июнендә ВЦИК «Автономиялы Башҡорт Социалистик Совет Республикаһының сиген киңәйтеү хаҡында» декрет сығарған. Декрет буйынса Өфө губернияһы бөтөрөлөп, уға ингән Өфө, Бөрө, Бәләбәй һәм Златоуст өйәҙҙәре Башҡортостанға индерелгән, шулай уҡ Миәс ҡалаһы менән Миәс өйәҙенең өс волосы, Магнитлы тау районы Башҡортостанға бирелгән, ә Башҡорт республикаһының Ялан кантоны (хәҙерге Курган өлкәһендәге башҡорт райондары) Силәбе губернияһына күсерелгән. Ырымбур ҡалаһы менән Минзәлә өйәҙен декрет телгә алмаған, улар Башҡортостандан ситтә тороп ҡалған[144]. Шулай итеп, Оло Башҡортостан барлыҡҡа килгән, уның үҙәге Өфө ҡалаһында булырға тейеш булған.

---

[143] Образование..., 731-се бит.
[144] Образование ..., 738 – 739-сы биттәр.

Был декретҡа ҡаршы шунда уҡ бөтә Уралды үҙ колониаль биләмәһенә һанап өйрәнгән промышленность ойошмалары күтәрелеп сыҡҡан.

Шуларҙың талабы буйынса, ике айҙан һуң ВЦИК үҙ декретын үҙгәрткән һәм 17 августа Златоуст – Миәс завод райондарын ғына түгел, ә элекке Өфө губернияһының заводлы волостарын һәм хатта Бәләкәй Башҡортостандың Тамъян–Ҡатай кантоны менән Белорет ҡалаһын Силәбе губернияһына күсереп, яңы декрет ҡабул иткән[145].

Тәүге декретты үҙгәртеү башҡорттарҙа ҡаты ризаһыҙлыҡ уятҡан. 23 августа Ш. Хоҙайбирҙин етәкселегендәге БашЦИК президиумы «14 июнь декреты менән билдәләнгән Оло Башҡортостан сиген үҙгәртеүгә ҡырҡа ҡаршылыҡ белдерергә»[146] ҡарар иткән. Ләкин күп тапҡыр ҡаршылыҡ белдерһәләр ҙә, юллаһалар ҙа, үтенһәләр ҙә үҙәк хөкүмәт тәүҙә билдәләнгән сиккә кире ҡайтмаған, Ялан кантонын Башҡортостанға бирмәгән. Башҡорттар Тамъян–Ҡатай кантонын ғына һаҡлап алып ҡалған, унда ла Белорет һумының, I заводын Урал промышленность идараһына буйһондороп ҡуйғандар. Шулай итеп, Башҡорт республикаһының сиге Россияның хужалыҡ мәнфәғәтенән сығып һыҙылған, башҡорт теләге иҫәпкә алынмаған, тимәк РСДРП(б)-ның Бөтә Россия Апрель конференцияһында ҡабул ителгән, «үҙ идаралы һәм автономиялы өлкәләрҙең сиген хужалыҡ, тормош шарттарын һәм халыҡтың милли составын иҫәпкә алыу нигеҙендә урындағы халыҡ теләгәнсә билдәләргә», тигән программа талабы тупаҫ рәүештә боҙолған[147].

Башҡорт республикаһының сиген билдәләү быны менән бөтмәгән. 30-сы йылдарҙың уртаһына тиклем ул сик төрлөсә «дөрөҫләнгән» һәм туңәрәкләү һылтауы менән республиканың башҡорт халҡы йәшәгән ҙур райондары тартып алынған. Ахыры, был

---

[145] Образование..., 766—767-се биттәр.

[146] Образование..., 767—769-сы биттәр.

[147] КПСС в резолюциях... Изд. 8, т. 1, 448—449-сы бпттәр.

сик боронғо башҡорт еренең биштән бер өлөшөн генә эсенә алған бер рәүешкә килгән. Бөгөнгө сик эсендә Башҡортостан Республикаһының территорияһы 143600 кв.км тәшкил итә.

## 7. МИЛЛИ-ТЕРРИТОРИАЛЬ АВТОНОМИЯ УРЫНЫНА БИРЕЛГӘН МИЛЛИ-МӘҘӘНИ МӨМКИНЛЕКТӘР. «КУЛЬТУРА РЕВОЛЮЦИЯҺЫНЫҢ» ҺӨҘӨМТӘҺЕ

Өфө губернияһын ҡушҡас, Башҡорт республикаһында яңы, берләштерелгән власть органдары төҙөлгән. Ул органдарға бик һанаулы башҡорт ингән: РКП(б) өлкә комитеты президиумының 9 ағзаһынан береһе генә, БашЦИК президиумының 11 ағзаһынан дүртеһе генә, 11 халыҡ комиссарынан өсөһө генә башҡорттан ҡуйылған, шул иҫәпкә БашЦИК һәм Башҡортостан халыҡ комиссарҙары советының председателдәре ингән. Председатель урындары республиканың исеме өсөн генә башҡорттарға бирелгән, ғәмәлдә уның бер әһәмиәте лә булмаған, сөнки, берҙән, аппараттың күпселеген рус–татар тәшкил иткәндә, икенсенән, үҙәктең диктатураһы бик ныҡ көсәйгәндә, улар барыбер үҙенекен эшләй алмаған. Апрель конференцияһының, «киң өлкә автономияһы бирергә, юғарынан күҙәтеүҙе бөтөрөргә», тигән ҡәтғи резолюцияһы революциянан һуң шунда уҡ ситкә ташланып, тамам онотолған. Хәҙер большевиктар, киң автономия контрреволюцион сигенеш, ул халыҡтарҙы дошманлыҡҡа алып бара, тип раҫлай башлаған. 1921 йылдың мартында булып үткән X съезд резолюцияһында улар, хәрби һәм хужалыҡ эшенең берҙәмлеге генә айырым республикаларҙың да, бөтә федерацияның да хужалыҡ үҫешен тәьмин итә ала, тип ышандырырға тырышҡан. Республикаларҙан тартып алынған үҙ аллы экономик һәм политик хоҡуҡ урынына большевиктар милли азатлыҡ хаҡында ялған фекер уятып, тик күҙ буяй торған ярҙам тәҡдим иткән. Съезда «бөйөк рус милләтенә инмәгән халыҡтарға»: а) үҙ милли көнкүреш шарттарына ярашлы итеп совет дәүләтселеген үҫтерергә һәм нығытырға; б) урындағы халыҡтың тормошон һәм психологияһын белгән үҙ

кешеләренән туған телдә эшләнгән суд, администрация, хужалыҡ һәм власть органдары төҙөп үҫтерергә һәм нығытырға; в) туған телдә матбуғат, мәктәп, театр, клуб һәм ғөмүмән культура-ағартыу ойошмалары төҙөп үҫтерергә; г) урындағы халыҡтан тиҙләтелгән рәүештә квалификациялы эшселәр, бөтә идара өлкәһендә эшләрлек совет һәм партия эшмәкәрҙәре һәм иң элек мәғариф хеҙмәткәрҙәре әҙерләр өсөн туған телдә дөйөм һәм профессиональ-техник белем биреү курстары һәм мәктәптәре асып, киң селтәр үҫтерергә»[148] ярҙам итеү бурысы ҡуйылған. Башҡортостанда булдырылған ирекһеҙлек шартында съезд ҡуйған был бурысты ғәмәлләштереү өсөн бер ниндәй реаль нигеҙ ҡалмаған. Ләкин тышҡы эффектҡа алданған башҡорттар тәҡдим ителгән сараларҙы ҙур ирекҡә һанап, тотош үтәргә мөмкин тип уйлаған. Шуны үтәр өсөн улар башҡорт телен яҙыу һәм эшләү практикаһына индереү менән эш башлап ебәрмәксе булған.

XX быуаттың 20-се йылдар башына ҡәҙәр башҡорт теле һөйләшкәндә һәм халыҡ ижадында ҡулланылған. Яҙыуҙа башҡорттар кәм тигәндә XII быуаттан бире «төрки» телде йөрөткән. Был «төрки» тел 1905—1907 йылдарҙан һуң татар теленә нык яҡынлашып киткән, шуның өсөн ул башҡорттарҙың милли тойғоһона тейә башлаған һәм башҡорт зыялылары араһында яҙыуҙы башҡорттоң үҙ теленә күсереү теләге уянған. Ләкин башҡорттарға мәҙәни һәм әҙәби донъяла өҫтөнлөк алып торған татар ҡаршылығын еңеү ҙә, күп быуаттан килгән яҙма традицияны үҙгәртеү ҙә ауыр булған. Революция шауҡымы был ауырлыҡты еңергә ярҙам иткән.

РКП(б)-ның X съезд ҡарарына таянып, Башҡорт республикаһының РКП(б) өлкә комитет пленумы 1921 йылдың 27 июнендә политик (беренсе) секретарь итеп һайланған Әхмәҙулла Биишев инициативаһы менән «башҡорт телен рус теле менән бер ҡатарҙан дәүләт теле итеп ҡабул итергә һәм совет хеҙмәткәрҙәренә мотлаҡ рәүештә башҡорт теле менән башҡорт тарихын өйрәтергә; ҡыйыу рәүештә башҡорт иптәштәрҙе һәм

[148] КПСС в резолюциях … Изд. 8,т. 2, 252-се бит.

партияһыҙ киң ҡатламды совет һәм хужалыҡ торолошона ылыҡтырырға...» ҡарар сығарған. Шундай уҡ ҡарар пленумдан һуңғы II Бөтә Башҡортостан Совет съезында ла ҡабул ителгән[149]. Советтар съезының ҡарарын үтәү йөҙөнән 1921 йылдың 6 июлендә БашЦИК һәм Башҡортостан халыҡ комиссарҙары советы башҡорт телен ғәмәлләштереү хаҡында ҡарар ҡабул иткән. Ләкин ошо йүнәлештә башланған эш республикалағы киҫкен хәл һәм яман аслыҡ арҡаһында оҙаҡ ваҡытҡа өҙөлөп ҡалған. Был эш икенсе йылдың көҙөндә генә яңынан дауам иткән.

Эште дауам итеп, башҡорттар ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы бойомға атҡара башларға тейеш булған. Ләкин уны атҡарыу анһат булмаған сөнки башҡорт телен ғәмәлләштереү өсөн алдан бик ҙур эш башҡарыу талап ителгән. Шуның иң мөһиме ғәмәлдәге алфавит һәм орфографияны башҡорт теленә ҡулайлаштырыу, башҡорт телендә дәреслек һәм төрлө уҡыу әсбәбе әҙерләү, балаларҙы уҡытыу, газета һәм китап баҫыу, эш йөрөтөү һ.б. бик мөһим мәсьәләне хәл итеүгә ҡайтып ҡалған. Бөтә был эште үтәр өсөн Башҡорт республикаһының хөкүмәте 1922 йылдың сентябрь башында Мәғариф комиссариаты янында ғилми мәркәз ойошторол, һәр эш өлкәһе буйынса айырым комиссия төҙөгән. Хөкүмәт күргән саралар X съезд рухындағы VI Башҡортостан өлкә конференцияһында хупланған.

Башҡорт телен ғәмәлләштереү өлкәһендә башҡорттар башҡорт теленең функцияһын эш практикаһына таратыу мәсьәләһен алға ҡуйған, сөнки был өлкә тел өсөн, бигерәк тә дәүләт теле өсөн, иң төп урынды биләй. Башҡортостан шарттарында был мәсьәләне хәл итеү бик ауырға килгән һәм дәүләт әһәмиәтендәге мәсьәлә булғанға уны дәүләт кимәлендә закон сығарып ҡына эшләп булған. Шуға күрә Башҡортостан халыҡ комиссарҙары советы уны үҙ ҡулына алып, 1922 йылдың 21 сентябрендә махсус ҡулланма сығарған. Ҡулланма совет ойошмаларының ҡайһы бер халыҡ комиссариаттарынан һәм улар бойондороғондағы ойошмаларҙан башҡаһына «башҡорт телен кисекмәҫтән эш йөрөтөүгә индерергә», «эште мотлаҡ рәүештә рус

---

[149] Образование..., 611, 613-сө биттәр.

телендә лә, башҡорт телендә лә алып барырға»[150] ҡушҡан. Тулыһынса РКП(б)-ның X съезд ҡарарына яраштырып төҙөлгән был ҡулланма шунда уҡ съезд ҡарарының реаль түгел, тормошҡа ашырырлыҡ түгел икәнен асып күрһәткән: рәсми эштәрҙе бер үк ойошмала, рус милләте хакимлек иткән бер үк республикала ике телдә алып барыу мөмкин булмаған. Башревком ысын башҡорт хөкүмәте булғанда, ул үҙенең урындағы һәм үҙәктәге рәсми ойошмаларында башҡорт телендә эш алып бара алған. Ул саҡта Башревком президиумындағы ВЦИК вәкилдәре башҡорт телен белмәгәненә зарланған. Хәҙер инде хәлдәр ҡапма – ҡаршыға үҙгәргән, шуға күрә хөкүмәттең баяғы ҡулланмаһы бөтә идарала ҙур күпселекте тәшкил иткән рустарҙың ҡаты ҡаршылығына осраған. Шул ҡаршылыҡ РКП(б) өлкә комитеты президиумының, ҡарары рәүешендә ҡалҡып сыҡҡан. Президиум ултырышы 1922 йылдың 17 ноябрендә, БашЦИК председателе Ҡушаев менән Совнарком председателе Халиҡовтың ҡырҡа ҡаршы булыуына ҡарамаҫтан, ҡулланманы юҡҡа сығарған, тик күпселек халҡы башҡорттан торған волостарҙа ғына башҡорт телендә эш йөрөтөргә рөхсәт иткән һәм ҡулланманы ашығып үтәй башлаған яуаплы комиссариат хеҙмәткәрҙәрен «тәртипкә ултыртырға» [151] ҡарар иткән.

Был ваҡытта эш йөрәтөүгә туранан-тура ҡағылмаған башҡа өлкәлә ҙур ҡатмарлыҡ һиҙелмәгән. Ғилми мәркәздең ғилми – методик комиссияһы 1922 йылдың 26 сентябрендә тәүге ултырышын үткәргән һәм бөтә булған мәктәп дәреслеген яңы талап күҙлегенән ҡарап сығырға, яңы дәреслектәр әҙерләп баҫыу сараһын күрергә ҡарар иткән. Алфавит менән орфография реформаһын әҙерләү комиссияһы ла һәйбәт эшләгән.

Ғәрәп алфавитына нигеҙләнгән башҡорт алфавитының һәм башҡорт әҙәби яҙма тел орфографияһының проектын эшләү 1922 йылдың аҙағына тамамланған. Был проекттар бер нисә тапҡыр тикшерелеп, төҙәтелеп, 1924 йылдың ғинуарында

---

[150] Образование..., 708—711-се биттәр.
[151] Образование ..., 711-712-се биттәр.

Башҡорт республикаһының яуаплы хеҙмәткәрҙәр кәңәшмәһе тарафынан раҫланған.

Алфавит менән орфографияны эшләгәндә башҡорт әҙәби теленең диалекталь нигеҙе хаҡында ҡыҙыу бәхәстәр булған. Был мәсьәлә башҡорттар өсөн яңы булғанға бер аҙ ҡыйынлыҡ килтергән. Әммә башҡорт халҡының бик үҫешкән һөйләү теле һәм әҙәби яҡтан яҡшы эшләнгән эпик фольклор теле булыу арҡаһында был өлкәләге төп мәсьәләләр 1923 йылдын аҙағына хәл ителеп бөткән. Башҡорт әҙәби яҙма теленең нигеҙенә һөйләү телен һәм эпик фольклор телен һалыу менән бергә, башҡорттар нисә быуаттар буйы яҙма тел хеҙмәтен үтәп, лексик, грамматик, стилистик нормалары камиллашып бөткән «төрки» яҙма телде лә ситкә ҡуя алмаған. «Төрки» телдәге күп быуатлыҡ яҙыу практикаһынан, уның ҡатмарлы фекер йөрөшөн сағылдырырлыҡ синтаксик һәм стилистик алымдарынан, тейешле кимәлдә эшләнгән терминологияһынан башҡа шундай ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бөтә талапҡа яуап бирер яҙма тел булдырыу мөмкин булмаҫ ине.

Башҡорт мәҙәниәте, иң элек әҙәбиәте, башҡорт яҙма телен ғәмәлләштереү менән татар мәҙәниәтенең баҫымынан ҡотолған. Ләкин был хәл башҡортто татар дошманлығыпан ҡотҡармаған. Олоһонан кесеһенә тиклем бөтә татар башҡортто данлы тарихы, үҙ теле, милли үҙенсәлеге һәм милли ғорурлығы булған өсөн һәм ғөмүмән донъяла йәшәгән өсөн мәңге дошман күргән һәм шул дошманлыҡ һис тә бөтмәй торған ажарлы бер үскә әйләнгән. Ул дошманлыҡ башҡорттарҙың баш бирмәй быуаттар буйы татар хакимлегенә ҡаршы тынғыһыҙ көрәш алып барған заманынан башланған, шунан бирле татарҙар һаман башҡортто кәм күреп, һаман буйһондорорға, йоторға тырышып ятҡан. Был тырышлыҡта тарихи хәлдән сығып, татарҙар һәр төрлө сара ҡулланған. Октябрь революцияһына тиклем улар башҡорт яуҙарын баҫтырыуҙа, Башҡортостанды колонизлауҙа туранан – тура ҡатнашып үҙ маҡсатына ирешмәк булған. Революциянан һуң татарҙар Урал – Волга штаты, Татар – Башҡорт республикаһы төҙөп, бер дәүләт ҡоролмаһы эсендә башҡортто сәйнәп йоторға уйлаған. Ул ниәттәре барып сыҡмағас, татарҙар үҙҙәрен Башҡорт республикаһының төп халҡы тип пропагандалай башлаған һәм

халыҡ аңына «татар – башҡорт», «татар-–башҡорт теле» тигән төшөнсәләрҙе һеңдереп, башҡорт менән татар айырмаһын юйырға, башҡорт тормошоноң һәр өлкәһенә үтеп, мөмкин тиклем бөтә нәмәне татарлаштырырға тырышҡан. Шуға күрә лә РКП(б) өлкә комитеты секретары Р.А.Восканов 1923 йылдың 12 декабрендә булған яуаплы хеҙмәткәрҙәр кәңәшмәһендә: «Ошо ултырышта «татар-–башҡорт» хаҡындағы һүҙҙе бөтөрөргә кәрәк. Беҙҙә башҡорт бар, татар бар. Ошоно иҫтә тотоуығыҙҙы һорайым, иптәштәр. Юҡһа, ҡайҙа барһағыҙ ҙа, һәр ерҙә – «татар-башҡорт»[152], – тип әйткән. Ләкин быны менән генә «татар – башҡорт» тип һөйләү бөтмәгән. Республикалағы төп халыҡтың, йәки «татар-башҡорт милләтенең» вәкиле булып, татарҙар урындағы халыҡтан кадрҙар әҙерләүгә, йәғни «коренизация»ға, йүнәлтелгән партия политикаһын үҙ файҙаһына борған. Улар уҡыу йорттарында, идара аппаратында, административ ойошмаларҙа, завод – фабрикаларҙа башҡорттар өсөн билдәләнгән урынды тотош тигәндәй үҙҙәре ала башлаған. Иң белемле, иң актив халҡы ҡыҙыл террор тарафынан бөтөрөлгән, «вәлидовсылыҡ»та ғәйепләп юҡ ителгән башҡорттарҙың кеше һаны ла, һөжүм кәсө лә татар менән ярышыр кимәлдә булмаған. Туранан–тура бөтә позицияны баҫып алыуҙан тыш, татарҙар башҡортто әлеге аҫтыртын юл менән дә ҡыҫырыҡлаған: улар кәрәк саҡта башҡорт яҙылып, башҡорт исеменән идара аппараттарын, уҡыу йорттарын билдәгән. Рус етәкселегендәге хөкүмәт органдары был эшкә юл биргән һәм нигеҙҙә татар иҫәбенә «коренизация» үткәргән. 1925 йылдың башында булған IX Башҡортостан партия конференцияһы үҙенең резолюцияһында: «Урындағы төрки халыҡтарҙы тәшкил иткән башҡорт менән татарҙарҙың хужалыҡ һәм мәҙәни – политик үҫеше төрлө кимәлдә булыу арҡаһында йыш ҡына партияның милли политика саралары тигеҙ ғәмәлләштерелмәй... Төп башҡорт халҡының мәҙәни – политик үҫешен тиҙләтеү маҡсатында партияның бөтә тейешле сараһын... татар

---

[152] Партархпв Башобкома КПСС, ф. 122, оп. 2, д. 128, лл. 17—24.

халҡына ла, башҡорт халҡына ла тулыраҡ таратырға кәрәк» [153], — тип яҙған. Тимәк, конференция ғәҙелһеҙлекте башҡорттоң «артталығы» менән аңлатып, татарҙарҙың агрессив эшен туҡтатырға талап итмәгән, ә тигеҙләү мәсьәләһен генә ҡуйған. Ләкин был да ҡоро һүҙ булып ҡалған. Ғәмәлдә дөйөм «татар – башҡорт» күрһәткесе артына башҡорттоң эшкә лә, уҡыуға ла бик аҙ алынғанын йәшергәндәр. Хатта башҡорттар буйынса айырым мәғлүмәт биргәндә лә ысын хәл асыҡланмаған. Шундай уҡ ғәҙелһеҙлек мәктәп эшендә лә хөкөм һөргән.

РКП(б) өлкә комитет пленумы 1923 йылдың июлендә урындағы башҡорт мәктәптәренең бик насар хәлдә булғанын билдәләп, башҡорт уҡытыусылары әҙерләү һәм башҡорт телендә дәреслектәр төҙөү кәрәклеген иғтибарға алған. Шундай уҡ ҡарарҙар артабан да ҡабул ителгән. Шул йүнәлештәге эш һөҙөмтәһендә 1924 – 1925 йылдарҙа башҡорт телендә «Әлифба» һәм төрлө фән буйынса 13 дәреслек баҫып сығарылған. Ләкин татар уҡытыусылары «дөйөм милли тел» тип, башҡорт мәктәптәрендә бөтә фәнде татар телендә алып барған. 1927/28 уҡыу йылында шундай мәктәптәр башҡорт башланғыс мәктәптәренең яртыһын тиерлек тәшкил иткән, 30-сы йылдар башында ла улар кәм булмаған. Татарҙар, шул иҫәптән яуаплы хеҙмәткәрҙәр, башҡорт теле киләсәкһеҙ, тигән фекер тараткан, уны ғәмәлләштереү эшенә ҡулынан килгәнсә тотҡарлыҡ яһаған. Башҡорт халҡы кадрҙар һәм бигерәк тә уҡытыусылар етмәү арҡаһында татар һөжүмен кире ҡағыр көс таба алмаған.

Уҡытыусылар менән тәьмин итеү һәм балаларҙы мәктәпкә ылыҡтырыу буйынса башҡорттар Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың бөтәһенән дә артта булған. Ваҡыты менән уҡытыусы һәм уҡыусы һаны хатта кәмеп киткән. Мәҫәлән, 1923/24 уҡыу йылында башҡорт башланғыс мәктәптәрендә 475 уҡытыусы һәм 23461 уҡыусы булған булһа, 1925/26 уҡыу йылында 453 уҡытыусы, 20138 уҡыусы ҡалған. Шул уҡ ваҡытта рус һәм татар мәктәптәрендә уҡытыусы һәм

[153] Резолюция областных конференций Башкирской партийной организации и пленумов обкома КПСС. Уфа , 1959, 238-240-сы биттәр.

уҡыусылар һаны бик ныҡ артҡан[154]. Педагогик техникумдарҙа башҡорт уҡытыусылары рус менән татарҙыҡына ҡарағанда 2 – 3 тапҡырға кәм әҙерләнгән. Революцияға тиклем Өфө губернияһында уҡый – яҙа белгән кеше һаны буйынса рустарҙан өҫтөн торған башҡорттоң 1925 йылда 100 кешегә өс кенә уҡыусыһы булған, ә шул уҡ йылда СССР-ҙа бөтә төнъяҡ һәм көнсығыш төбәктәре менән бергә һәр 100 кешегә 7,1 уҡыусы тура килгән. 1927/28 уҡыу йылында Башҡорт республикаһының II баҫҡыс (5 – 7 синыф) мәктәптәрендә уҡыусы башҡорттар 11 процент, татарҙар 19 процент, рустар 60 процент тәшкил иткән[155]. Башҡортҡа ҡарата асыҡтан-асыҡ йәки йәшерен рәүештә татар ғына түгел, унан да яман бөтә рус халҡы дискриминация алып барған.

Граждандар һуғышы ваҡытында башҡорт автономияһына ҡаршы аяуһыҙ көрәшкән, халыҡты тотош һыпырып ҡырған рус шовинистары 1922 йылдан һуң башҡорттоң милли хоҡуҡтарын атҡарыуға, башҡорт кадрҙарын әҙерләү һәм үрләтеүгә, башҡорт телен ғәмәлләштереүгә, башҡорт мәктәптәрен үҫтереүгә бөтә көсөн һалып ҡаршылашҡан. Рустың етәксе эшмәкәрҙәре, беҙгә милләт түгел, промфинпланды үтәү кәрәк, тип республика хөкүмәтенең милли политика сараларына юрамал аяҡ салған. Рустарҙың татар менән берлектә башҡортҡа ҡаршы алып барған актив эше арҡаһында республиканың дәүләт аппаратында башҡорт хеҙмәткәрҙәренең һаны барған һайын кәмегән: 1927 йылда улар 7,9 процент булһа, 1928 йылда 7,7 процент, 1930 йылда 6,3 процентҡа тороп ҡалған. 1936 йылға тиклем БашЦИК менән Башҡортостан халыҡ комиссарҙары Советының һәр ҡарарында башҡорт телен хеҙмәт практикаһына һәм эш йөрөтөүгә индереү хаҡында әйтелә килгән, ләкин рус шовинистары бойкот белдереү сәбәпле, башҡорт телендә эш алып бара башлаған һанаулы ғына волость һәм ауыл советы ла 30-сы йылдар башына тиклем тотош рус теленә

[154] ЦГА БАССР, ф. Р—798, оп. 1, д. 1576, лл. 12, 13.

[155] ЦГА БАССР, ф. Р—798, оп. 1, д. 1840, л. 8.

күсергә мәжбүр булған. Рустар эш – хеҙмәт өлкәһендә башҡорт телен йөрөтөүгә бөтөнләй юл ҡуймаған. Ысын хәл шулай булған. Х партия съезының экономик һәм политик хоҡуҡ урынына биргән милли азатлыҡтары әлеге хоҡуҡтың, йәғни ысын азатлыҡтың, булмауы арҡаһында ғәмәлгә ашмаç буш һүҙ булып ҡалған. Шуға ҡарамаçтан, 1929 йылдың декабрендә ВКП(б) өлкә комитетының беренсе секретарь итеп ҡуйылған йәһүд Я.Б.Быкин һәм 1931йылдың ғинуарында өлкә комитетының икенсе секретары итеп үрләтелгән башҡорт А.Р.Иçәнсурин башҡорт мәсьәләһенә ысын әһәмиәт бирә башлаған. 1931 йылдың 20 июлендәге ВКП(б) өлкә комитетының IV пленумында юғарыла күрһәтелгән бөтә факт ҡаты тәнкитләнгән. Пленум Башҡортостанда рус һәм татар шовинизмының ныҡ көсәйеүе хаҡында айырым баçым менән әйткән. Быкин, Башҡортостанда башҡорттар ғына төп милләт, тип асыҡлыҡ индереүҙе талап иткән һәм рус шовинистары менән түгел, татарҙың оло дәүләтселек тенденцияһы менән дә ҡаты көрәшергә кәрәк икәнен күрһәткән. Бөйөк дәүләтселеккә ҡаршы көрәшеп, ВКП(б) өлкә комитеты төп милләттең хәлен нығытыр өсөн көс һала башлаған, башҡорттан промышленность кадрҙары, совет һәм партия хеҙмәткәрҙәре әҙерләү эшен йәйелдергән, ғөмүмән башҡорт йәмғиәтен үçтерергә тырышҡан. Быкин 1930 йылға тиклем башҡорт араһынан йәш кадрҙар әҙерләү эшенә ҡул да тейҙерелмәгәнен билдәләп, шул кадрҙарҙы үçтерергә керешкән[156]. Быкин менән Иçәнсуриндың тырышлығы бушка китмәгән. Был бигерәк тә мәҙәниәт өлкәһендә ныҡ һиҙелгән.

20-се йылдар башынан бөтә илдә культура революцияһы үткәрелгән. Был көслө хәрәкәткә башҡорттар ҙа йәлеп ителгән. Ләкин иçке донъяны тотош ҡыйратып, яны тормош ҡорорға тигән ярһыу өндәмәләр бик насар һөҙөмтәгә, ҙур юғалтыуҙарға килтергән.

Башҡорттоң бик боронғо мәҙәни традицияһы булғаны хаҡында үрҙә яҙылды. Шуға өçтәп әйткәндә, Октябрь революцияһына тиклем

---

[156] Газ. «Советская Башкирия», 28 февраля 1988- г.

Башҡортостандың мәҙрәсәләре бик бай китапханалар тотҡан. Унда дини китаптарҙан башҡа, көнсығыш ғалимдарының төрлө фән өлкәһенә ҡараған бик күп хеҙмәте, көнсығыш, шул иҫәптән башҡорт, яҙыусыларының әҙәби әҫәрҙәре һаҡланған. Хатта матур итеп тышлап эшләнгән китаптар үҙе лә гүзәл мәҙәни ҡомартҡы булған. Башҡорт араһында шул китаптарҙы ятраҡан, бөйөк көнсығыш ғалимдарының ғилми хеҙмәттәрен, грек философтарының тәғлимәттәрен, атаҡлы көнсығыш әҙиптәренең әҫәрҙәрен яҡшы белгән белемле кешеләр күп булған. Культура революцияһы, әгәр ул киҫкен үҫеш мәғәнәһендә кәрәк булған икән, бөтә яңылыҡты ошо быуаттар буйы тупланған мәҙәни нигеҙгә ҡоророға, халыҡтың рухи донъяһын тәшкил иткән байлыҡҡа таянырға тейеш ине. Ләкин улай булып сыҡмаған. Шаулы өндәмәләрҙән шашҡан наҙан йәштәр бөтә нәмәне емергән. Иҫкенән ваз кисеп, улар үҙ ата – бабаһының күп быуатлыҡ хеҙмәтен, йыйған аҡылын юҡ иткән, үҙ халҡындағы быуаттар бәйләнешен, быуындарҙың рухи туғанлыҡ ебен һуғып өҙгән. Был вәхшилек халыҡ йөрәгендәге тарихи хәтерҙе, милли тойғоно бөтөрөү өсөн юрамал эшләтелгән. Шул культура революцияһы исеменән 1927 – 1931 йылдарҙа ғәрәп алфавитынан латинға күсеү мәҙәни мираҫты айырып, тамам онотоуға дусар иткән аҙаҡҡы һыҙыҡ булған. Латин алфавиты, ни хәтле генә уңайлы булмаһын, элеккегә кәртә ҡуйған. Йыйған мәҙәни хазинаны яңы белем менән байытып, ысын үҫешкә барыу түгел, ә көнсығыш мәҙәниәтенән ҡапыл көнбайышҡа һикереү, шуның менән халыҡты бер нисә быуатҡа артҡа ташлау килеп сыҡҡан. Мәҙәни мираҫһыҙ ҡалған быуын быуаттарҙан килгән ижад күнекмәһенә генә таянып, бөтә нәмәне өр – яңынан өйрәнә, мәҙәниәтте ҡабаттан үҫтерә башлаған.

Бөтә булған ошо ҡатмарлыҡ һәм ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, 30-сы йылдар уртаһына хәтле башҡорттар мәҙәниәт өлкәһендә күҙгә күренерҙәй уңышҡа өлгәшкән: мәктәп йәшендәге бөтә бала башланғыс мәктәпкә йәлеп ителгән, әҙәбиәт менән сәнғәт күпмелер үҫеш алған, китап нәшриәте, ваҡытлы матбуғат барлыҡҡа килгән һ.б. Был уңыштар совет власының мәҙәниәткә биргән мөмкинлектәренән генә түгел, ә башҡорттарҙың һис

нәмәгә ҡарамай ҙур дәрт һәм тырышлыҡ менән эшләү һөҙөмтәһе булған. Уңыштар менән илһамланған халыҡ киләсәк көнгә өмөт менән ҡараған. Ул бәләкәй генә еңеллек ҡәнәғәт булып, Башҡорт АССР-ының менән ысын милли дәүләт төҫөн алырына ышанған. Ҡот осҡос ҡазаларҙы башынан үткәреп, халыҡ иркен тын алып ҡалған һәм бөтә нәмәне яҡты итеп күргән. Ләкин был заман оҙаҡҡа бармаған. 1937 йыл килеп еткән.

## 8. ҠАНЛЫ РЕПРЕССИЯ ЭҘЕМТӘҺЕ.
## РУСЛАШТЫРЫУ СӘЙӘСӘТЕНЕҢ ҺӨЖҮМЕ

Һуңғы ваҡытта, Сталинды тәнҡитләү көсәйгәс, совет публицистары сталинизмды гитлеризм менән сағыштыра башланы. Был оҡшашлыҡ бер ҙә буштан түгел, уның нигеҙендә фанатизм ята. Фанатизмдың шәхес культынан, аяуһыҙ репрессиянан, демократияның бөтә принцибын һалып тапауҙан башҡа булыуы ла мөмкин түгел. Сталин культы һәм уның бөтә эҙемтәләре иң көслө, иң ҡанһыҙ бер фанатизм төрө булған большевизмдың тәбиғи үҫеш һөҙөмтәһе.

Башҡортостанда репрессия НКВД органдары тарафынан «иң мөһим урындарҙа оялаған халыҡ дошмандарының – буржуаз милләтселәрҙең, троцкистарҙың, фашист диверсанттарының, шымсы һәм кеше үлтереүселәрҙең...» – фаш ителеүенән башланған. Быкин етәкселегендәге ВКП(б) өлкә комитеты ҡоторонған баш-баштаҡлыҡ һәм законһыҙлыҡтан нишләргә лә белмәгән. Ахыры Быкин был эште ғәҙеллек менән тикшерергә үтенеп, Сталинға хат яҙған. Өфөгә Сталиндың иң яҡын ҡуштаны А.А.Жданов килгән, уның ҡулында Партия контроль комитеты ағзаһы Сахьянованың ялған ошағы булған. Жданов шунда уҡ ВКП(б) өлкә комитеты пленумын йыйып, алдан әҙерләнгән ҡарарҙы уҡыған: «Үҙәк Комитет Быкин менән Иҫәнсуринды эшенән алырға ҡарар итте...». Быкин менән Иҫәнсуринды, пленум бөткәнен дә көтмәй, шул минутта алып та киткәндәр. (Бер нисә ай буйы аяуһыҙ язалап, яуап алғандан һуң уларҙы атҡандар.) Шул көндән һуң ҡулға алыу, атыу тағы ла яманыраҡ шашҡан. Башҡорт халҡына ҡарата был репрессия һуңғы йылдарҙа үҫеп сыҡҡан башҡорт хеҙмәткәрҙәрен, партия һәм дәүләт эшмәкәрҙәрен юғарынан түбәнгә тиклем тотош юҡ итеү, бөтә башҡорт интеллигенцияһын (ғилми хеҙмәткәр, уҡытыусы, яҙыусы, журналист, артист һәм башҡаларын) ҡалдырмай бөтөрөү рәүешен алған.

Репрессия ябай кешеләргә лә киң таратылған. Башҡортостанда совет власына ҡаршы ойошҡан 60 йәшерен отряд бар, имеш, тигән ялған хәбәр нигеҙендә республиканың көнсығыш районларынан 3 меңдән артыҡ шыпа ғәйепһеҙ крәҫтиәнде ҡулға алып үлтергәндәр. Ошаҡсылар һәм яласыларға бик ҙур иркенлек асылған. Татар шовинистарына башҡортто бөтөрөү өсөн уңайлы замана килгән. Улар башҡорт өҫтөнән бысраҡ ҡағыҙ яуҙыра башлаған. Бер ҡәбәхәттең бер ялаһы кешене тотоп, аяуһыҙ туҡмап, язалап, «тройка» тигән нәмәнең хөкөмөнә ҡуйып, 15 минут эсендә йә атырға, йә күп йыллы каторгаға ебәрергә ҡарар сығарыр өсөн етерлек дәлил тип ҡаралған. Иң яуыз яласыларҙың береһе, Башҡортостанда йәшәгән татар шағиры Сәйфи Ҡудаш: «Һаулығымдың насарлығына ҡарамаҫтан (хәҙер ул йөҙгә етеп килә), бер үҙем 26 «халыҡ дошманын» фаш иттем», – тип һуңынан яҙыусылар союзының ултырышында күкрәк һуҡҡан. Ҡәбәхәт бәндәләрҙең ялаһынан унарлаған мең кеше юҡ ителгән*. Репрессияға эләккән бөтә башҡортто «буржуаз милләтсе» тигән ғәйеп тағып, «халыҡ дошманы» иткәндәр «Халыҡ дошмандарының» исемен телгә алыу тыйылған, телгә алған кешенең үҙенә үлемесле ҡурҡыныс килтергән. «Халыҡ дошманы» ителгән ғалим һәм яҙыусыларҙың хеҙмәттәре фәндән, әҙәбиәттән һыҙып ташланған, баҫылмаған әҫәрҙәренең ҡулъяҙмаһы яндырылған. 1923 – 1924 йылдарҙан алып иҫ киткес тырышлыҡ менән кадрҙар әҙерләү, мәҙәниәтте үҫтереү өлкәһендә ирешкән бөтә хеҙмәт һөҙөмтәһе бер – ике йыл эсендә тотош юҡҡа сығарылған. Һәр нәмәнән ҡурҡыу һәм шикләнеү кешенең аҡылын юйған.

1937 – 1938 һәм унан һуңғы йылдарҙағы репрессия халыҡтың ҡотон алып, өнһөҙ, ихтыярһыҙ итеү өсөн эшләнгән. Уйлау, фекер һәм һүҙ әйтеү хоҡуғын партия юлбашсыһының бер үҙенә биреп, башҡа кешегә ул әйткән һүҙҙе күтәреп алып, күккә сөйөү мөмкинлеге генә ҡалдырған. Был нәмә үҙ нәүбәтендә бөтә кимәлдәге партия комитеты секретарҙарының ҡаты

---

* 30—40-сы йылдар эсендә ялған ғәйеп тағып самаса 57 мең башҡортто юҡ иткәндәр.

диктатураһын донъяға килтергән. Партия демократияһы һәм ғөмүмән совет демократияһы тигән нәмәнең әҫәре лә ҡалмаған. СССР Конституцияһы һәм совет власы органдары партия секретарҙарының сикләнмәгән диктатураһын ышыҡлау өсөн генә хеҙмәт иткән*.

Был ваҡиғаларҙан һуң Башҡорт республикаһы 1920 йылда Башревком эш ташлап киткәндән һуң төшкән хәлгә кире ҡайтҡан: бер ерҙә лә, бер эштә лә башҡорттар ҡатнашмаған, улар тотош бөтөрөлгән, ә һирәк – мирәк ҡотолоп ҡалғандары иҫәптән төшкән, улар милли тойғо, милли теләк белдерергә ҡурҡҡан, әҙ генә белдергән хис буржуаз милләтселеккә, дошманлыҡҡа иҫәпләнгән.

Сталин В.И.Ленин идеяһына тоғролоҡ һаҡлап, тотош Ленин милли политикаһын бойомға атҡарған. Шуға күрә 1937 – 1938 йылдарҙағы репрессия рус йәмғиәтенә зыян килтерһә лә, «буржуаз милләтселек» бапағы менән бәләкәй халыҡтарҙың активлығын бөтөнләй баҫып, рус халҡының хәлен нығытҡан, унда бөйөк дәүләтселек ынтылышын көсәйткән. Бөйөк дәүләтселек менән көрәшеү бөтөнләй туҡталған һәм халыҡтарҙы руслаштырыу тенденцияһы үҫкән. Был тенденция рус телен таратыу өсөн үткәрелгәп өҫтәмә сараларҙа айырым – асыҡ сағылыш алған.

1924 йылда уҡ рус теле башҡорт мәктәптәренең программаһына мотлаҡ фән итеп индерелгән һәм батша хөкүмәте үткән быуаттың урталарынан бире ирешә алмаған нәмәне революция исеме менән анһат ҡына законлаштырып ҡуйғандар. 1925 йылда рус коммунистары етәкселегендә үткән IX Башҡортостан партия конференцияһы мәктәптәрҙә рус телен уҡытыуҙы мәжбүри нығытҡан.

Рус телен милли мәктәптәргә индереү эшендә Н.К.Крупская ла актив ҡатнашҡан һәм шул мәсьәлә буйынса махсус мәҡәлә яҙып сыҡҡан. («Белем» журналы, 1925, № 7 – 8.) Ләкин ошо йүнәлештәге иң ҡыҙыу эш репрессия

---

* Хәҙер ҙә был сәйәсәттең «демократия» байрағы аҫтында дауам ителеүенә байтаҡ миҫалдар килтерергә мөмкин. Әйтәйек , Россияның бөгөнгө етәкселәре Башҡортостан, Татарстан, Яҡутстан йәки Чечня кеүек элекке автономияларҙың хоҡуҡтарының әүәлге СССР етәкселәре кеүек уҡ ҡыҫа , бүтән милләтәрҙе урыҫлаштырыу идеяһының да баш тартырға йыйынмай

көсәйгән саҡта башланған. Әҙ булһа ла милли кадрҙар әҙерләүгә ярҙам иткән «коренизация» политикаһы ла шул ваҡытта бөтөрөлгән. Мәктәптәрҙә рус теле күптән уҡытылһа ла, 1938 йылдың 13 мартында ВКП(б) Үҙәк Комитеты менән СССР Халыҡ Комиссарҙары Советының «Милли республика һәм өлкә мәктәптәрендә рус телен мотлаҡ өйрәнеү хаҡында» өҫтәмә ҡарары сыҡҡан. Ҡарарҙа был мотлаҡлыҡ, рус телен белеү СССР халыҡтарының көслө аралашыу сараһы буласаҡ, тип дәлилләгән.

Был дәлил үткән быуаттың 70-се йылдарындағы батша чиновниктарының һүҙенән һис тә айырылмаған. Мәҫәлән, генерал-губернатор Кауфман 1876 йылдың 1 мартында халыҡ мәғарифы министрына: «Инородтарҙы беҙҙең дәүләт теленә өйрәнеүгә йәлеп итергә һәм шуның менән төрлө халыҡты берләштереү сараһы күрергә кәрәк», – тип яҙған. Берләштереү тигәндә ул рус халҡы менән берләштереүҙе, йәғни руслаштырыуҙы күҙҙә тотҡан. Революциянан һуң, иҙелгән халыҡтарға «үҙбилдәләнеш хоҡуғы» бирелгәс, революцион лозунгыларға төрөлгән был политика бик ныҡлы программа төҫөн алған.

Партия һәм хөкүмәт ҡарары, рус телен белеү ғилми һәм техник белем өлкәһендәге милли кадрҙарҙы артабан камиллаштырыуға ярҙам итә, тип икенсе дәлил килтергән. Был дәлил үҙе үк, бәләкәй халыҡтарҙың урта һәм юғары уҡыу йорттарында үҙ телендә уҡытып, кадр әҙерләү хоҡуғын юҡҡа сығарған һәм был халыҡтарҙы тотош рус теле бойондороғона ҡуйған.

Башҡорт мәктәптәренә рус теле күптән мәжбүри фән итеп индерелгән булһа ла, Башҡорт АССР-ының Мәғариф комиссариаты баяғы ҡарарҙың талабына яраштырып, мәктәп програмаһына яңы үҙгәрештәр индергән, рус теленә тағы ла ныҡыраҡ иғтибарҙы көсәйткән. Шул ваҡыттан рус теле башланғыс мәктәптең икенсе синыфынан уҡытыла башлаған.

Руслаштырыуға йүнәлеш алып, СССР-ҙың хөкүмәт органдары революцияға тиклемге оло чиновниктарҙан шул эште ғәмәлләштереү юлын да үҙләштергән. Үрҙә әйтелгән генерал-губернатор Кауфман, миссионер

Ильминский һымаҡ уҡ, рус телен таратыу өсөн иң ышаныслы юл «көнсығыш телдәренең» яҙмаһын рус алфавитына күсеүҙән ғибәрәт, тип һанаған. Ырымбур уҡыу – уҡытыу округының нәзире Лавровский 1876 йылдың 4 мартында, Кауфманды хуплап, үҙенең хатында: «Алфавитты күсереүҙең бик тәрән политик әһәмиәте бар, ул халыҡтарҙы бер дәүләт алфавиты менән һәм уның аша бер дәүләт теле менән берләштерә», – тип яҙған. Батша чиновниктары «көнсығыш телдәрҙең» алфавитын үҙгәртеү ниәтен батшалыҡтың һуңғы көндәренә тиклем ташламаған, ләкин ни хәтле тырышһалар ҙа ул ниәтте ғәмәлгә ашыра алмаған. Уны большевиктар ғәмәлгә ашырған. Улар рус алфавитына күсеү фекерен халыҡтарҙың репрессиянан ҡурҡып, бөтә ихтыярын, милли активлығын юғалтҡан мәлдә тәҡдим иткән. Республикаларҙың етәкселәре юғарынан килгән күрһәтмәне теләһә-теләмәһә лә күтәреп алған һәм ябай халыҡтың үҙ теләге итеп шаулатҡан. Шунан ашығыс рәүештә рус алфавитына күсеү кампанияһы башланған. Рус алфавиты файҙаһына килтерелгән дәлил һаман да шул элекке руслаштырыусыларҙыҡы һымаҡ булған: рус телен өйрәнеүҙе еңелләштереү.

Башҡорт АССР-ының ВКП(б) өлкә комитет бюроһы 1939 йылдың 21 апрелендә алфавит буйынса билдәләнгән саралар ҙы бойомға ашырыу өсөн комиссия төҙөгән. Өлкә комитет секретары Г.Растегин, рус кешеһе, бөтә эшкә етәселек иткән. Башҡорттарҙың ҡатнашлығы исем өсөн генә булған. 1939 йылдың 23 ноябрендә БАССР Верховный Советы яңы алфавитҡа күсеү хаҡында ҡарар сығарған. Ул ҡарар: «Башҡорт эшсәндәренең теләген үтәп...» - тип башланған, ә шул саҡта башҡорт эшсәндәре һис бер ундай теләк белдермәгән, халыҡты тыңлар өсөн тип йыйылған йыйылыштарҙа алдан ҡурҡытып әҙерләнгән кешеләр, хатта рус кешеләре һөйләгән, һәм был йыйылыштар хөкүмәт политикаһын формаль рәүештә аҡлар өсөн генә хеҙмәт иткән.

Көнсығыш халыҡтарының яҙмаһын рус алфавитына күсереү менән уларҙы рус милләтенән айырып торған ҙур бер кәртә емерелгән һәм руслаштырыу эше еңеләйгән.

Был йылдарҙа халыҡтың тормошо ауырлашҡан. Халыҡ күңелен ауыр тойғо баҫып ятҡан, киләсәк көнө шомло, борсоулы булған. Шундай ауыр мәлдә донъя күрмәгән яман һуғыш башланған, халыҡ башына тағы ҡот осҡос бәлә төшкән. Ләкин хатта иҫ киткес ауыр һуғыш йылдарында ла халыҡ муйынынан башкиҫәрҙәрҙең ҡанлы балтаһы алынмаған. Һуғыш буйына һәм уның аҙағына репрессив саралар йомшамаған, киреһенсә, көсәйгән. Партия һәм именлек органдары башҡорт интеллигенцияһынан иҫән ҡалған берәм – һәрәм кешенең тын алышын ҡаты күҙәтеү аҫтында тотҡан һәм «буржуаз милләтселектең» бәләкәй генә һәр «сағылышын» киҫергә әҙер торған. Шул рухта йәғни аяуһыҙ киҫеү рухында, 1945 йылдың 25 ғинуарында «ВКП(б) Үҙәк Комитетының Башҡортостан партия ойошмаһындағы агитацион-пропаганда эшен яҡшыртыу саралары хаҡында» ҡарары сыҡҡан. Ҡарарҙың проектын А.А.Жданов эшләгән булған. Был ҡарар Башҡорт АССР-ында эшләгән айырым тарихсы һәм әҙәбиәтселәрҙең башҡорт тарихын яҡтыртыуында «етди идеологик хаталар» тапҡан. Үҙәк Комитет башҡорт тарихын объектив итеп яҙған рус тарихсыларын да ғәйепләгән һәм дөрөҫлөк талап итеү һылтауы менән бөтә тарихты колонизаторҙар күҙлегенән сығып ҡабат баһаларға, рустарҙың башҡорт халҡына элек һәм хәҙер килтергән бөтә нәмәһен ялтыратып, маҡтап күрһәтергә йүнәлеш биргән. Үҙәк Комитет башҡорт халҡын азатлыҡ көрәшенә күтәргән тарихи батырҙар тураһындағы эпик әҫәрҙәрҙе тыйған. Тыйыу артынса, шул әҫәрҙәрҙе баҫтырып сығарған халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғоловты ҡаты язаға тарттырып, төрмәгә япҡан. Үҙәк Комитет репрессия арҡаһында бөтөнләй әҙәбиәтһеҙ тиерлек ҡалған башҡорттарҙы тулыһынса рус әҙәбиәте менән мәҙәниәтен үҙләштереү юлына күсергән.

Шул ҡарарҙан һуң, башҡорт тарихын дөрөҫ итеп яҙыу бөткән, уның урынына башҡорттоң азатлыҡ яуҙарын ҡаралаған, рус колонизаторҙарын

яҡшылыҡлы, изге итеп күрһәткән, рус менән башҡорттоң борон – борондан килгән дуҫлығын маҡтаған ялған эштәр яҙыла башлаған. Мәҙәни тормош йүнәлеше лә киҫкен рәүештә үҙгәртелгән. Башҡортостан китап нәшриәте тотош рус яҙыусыларының тәржемә әҫәрҙәрен баҫыуға күскән, бөтә нәшриәт планын рус яҙыусылары биләп алған. Мәктәптәге башҡорт әҙәбиәтенең программаһында күпселек урын рус яҙыусыларына бирелгән, шуға өҫтәп тағы рус әҙәбиәте уҡытылған. Шунан тыш, репрессияға эләккән башҡорт яҙыусыларының урыны татар яҙыусылары менән тултырылған. Улар араһында бигерәк тә яласы Сәйфи Ҡудашты күтәргәндәр. Башҡорт әҙәбиәтенең вәкиле итеп уны киң донъяға таныҡандар, ҙур хөрмәт менән ураҡандар*.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының һәм төүге партия органдарының асыҡтан – асыҡ руслаштырыуға йүнәлтелгән ҡарарҙары һәм саралары Башҡорт республикаһына Россияның көнбайыш һәм 1 үҙәк өлкәләренән рустарҙы яңынан күпләп күсереү, рус элементын күбәйтеү менән нығытылған. Был осорҙағы иң ҙур күскенселәр тулҡыны һуғыш башланғас килгән, ул инженер – техник хеҙмәткәрҙәрҙән, эшселәрҙән һәм ябай ҡасҡындарҙан торған. Килгән халыҡтың күпселеге Башҡортостандың ҡалаларына урынлашҡан һәм тотош тиерлек кире китмәй шул көйө тороп ҡалған. Шундай уҡ халыҡтың ағымы һуғыш бөткәс тә туҡтамаған. Мәҫәлән, 1949 – 1955 йылдарҙа Башҡортостанға, эшселәрҙе генә иҫәпләгәндә лә, 70 мең эшсе килгән. Бөгөнгө көндә лә был көслө ағым дауам итә... Шунан тыш, 50-се йылдарҙағы сиҙәм асыу кампанияһы ваҡытында ауыл ерҙәренә күскенсе крәҫтиәндәр бик күп килгән. Был күскенселек батша заманындағы крәҫтиәндәр колонизацияһынан кәм булмаған, тик ул заманда колонизаторҙар башҡортто әҙме – күпме иҫәпкә алып, үҙҙәренең баҫҡынсы икәнен белгән булһа, хәҙергеләре һис иҫәпкә алмаған, үҙ еренә килгән кеүек килеп ултырған.

---

* КПСС етәкселеге үҙенең «ғәҙел» милли политикаһын күрһәтер өсөн һәр республиканың бер яҙыусыһын һәм йыр-бейеү ансамблен күтәреү юлына баҫҡан. Шул маҡсатта күтәрелгән яҙыусы һәм ансамбль үҙенең исеме, сығышы менән бөтә донъяға милли политиканың СССР-ҙа уңышлы хәл ителгәнен күрһәтергә тейеш булған. Шундай уҡ күҙ буяу менән хәҙер ҙә шөғөлләнәләр.

Башҡорттоң милли активлығын тамам быуған репрессия һәм эҙәрләүҙәр рустарға иркен эш итергә шарт булдырыу менән бергә, татарҙарға ла Башҡортостанда бик көсәйеп, ныҡлы өҫтөнлөк алырға мөмкинлек биргән. Татарҙар башҡорт «буржуаз милләтселеген» бөтөрөүҙә актив ҡатнашып, үҙенә юл таҙартҡан һәм властар ярҙамында арҡа терәп, республикала алдынғы милли көс булып киткән. Республиканың милли вәкиле булып, татарҙар ижтимағи-политик һәм мәҙәни тормошта бөтә эште үҙ ҡулына алған һәм рустарҙың шовинистик политикаһы менән бергә үҙ политикаһын үткәргән. Быуаттар буйы башҡортто тапап, үҙенең өҫтөнлөгөн нығытырға тырышҡан татар халҡы Башҡортостанда тулы ireккә өлгәшкән, үҙҙәрен хужа итеп тоторға мөмкинлек алған. Хәҙерге көндә улар асыҡтан-асыҡ: «Башҡортостан үҙебеҙҙеке!» — тип маһая*. Башҡорт исеме менән аталған республикала башҡорт халҡының хәле һәләкәт сигенә килеп еткән.

* Татарҙарҙың Башҡортостанда баш булырға тырышыуы үҙҙәренең боронғо ваҡытынан ер юғалтҡандан һәм элек үк булған гегемонияһын көсәйтергә» маташҡандан йылдан килә («Письмо ЦК РКП(б) всем партийным комитетам и политотделам о работе среди народов Востока». 21 февраля, 1920 г.). Элекке гегемонияһын ҡайтарырға тырышыу һәм сиктән тыш маһайыу менән бергә, татарҙар шул уҡ ваҡытта үҙ тарихынан баш тартып, бөтөнләй икенсе халыҡ тарихына ҡул һуҙа. Улар электән үҙ тарихына вайымһыҙ булған йәки уны яратмаған. Был хаҡта 1852 йылда И.Н.Березин, 1912 йылда Н.Ф.Натанов әйткән. Үҙ тарихына булған шундай мөнәсәбәт юғалған ҡеүәт, бөткән хакимлек өсөн ныҡ әсенгәндән килеп сыҡҡан. Шулай булһа ла, үҙҙәренең Батый хан татарҙары икәнен улар әле инҡар итмәгән. Мәҫәлән, татар депутаты С.Мәксүдов III Дәүләт думаһының сессияһында «Россияның Европа өлөшөндә йәшәгәп мосолмандар (татарҙар )Алтын Урҙанан ҡалған халыҡ»,— тип һөйләгән. 1917 йылғы революциянан һуң элекке хакимлекте ҡайтарыу өмөтө менән ярһып киткән татар шағиры Сәйфи Ҡудаш 1918 йыл сығарған «Татар теләге» тигән китабында: «Сүнмәгән ул, чын каһарман, чын даһи, көчле Бату... Үлмәгән, һаман да бар бит, ул рәис Чиңгыз бабам!» «Эй татар!.. Син бер заманда хан идең, солтан идең; Тетрәтеп донья йөзен, шәүкәт белән торган идең... Куркытып, дәһшәт салып син, барчасын кырган идең»; «Донья үзе килеп сәждә кылсын, онытма син бабаң Чиңгызны» һ.б., һ.б., — тип яҙған. Татарҙар 1944 йылдың 9 авгусында сыҡҡан «ВКП(б) Үҙәк Комитетының Татарстан партия ойошмаһында масса-политик һәм идеологик эштең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары хаҡындағы ҡарарында» айырым тарихсы һәм әҙәбиәтселәр Алтын Урҙаны маҡтауҙа ғәйепләнгәндән һуң ғына үҙ тарихынан ҡырҡа баш тартҡан. Хәҙер татарҙар бөгөнгө татар халҡының баҫҡынсы татарҙарға ҡатнашы барлығын бөтөнләй кире ҡағып, уны туранан-тура Волга булгарҙарына, йәғни X быуаттан альта татар-монгол яуына тиклем Сулман тамағында булған Болғар дәүләтенең төп халҡына, бәйләй. Болғар уйҙырмаһын улар бөтә яҡтан киң пропагандалай, шул пропаганданы татар интеллигенцияһы – тарихсылар, телселәр, әҙәбиәтселәр, яҙыусылар, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре, партия һәм хөкүмәт хеҙмәткәрҙәре бик көслө алып бара. Татарҙы болғарҙан сыҡҡан тип йәнтәслим тырышыу менән бергә, улар хәҙерге татар халҡына болғар менән һис бер бәйләнеше булмаған Әстрхан, Томән, Бараба, Томь, Чулым татарҙарын һәм милләтәрҙәрҙе лә индерә. Уйҙырмаларындағы йәбешмәгән нәмәне йәбештерер өсөн улар аҙым һайын оятһыҙ рәүештә тарихты һәм фәнде боҙоу, ялғанлау юлына баҫа.

## 9. БАШҠОРТ ХАЛҠЫН ҠЫҪЫУ ҺӘМ ИҘЕҮ ЙҮНӘЛЕШЕНДӘГЕ ЭШМӘКӘРЛЕК

Бәлки промышленносы көслө булған Башҡортостанда милли эшсе синыфы һәм милли техник интеллигенция етерлек булһа, башҡорттоң хәле нығыраҡ булыр ине. Ләкин башҡорттар оло ҡырғын осоронда промышленность кадрҙары әҙерләү өлкәһендә лә 30-сы йылдарҙың уртаһында өлгәшкән уңышын тотош юғалтҡан һәм ул кимәлгә ҡабат етә алмаған. 1933 йылда эре промышленность өлкәһендә башҡорттар эшселәрҙең 14,4 процентын тәшкил иткән, йәғни уларҙың нисбәте сама менән 1970 йылдағы һымаҡ булған. 1933 йылдан 1936 йылға тиклем промышленносты үҫтереү һәм халыҡ хужалығы яңыртыу барышында эшсе башҡорттарҙың һаны 6 тапҡырға артҡан. Башҡортостандағы бүтән халыҡта ундай киҫкен үҫеш булмаған. Шулай итеп, 1936 йылда республикалағы эшселәрҙең башҡорт өлөшө шул хәтле үҫкән, хатта ундай өлөш бөгөнгө көндә лә юҡ. Ул ваҡытта башҡорт инженерҙары, техниктары, хеҙмәткәрҙәренең һаны ла

---

Ысынында татарҙарҙың Волга болғарҙарына бер ҡатнашы ла юҡ. Батый ғәскәрҙәре Болғар дәүләтен ҡыйратҡас, болғарҙар ҡанлы ҡырғындан ҡурҡып, үҙ иленән ҡасҡан. Ҡасып таралған халыҡ әкренләп электән таныш булған бер тынысыраҡ урынға. Свияга менән Сура йылғалары араһында, йыйылған һәм үҙенең тороп ере итеп яңы территорияны үҙләштергән. Элекке урында ислам динен ҡабул иткән эре феодалдарҙың һәм юғары дин әһелдәренең бәләкәй төркөмө генә ҡалған. Улар ҡасып үҙ дәрәжәһен төшөрөргә, байлығын юғалтырға теләмәгән һәм баҫҡынсыларҙың хөкөмөн ҡабул иткән. Яңы ергә йыйылған болғарҙар әүәлдән көслө, үҙ яйлы булып танылған суваз ырыуы тирәһендә тупланған. Дәүләт тарҡалғас, был ырыу алдынғы урын алып, баш булып киткән. Шул ырыу тирәһенә тупланған болғарҙарҙан хәҙерге сыуаш халҡы килеп сыҡҡан. Улар үҙенең телен дә шул көйө һаҡлаған.

Хәҙерге татар халҡының этник нигеҙен тәүҙә Себерҙән Батый хан ғәскәре менән, аҙаҡтан баҫып алынған яңы ерҙәргә ғәскәр артынан күсеп килгән татарҙар тәшкил иткән. Был осорҙа боронан билдәле, күп һанлы татар халкы тотош тиерлек көпсығыштан көнбайышҡа күсенгән Көнсығыш Европала буйһондоролған европеоидтарҙың ҡатын ҡыҙын бик күпләп кәнизәк һәм ҡатын итеү сәбәпле татарҙар физик төҫөн бик ныҡ үҙгәрткән. Көнбайыш Себерҙә ундай хәл булмаған.

Татарҙың үҙенән башка, хәҙерге татар халҡын барлыҡҡа килтереүҙе, күрәһең, буйһондоролған ҡыпсаҡтарҙың бер аҙ өлөшө ҡатнашҡандыр, ләкин ул өлөш бәләкәй булған. Ҡыпсаҡтан нигеҙҙә хәҙерге каҙаҡ, ҡарағалпаҡ һәм башҡа ҡыпсаҡ телле халыҡтар килеп сыҡҡан»

Хәҙерге татарҙа болғар элементының, ҡатнашлығы бик аҙ булған, ул әлеге эре феодалдарҙан ғына торған һәм тар ғына урын менән сикләнгән, шуға күрә уны иҫәпкә лә алмаҫҡа мөмкин.

XV—XVI быуаттарҙа, Ҡазан, Әстрхан, Ҡырым, Себер ханлыҡтары булған заманда, айырым-айырым төркөм булып, Ҡазан, Әстрхан, Ҡырым, Төмән, Тубыл-Иртыш татарҙары һәм мишәрҙәр барлыҡҡа килгән.

күбәйгән. Уларҙың республикалағы дөйөм һандан 10 проценты башҡорт булған, Шундай уҡ кимәлгә, 10,2 процент кимәленә, башҡорттар 1979 йылда саҡ яңынан килеп еткән. Тимәк, башҡорттоң промышленноста ҡатнашыу кимәле шул ике аралағы 40 йыл эсендә артмаған, киреһенсә бик ныҡ кәмеү осорон кисергән. Республиканың төп халҡына көслө эшсе синыфы ғына түгел, дөйөм халыҡ эсендәге үҙ нисбәтенә тура килерлек ҡәҙәр эшсе үҫтрергә лә мөмкинлек бирмәгәндәр. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостандағы татарҙар, революцияға тиклем эшселәр һаны буйынса башҡорттан өҫтән түгел, ә бәлки, түбән булһа ла, промышленность кадрҙары әҙерләү өсөн тулы мөмкинлек алған. Был эшкә, бөтә булған башҡа сәбәптән тыш, яңы промышленность предприятиеларының етәкселектә ултырған татарҙар ирке менән гел Башҡортостандың үҙәк һәм төньяҡ – көнбайыш райондарында, күпселек татар халҡы йәшәгән яҡта, төҙөлөүе лә ныҡ ярҙам иткән. Республиканың күпселек халҡын башҡорттар тәшкил иткән көнсығыш һәм көньяк райондарында промышленность предприятелары төҙөлмәгән һәм был яҡтың элекке промышленность даны һүндерелгән. Төрлөсә кәртә ҡуйыу арҡаһында промышленность өлкәһендә башҡорттарҙың ҡатнашлығы әҙ булып ҡалған һәм ошо хәл уларҙың шовинистар һөжүменә ҡаршы тороу һәләтен ныҡ кәметкән.

Һуңғы ваҡытта башҡорт эшселәре шулай ҙа күбәйә башланы, ләкин улар, батша заманындағы кеүек үк, иң ауыр эш тармаҡтарына ылыҡтырыла. Мәҫәлән, 1979 йылғы иҫәп материалдарына ҡарағанда, урман ҡырҡыу эшендә эшселәрҙең 47 проценты, мәғдән сығарыу промышленносында 29 проценты, төҙөлөштә 23 проценты башҡорттан тора, бүтән тармаҡтарҙа уларҙың һаны 12 – 16 проценттан артмай. Төҙөлөшкә күберәк ҡалаға тартыла башлаған йәштәр килә. Был йәштәр ҡала ерендә торор урыны һәм пропискаһы булмағанлыҡтан, ятаҡтан урын алыр өсөн төҙөлөштәге төрлө ярҙамсы эшкә инә һәм үҙен ғүмерлек ятаҡ тормошона, янғыҙлыҡҡа дусар итә. Ләкин ҡалала пропискаһы юҡлыҡтан ғына булмай был хәл. Төҙөлөштән башҡа предприятиеларҙың етәкселегендә ултырған рустар һәм татарҙар башҡорттарға ғәҙәттә эш бирмәй, йәғни уларҙы асыҡтан асыҡ ситләтә. Ситләтеү, кәмһетеү, мыҫҡыллау ҡалалағы

башҡортто һәр ерҙә эҙәрләп йөрөй. Шулай ҙа ҡалалағы башҡорттарҙы түгел, ә ауылдағы башҡорттарҙы ҡыҫырыҡлау бөтә башҡорт халҡынын яҙмышын һәләкәт алдына ҡуя.

Ауыл хужалығында, кеүек үк, Башҡортостандың күпселек татар йәшәгән төньяк – көнбайыш районДарын үҫтереү маҡсат итеп ҡуйылған. Төньяҡ – көнбайыш районДар капитал һалымы, төп средство һәм ауыл хужалығы техникаһы менән тәьмин итеү йәһәтенән юғары урын алып тора. Шуға күрә унда хәҙерге талапҡа яуап биргән малсылыҡ фермалары һәм башка объекттар күп төҙөлә, игенселек, малсылыҡ, йәшелсәселек, баҡсасылыҡ һәм башҡа тармаҡта тейешле нисбәттә үҫтереү һөҙөмтәһендә бөтә эштең интенсивлығына өлгәшелә. Был иһә колхоз һәм совхоздарҙа эш көсөнөң файҙаланышын һәм эш хаҡын күтәрергә мөмкинселек бирә.

Көнсығғыш һәм көньяк районДарҙа бөтөнләй икенсе хәл. Ауыл хужалығы объекттарын төҙөүгә унда капитал һалым бик әҙ бүленә, төп средство һәм ауыл хужалығы техникаһы менән тәьмин итеү төньяҡ көнбайышҡа ҡарағанда бик күпкә түбән. Элек күберәк малсылыҡ менән шөғөлләнгән был районДарҙа хәҙер игенселеккә өҫтөнлөк бирелгән, малсылыҡ ҡыҫҡартылған. Шул сәбәпле кешене эш менән тәьмин итеү мөмкинлеге бик бәләкәй, йыллыҡ эш хаҡы ныҡ түбән, крәҫтиәндәрҙең көнкүреше насар. Крәҫтиәндәргә эш етмәү, бүтән эшләр урын булмау арҡаһында был районДарҙағы халыҡтың күп өлөшө Башҡорт республикаһынан ситкә китергә мәжбүр була. Был процесс барған һайын көсәйә. Шул арҡала 1979 йылғы иҫәп буйынса Башҡорт АССР-ындағы халыҡтың 24,3 проценты башҡорт булһа, 1989 йылда улар 21,9 процент булып ҡалған.

60-сы йылдарҙа ауылдарҙы эреләтеү планы буйынса күп башҡорт ауылы бөтөрөлөп, колхоз – совхоз үҙәктәренә, йәғни рус йәки татар ауылдарына, күсерелде. Ташландыҡ башҡорт ауылдарының халҡы, бигерәк тә йәштәр, эш юҡлыҡтан күп ваҡыт үҙ теләге менән дә колхоз- –совхоз үҙәгенә күсергә мәжбүр була. Үҙәк ауылдарҙа әҙселек булған башҡорт көслөк менән ассимиляцияға дусар ителә.

Ауыл башҡорттарын ситнәтеү һәм кәмһетеү бөтә башҡорт халҡы өсөн һәләкәткә әйләнә, сөнки халыҡтың абсолют күпселеге ауылда булғас, дискриминацияға ла шул күпселек эләгә. 1979 йылғы иҫәп буйынса, Башҡорт АССР-ындағы башҡорттарҙың 71,9 проценты ауылда, 28,1 проценты ҡалала йәшәгән, шул уҡ ваҡытта бөтә республика халҡының уртаса 56,8 проценты ҡалала булған. Ошо уҡ мәғлүмәттәр буйынса, эшләгән рустарҙың 7,6 проценты ғына, татарҙарҙың 19 проценты ауыл хужалығы менән шөғөлләнә. Тимәк, социаль дифференциация нигеҙҙә милләтселәр сигенән үткәрелә.

Тормош шарты һәм дискриминация арҡаһында башҡорттарҙың рухи үҫеш сығанаҡтары – китапхана, культура йорто, кинотеатр менән һәм көнкүреш уңайлыҡтары – газ, үҙәк йылытҡыс, һыу үткәргес менән файҙаланыу мөмкинлеге бүтән халыҡтарға ҡарағанда бик күпкә бәләкәй. Был да ҙур әһәмиәткә эйә. Электр, телевидение, транспорт барып етмәгән башҡорт ауылдары күп, ә телефон тураһында әйтәһе лә юҡ. Был хәл башҡортто тағы нығыраҡ рәнйетә, культура һәм тормош кимәленең үҫешенә тотҡарлыҡ яһай.

Башҡорт ауылдарының халҡы медицина хеҙмәте менән дә насар тәьмин ителгән. Күпселек башҡорт ауылдарында медицина пункты юҡ булған хәлдә лә бик күбеһе врачһыҙ, дауалау эше менән шәфҡәт туташтары ғына шөғөлләнә. Ундай ауылдарҙың башҡорттары ныҡ ауырып киткәндә лә, врачҡа күренер өсөн 20 – 30 км ергә барырға мәжбүр була.

Башҡорт мәктәптәре бик насар хәлдә. Ауылдарҙы эреләтеү планын бойомға атҡарғанда, башҡорт мәктәптәренең һаны ныҡ кәмене. 1967 – 1968 йылдарҙа, Башҡорт АССР-ындағы мәктәптәрҙең дөйөм һаны 6,2 процентҡа кәмегәндә, башҡорт мәктәптәренең һаны 37,5 процентҡа кәмене. Шул уҡ ваҡытта татар мәктәптәре кәмемәне, ә рус мәктәптәре 9 процентҡа артты. Ошо процесс хәҙер ҙә дауам итә. Күп башҡорт ауылдарында мәктәп ябыла йәки ун йыллыҡ мәктәптәр һигеҙ йыллыҡҡа күсерелә, балалар күрше ауыл мәктәптәренә беркетелә. Милли яҡтан ҡатнаш халыҡлы урындарҙа балалар беркетелгән мәктәп рус йәки татар мәктәбе булып сыға. Ундай мәктәптә

балалар башҡорт телендә уҡыуҙан ғына түгел, туған телде өйрәнеүҙән дә мәхрүм ителә. Был нәмә йәнә бер ассимиляция ҡоралына әйләнә.

Әлбиттә, республикала башҡорт мәктәбе тип аталған мәктәптәр ҙә бар, ләкин улар рус һәм татар мәктәптәре күргән иғтибарҙы күрмәй, шул уҡ дискриминацияға эләгә. Башҡорт мәктәптәре өсөн яңы, ҡулайлы биналар әҙ һалына, уларҙың күбеһе иҫке, яртылаш емерек йорттарҙа урынлашҡан. Күп мәктәптә йылытыу системаһы насар эшләнгән. Ҡыш көнө ул мәктәптәрҙә түҙеп торғоһоҙ һыуыҡ. Ҡышҡы салҡындарҙа, улар оҙаҡ ваҡытҡа ябылып торған мәктәптәр күп.

Башҡорт мәктәптәренең материаль – техник базаһы бик ярлы: йыһазландырылған кабинеттар, техник саралар, күргәҙмә әсбәптәр, хеҙмәт мастерскойҙары, спорт залдары һ.б. нәмәләр юҡ.

Башҡорт мәктәптәре уҡытыусылар менән, бигерәк тә юғары белемле уҡытыусылар менән, күпкә насар тәьмин ителгән. 1970 йылда республикалағы юғары белемле уҡытыусыларҙың 16,1 проценты башҡорт мәктәптәренә, 20 проценты татар мәктәптәренә, 57 проценты рус мәктәптәренә тура килгән, шунан бирле бер ҙә хәл яҡшырмаған, киреһенсә, насарланған. Башҡорт мәктәптәрендәге уҡытыусыларҙың яртыһынан күбеһе юғары белемгә эйә түгел. Өҫтәүенә, башҡорт мәктәптәре ғөмүмән уҡытыусыға ҙур ҡытлыҡ кисерә. Уҡытыусы етмәү сәбәпле күп мәктәптә уҡытыу программаһы яртылаш үтәлмәй, уҡыусылар кәрәкле белем ала алмай.

Бөтә булған ошо сәбәп арҡаһында уҡыусыларҙың әҙерлек кимәле түбән була һәм юғары уҡыу йортона инеү ауырлаша, ә был, үҙ нәүбәтендә, яңы уҡытыусы кадрҙар әҙерләү эшен ныҡ тотҡарлай. Шулай итеп, бер кәртәнән икенсе кәртә барлыҡҡа килә, уны анһат ҡына үтеп булмай. Мәсьәләне хәл итеү өсөн башҡорт мәктәптәренә айырым иғтибар бирергә, улар хаҡында һөрән һалырға кәрәк. Ләкин берәү ҙә улай итә алмай, сөнки башҡорт мәктәптәрен йәки ғөмүмән башҡорт хәлен әҙ генә айырым алып хәстәрләгән өсөн шунда уҡ «башҡорт шовинизмы»нда ғәйепләргә әҙерҙәр. Башҡорт республикаһының төп халҡы булмаған рус менән татарға ундай ғәйеп яғылмай һәм улар бер ниҙән ҡурҡмай, башҡорт

мәктәптәрен ҡыҫып, үҙ мәктәптәрен үҫтерә. Тимәк, милли республика теп милләттең хоҡуғын арттырмай, ә киреһенсә, киҫә, һәм шул милләткә ҡаршы торған көстәргә иркенлек бирә.

## 10. БАШҠОРТТОҢ ҺӘЛӘКӘТЛЕ ХӘЛЕ.
## ЯҢЫ МИЛЛИ СӘЙӘСӘТТЕҢ ЯЛҒАНЛЫҒЫ

Тышҡы эффект уятҡан нәмәләр аша милли политиканы күрһәтеп, КПСС һәр ваҡыт «берҙәм һәм бүленмәҫ» Россияны һаҡлауға һәм рус булмаған халыҡтарҙы тотош руслаштырыуға йүнәлтелгән төп маҡсатын ышыҡлап килде. Руслаштырыу политикаһы ваҡыты-ваҡыты менән яңы һөжүм рәүешен ала. 20-се һәм 30-сы йылдарҙың аҙағында руслаштырыу политикаһын көсәйтеү һөҙөмтәһендә Башҡорт АССР-ында башҡорт теле эш һәм эш йөрөтөү өлкәһенән ҡыҫырыҡлап сығарыла, бөтә йыйылыш һәм ижтимағи саралар, бер генә рус кешеһе ҡатнашҡан йәки ҡатнашмаған хәлдә лә, рус телендә генә үткәрелә башлай, башҡорт мәктәптәрендә рус телен уҡытыу бик күпкә көсәйтелә, ҡала һәм ҡатнаш милләтле ауылдарҙа рус теле башҡорттарҙың өй эсенә үтеп инә. Быға, кешенең көн иткән мөхитенән тыш, башҡорт мәктәбенең һәм балалар баҡсаһының юҡлығы ныҡ ярҙам итә. Шундай шарттарҙа, 50-се йылдарҙың урталарынан алып, КПСС яңынан бик көслө руслаштырыу эше башлай.

Тиҙерәк руслаштырыуға йүнәлеш алған партия һәм хөкүмәт органдары XVIII быуаттан бирле үткәрелеп, совет осоронда ныҡ көсәйтелгән ышаныслы сараны Башҡортостанда рус элементын күбәйтеп, башҡорттарҙы башҡа ерҙәргә таратыу сараһын бойомға ашыра башлай. Халыҡты аралаштырып, болғатып бөтөр өсөн етәксе органдар республиканың эш көсөнә булған яңынан-яңы ихтыяжын эске ресурстарҙы файҙаланыу һәм урындағы халыҡтан кадрҙар әҙерләү иҫәбенә түгел, ә Россияның үҙәк һәм башҡа өлкәләренән рус халҡын килтереү иҫәбенә ҡәнәғәтләндерә. Улар хатта ауыл хужалығына ла ситтән күпләп кеше күсерә һәм урындағы квалификациялы эшсәндәрҙе эшһеҙ ҡалдыра. Билдәле маҡсат менән башҡарылған шундай эш һөҙөмтәһендә күскенселәр ҡала халҡының үҫешен артығы менән тәьмин итә һәм ауыл еренән, иң элек көнсығыш

райондарҙан, эшкә һәләтле башҡорт йәштәрен ҡыҫырыҡлай. Эш табыу һәм донья көтөү мөмкинлегенән мәхрүм ителгән башҡорттар Башҡортостандан ситкә китеп, морон төртөр урын эҙләргә мәжбүр була. Башҡорттарҙың «үҙ-үҙлегенән» барлыҡҡа килгән миграцияһы башлана һәм ул иҫ киткес ҙур күләм ала. 1959 – 1965 йылдар эсендә генә көнсығыш райондарҙың башҡорттары 97 – 100 мең кешегә кәмей, киткән кешеләрҙең һаны ул райондарҙа 25 проценттан арта һәм киткән халыҡ һанын тәбиғи үҫеш ҡаплай алмай. Был процесс һаман көсәйә. Мәҫәлән, әлеге мәлдә бер Хәйбулла районынан ғына башҡа өлкәләргә йыл һайын 800 самаһы ғаилә китә. Һуңғы 20 – 30 йыл эсендә Башҡортостандан киткән башҡорттоң дөйөм һаны 400 меңгә етә. Сит халыҡтың күпләп килеп, төп халыҡтың китеүенән ғибрәт булған миграция Башҡортостанда күрше өлкәләргә ҡарағанда күп тапҡырға көслөрәк. Шуға күрә хатта Мәскәү этнографтары ла, 1926 йыл менән сағыштырғанда территориаль компактлыҡ бөтәһенән дә нығыраҡ башҡорттарҙа кәмегән һәм был факт уларҙың бик күп өлөшө БАССР-ҙан ситкә күскәнен күрһәтә, тип яҙа[157].

Миграция һәм башҡорттарҙың, иң элек йәштәрҙең, күпләп ситкә китеүе арҡаһында Башҡортостандың ауыл ерендә халыҡтың тәбиғи үҫеше барған һайын нығыраҡ кәмей. Ул үҫеш хәҙер күпселек халҡы рус менән татарҙан торған ҡала еренә ҡарағанда байтаҡҡа түбән. Ауылдарҙа йәш ғаилә һәм балалар һаны бик күпкә әҙәйҙе. 1959 – 1965 йылдарҙа уҡ ауыл ерендә өйләнешкән ҡатын-ҡыҙ һаны 43 процентҡа (ҡала ерендә – 18), тыуған бала һаны 30 процентҡа, халыҡ һанын тултырыу коэффициенты 24 процентҡа кәмегән. Шунан һуң үткән 25 йыл эсендә йәш ғаилә һәм тыуған балалар һанының кәмеү тенденцияһы тағы ла нығыраҡ көсәйҙе.

Башҡорттарҙы таратыу һәм башҡа милләт менән аралаштырыу ҡатнаш ғаилә һанының бик тиҙ артыуына килтерә. 1978 йылда ҡатнаш ғаиләләрҙең дөйөм һаны эсендә ҡатнаш башҡорт ғаиләләренең өлөшө 61 процент булған. Тимәк, республикалағы башҡа милләт вәкилдәре бөтәһе бергә

---

[157] Бромлей Ю. В. Этнографическое изучение современных национальных процессов в СССР. — «Советская этнография», 1983, № 2, 9-сы бит.

башҡорттарға ҡарағанда бик купкә әҙерәк ҡатнаш ғаилә ҡора. Был йәһәттән башҡорт күрһәткесе бөтә Союз күрһәткестәренән сағыштырғыһыҙ кимәлдә юғары. Ҡатнаш ғаилә төҙөгән башҡорттар, үҙе булмаһа – мотлаҡ уның балалары, милләтен юғалта, күпселек ваҡыт руслаша. Шуның өсөн дә партия һәм хөкүмәт органдары интернационализм һәм халыҡтар дуҫлығының көүҙәләнеше тигән булып, ҡатнаш ғаиләләрҙең күбәйеүен бик хуплай һәм ныҡ тәбрикләй.

Партия етәкселеге һәр ваҡыт, милләттәрҙе аралаштырып, болғатыуҙан башҡа, шундай уҡ көслө руслаштырыу сараһына һанап, мәктәп аша туранан-тура балаларға тәьҫир итеү сараһын ҡуллана килде. Юғарыла әйтелеүенсә, рус политикаһы өсөн был нәмә яңы түгел. 1912 йылда халыҡ мәғарифы буйынса үткәрелгән кәңәшмәлә Ырымбур уҡыу-уҡытыу округының нәзире Владимиров әйткән: «Инород мәктәптәренең бурысы инородтарҙың мәҙәниәтен үҫтереү һәм камиллаштырыуҙан ғибәрәт түгел, ә уларҙы мәҙәни йәһәттән юғары торған һәм илдең төп хужаһы булған рус халҡының руслаштырыуынан ғибәрәт. Шул маҡсатҡа ирешелмәй икән, халыҡ аҡсаһын түгеүҙән мәғәнә юҡ», – тигән. Ленин һыҙған КПСС политикаһы революция тиклемге руслаштырыусылар аманатына тоғролок һаҡлап, баштан уҡ бөтә эшен шул аманатты бойомға ашырыуға йүнәлтте.

50-се йылдар аҙағында руслаштырыу политикаһын яңынан көсәйтеп, үҙәк хөкүмәт рус телен уҡытыуҙы яҡшыртыу һылтауы менән милли мәктәптәрҙе рус телендә уҡытыуға күсереү хаҡында урындағы органдарға аҫтыртын күрһәтмә бирҙе. Шул мәсьәлә буйынса республикаларҙың тар даирә мәғариф түрәләре ҡатнашлығында региональ кәңәшмәләр үткәрелеп, Мәскәүгә кәрәкле ҡарарҙар ҡабул ителде. Ҡабул ителгән ҡарарҙар нигеҙендә БАССР мәғариф министерствоһы рус теленән яңы программа сығарҙы. Яңы программа буйынса, рус телен уҡытыу 1 синыфтың икенсеярты йыллығынан индерелгән, рус теле менән рус әҙәбиәтен аҙналыҡ дәрес

8 сәғәт итеп күбәйтелде. Был сара мәктәпртәрҙе рус телендә уҡытыуға тәүге әҙерлек баҫҡысы булды.

Ҡыйыуыраҡ икенсе баҫҡысҡа КПСС-тың XXII съезы башланғыс һалды. Ул съезда халыҡтарҙы ҡушыу хаҡындағы Ленин тезисы алға сығарылды. КПСС Үҙәк Комитеты Генераль секретары Н.С.Хрущев КПСС программаһы тураһындағы докладында: «Коммунистар милли үҙенсәлек һәм айырмалыҡтарҙы мәңгеләштереүгә, нығытыуға ҡаршы, улар милли айырымлыҡтарҙың юғалғаны һәм бөткәне өсөн бошона алмай»[158], - тине. Ошонан һуң партия һәм хөкүмәт органдарының бөтә эше айырмалыҡтарҙы мөмкин тиклем тиҙерәк бөтөрөүгә йүнәлтелде һәм милли мәктәптәр бик ҡыйыу рәүештә рус телендә уҡытыуға күсерелә башланы. Был эш халыҡҡа белгертмәй, уның фекере менән теләген һорамай, тейешле инстанцияларҙың талабы буйынса эшләнде.

Иң элек боронғо башҡорт ерендә, ләкин хәҙер Башҡорт республикаһынан ситтә (Курган, Силәбе, Свердловск, Пермь, Ырымбур, Куйбышев, Саратов өлкәләрендә) йәшәгән башҡорттарҙың мәктәптәре һис бер мәшәҡәтһеҙ рус телендә уҡытыуға күсерелде. Унда был сара туранан – тура административ бойороҡ менән үткәрелеп, 1964 – 1965 йылдарҙа тотош тамамланды һәм башҡорт мәктәптәре рус мәктәптәренең уҡыу планы буйынса уҡый башланы, йәғни ғәҙәттәге рус мәктәбенә әйләнде. Башҡорт теле менән башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу уларҙа бөтөрөлдө. Силәбе өлкәһенең бер нисә мәктәбендә генә халыҡтың бик ныҡ юллауы арҡаһында бер – ике сәғәт башҡорт телен программанан тыш факультатив дәрес рәүешендә ҡалдырырға рөхсәт иткәндәр.

Башҡорт АССР-ының үҙендә партия күрһәтмәһен тейешенсә үтәүгә бик ҙур тырышлыҡ һалынды. 60-сы йылдар башынан уҡ республикала бик күп мәктәп руслаштырылды. Бер ыңғай башҡорт телендә сыҡҡан район газеталарының бөтәһе лә рус газеталарының тәржемәләнгән дубляжына әйләндерелде. «Совет Башҡортостаны» газетаһы Өфөләге журналист һәм интеллигенция коллективының бер өлөшө ҡаршы сыҡҡан өсөн генә ул яҙмыштан ҡотолоп ҡалды.

---

158 Хрущев Н.С. О программе КПСС. М., 1961, 192-се бит.

Башҡорт теленең, үҙ алдына ҡулланылышын мөмкин тиклем нығыраҡ сикләр өсөн бөтә сара күрелде. Шулай булһа ла, БАССР-ҙағы эштең барышы, мәктәптәрҙе руслаштырыу тиҙлеге партия һәм хөкүмәт органдарын ҡәнәғәтләндермәй ине. Шуға күрә ,1972 йылдың майында КПСС өлкә комитеты БАССР мәғариф министерствоһы хеҙмәткәрҙәрен, юғары уҡыу йорттарының вәкилдәрен кәңәшмәгә йыйып, милли мәктәптәрҙең бөтәһен дә мотлаҡ рус телендә уҡытыуға күсереү, 1975 йылға тиклем шул эште тамамлау хаҡында туранан-тура ҡаты күрһәтмә бирҙе. Өлкә комитеты Башҡортостан китап нәшриәтенә 1972 йылдан башҡорт телендә дәреслектәр сығарыуҙы туҡтатырға ҡушты. Өлкә комитетының ҡушҡанын китап нәшриәте шунда уҡ үтәргә ашыҡты. Өлкә комитеты район мәғариф бүлектәренә баҫым яһап, мәктәптәрҙе рус телендә уҡытыуға күсереү эшен тиҙләтергә бойорҙо. Шундай уҡ талап һәм ҡаты бойороҡ, үҙ нәүбәтендә, өлкә комитетына үҙәктән килә ине.

1972 йылдың июнь – июль айҙарында КПСС өлкә комитетының социологик лабораторияһы ошо мәсьәлә буйынса халыҡтан һайлатма һорау алды. Һорауҙың һөҙөмтәһе һоралған кешеләрҙен 75 проценты (шуның 37 проценты – 4 синыфты бөткәнсә генә булһа ла) милли мәктәптәрҙе һаҡларға теләгәнен күрһәтте. Ләкин өлкә комитеты халыҡтың хатта махсус рәүештә һайлап алынған төркөмдәре күпселек тауыш менән милли мәктәпте яҡлағанын иҫәпкә алманы. Өлкә комитеты раҫлаған план буйынса, 1973/74 уҡыу йылында башҡорт мәктәптәренең 2/3 өлөшө руслаштырылды. Тәүге мәлдә урынына һәм шартына ҡарап, рус теленә күсеү төрлө мәктәптә төрлөсә аткарылды: беренсе, икенсе, бишенсе, һигеҙенсе синыфтан. Шуның менән бергә башкорт теле дәресе исем өсөн генә уҡыу фәндәренең береһе итеп ҡалдырылды. БАССР мәғариф министерствоһы үҙәк органдарға, 1975 йылда милли мәктәптәрҙең бөтәһе лә рус теленә күсерелә, тип доклад ебәрҙе. Өлкә комитетының һәм башҡа органдарҙың был сараһында башҡорт халҡы ҡатнашманы. Етәксе органдар халыҡҡа, туған тел менән бер ҡайҙа ла барып булмай, балаларға иң элек рус телен белергә кәрәк, тип һеңдерергә тырышты. Халыҡ ошо һүҙҙең партия эшмәкәрлеге менән ҡоролған донъяла раҫланғанын куреп, мәктәптәрҙең руслаштырылыуына сараһыҙҙан юл ҡуйҙы. Милли мәктәпте

яҡлап маташҡан кешеләрҙе милләтселектә ғәйепләп, бик ныҡ ҡурҡытып ҡуйҙылар. Шул юл менән халыҡты ыңғайлатып, партия һәм мәғариф түрәләре ҙур иркенлек алды. Партия органдары, 1939—1940 йылдарҙа рус алфавитына күсергәндәге кеүек үк, һис оялмай халыҡ теләгенә һылтанды, халыҡ исеменән халыҡҡа ҡаршы эштәр эшләне. БАССР-ҙың 1978 йылғы VII уҡытыусылар съезында КПСС өлкә комитетының беренсе секретары М.З.Шакиров үҙенең сығышында: «Республика халҡының ҡайнар теләген иҫәпкә алып, һуңғы йылдарҙа планлы рәуештә төп фәндәрҙе рус телендә уҡытыуға күсереү эше башҡарыла»[159], - тине. Ә ғәмәлдә халыҡ ошо белдереүҙән һуң мәктәпте руслаштырыуҙың планды алып барылғанын белде.

«Төп фәндәрҙе рус телендә уҡытыуға күсереү» сараһы 70-се йылдарҙың уртаһында уҡ сиктән сығып китте. Башҡорт мәктәптәре 1 синыфтан уҡ рус мәктәптәренең уҡыу планы буйынса уҡый башланы, ҡайһы бер мәктәптәрҙә генә туған тел менән туған әҙәбиәт факультатив дәрес итеп ҡалдырылды. Ундай мәктәптәр башҡорт балаларын уҡытҡан һәм башҡорт теленән дәрес булған өсөн генә һаман башҡорт мәктәбе тип иҫәпләнде. Ләкин башҡорт дәрестәренә ул мәктәптәрҙә тик исем өсөн, күргәҙмәлек өсөн генә урын бирелде. Рус теленән аҙнаһына 8 – 10 сәғәт дәрес булғанда, башҡорт теле менән әҙәбиәтенә 2 – 3 сәғәт бирелеп, улары ла расписаниенан тыш өҫтәмә дәрес итеп кенә үткәрелә башланы. Мотлаҡ һаналмаған өҫтәмә дәрес артыҡ йөк булып, балаларҙы биҙҙереп бөттө. Шуға күрә ундай «милли» мәктәптәрҙә факультатив туған тел дәресенә һәр синыфтан 4—5 баланан артыҡ йөрөүсе ҡалманы. Мәктәптәрҙә туған телде уҡытыуға шарт булдырыу хаҡында хәстәрлек онотолдо: ул дәрестәрҙе үткәреү өсөн махсус бүлмә, дәреслек һәм уҡыу әсбәптәре, әҙерлекле уҡытыусы һ.б. нәмә кәрәк икәнен уйлау ғәҙәттән сыҡты. Бөтә эш үҙ телен һәм эшен яратҡан һирәк энтузиастар ҡарамағында тороп ҡалды.

---

[159] «Башкортостан уҡытыусыһы», 1978, № 6, 8-се бит

Мәктәптәрҙе руслаштырыу барышында уларҙы эреләтеү эше лә алып барылды. Әҙ комплектлы мәктәп тип, йөҙәрләгән башҡорт мәктәбен яптылар. Башҡорт ауылдарының балаларын колхоз – совхоздарҙың үҙәгендәге татар йәки рус мәктәптәренә беркетеп, теленән яҙҙырҙылар.

Ҡала һәм ҡатнаш милләтле ауылдарҙа фажиғәле хәл барлыҡҡа килде. Балалар баҡсаһында һәм мәктәптә бөтә тәрбиә һәм уҡытыу эше рус телендә генә алып барылғанға, һуңғы 30—35 йыл эсендә үҙ милләтенең телен бөтөнләй белмәгән ике быуын башҡорт балалары үҫеп етте. Мәктәптәрҙе рус телендә уҡытыуға күсереү һәм рус теленең культын нығытыу арҡаһында тел яҙмышы башҡорт ауылдарында ла хәүефкә ҡалды. Тап-таҙа башҡорт коллективтарында бөтә ижтимағи эште (йыйылышты, байрамды һ.б.) рус телендә алып барыу киң таралды. Балалар үҙ телендә уҡыуҙы ташланы, ололарҙың күпселеге башҡорт телендә сыҡҡан китап, журнал, газетаны уҡымай башланы. Шул сәбәптән был баҫмаларҙың тиражы бик әҙәйҙе. Башҡорт китаптарының тиражын кәметеүгә ошоға ҡәҙәр татар һәм рустар етәкселек иткән китап нәшриәте менән китап сауҙаһының политикаһы ла ҙур сәбәп булды .Улар халыҡтың рухи һәм мәҙәни ихтыяжын ҡанәғәтләндереү өсөн бик кәрәк булған башҡорт нәмәләрен баҫыу һәм таратыуға мөмкин тиклем кәртә ҡуйҙы. Шундай политика арҡаһында китаптарҙың баҫылған хәтлеме лә тейешле кешегә барып етмәй, магазин һәм складтарҙын еүеш подвалдарында серей. Башҡорт китаптары мәктәп китапханаларында бөтөнләй тиерлек юҡ. 1988 йылдың, октябрендә башҡорт республика газетаһының хеҙмәткәрҙәре тарафынан үткәрелгән тикшереү һөҙөмтәһендә район, ауыл һәм мәктәп китапханаларына килгән һәр 200 – 300 китаптың береһе генә башҡорт китабы булғаны асыҡланды. Китапханасылар был хәлде райондарҙағы китапхана коллекторҙарына һылтай, ә китапхана коллекторҙары ғөмүмән Башҡортостанда башҡорт халҡының, башҡорт әҙәбиәтенең барлығын инкар итә. Мәҫәлән, редакция хеҙмәткәрҙәре бер

районындағы үҙәк балалар китапханаһының 20 меңлек фондында 18 генә иҫке башҡорт китабы барлығын билдәләгән[160].

Хәҙерге заманда ҙур әһәмиәт тотҡан радио һәм телевидение тапшырыуҙарын ойоштороуҙа ла эш бик насар. Һуңғы егерме йыл эсендә бер тәүлектәге башҡорт тапшырыуҙарының ваҡыты Мәскәү тарафынан 40 – 50 минутҡа ҡыҫҡартылды. Шуның менән бергә туған телдә сығып һөйләй алған специалистар бик әҙ булыу сәбәпле урындағы тапшырыуҙар комитеты хатта бүленгән ваҡытты ла ҡайһы берҙә тотош файҙалана алмай. Партияның «интернациональ» политикаһы арҡаһында милли кадрҙарҙың күпселеге үҙ телендә ике һүҙҙе лә бәйләп яҙа йәки һөйләй белмәй. Шулай булғас, башҡорттарға хәҙер башҡорт телендә лекция һәм докладтар уҡылмай тип, башҡорт телендәге радио һәм телевидение тапшырыуҙарын тыңларға теләгән башҡорттар һаман әҙәйә тип, башҡорт артистарының Башҡортостан ҡалаларына һәм район үҙәктәренә барып ҡуйған концерт һәм спектаклдәрен оло йәштәге кешеләр генә ҡарай тип, сәхнә тамашалары йылдан – йыл милли төҫөн юғалта бара тип, һис тә аптырар урын ҡалмай.

Йәштәргә интернациональ тәрбиә биреү һәм уларҙың дөйөм белем кимәлен күтәреү өсөн тип башҡарылған руслаштырыу политикаһы, бигерәк тә ауыл ерендә, бөтөнләй кире һөҙөмтәгә килтерҙе. Аңлайышһыҙ ят телдә дәресте тыҡыу балаларҙың зиһенен киптерҙе, уларҙы белем алырға түгел, белмәгән көйө ятларға өйрәтте, ә ятлап уҡыу фекер итеү һәләтен бөтөрҙө, йәмғиәт фәндәренән дә, тәбиғәт фәндәренән дә белем кимәлдәрен ныҡ түбәнәйтте. Юғары уҡыу йорттарының уҡытыусылары, хатта яҡшы тип һаналған башҡорт мәктәптәренән дә рус телендә уҡытыу башланғаны бире түбән әҙерлекле балалар сыға башланы, тип зарлана. Шуның өсөн хәҙер юғары уҡыу йорттарына ингән башҡорттар һаны элеккегә ҡарағанда ла кәмене.

Йәштәрҙең (хатта йәштәрҙең генә лә түгел) башҡорт тарихын, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен белмәүе нык әсендерә. Башҡорттарҙың үҙ тарихын белмәүе электән

[160] «Совет Башҡортостаны», 1988 йыл 27 октябрь.

килә, сөнки совет осоронда ул бөтөнләй уҡытылманы. Уҡыу планы буйынса, башҡорт балалары боронғо Греция һәм Рим тарихын, Европа илдәренең боронғо һәм хәҙерге тарихын, мотлаҡ рәүештә иң борондан башлап рус тарихын өйрәнә, әммә ләкин үҙ халҡының тарихын өйрәнмәй. Балалар рус һәм сит ил яҙыусыларының ижадын үтә, ә башҡорт яҙыусыларының ижады менән факультатив рәүештә генә таныша, унда ла һәр мәктәп, һәр уҡыусы түгел. Шуға күрә башҡорттарҙың күбеһе үҙ әҙәбиәте һәм мәҙәниәте хаҡында бер нәмә лә белмәй. Был йәһәттән Мәләүез ҡала советы башҡарма комитеты хеҙмәткәрҙәренең, 1988 йылдың башында ҡала мәктәптәренең береһен тикшереүе бик асыҡ һөҙөмтә биргән. Тикшереүгә мәктәптең 7–10 синыфтарынан 389 уҡыусы ылыҡтырылған, шуларҙан 75 уҡыусы башҡорт булған (тимәк мәктәп ҡатнаш). Шул башҡорт балаларының яртыһынан күбеһе башҡорт телен бөтөнләй белмәй, ҡалғандарының күбеһе башҡортса һөйләгәнде әҙ – мәҙ генә аңлай булып сыҡҡан, бик әҙ генәһе ата – әсәһенең телендә ике һүҙ ялғап әйтә алған. Тикшереүгә ылыҡтырылған башҡорт балалары Салауат Юлаев тураһында ниҙер ишетһә лә, бер нәмә лә һөйләй алмаған. Улар бер генә башҡорт яҙыусыһын да, композиторын да атап әйтә алмаған, әҫәрҙәрен инде күптән белмәгән[161].

Үҙ халҡының тарихын, мәҙәниәтен белмәү йәштәрҙең белем даирәһен генә сикләмәй, ә бик ҙур рухи зыян килтерә. Тыуған тупрағынан айырылған йәш быуын үҙ халҡының яҙмышына битараф булып, донъяның ҡыҙығын юғалтып, вайымһыҙ, моңһоҙ бер ят бауырға әйләнә. Рус телендә уҡытыу һәм тәрбиәләү уларға рус милли рухы ла бирмәгән, ә зат – ырыуһыҙ, милләтһеҙ, илһеҙ мәхлүккә әйләндергән. Башҡорт мәктәптәрендә русса уҡытыу башланып, туған телде йән көскә ҡыҫырыҡлағандан бире милли кадрҙар сығанағы ҡороно. Йәш кадрҙарға мәктәп, радио, матбуғат, нәшриәт, театр һәм башҡалар ҙур мохтажлыҡ кисерә. Ғилми институт һәм юғары уҡыу йорттарына быға тиклем дә башҡорт кадрҙары бик әҙ килгән булһа, хәҙер бөтөнләй тиерлек

---

[161] «Советская Башкирия», 10 апреля, 1988 г.

килмәй башланы. Башҡорт ижади интеллигенцияһының уртаса йәше 50 йәштән юғары күтәрелде. Милли мәҙәниәттең оло быуын эшмәкәрҙәре сафтан сыға, уларға алмаш юҡ, булыр тигән өмөт тә бик бәләкәй, сөнки мәғариф өлкәһендәге баш – баштаҡлыҡ дауам итә әле, күп саф башҡорт ауылында һаман бөтә фәнде рус телендә уҡытыу һаҡлана. Өҫтәүенә, КПСС Үҙәк Комитеты, Лениндың революцияға тиклемге мәғариф түрәләренән алған идеяһын яңыртып, балаларҙы ҡатнаш милләтле мәктәптәрҙә уҡытырға ҡушты. Параллель башҡорт кластары ундай мәктәптәрҙә милли принцип тейешенсә һаҡланмай. Башҡорт кластары насар өлгәшкән балалар иҫәбенә ойошторола, шуның өсөн кәмһетелгән, меҫкен бер хәлдә тороп ҡала. Ундай ҡатнаш мәктәптәр балаларҙы тиҙерәк руслаштырыу урыны ғына булып тора.

Башҡорт уҡытыусылары һәм мәғариф эшмәкәрҙәре хәҙерге хәлдә башҡорт балаларына башҡорт телен уҡытыу эшен йүнләп юлға һала алмай. Тиҫтәләгән йыл буйы алып барылған руслаштырыу политикаһы арҡаһында хәҙер тәбиғәт һәм йәмғиәт фәндәрен башҡорт телендә уҡытырлыҡ уҡытыусылар бөткән, хатта башҡорт теле менән әҙәбиәтен кәрәгенсә уҡытырлыҡ белемле кеше етмәй. Рәсми мәғлүмәткә ҡарағанда, юғары белемле башҡорт теле уҡытыусылары менән Башҡортостан мәктәптәре 82 процентҡа ғына тәьмин ителгән, ә төп башҡорт халҡы йәшәгән күрше өлкәләрҙә улар бөтөнләй тиерлек ҡалмаған. Кадрҙар әҙерләү тиҙлеге элегесә барһа, олоғайып киткән уҡытыусылар урынын йәштәр бер ваҡытта ла тултыра аласаҡ түгел, туған тел уҡытыусыларына барған һайын ҡытлыҡ көсәйәсәк. Башҡорт телендә башҡа фәндәрҙе алып барырлыҡ уҡытыусылар тураһында һөйләү ҙә файҙаһыҙ: улар күптән бөткән, хәҙер ҙә уларҙы әҙерләмәйҙәр, ҡасан булыры ла билдәһеҙ.

Башҡорт телендә уҡытылған мәктәп, синыф, төркөмдәр өсөн, бигерәк тә ҡала һәм ҡатнаш ауылдарҙа, уҡыусы йыйыуы ла анһат түгел. Был эшкә, бер яҡтан, башҡорт теле дәресенең төп дәрестәр иҫәбенә индерелмәүе, мотлаҡ һаналмауы, дөйөм өлгәште баһалағанда иҫәпкә алынмауы ҡамасаулаһа, икенсе яҡтан, ошоғаса рус телендә генә уҡып йәки

аралашып, үҙ милләтенең теленә туғанлыҡ тойғоһон юғалтҡан балаларҙың өҫтәлмә йөк алырға теләмәүе кәртә ҡуя. Шундай уҡ мәктәп үтеп, милли нигилизм рухында тәрбиәләнгән ата – әсәләрҙең дә күбеһе үҙ балаларының башҡорт телендә уҡыуына, башҡорт телен өйрәнеүенә ҡаршы килә йәки вайымһыҙ ҡарай. Шундай уҡ ҡараш балалар баҡсаһы ойоштороу өлкәһендә лә күҙәтелә, һөҙөмтәлә хатта 98 процент халҡы башҡорттарҙан торған райондарҙа ла тәрбиә эше рус телендә алып барыла. Шулай итеп, милли тупрағынан айырылған йәштәрҙең балалары ла үҙ халҡының тарихи һәм мәҙәни мираҫын ҡабул итерлек булып үҫмәй, үҙ милләтенең ысын улы була алмай.

Башҡорт мәктәптәренең үҫешенә, юғарыла әйтелгәндәрҙән тыш, махсус урта һәм юғары уҡыу йорттарының башҡорт телендә уҡытмауы ҙур кәртә булып тора. Шундай хәлдә үҙ балаларын белемле кеше итергә теләгән ата-әсәләр рус телендә уҡытыуҙы өҫтөн күрергә мәжбүр була*.

* Балаларҙы башҡорт телендә уҡытыу үҙенең туған телен өйрәтеү хаҡында һүҙ сыҡҡанда үҙенән башка бер мәсьәлә булып торған төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының хәле булмай. Был яҡтың башҡорттары, шул иҫәпән Минзәлә һәм Пермь яғы, колонизаторҙарҙың беренсе аяуһыҙ һөжүменә дусар булған. Улар беренсе башлап, аяуһыҙ XVI быуаттың 70-се йылдарынан уҡ, башҡорт ерҙәрен баҫып алыуға ҡаршы көрәш асҡан. Шулай уҡ XVII— XVIII быуаттарҙағы башҡорт яуҙарының күбеһен улар башлап, бик ныҡ ҡатнашлыҡ иткән. Азатлыҡ көрәшендә улар араһынан данлыҡлы етәкселәр сыҡҡан. Бөтә башҡорт халҡы алдында оло шөһрәт һәм хөрмәт ҡаҙанған шундай етәкселәрҙән 1681—1684 йылдарҙағы яуҙа Түләкәй, 1704 – 1711 йылдарҙағы яуҙа Түләкәйҙең улы Күсем, Дүмәй, Исмәғил мулла, 1735 –1740 йылдарҙағы яуҙа Күсемдең улы Аҡай, Аҡайҙың улы Абдулла, 1755 йылғы яуҙа Сурағол мулла, 1773 – 1775 йылдарҙағы яуҙа Батырҡай, Әбдей, Әҙел һәм башҡа бик күптәр булған. Батша карателдәре етәкселәрҙең һәм халыҡ батырҙарының бөтәһен дә ҡаты язалаған. Был яҡ башҡорттары артабан да, XIX – XX быуаттарҙа, колониаль иҙгенлеккә» ҡаршы көрәшеүен дауам иткән. Уларҙы, башҡорт азатлыҡ көрәшенең һәр ваҡыт алғы сафында торған башҡорттарҙы, рус колонизаторҙары быуаттар буйы аяуһыҙ ҡырған һәм талаған. Ошо ҡанлы эштә рустарға һәр саҡ татарҙар ныҡ ярҙам иткән. Ҡырып юҡ ителгән төп халыҡ кешеләренең еренә XVIII быуаттың урталарынан күслө ағым булып Ҡазан провинцияһының татарҙары ябырылған һәм тулыр – тулмаҫ йөҙ йыл эсендә, XIX быуаттың урталарына тиклем, татарҙар был районларҙы һан яғынан да, хужалыҡ яғынан да өҫтөнлөк иткән.

Башҡорт теленең ҡулланыш даирәһен киңәйтеүгә, халыҡтың мәҙәни тормошон йәнләндереүгә йүнәлтелгән ынтылыштар ҙа ҙур ҡаршылыҡтарға тап

---

Татарҙар ташҡыны баҫып, бик күп ҡатнаш ауылдар килеп, агрессив тәбиғәтле, бик хәлле татар крәҫтиәндәренең һәм руханиҙарының экономик һәм рухи яҡтан ныҡ иҙелгән, бөлгән башҡорттарға татарлаштырыу маҡсаты менән көслө тәьҫир яһауы арҡаһында, был яҡта яйлап татар культураһы һәм татар теле хакимлек итә башлаған. XIX быуат аҙағына, төньяҡ һәм төньяҡ - көнбайыш башҡорттарының теле күп яғы менән татар теленә оҡшап ҡалған. Шуға ҡарамаҫтан, был башҡорттар үҙҙәренең милли тойғоһон юғалтмаған, улар ошо көнгә тиклем, беҙ башҡорт, тип ныҡ тора.

20-се йылдарҙа Башҡорт АССР-ының мәктәптәренә элекке «төрки» урынына башҡорт теле индерелеп, һәр айырым мәктәп өсөн уҡытыу теле билдәләнгән саҡта, республиканың мәғариф органдары татарға яҡын телде» һөйләшкән төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының балалары татар телендә уҡырға тейеш тип тапҡан Башҡорт республикаһында йәшәгән башҡорт балаларына татар теле менән татар әҙәбиәтен өйрәтеп, Ҡазанда сыҡҡан дәреслектәр буйынса, «безнең туган ил Татарстан, безнең баш шәһәр Казан», тип тылҡый башлағандар. Совет осорона ҡәҙәр төньяҡ һәм төнъяҡ – көнбайыш башҡорттарының ассимилияцияһы татарҙар баҫымы менән генә атҡарылған булһа, хәҙер ассимиляция рәсми рәүештә законлаштырылған. Башҡорттарҙы мәктәп йәшенән үк көслөк менән үҙҙәренең тыуған тупрағынан айыра башлағандар. Ярты быуатлыҡ шундай эштән һуң, 80-се йылдарҙың башында, КПСС өлкә комитетының беренсе секретары М. З.Шакиров инициативаһы менән БАССР-ҙың төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш мәктәптәренә башҡорт теле менән башҡорт әҙәбиәтен дәрес итеп индерәләр, ләкин был эште атҡарғанда мәктәптә уҡыған балаларҙың башҡортмо, татармы икәнен айырып тормайҙар. Ошо хата татарҙар өсөн ҙур йәбешкегә әйләнә һәм, илдә демократик һулыш һиҙелә башлағас, улар, татарҙарға көсләп башҡорт телен уҡыталар, тип КПСС Үҙәк Комитетына хат яҙалар, татарҙар иҫәбенә, әлбиттә, шул районДарҙың төп башҡорттарын да индерәләр. КПСС Үҙәк Комитеты был ялыуҙы иҫәпкә алып, элекке тәртипте кире ҡайтара, һәм 1988/89 уҡыу йылынан төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш районДарының мәктәптәре, йәнә балаларҙың милләтен иҫәпкә алмайынса, тотош ҡабаттан татар теле менән татар әҙәбиәтен өйрәнеүгә һәм татар телендә уҡыуға ҡайта («Безнең туган ил Татарстан, безнец башшәһәр Казан»). Шулай итеп, башҡорт халҡының өстән бер өлөшө яңынан үҙ милләтенең телен өйрәнеүҙән мәхрүм ителә. Башҡорттарҙы көсләү дауам итә.

Ләкин татарҙарға был ғына аҙ. Улар төньяҡ һәм төньяҡ – көнбайыш башҡорттарын йотоу менән гена сикләнмәй. Хәҙер улар башҡорт халҡына ҡаршы тағы нығыраҡ һөжүм асты. Яңыраҡ төҙөлгән ирекле ойошмалар гегемоник ынтылыштарын тергеҙеп, тағы татар менән башҡортто ҡушырға, Татар – Башҡорт республикаһы төҙөргә ярһый башланы.

була. Башҡорт теленең ижтимағи донъяла ҡулланылышы бик тар. Райондарҙағы радио тапшырыуҙары рус телендә генә алып барыла. Район газеталары купселек районда, хатта башҡорттар күп булған ҡайһы бер райондарҙа ла, рус телендә сыға. Бигерәк тә күрше өлкәләрҙәге төп башҡорт халҡы баҫылып йәшәй. Уларҙың Башҡорт республикаһындағы башҡорттарҙың мәҙәни тормошонда ҡатнашырға, башҡорт китабы табырға, башҡорт радио-телевидениеһы тапшырыуҙарын ҡарарға мөмкинлектәре юҡ. Республикалағы башҡорттарға ҡарағанда руслаштырыу политикаһының баҫымын улар нығыраҡ кисергән. Улар араһында үҙ телендә уҡый белгән һәм уҡырға теләгән, башҡорт газета алдырған кеше әҙәйгән. Был йәһәттән, мәҙәниәт эшмәкәрҙәренең һуңғы ваҡытта ныҡ тырышыуына ҡарамаҫтан, Башҡортостандың үҙендә лә күҙгә күренерлек үҙгәреш юҡ.

Шундай хәлдә башҡорт интеллигенцияһы милли телде һәм милләтте ҡотҡарыр сара эҙләп, ике теллелеккә йәбешә, ике теллелекте иң яҡшы юл, телде ҡотҡарыу аскысы тип пропагандаларға тотона.

Ике теллелек хаҡындағы күрһәтмә КПСС-тың руслаштырыу политикаһы нык "көсәйгән саҡта бирелде. Шул факт үҙе үк ике теллелектең руслаштырыу политикаһына ҡаршы килмәгәнен күрһәтә. КПСС етәкселеге элекке йүнәлеште хуплап, Үҙәк Комитеттың февраль (1988 йыл) пленумында: «Милли рус ике теллелеген актив рәүештә үҫтерергә», –тип ҡарар ҡабул итте. Демократик һулыш менән дәртләнгән ябай халыҡ был иҫке һүҙҙе яңыса аңлап, ике теллелекте телдәр тиңлеген тормошҡа ашырыу сараһы тип ҡабул итте. Кешеләр туған телде һәләкәттән ҡотҡарыуҙа ике теллелектең сихри көсөнә өмөт бәйләне. Ләкин ике теллелек милли телдәрҙе ҡотҡармай. Рус дәүләт теле бөтә ижтимағи донъяла сик – кәртәһеҙ хакимлек иткән саҡта ике теллелек милли телдәрҙең тиңлеген һәм тереклеген тәьмин итмәй, ул бер теллелеккә, йәғни милли телдәрҙең бөтөүенә, рус булмаған халыҡтарҙың тотош руслашыуына китеп барған юлдағы бер аралыҡ ҡына була. Әгәр эш хәҙергесә барһа, башҡорттарға был һуңғы көнгә етер – өсөн оҙаҡ ҡалмаған.

Бында яҙып үткән бөтә нәмә Мәскәү тарафынан бирелгән мөмкинлек һәм ирек кәртәһендә барлыҡҡа килгән ауырлыҡтарҙы сағылдыра. Ауырлыҡтың сәбәбе әллә ниҙән түгел, ә башҡорттарҙың иң төп, иң мөһим шартҡа үҙ милли территорияһына, үҙ милли тормошона, үҙ милли донъяһын үҙенсә ҡороу хоҡуғына эйә була алмауынан килә. Ошоға тиклем башҡорт халҡының яҙмышын башҡалар хәл итә, ошоға тиклем халыҡ хакимдәрҙең колониаль бойондороғонда йәшәй. Аяуһыҙ көсләү һәм иҙеү юлы менән ҡоролған бөгөнгө башҡорт тормошо тотош кирегә тартҡанда, туған телде өйрәнеү, мәҙәниәтте үҫтереү эшен өндәмәләр менән генә, патриотик тойғоларҙы уятыу менән генә башкарып булмай. Социаль – экономик нигеҙ булмаһа, милләттең төп этник билдәләрен тәшкил иткән тел менән мәҙәниәт үҙ – үҙлегенән генә мәңге тереклек итә алмай. Берҙәм хужалыҡ комплексы төҙөлөп, халыҡтың үҙ аллы политик һәм экономик тормошо бөтөрөлгән, милләт сиктәрен юйып, халыҡтарҙы тотош аралаштырған Рәсәйҙә рус дәүләт теле башҡа телдәрҙе бөтә ижтимағи тормош даирәһенән, иң элек хеҙмәт өлкәһенән, аяуһыҙ ҡыҫырыҡлай һәм үлемгә дусар итә. Был хәлдән сығыу өсөн үҙәк хөкүмәт биргән ялған еңеллектәргә ышанырға йәки терәк – таяуһыҙ көйө милли тел менән мәҙәниәтте ҡотҡарып маташырға түгел, ә милләтте ысынлап та ҡотҡара торған төп мәсьәләне хәл итергә кәрәк. Төп мәсьәлә бойондороҡһоҙ, үҙ аллы милли дәүләт төҙөүҙән ғибәрәт. Милләтте ҡотҡарыр бүтән юл юҡ, булыуы ла мөмкин түгел.

Шул хәҡиҡәтте аңлап һәм, унан да бигерәк, объектив милли үҫеш ҡанундарының көслө талабына буйһоноп, азатлыҡ көрәшенә ҡуҙғалған халыҡтар СССР-ҙағы союздаш республикаларҙың үҙ алдына айырылып, милли дәүләт төҙөүенә өлгәште, эле яңыраҡ ҡына «берҙәм һәм ҡаҡшамаҫ» тип һаналған СССР ҡапыл тарҡалды. Ошо хәлде айырым рус эшмәкәрҙәре элекке бөйөк империяның һис юғында төп өлөшөн һаҡлап алып ҡалыр өсөн РСФСР-ҙың дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итте, йәғни үҙ империяһында нисәмә быуатлыҡ үҙ хакимлегенән үҙе азатлыҡ алды. Шуның менән бергә яңы етәкселек Россия Федерацияһы тип аталған ҡырҡынды империя эсендәге автономиялы

республикаларҙың үҙ аллыҡ хоҡуғын тулыһынса инҡар итеү юлына баҫты, 1990 йылдың 11 октябрендә БАССР Юғарғы Советы ҡабул иткән дәүләт суверенитеты хаҡындағы декларацияны буш ҡағыҙға тиерлек торғоҙоп ҡалдырҙы, Башҡортостан хөкүмәтен, башҡа күпселек республика менән берлектә, «берҙәм һәм бүленмәҫ» Россияны таныу тураһындағы Белдереүгә һәм колониаль Федератив договорға ҡул ҡуйырға мәжбүр итте. Ләкин Башҡортостан хөкүмәтенең был түбәнселекле ҡылығына юғарынан яһалған ҡаты баҫым ғына түгел, ә республика эсендәге шарттар ҙа сәбәпсе булды. Республика халҡының 78 проценты килмешәктәрҙән тороп, шуларҙың абсолют күпселеге башҡорт милли дәүләтселегенә, Россиянан айырылыуға ныҡ ҡаршы булғанда, әлбиттә, хөкүмәттең үҙ иркенә эш итеү мөмкинлеге бик ҡыҫыла.

Россия етәкселәре милли дәүләт ҡоролмаһына юл бирергә теләмәй, уға юл бирһә, ошоға тиклем өлгәшкән бөтә колонизация һөҙөмтәһе юҡҡа сығыр, власты һаҡларға, руслаштырыу эшен дауам итергә гарантия ҡалмаҫ тип ҡурҡа. Әлеге хакимлекте һаҡларға тырышҡанын ул хәҙер бик хәйләле яңы концепция менән ышыҡлап маташа. Яңы концепция буйынса, йәнәһе, «кеше хоҡуғы милләт хоҡуғынан өҫтән тора», һәр гражданин бөгөн йәшәгән үҙ урынында тигеҙ һәм тулы хоҡуҡ менән файҙаланырға тейеш. Был концепция 1948 йылда Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы ҡабул иткән «Кеше хоҡуғы хаҡындағы дөйөм декларация»ға тоғролоҡ һаҡлау һылтауы менән оятһыҙ рәүештә шул уҡ декларацияны боҙа. Ни өсөн тигәндә, ул декларацияны үтәү иң элек күп быуатлыҡ колониаль политиканың һөҙөмтәләрен тотош юҡ итеү һәм һәр халыҡтың үҙенә бойондороҡһоҙ, суверенлы милли дәүләт төҙөргә мөмкинлек биреү шартына бәйле. Шул шартты үтәмәгәндә, Россия етәкселеге ҡуйған концепция электән баҫып алған колониаль биләмәне һәм электән килгән колониаль тәртипте нығытыуға ғына хеҙмәт итә, бойондороҡло халыҡтарға ул концепция ирек тә, тигеҙлек тә килтермәй. Шуға күрә К. Маркс: «Айырым шәхес

азатлыҡ алғандан, тотош милләт азат булып китә алмай[162]», — тигән. Ул ғына түгел, айырым шәхес тә граждандлыҡ хоҡуғын тигеҙләүҙән тулы азатлыҡ ала алмай, сөнки, 1960 йылдың 14 декабрендә ҡабул ителгән «Берләшкән Милләттәр ойошмаһы Генераль Ассамблеяһының колониаль ил һәм халыҡтарға бойондороҡһоҙлоҡ биреү хаҡындағы декларацияһы»нда әйтелеүенсә, милләттәрҙең тулы бойондороҡһоҙлоғо һәм суверенитеты ғына иң мөһим кеше хоҡуҡтарын тәьмин итә ала[163]. Кешеләге кәмселек һәм түбәнселек тойғоһо тик уның милләте азатлыҡ алғас ҡына юйыла. Тимәк, «кеше хоҡуғының өҫтөнлөгө» түгел, ә милләт хоҡуғының өҫтөнлөгө, милләттәр азатлығына юл асып, кешенең иң төп, иң мөһим хоҡуҡтарын ғәмәлгә ашырыуға мөмкинлек бирә.

Милли суверенитетты ғәмәлгә ашырмай тороп, башҡорт теленең Башҡортостан эсендә дәүләт теле булып йөрөүе лә мөмкин түгел. Башҡорт телен Башҡортостанда дәүләт теле тип иғлан итеү тәжрибәһе, юғарыла әйтелгәнсә, 1921 йылда бер тапҡыр булды. Әммә был иғлан итеу бер нәмәгә лә килтермәне һәм килтерә лә алманы. Сөнки бер дәүләт ҡоролмаһы эсендә, йәғни Башҡортостан республикаһында, оло дәүләтле милләттең теле бөтә булған йәмғиәт, хеҙмәт, хужалыҡ өлкәһендә һәм эш йөрөтөү ҡағыҙҙарында хакимлек иткән саҡта башҡа дәүләт теленә урын ҡалмай. Ике телдең береһе үрҙә күрһәтелгән бөтә өлкәлә тулы хоҡуҡ алып йөрөмәй икән, ул тел дәүләт теле булып та китә алмай. Шуға күрә Башҡорт республикаһы һаман Россия эсендә булып, милли суверенитет бойомға ашырылмай ҡала икән, башҡорт теле бер ваҡытта ла республикала дәүләт теле хеҙмәтен үтәй алмаясаҡ.

***

Башҡорт халҡы ете быуат ярым буйы сит баҫҡынсыларҙың, тәүҙә татарҙарҙың, шунан һуң – рустарҙың аяуһыҙ иҙгенлегенә ҡаршы азатлыҡ яулап, милли суверенитет яулап көрәшкән. Был көрәш иҫ киткес ҡанлы, ҡот осҡос фажиғәле булған. Изге көрәштә халыҡ икһеҙ – сикһеҙ михнәт күргән,

[162] К. Маркс и Ф. Энгельс Соч., т.1. 419-сы бит.
[163] «Правда», 1960 йылдың 18 декабре.

йөҙ – йөҙ меңләгән иң аҫыл ир – егеттең йәне ҡыйылған. Халыҡтың ирекка ынтылышы шул хәтле көслө булған, хатта уны иҫәпһеҙ ҡорбан да, һис бер ғазап та баҫа алмаған. Шул ынтылыш һәм теләк залимдарға ҡаршы көрәштә халыҡҡа ҡеүәт биргән, милли берҙәмлекте нығытҡан. Халыҡ шуның менән йәшәгән һәм бер ваҡытта ла азатлыҡ өмөтөн юғалтмаған. Халыҡтың быуаттар буйы һаҡлаған ныҡлығын, ҡаҡшамаҫ рухын мәкер һәм тоталитар режим менән большевиктар ғына һындырған. Улар, бер яҡтан, тигеҙлек һәм азатлыҡ хаҡында шаулы декларациялар сығарып, ялҡынлы телмәрҙәр һөйләп, халыҡ йөрәгендә яҡты өмөт, ҙур ышаныс уятҡан, икенсе яҡтан, шул вәғәҙә иткән азатлыҡтың әҙ генә өлөшөнән файҙаланырға теләгән өсөн ҡаты эҙәрләгән, аяуһыҙ язалаған. Башҡорттарҙың ҡан түгеп, яфа сигеп алған территориаль автономияһын ҡоро һүҙгә әйләндереп, уның урынына улар ҡаты диктат ҡыҫымындағы сомтор ғына милли – мәҙәни автономия һымаҡ бер нәмә ҡалдырған. Улар ҡанһыҙ колонизаторҙарға һәм башкиҫәрҙәргә тулы ирек биреп, башҡорт халҡын йыртҡыстсарса ҡырҙырған һәм талатҡан, халыҡты үҙ йөҙөнән, үҙ теләгенән яҙҙырыр өсөн бөтәһен эшләгән. Көслөк һәм алдыҡ менән халыҡҡа улар үҙ идеологияһын, үҙ политикаһын иң юғары, иң бәхәсһеҙ хәҡиҡәт итеп таҡҡан. Улар халыҡтың ере һәм һыуына, тормошо һәм булмышына, уйы һәм һүҙенә, йәне һәм тәненә тотош хаким булып алған. Шуның бөтәһен дә улар алданған һәм таланған халыҡтың, йәнәһе, үҙ мәнфәғәте, үҙ бәхете өсөн тип эшләгән.

В.И.Лениндың тоғро эйәрсендәре ул һыҙған юлдан ары китте. Азатлыҡ килтереүселәр битлеген кейеп, башҡорт халҡына үҙаллылыҡ бирелде тигән булып, улар ғәмәлдә халыҡты белергә лә теләмәне. Улар башҡорт ерендә элекке колонизаторҙарға ҡарағанда ла яманыраҡ йыртҡыслыҡ, баш – баштаҡлыҡ ҡылырға тотондо. Башҡорттоң үҙен ҡан ҡаҡшатҡан кеүек, ерен дә ғазаплай башланы. Улар тәбиғәт байлыҡтарын таларға йөҙ тапҡыр нығыраҡ йәбеште, урмандарҙы ҡырып бөттө, йылға – күлдәрҙе ҡоротто йәки уларҙы быуып, һаҫыған үле һыу ятҡылығына әйләндерҙе. Улар уңдырышлы тупраҡты көлгә ҡалдырып, химикаттар менән тултырҙы, сәсеүлек

майҙанын киңәйтер өсөн тауҙарҙы, болондарҙы һөрөп, файҙаһыҙ бушлыҡ яһаны, шаулап торған тереклек донъяһын бөтөрҙө. Улар колониаль Башҡортостанда тәбиғәтте юҡ итә торған иң зарарлы иҫәпһеҙ завод төҙөп, һауаны, һыуҙы ағыуланы, тирә – яҡты ҡыуға әйләндерҙе. Байлыҡты аяуһыҙ талау, тәбиғәтте ҡоротоу иҫәбенә эшләнгән бөтә ошо эште улар Башҡортостандың экономикаһын үҫтереү тип шаулата, ә ғәмәлдә был үҫтереү» Башҡортостан һәм башҡорт мәнфәғәтенә түгел, тик хоҡуғы һәм мөмкинлегенән тотош мәхрүм булған, ул һаман әүәлгесә колониаль иҙгенлеккә дусар ителгән. Халыҡ руслашып бөтәү алдында тора. Ул рус телен генә түгел, рус цивилизацияһының эскелек һәм әхләҡһеҙлек тигән ҡаҙаныштарын бик яҡшы үҙләштереп бөт!п бара.

Партия һәм хөкүмәт эшмәкәрҙәренең иң гәҙел, иң кешелекле тип күккә күтәргән Ленин милли политикаһы ғәмәлдә иң ике йөҙлө, иң хәйләле бөйөк дәүләтселек политикаһы булып тора. Ул йәмғиәттең төп объектив законына тотош ҡаршы килә. Объектив закон һәр бәләкәй һәм ҙур халыҡтың үҙ аллы, бойондороҡһоҙ бер милли дәүләткә ойошоуын, милләттең эске йөкмәткеһе менән ойошоу формаһы араһында тулы ярашлыҡ булыуын талап итә. Һәр төрлө башҡа ижтимағи күренештәге кеүек, эстәлек менәң форманың ярашлығы халыҡтың ысын мәғәнәле тереклеге өсөн мотлаҡ бер шарт булып хеҙмәт итә. Суверенлы, бойондороҡһоҙ үҙ дәүләтен төҙөгәс кенә халыҡ милләткә әйләнеп, иркен үҫеш юлына сыға, шунһыҙ ул бер милли тойғо йөрөткән тарҡау ялпы булып ҡала һәм ахыр сиктә бөтөүгә дусар була. Шуға күрә башҡорт халҡы, әгәр ул азатлыҡ көрәшендә түккән бөтә ҡаны бушҡа булмаһын тиһә, артабан да йәшәргә теләһә, ялған вәғәҙә һәм енеллектәргә түгел, ә ете быуат ярым элек ҡыйратҡан милли дәүләтен ҡабаттан тергеҙергә тейеш.

*Акманов И.Г.* Башкирское восстание 1704 – 1711 гг. В сб.: «Из истории Башкирии». Уфа, 1968.

*Акманов И.Г.* Башкирское восстание 1735 – 1736 гг

*Акманов И.Г.* Башкирские восстания XVII – перой трети XVIII вв. Уфа, 1978.

*Амин ал Холи*. Связи между Нилом и Волгой. М., 1962

*Амиров Д.Г.* Башкиры. – «Труды научного общества по изучению быта, истории и культуры башкир при Наркомпросе БССР». Вып. 2. Стерлитамак, 1922.

*Андрущенко А. И.* Крестьянская войпа 1773 – 1775 гг М., 1969

*Асфандияров А. 3.* Введение кантонпной системы управления в Башкирии. В сб.: «Из истории Башкирии». Уфа, 1968

*Асфандияров А.3.* Башкирия в период кантонного управления. Автореферат. М., 1969.

Башкирские шежере. Уфа, 1900.

*Булатов А.Б.* Восточные средневековые авторы о башкирах. – В сб.: «Археология и этнография Башкирии», IV. Уфа, 1971.

*Вильгельм де Рубрук.* Путешествие в восточные страны. СПб., 1911

*Гвоздикова И.М.* Новые документы об аресте Салавата Юлаева журнал «История СССР», 1978, № 5.

*Гвоздикова И.М.* Салават Юлаев. Уфа, 1982.

*ГрековБ.Д. КалининН.Ф.* Булгарское государство до монгольского завоевания. Отд. оттиск из кн.: «История Татарии».

*Греков Б. Д., Якубовский А. Ю.* Золотая Орда и ее падение. М. – Л, 1950.

*Закиров С.* Дипломатические отношения Золотой Орды с Египтом. М., 1966.

*Игнатьев Р.* Карасакал – лжехан Башкирии. – «Труды научного общества по изучению быта, истории и культуры башкир при Наркомпросе БССР». Вып. 2. Стерлитамак, 1922.

*Иоанн де Плано Карпини.* История Монголов. СПб.,1911.

Историческая записка о местности прежней Уфимской провинции, где был центр древней Башкирии. СПб., 1867.

*Каргалов В. В.* Монголо – татарское нашествие на Русь. М., 1966.

*Коблов А. Д.* О татаризации инородцев Приволжского края. Казань, 1910.

*Ковалевский А. П.* Книга Ахмеда Ибн – Фадлана о его путешествии на Волгу в 921 – 922 гг. Харьков, 1956.

*Козин С. А.* Сокровенное сказание. М. – Л., 1941. Краткая история СССР, ч. 1. М.—Л., 1983.

*Кузеев Р. Г.* Происхождение башкирского народа. М., 1974.

*Кулбахтин Н. М.* Участие башкирского народа в Крестьянской войне 1773 – 1775 гг. Уфа, 193

*Лимонов Ю. А. и др.* Пугачев и пугачевцы. Л, 1974»

*Мостовенко П.* О больших ошибках в «малой» Башкирии. – Журнал «Пролетарская революция», 1928, № 5/76.

*Муртазин М.Л.* Башкирия и башкирские войска в гражданскую войну. М., 1927.

*Никольский Д.П.* Башкиры. СПб., 1899.

Очерки по истории Башкирской АССР, т. 1, ч.1 Уфа, 1956; т. 1, ч. 2. Уфа, 1959.

*Өмөтбаев* М. Йәдкәр. Өфө, 1984.

*Рашид-ад-дин.* Сборник летописей, т. 1, кн. 1 и кн. 2 М. –Л., 1952; т. 2. М. – Л., I960.

*Ремезов Н. В.* Очерки из жизни дикой Башкирии. М. 1889.

*Руденко* С. II. Башкиры. М. – Л., 1955.

*Рычков П. II.* История Оренбургская (1730 – 1750). Оренбург, 1896.

*Рычков П. И.* Топография Оренбургской губернии. Оренбург, 1887.

*Сафаргалиев М. Г.* Распад Золотой Орды. Саранск, 1960.

*Смирнов А. П.* Волжские булгары. М., 1951.

*Усманов А. Н.* Присоединение Башкирии к Русскому государству. Уфа, 1960.

*Усманов Х.Ф.* Развитие капитализма в сельском хозяйстве Башкирии в пореформенный период. М., 1981.

*Успенский Г.* От Оренбурга до Уфы. Чкалов (Оренбург), 1955.

*Устюгов Н.В.* Башкирское восстание 1662 – 1664 гг. «Исторические записки». 1947, т. 24.

*Устюгов Н. В.* Башкирское восстание 1737 – 1739 гг. М. – Л., 1950.

*Харисов Ә.* Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. Өфө, 1965.

*Чулошников А. П.* Восстание 1755 г. в Башкирии. М. – Л., 1940.

*Әсфәндиәров Ә.* «Руда ауырыуы» йотҡан кешеләр». – Журнал «Ағиҙел», 1980, № 11.

*Юлдашбаев Б.Х.* История формирования башкирской нации.Уфа, 1972.

*Юлдашбаев Б. Х.* Социалистическая нация башкир.Уфа, 1981.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Инеш һүҙ

**I. Башкорттоң 1917 йылға тиклемге тарихы һәм көрәше**

1. Боронғо башҡорт иле. Татар - монгол яуы

2.Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуңғы хәлдәр

3.Тәүге башҡорт яуҙары

4.Колонизация һөжүме. 1704 – 1711 йылдарҙағы яу

5.Яңы колониаль һөжүм. 1735 – 1740 йылдарҙағы үлемесле яуҙар

6.Ҡаты бөлгөнлөк һәм ҡыҫым. 1755 йылдағы яу

7.Ер талауҙың көсәйеүе. 1773 –1775 йылдарҙағы яу

8.Бөлгөнлөктөң сиге. Кантон идаралығы

9.Башҡортто ерһеҙләндереү сәйәсәте. Башҡорт болалары

10.Колониаль көслөк эҙемтәһе. Халыҡтың һынмаҫ азатлыҡ рухы

**II.Башҡорттоң 1917 йылдан һуңғы көрәше һәм яҙмышы**

1.Башҡорт автономияһы өсөн көрәш башы. Автономияның III Бөтә Башҡортостан ҡоролтайы тарафынан раҫланыуы

2.Башҡорт хөкүмәтенең аҡтар яғындағы сағы. Ҡыҙылдар терроры

3.Башҡорт хөкүмәтенең ҡыҙылдар яғына сығып. Үҙәк менән автономия хаҡында килешеүе. Аяуһыҙ террор дауамы

4.Башревкомдың автономияны эшендәге тырышлығы. Үҙәк һәм урындағы властарҙың ҡаты ҡаршылығы

5.Автономия хаҡындағы килешеүҙен юҡҡа сығыуы. Террор һәм аслыҡ ҡазаһы

6 .Аҫабалыҡ хоҡуғының бөтөрөлөүе. БАССР сигенең киңәйтелеүе

7.Милли-территориаль автономия урынына бирелгән милли-мәҙәни мөмкинлектәр. «Культура революцияһы»ның һөҙөмтәһе

8.Ҡанлы репрессия эҙемтәһе. Руслаштырыу сәйәсәтенең һөжүме

9.Башҡорт халҡын ҡыҫыу һәм иҙеү йүнәлешендәге эшмәкәрлек

10.Башҡорттоң һәләкәтле хәле. Яңы милли сәйлсәттең ялғанлығы

«Файҙаланылған төп тарихи хеҙмәттәр